# Зәйнәп Биишева

1



# ЗАЙНАБ БИИШЕВА

## ИЗБРАННЫЕ ПРОИЗВЕДЕНИЯ

В ДВУХ ТОМАХ

## СТИХИ
## ПОЭМЫ

### ТОМ 1

БАШКИРСКОЕ КНИЖНОЕ ИЗДАТЕЛЬСТВО
УФА — 1969

# ЗӘЙНӘП БИИШЕВА

# ҺАЙЛАНМА ӘҪӘРҘӘР

ИКЕ ТОМДА

27422

## ПОЭМАЛАР ШИҒЫРҘАР

1 ТОМ

БАШҠОРТОСТАН КИТАП НӘШРИӘТЕ
ӨФӨ — 1969

БИБЛИОТЕКА
объединенного гр фк
Учалинского ГОК

## ИЛ ЙӨРӘГЕН ТОЙОУСЫ КҮҢЕЛ

Ҙур йөкмәткеле, тәрән мәғәнәле булыуы менән символға тартым яһап торған факт һәм күренештәр байтаҡ осрай фани был донъяла. Урак-сүкеш, әйтәйек, крәҫтиәндәр менән эшселәр синыфы араһындағы ленинсел союзды аңғартып йөрөй. Уралтау тигәндән беҙ конкрет бер урындың географик исемен генә түгел, бәлки Башҡортостандың поэтик образын да төҫмөрләйбеҙ.

Кеше тормошонда ла ул шулай: рухы менән һәм эше менән айырым шәхестәр теге йәки был ижтимағи күренештең йәнле символы дәрәжәһенә күтәрелә ала. Алексей Стаханов тиһәк — беҙҙең күҙ алдыбыҙға һуғышҡа тиклемге биш йыллыҡтар осоронда киң йәйелеп киткән бөйөк хәрәкәттең дөйөмләштерелгән образы килеп баҫа. Александр Матросов тиһәк — беҙҙең зиһенебеҙҙе Бөйөк Ватан һуғышы осорондағы тиңһеҙ ҡаһарманлыҡтың изге һыны биләп ала.

Символға лайыҡ бындай күренештәр башҡорт халҡының культура тормошонда ла бар. Ана шундайҙарҙың береһе — Зәйнәп Биишеваның тормош һәм ижад юлы. Күренекле был яҙыусының яҙмышы — айырым бер шәхестең тормош баҫҡыстары ғына түгел, унда бөтә башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының һуңғы ярты быуатта үткән юлы сағыла. Зәйнәп Биишева тиһәк, беҙҙең күҙ алдыбыҙға Совет Башҡортостанында тәрбиәләнгән ҡыҙҙарҙың типик бер вәкиле килеп баҫа.

Бер ҡараһаң, диңгеҙ эргәһендә тамсы ни ҙә, халыҡ тарихе эргәһендә кеше ғүмере ни... Бер быуын ғүмере эсендә генә халыҡ яҙмышы әллә ни һынылыш кисереп өлгөрмәҫ тә төҫлө. Ләкин замана ниндәй ҙә, быуыны ниндәй бит! Мәңгелек күҙлегенән ҡарағанда, Баязит Бикбай менән Ғәлимов Сәләмдәр, Һәҙиә Дәүләтшина менән Зәйнәп Биишевалар быуынының һәр бер

һулышы боронғо тарихтең бер йылы бәрәбәрендә булғандыр, моғайын. Социалистик революцияның беҙ 1917 йылдың 25 октябрендә бойомға ашырылғанын беләбеҙ. Әммә ирешелгән бөйөк ҡаҙаныштарының иҫәпһеҙ-һанһыҙ булыуынан сығып, совет халҡының ярты быуаттан ашыу тормошо донъя тарихендә оҙайлы революция тип баһаланырға хаҡлы. Революция алды йылдары менән бөгөнгө көндө сағыштырғанда, был революцияның бөйөклөгө тағы ла конкретләшә төшә, мәғәнәлерәк төҫ ала.

Уның шулай булыуы Зәйнәп Биишева яҙмышы миҫалында ла асыҡ күренә. «Йырлайым» исемле шиғырында әҙибә шулай тип яҙғайны:

> Илап тыуһам да мин, йырлап үҫтем,
> Йырлап йәшәйем әле бөгөн дә.
> Сәстәремә ҡырау сәселһә лә,
> Ҡырау ҡунмаҫ минең күңелгә.

Эйе, уның быуыны (ысын мәғәнәһендә лә, күсмә мәғәнәлә лә) илап тыуырға мәжбүр ителгәйне... Реакцияның үҙе ук ҡара груһ тигәнде аңлата. Ана шул ҡара груһтың да ҡара заманында, йәғни тарихҡа ҡара реакция исеме менән инеп ҡалған йылдарҙың береһендә, донъяға килә Зәйнәп Биишева. Ул замандың рухын аңлар өсөн, боғаҙына «Столыпин галстугы»— боғалағы һалынған Россияны күҙ алдына килтереү ҙә етә. Яңы донъяға килгән баланы ғына түгел, типһә тимер өҙөрҙәй егеттәрҙе лә илата алырлыҡ була егерменсе быуаттың һигеҙенсе йылы. 1905—1907 йылдарҙағы «яҡшылыҡтарҙың аҫҡа ҡалыуы» өсөн бошоноп, Мәжит Ғафури «донъяға килгәнемә мин үкендем» тигән фекер әйтеүгә тиклем барып етте. Ғабдулла Туҡай иһә, үҙен уратып алған тынсыу мөхиттән зарланып, «Мин һиҙәм, донъя йөҙө йәһәннәмдер миңә»,— тип яҙҙы.

Зәйнәп Биишева тыуған дәүерҙең тағы бер символик мәғәнәһе бар: матбуғатта ла, художестволы әҙәбиәттә лә ҡатын-ҡыҙ азатлығын яҡлауҙың, шул уңай менән дин әһелдәрен һәм байҙарҙы фаш итеүҙең бермә-бер көсәйеүе менән характерле булды ул. М. Ғафури һәм Ғ. Туҡайҙың уҡыусылар араһында ҙур яңғыраш тапҡан «Татар ҡатыны», «Фәрьят» исемле шиғырҙары тап 1908 йылда яҙылған. Татар-башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарын үгәйһетеүҙә диндең деспот ирҙәр менән бер төптән сығып эш итеүен М. Ғафури бик оҫта итеп фашлай. Туҡмалыуҙан түҙемлеге бөткән ҡатындың яҡлау һорап ялбарыуына мулланың яуабы әҙер:

«Ҡайт та иргә хеҙмәт ит!» Ун һигеҙ йәшендә сағында дүртенсе ҡатын рәүешендә көндәшлеккә һатылған ҡыҙҙың уй-кисерештәре аша F. Туҡай мосолман ҡатын-ҡыҙҙарының уртаҡ трагедияһын һынландырҙы. Тәүге әҫәрҙәренең береһендә Дауыт Юлтый башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына заманы өсөн бик ҡыйыу саҡырыу ташланы: «Тауыш бирегеҙ иреккә, күккә ашһын тауышығыҙ һеҙҙең. Етер ярты йәшәү беҙгә; тороғоҙ, яртыбыҙ беҙҙең!» Башҡорт әҙәбиәтендә повесть жанрына нигеҙ һалыусы әҫәрҙәрҙең күпселеге лә ҡара реакция йылдарында баҫылған һәм ҡыҙҙарҙың байҙар тарафынан йәберһетелеүен һүрәтләүгә арналған. Улар араһында М. Ғафуриҙең «Ярлылар йәки өйҙәш ҡатын», «Онотолған енәйәт йәки үткәнде иҫкә төшөрөү» исемле әҫәрҙәре айырыуса әһәмиәтле.

Зәйнәп исемле баҫалҡы ғына бер ҡыҙҙың бай улы тарафынан нисек итеп мәрхәмәтһеҙ рәүештә мәсхәрә ителеүен тасуирләп, М. Ғафури үҙенең «Онотолған енәйәт...» тигән әҫәрен яҙған бер осорҙа Ырымбур губернаһы, Ырымбур өйәҙе Туйымбәт ауылында Зәйнәп атлы тағы бер ҡыҙ бала тыуа. Әйе, был сабыйҙы ла тормош ашъяулыҡ тотоп ҡаршыламай. Хатта Ғафуриҙең Зәйнәбенә ҡарағанда ла ул ауыр шарттарға ҡуйыла: ул дүртенсе йәш менән барғанда — әсәһе, ун бер йәшлек сағында атаһы үлеп китә. Әйе, Туйымбәт ҡыҙын да, бәлки, Зөлхизә менән Зөлхәбирәләр яҙмышы уратып үтмәҫ ине. «Иҫке тормоштоң миллион ҡорбандарынан береһе» Ғәлимә тәҡдиренә юлыҡмаҫ, тип бер кемгә ҡарата ла әйтергә мөмкин түгел ине ул заманда. Ләкин эшселәр синыфы, уның партияһы Зәйнәп Биишеваны, башҡа бик күптәр кеүек үк, бүтән юлдан алып китте. Хеҙмәт һәм көрәш юлынан, бәхет юлынан. Совет ҡатын-ҡыҙҙары ысын тормошто низәи башлаһа, Зәйнәп тә шунан башланы. Тап бына шуның өсөн дә уның ғүмер юлында социалистик Башҡортостан ҡыҙҙарының яҙмышы менән уртаҡ яҡтар күп. Революциянан һуң уның да тормошо, әлбиттә, ауырлыҡтарһыҙ булманы. (Яҙыусы улар хаҡында «Үткән юлдар, уҙған йылдар»[1] исемле очерегендә бик ентекләп яҙып сыҡҡайны инде.) Ләкин улар — еңеп сыҡҡандан һуң рухи ҡәнәғәтләнеү бирә торған, бәхет килтерә торған ҡыйынлыҡтар ине.

Беҙҙең йәмғиәттә тормош һәм уны алып барыусы кешеләр шул тиклем етеҙ үҙгәрә, ундай ҡырҡа боролошто тарих бабай-

---

[1] Ҡарағыҙ: *З. Биишева.* Һайланма әҫәрҙәр. Бер томда. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1964, 5—30-сы биттәр.

ҙың һис ҡасан да белгәне юҡ ине әле. Хатта утыҙынсы йылдарҙы хәтергә төшөргәндә лә Сәғит Агиш, мәҫәлән, бөгөнгө көн өсөн ҙур ғорурлыҡ тойғоһо менән: «Булған икән заманалар!»— тип яҙҙы. Ә инде Зәйнәп Биишеваның бала сағын уның бөгөнгөһө менән сағыштырып ҡарау башта уҡ әйткән символиканың мәғәнәһен тәрәнерәк аңларға ярҙам итә. Бер яҡта — үҙ-үҙен белер-белмәҫтән әсәһеҙ ҡалған сабый; үгәй әсәнең ҡаты ҡулын, атайҙың ҡыҙыу холҡон татып үҫкән ҡыҙ бала; донъяның ҡырыҫлығы арҡаһында ҡурҡыныс хыялдарға бирелеүсән, дини уйҙырмаларға ышаныусан үҫмер. Икенсе яҡта — республиканың ижтимағи тормошонда ихлас ҡатнашып, рухи яҡтан сыныҡҡан көрәшсе; ҡасандыр донъяның иң «кәмһетелгәндәр»е булып танылған башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының «уяныу»ын, һуңырағ нисек итеп «яҡтыға» ынтылыуын оҫта итеп һүрәтләп биреүсе яҙыусы; башҡорт халҡының беренсе шағирәһе. Айырма ифрат ҙур! Был айырманың сәбәбен асыҡлап, Зәйнәп Биишева үҙе шулай тип яҙғайны: «Бына шундай шарттарҙа үтте минең бала саҡ. Әле хәҙер, ҡайһы ваҡыттарҙа, ул заманды иҫкә төшөрһәң, хатта ышанмай ҙа китәһең: шулай уҡ булған хәлдәрме һуң былар? Әллә берәй һаташыу, ауыр төш күреү генәме был? — тиһең. Сөнки, хәҙерге совет ысынбарлығы менән сағыштырғанда, ул көндәр тап һаташыулы төш һымаҡ бит! Бөйөк Октябрь бына шундай мөғжизә яһаны. Эйе, ул, Бөйөк Октябрь революцияһы ғына, беҙҙе тормоштоң иң ҡараңғы, тынсыу төпкөлөнән тартып алып, яҙғы ҡояш нуры аҫтында гөрләп сәскә атҡан гөл-баҡса шикелле көләс, яҡты һәм иҫ киткес иркен яңы донъяға, бәхет донъяһына сығарып ҡуйҙы».

Беҙҙең халыҡта ир-егетлектең дә, сәсәнлектең дә иң ҙур өлгөһө итеп Салауат Юлаев иҫәпләнә. Шуға күрә лә беҙ үҙебеҙҙең иң алдынғы колхоздарыбыҙҙы, яуға ташланған ҡорос танкыларыбыҙҙы, иң гүзәл ҡалаларыбыҙҙы уның исеме менән атаныҡ. Шуға күрә лә Башҡортостан хөкүмәтенең сәнғәт әһелдәренә бирә торған иң юғары премияһы уның исемен йөрөтә. Халыҡҡа хеҙмәт итеүҙә ҡыйыулыҡ һәм фиҙакәрлек күрһәтеүселәрҙең дөйөмләштерелгән образына лайыҡ шәхестәр беҙҙең бөгөнгө ысынбарлыҡта бик күп. Шуларҙың береһе,— әлбиттә, Зәйнәп Биишева. Ҡасандыр тормош тарафынан — аслыҡҡа, иҫкергән йолалар тарафынан — хоҡуҡһыҙлыҡҡа, дин тарафынан һиңмайлыҡҡа дусар ителгән ҡыҙ бала — Зәйнәптең бөгөн килеп Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты дәрәжәһенә күтәрелеүе шул хаҡта һөйләмәйме

ни? Етмәһә, ул быңдай ҙур хөрмәткә республика яҙыусылары араһында беренселәрҙән булып өлгәште. Шунан һуң нисек һоҡланмайһың инде.

«Бер ғүмерҙең тарихе» трилогияһы Зәйнәп Абдулловнаға ысын мәғәнәһендәге дан килтерҙе. Бәлки шуғалыр ҙа ҡайһы бер уҡыусылар, әҙәбиәт белгестәре әҙибәне роман һәм повестәр авторы итеп кенә күҙ алдына баҫтыра башланылар, уның шағирәлек эшмәкәрлеген онотоп ебәргәндәй булдылар. Юғарыла телгә алынған автобиографик очерегендә хатта З. Бикшева үҙе лә поэтик ижады тураһында бер һүҙ ҙә әйтмәй. Бындай хәлдең тағы бер сәбәбе, күрәһең, шунда: был авторҙың шиғри әҫәрҙәре, шәлкем-шәлкем баҫылып сыҡҡылаһа ла, ошоға ҡәҙәр бергә тупланып донъя күрә алғаны юҡ ине әле.

Йырлап йәшәйем.
Халҡым, илем ғүмере
Әкиәттәрҙән гүзәл йыр булғас.
Тыуған ерем — бөйөк Совет иле,
Ер йөрәге типкән ер булғас.
Йырлап йәшәйем. Халҡым үҙе һөйөп,
«Йырла! — тиеп бирҙе ҡәләмде. —
Данла! — тине, — һине кеше иткән,
Йырсы иткән бөйөк илеңде».

«Йырлайым» исемле әҫәрҙән алынған был юлдарҙа З. Биишеваның поэтик декларацияһы ла, уның шиғри әҫәрҙәренең төп тематикаһы ла бик асыҡ сағыла. Хеҙмәт кешеһен илдең хужаһына әйләндереүсе һәм, М. Ғафури һүҙҙәре менән әйткәндә, «элекке «уны» (ҡатын-ҡыҙҙы.— *Ҡ. Ә.*) инде кеше итеүсе» Коммунистәр партияһы, артта ҡалған илде ҡыҫҡа ваҡыт эсендә социализм бастионы дәрәжәһенә күтәреүсе халыҡ, бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең өмөтөн бағлаусы социалистик Ватан — З. Биишеваның күпселек теҙмә әҫәрҙәре бына ошо изге күренештәрҙе данлауға йүнәлтелгән. Уның поэзияһын ватансылыҡ ауаздары, ғорурлыҡ сәхифәләре тип атарға мөмкин булыр ине. Башҡа темалар, был томдан яҡшы күренеүенсә, әллә ни ҙур урын алмай.

Зәйнәп Биишеваның халыҡ ижадын бөтә йәне-тәне менән яратыуы, уның менән рухланып йәшәүе һәм хеҙмәт итеүе һәр

кемгә лә яҡшы билдәле. Шиғырҙарының йөкмәткеһендә лә, формаһында ла фольклор традицияларының дауам ителешен дәлилләүсе бик күп һыҙаттарҙы күрһәтергә мөмкин булыр ине. Ләкин уны махсус тикшеренеүҙә генә башҡарып сығырға мөмкин. Шулай ҙа бында бер генә моментҡа —ватансылыҡ мотивтәренең сағылышы мәсьәләһенә туҡталып үтеү зарури һымаҡ. Эйе, Тыуған илде һөйөү — башҡорт халыҡ йырҙарына борон-борондан таныш тойғо. Башҡа әҫәрҙәр араһында Уралтауҙай юрур ҡалҡып торған «Урал» йырында ла, көйө менән күңелде уйып алырҙай «Уйыл»да ла, халыҡ күңелендәй киң офоҡло «Йәмле Ағиҙел буйҙары»нда ла, күп ирҙәрҙең уҙаман һәм азамат булып китеүенә ярҙам иткән «Азамат»та ла — был йырҙарҙың барыһында ла Тыуған ил ҡуйынында йәшәүҙең хозурлығы һәм Ватанға файҙалы булырға тырышыу идеялары ярылып ята. Ҡатын-ҡыҙҙар яҙмышына ҡағылышлы йырҙарҙа ла был идея ҙур ғына урын ала. «Таштуғай» йырын сығарыусы Көнһылыу, мәҫәлән, үҙенең төйәген шул тиклем яҡын күрә, хатта Ҡырҡтытауҙың ҡая таштарын да түшәктәй йомшаҡ итеп тоя. Йәйләүҙән-йәйләүгә күсеп йөрөүсе ата-әсәһенән аҙашып ҡалған Ғилмиязаның тыуған ерен яратыу тойғоһо тағы ла ҙурыраҡ:

Һаҡмар һыуы аға ҡибла яҡтан,
Урал тауы буйлап, көн битләп.
Илкәйемә лә шул ҡайтыр инем,
Аяҡтарым талһа, имгәкләп.

Зәйнәп Биишеваның шиғырҙарын уҡыған һайын шағирәнең ижадында халыҡтың патриотик рухтағы ана шундай йырҙары менән яңынан-яңы оҡшаш һыҙаттар табаһың. Был томға ингән әҫәрҙәрҙең «Сәлимәкәй» менән «Ашҡаҙар»ҙы, «Таштуғай» менән «Ғилмияза»ны йырлап үҫкән кешенең ҡулы менән яҙылғаны әллә ҡайҙан ҡысҡырып тора. Уларҙа ла тыуған ергә мөхәббәт тойғоһо урғылып тора, уларҙа ла ил бәхетен ҡатын-ҡыҙҙар яҙмышы менән тығыҙ бәйләнештә аңлау хосусиәте күҙгә ташлана. Шул уҡ ваҡытта фольклор әҫәрҙәре менән З. Биишева шиғырҙары араһында айырма ла бик ҙур. Һәм шулай булмай мөмкин дә түгел. Ғаиләһенән генә түгел, бәхетенән дә аҙаштырылыусы Ғилмиязалар, Зөлхәбирәләр тарафынан сығарылған йырҙарҙың төп рухы беҙҙең бөгөнгө тормош өсөн, әлбиттә инде, ят күренеш. Тегендә — ауыр тормош һәм хоҡуҡһыҙлыҡ өсөн зарланыу, бында — азат тормош менән кинәнеү хистәре.

Хатта уртаҡлығы ҙур булып күренгән әлеге ватансылыҡ мотивтәрендә лә айырмалыҡ ғилләләрен бик күп табырға мөмкин. Көнһылыу менән Ғилмиязаларҙың, Мәҙинәкәй менән Зөлхәбирәләрҙең барлыҡ хәстәре, ғәҙәттә, «тыуып-үҫкән ерҙе» һағыныуға ғына ҡайтып ҡалған. Дөрөҫ, патриотизм кешенең сәңгелдәге әленгән йорттан, шул йорт ултырған ауылдан, ауыл ултырған йылға буйынан башлана. Шунан башлана, әммә уның менән генә бөтмәй. Бындай хәҡиҡәт бигерәк тә совет поэзияһында, шул иҫәптән З. Биишева ижадында ла, ныҡлап асыҡланды. Тыуған ил төшөнсәһе халыҡ йыры героиняләренең береһе өсөн Ҡырҡтытау, икенсеһе өсөн Һаҡмар буйы менән генә сикләнһә, бөгөнгө шағирҙәр өсөн Ватан — ул Совет Башҡортостаны, бөтә Совет иле. Улай ғына ла түгел, совет патриотизме беҙҙә пролетар интернационализм менән барып олғаша. Был хәл хәҙерге әҙиптәрҙең белем даирәһенең киңәйеүе менән генә түгел, бәлки уларҙың донъяға ҡарашы менән дә аңлатыла: марксизм-ленинизм хеҙмәт кешеләрен синфи нигеҙҙә туғанлаштырыуҙа ҙур ҡаҙаныштарға өлгәште. Сағыштырып әйтергә мөмкин: имгәкләп ҡайтырға ла әҙер торған Ғилмияза менән үҙебеҙҙекеләр яғына талпыныусы Алексей Маресьевтең донъяны аңлауында ниндәй айырма булһа, халыҡ йырҙары менән З. Биишева шиғырҙарының Ватанды данлауында ла шундай уҡ айырма. Замандаштарының Октябрҙән һуңғы осорҙа үҫешен тасуирләп яҙғанда шағирә, һис шикһеҙ, хаҡлы ине: «Яңы йөрәк, яңы мейе үҫте, ҡанат үҫте утлы көрәштә».

«Ышанмайым күҙгә...» әҫәрендә: «Ил йөрәген тойған күңел тынмаҫ, ҡартаймаҫ»,— тип әйтелә. Зәйнәп Биишеваның лирик шиғырҙары — тап ана шундай күңелдең емеше. Уларҙың һәр береһендә тип әйтерлек беҙ социалистик Ватанды данлауға бәйләнешле иң мөһим мәсьәләләргә тап булабыҙ: халыҡ һәм шәхес, йәмғиәттең тарихи үҫеше һәм кеше яҙмышы, бәхет һәм хеҙмәт, партия һәм шағир, Россия һәм Башҡортостан... Бындай мотивтәрҙең барыһын да тағатып ҡарау — был мәҡәләнең бурысы түгел. Шулай ҙа уларҙың береһенә — халыҡ һәм шағир мәсьәләһенең образлы хәл ителешенә — туҡталыбыраҡ үтке килә.

Халыҡ һәм шағир проблемаһын З. Биишева поэзияһының тематик лейтмотиве тип һанарға бөтә нигеҙлектәр бар. Күпселек шиғырҙарға ул ниндәйҙер берәй яғы менән мотлаҡ рәүештә килеп инә булыр. Был хәл, һис шикһеҙ, шағирәнең, Ғилмиязалар кеүек аҙашыуҙан йолоп алып ҡалынған шәхестең, халыҡ

алдында үҙен һәр саҡ бурыслы итеп тойоуынан килә торғандыр. Утты-һыуҙы кискән замандаштарының, социаль азатлыҡтың нимә икәнен беренсе булып татыуға ирешкән быуындың, эшселәр синыфына, Коммунистәр партияһына рәхмәтен сағылдырыу эшен яҙыусы үҙенең изге вазифаһы итеп һанай. «Барыр юлы берҙән-бер хаҡ, пак булған өсөн; кеше бәхетен һаҡлауҙа һаҡ булған өсөн» ул Тыуған илде ҡояш иле тип атай һәм шундай илгә лайыҡлы итеп йәшәр өсөн, шағир һәр саҡ халыҡ менән бергә йәшәргә тейеш, тип иҫәпләй. Ғ. Туҡай, М. Ғафури кеүек ҙур әҙиптәрҙең бөйөклөгөн дә, «айырым бәхет эҙләмәйенсә», халыҡ менән бергә янып-көйөп дөйөм бәхет өсөн көрәшеүҙә күрә. Халыҡсанлыҡ шағирә өсөн ысын ижадтың маҡсаты ғына түгел, бәлки иң ышанысլы критерийе лә:

Маҡтауҙар ҙур итә алмаҫ,
Хеҙмәтең ҙур булмаһа;
Хурлауҙар хур итә алмаҫ,
Халҡың һөйөп ҙурлаһа.

З. Биишеваның мәҫәлдәре һәм сатирик шиғырҙары ла, асылда шәхес һәм йәмғиәт, халыҡ һәм шағир мәсьәләләрен үҙенсәлекле итеп яҡтыртыуға ҡоролған. Билсәнде дегәнәктән айырырға ғына өйрәнгән бюрократ ғалим дә; үҙенән үрҙәгеләргә «ағай ҙа ағай» тип, ә түбәндәргә «кит, йөрөмә, давай, давай» тип бөтөрөләүсе ялағай ҙа, «үҙе өсөн ут-һыу үтеүсе» һәм шуның менән маҡтанырға яратҡан «батыр» ҙа — быларҙың барыһы ла кеҫә һәм ҡорһаҡты ғына алғы планға ҡуйған һәм шуға күрә халыҡтан тамам айырылған бәндә киҫәктәре. Ғ. Туҡай, М. Ғафури һымаҡ классиктәрҙең, культурабыҙҙың Заһир Исмәғилев, Фатима Мостафина, Хәлимә Ҡорбанаева кеүек талантлы эшмәкәрҙәренең халыҡсан хеҙмәтенә ниндәй ҡайнар мөхәббәт белдерһә, авторҙың — бөтә донъяны үҙ яғына ғына ҡайырырға тырышҡан обывателдәргә ҡарата нәфрәте лә шундай уҡ ихласлыҡ менән ярып әйтеп бирелә.

Халыҡтан айырылған шәхестәрҙе шағирҙар борон-борондан бирле тамырҙан яҙған япраҡҡа, ҡанаты ҡайырылған ҡош-соҡҡа оҡшатып киләләр. Әммә халыҡтан айырылған кешене үҙ-үҙенә бикләнгән һәм бер кем менән дә аралашмай торған бәндә рәүешендә генә күҙ алдына килтереү дөрөҫ булып бөтмәҫ ине. Кешеләр араһында ҡайнап йөрөп тә, улар менән бергә хеҙмәт итә тороп та, бәғзе берәү халыҡтан ситтә булып сығыр-

ға мөмкин. Сөнки халыҡ менән һинең бергә булыу-булмауың — кешеләрҙең дөйөм ынтылышына маҡсатыңдың тап килеү-килмәүенә бәйләнгән бит ул. «Ялағай», «Көнсө», «Бюрократ», «Маҡтанырға яратҡан дуҫҡа» исемле шиғырҙарында З. Бишева тыштан кешеләргә хеҙмәт итеүсе булып күренгән, ә эстән үҙ ғали йәнәптәрен генә ҡайғыртҡан байғоштарҙың яҙмышын һүрәтләй. Халыҡтан айырылыуҙың төрлө формаларҙа була алыуы «Түрә» тигән әҫәрҙә бик ышандырырлыҡ итеп һүрәтләнгән. Артель башлығы үҙенең күп ваҡытын ҡул аҫтындағы кешеләренә нотоҡ уҡып, аҡыл һатып үткәрә. Тора-бара был хәл ғәҙәткә әйләнеп китә. «Аҡылын кешеләргә өләшә» торғас, был башлыҡ үҙен генә түгел, бөтә коллективте лә халыҡтан айырыуға «өлгәшә»:

Ни әйтһәң дә, һүҙгә оҫта был түрә.
Тик был һүҙҙән артель зарар күп күрә:
Итекселәр инде итек текмәйҙәр,
Был түрәне йөпләйҙәр ҙә йөпләйҙәр.

Лирик шиғырҙарҙағы халыҡ һәм шағир темаһы менән сатирик әҫәрҙәрҙәге коллектив һәм шәхес мәсьәләһе, шулай итеп, бер-берәһен тултырып һәм асыҡлап килә.

1953 йылда З. Бишеваның «Гөльямал» исемле шиғри повесе айырым китап булып сыҡты. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был әҫәрҙең ошо көнгә ҡәҙәр тейешле баһа ала алғаны юҡ. Әҙәби тәнҡит фекере беҙҙә «жанрҙар улағы» буйынса ғына аға шул: повесть тикшереүселәр «Гөльямал»ға, күрәһең, «поэзия был» тип ҡарағандар; поэзия менән шөғөлләнеүсе тәнҡитселәр иһә «повесть бит ул прозаның биләмәһе» тип иҫәпләгәндәр. Хатта яҙыусының трилогияһы хаҡында һүҙ йөрөтөүселәр ҙә «Гөльямал»ды онотоп ебәрәләр. Ә бит «Бер ғүмерҙең тарихы»ен яҙыуҙа был повесть биргән ижади тәжрибәнең әһәмиәте бик ҙур булды.

Шиғри повесть әҙәбиәттә һирәк осрай торған күренеш. З. Бишеваның ижадына ла ул әллә ни характерле түгел. Шулай ҙа «Гөльямал»— яҙыусы биографияһындағы һис бер көтөлмәгән әҫәр түгел. Улай ғына ла түгел, дөйөм рухы менән ул лирик шиғырҙарға бик тә ауаздаш. Әгәр ҙә «Йәшәү — хеҙмәт», «Кесеҫә», «Ғүмер», «Йырлайым», «Иң һәйбәт кеше», «Йылдар, йылдар», «Йәшәр инем» кеүек шиғырҙарҙа автор совет ҡатын-ҡыҙҙарының ғорур бәхетен хистәр аша тасуирләп бирһә, повестә иһә шул уҡ тема айырым бер героинянең яҙмышын хикәйәләү юлы

менән асыла. Тегендә уй-тойғо өҫтөнлөк итһә, бында ваҡиғалар төп урынды ала.

«Гөльямал»— киң планлы итеп уйланылған әҫәр. Социаль яҡтан да, милли йәһәттән дә уның геройҙары әҙәби тип булыуҙы дәғүә итәләр. Егерменсе быуатта башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының яҙмышында ниндәй үҙгәрештәр булған, повестә беҙ шуларҙың барыһын да тип әйтерлек күрәбеҙ. Автобиографик әҫәр түгел был; шулай ҙа З. Биишева үҙе рухи сынығыуҙың ниндәй юлын үтһә, уның Гөльямалы ла шундай уҡ яҙмыш кисерә. Башҡорт милли музыкаһының үҫешенә арналған бер мәҡәләһен Зәйнәп Абдулловна «Ҡурайҙан — операға» тип атағайны. Шундай уҡ алымды ҡулланған тәҡдирҙә, яҙыусы менән уның героиняһе үткән юлды «Ҡабыҡ сәңгелдәктән — алтын тәхеткә» тип билдәләп булыр ине. Шағирәнең тормош юлына бирелгән үрҙәге характеристиканың төп өлөшө Гөльямалға ла тап килгәнлектән, повестең героиняһе хаҡында бында һүҙ оҙайтып тороу артыҡ булыр ине. Хәҡиҡәткә тоғро ҡалып, шуны ғына әйтергә ҡала: беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙарҙың ижтимағи яҡтан үҫешен дөйөмләштереп сағылдырыу яғынан ҙур ҡаҙанышҡа ирешһә лә, героиняне индивидуалләштереү тәңгәлендә повестең кәмселектәре лә юҡ түгел. Гөльямалдың ҡабатланмаҫ характерен хасил итерлек рухи һыҙаттар, көткәнгә ҡарағанда, аҙыраҡ булып сыҡҡан. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, З. Биишеваның был героиняһе — Д. Юлтыйҙың Айһылыуы менән, С. Ҡудаштың Гүзәле, Р. Ниғмәтиҙең Сәлимәһе менән бер рәттә торорлоҡ образ ул.

Был ергә бәрәү ҙә мәңгегә килмәгән — беҙҙең барыбыҙ ҙа фани донъяла йәшәйбеҙ булыр. Тыумыштан ҡалмағас, үлемдән дә ҡалыу яйы юҡ... Былар хаҡында уйланыу, әлбиттә, күңелле түгел; ләкин беҙ — материалистәр, тормоштоң әллә ниндәй әсе хәҡиҡәттәренә лә айыҡ күҙ менән ҡарарға өйрәнгәнбеҙ.

Фани донъя, һуңғы һулыш, йөрәктең ахырғы тибеүе... Был күренештәрҙе төрлө кеше төрлөсә аңлай. Берәүҙәр — ашау өсөн йәшәүселәр — улар алдында ҡаушап ҡалалар һәм ҡаңғыра башлайҙар, паникаға биреләләр һәм, ахыр сиктә, меҫкен фәлсәфә әүәләп сығаралар. «Иртәгеһен, йәнәһе, ишәк ҡайғыртһын, әйҙә. Беҙҙән һуң был донъяның ниңә аҫты-өҫкә килмәгәйе». Икенселәр — йәшәү өсөн ашаусылар иһә — үҙҙәре тураһында уйларға ла онотоп, кешеләргә хеҙмәт итәләр, тимәк, үлемһеҙлеккә ынтылалар. Улар инде йәшәүҙе физик яҡтан

тере булыуҙа ғына күрмәйҙәр, бәлки кешенең — үҙ хеҙмәте менән бергә киләсәккә атлап бара алыуына ышаналар. Бынан меңәр *йыл элек һүнгән йондоҙҙарҙың да беҙҙең планетаны яҡтыртыуын, төнөбөҙҙө* матурлауын ундайҙар яҡшы белә. Халыҡ йырҙарының йәшәү һәм үлем темаһына арналғандары ла, бөгөнгө шағирҙәрҙең философик лирикаһы ла фиҙакәрлеккә ынтылған ана шундай шәхестәрҙе идеал итеп ҡуя. Халҡы өсөн хеҙмәт иткәндәр халҡы менән һәр саҡ бергә йәшәйҙәр; шуға күрә лә үлемһеҙлек әҙәбиәттәге мәңгелек темаларҙың береһенә әүерелгән.

3. Бишеваның бер шиғырында шундай фекер әйтелә: *иҫән-һау саҡта кеше нисек тә көн күрә, ә бына үлгәндән һуң* да тереләргә хеҙмәт итеүен дауам итә алыу һәр кемгә лә эләкмәй. Һайланма әҫәрҙәренең икенсе томына ингән әҫәрҙәрҙә әҙибә бына ошо поэтик мотивте ваҡиғалар һәм характерҙәр теле менән асып бирә. Шуныһы иғтибарға лайыҡлы, үлемһеҙлек темаһы, башлыса, поэзияға, философик лирикаға хас күренеш; әммә яҙыусы уны ғибрәтле ваҡиғаларға, киҫкен ситуацияларға ҡоролған проза әҫәрҙәре аша ла һынландырыу оҫталығына өлгәште.

Күләм *яғынан* ҙур булмаған «Һөнәрсе һәм Өйрәнсек» хикәйәте үҙенең ғәйәт дәрәжәләге киң проблематикаһы менән таң ҡалдыра. Уны ысын мәғәнәһендәге тематик төйөн тип атарға була. Ижад һәм кәсеп, талант һәм булдыҡһыҙлыҡ, матурлыҡ һәм шөкәтһеҙлек, ихласлыҡ һәм ике йөҙлөлөк, фиҙакәрлек һәм мәкерлек, халыҡ һәм шәхес — әҫәрҙә бына был темаларҙың барыһы бергә органик рәүештә уҡмашып килгән. Уҡыусылар тарафынан юғары баһа алған был хикәйәттең төп фекерен шундай *мәҡәл бик тапҡыр итеп асып бирә алыр ине:* «Яҡшылыҡ эшлә лә диңгеҙгә ырғыт; халыҡ белер, халыҡ белмәһә, балыҡ белер».

Ысын бәхеттең халыҡҡа хеҙмәт итеүҙә икәнлеген художестволы итеп иҫбатлау «Һөнәрсе һәм Өйрәнсек» әҫәренең һәр бер юлында, һәр бер һүҙендә ярылып ята. Идеяны асыуҙа көршәк яһаусы ике кешенең яҙмышы ғына түгел, бәлки әҫәргә бөтөнләй ҡатнашы булмаған кеүек күренгән персонаждарҙың бер-ике ауыҙ һүҙе лә әһәмиәт ҡаҙана. *Ғүмерен халыҡҡа хеҙмәт итеп үткәргән күренекле шәхестәрҙең ҡомарткыларын йыйыу* менән мауығыусы Хасбулат ҡартҡа ауылдаштарының мөнәсәбәтен генә алып ҡарағыҙ. Уларҙың һәр һүҙендә, һәр ымында кеше ҡәҙерен белеүсе был ҡартҡа мөхәббәт ауаздары ишетелә

һымак. Ә Хасбулат карттың үҙ образы! Уның иҫкереп бөткән серле һандығында ниндәй генә комарткылар юк.

Салауат батыр ғәскәренән калған мөгөҙ борго, касандыр Каһым түрә кулында ялтлаған кылыс, Шәһит Хоҙайбирҙиндең рәсеме, кыҙылгвардеец папаханы... Азатлык һөйөүсе халыктың һуғышсан традицияларын конкрет итеп күҙ алдына килтерергә теләһәң, нисектер, Хасбулат карттың ана шул һандығы хәтергә килә.

Ил ағаларына ғүмер буйы мөхәббәт һаклаған был карттың Һөнәрсе менән Өйрәнсектең ғибрәтле яҙмышы хакындағы хикәйәтте ңзге бер кисса рәүешендә йөрөтөүе лә, уны үҙенә күрә бер хозурлык менән һөйләй белеүе лә бик тәбиғи. Был хикәйәт аша ул үҙе һаклап килгән әлеге комарткыларҙың тәрән мәғәнәһен аса. Ғөмүмән, көршәк яһаусы ике кешенең әҫәрҙә һүрәтләнгән тормош юлы — кешегә хеҙмәт итеүҙең төп философияһы ул. Һөнәрсе беҙгә ысын мәғәнәһендәге үлемһеҙлектең бөйөк үрнәген күрһәтә. «Рәхмәт менән тамак туямы» тигән әйтемдең ни дәрәжәлә арзан булыуын иҫбатлай. Шул ук вакытта, яҙыусы фиҙакәрлек тигән төшөнсәнең донъя рәхәте менән мауығыуҙан ваз кисеүгә генә кайтып калмауын, бәлки уның титаник хеҙмәткә нигеҙләнеүен асык аңғарта. Әйтәйек, бына үҙе яһаған көршәктәргә куя торған имзаһын Һөнәрсенең йөрәк каны менән яҙған булыуы асыклана. Быны, әлбиттә, туранан-тура аңларға ярамай. Йөрәк каны менән яҙыу был осракта натурализм булып яңғырамай, киреһенсә, ул — хикәйәттең юғары стиленә бик тура килә һәм үлемһеҙлектең такыр юлдан ғына килмәүенә ишара яһай.

«Һөнәрсе һәм Өйрәнсек»,— икенсе томға ингән әҫәрҙәрҙең калғандары һымак ук, үҫмерҙәргә тәбәп яҙылған әҫәр. Һәм ул, беҙҙеңсә, мәктәп программаһына индерелергә тейешле хикәйәттәрҙең береһе.

Икенсе томдың теүәллеге шунда, уға ингән әҫәрҙәрҙең күпселеге йәшәүҙең мәғәнәһен асыуға арналған. Уларҙың һәр кайһыһы үлемһеҙлек рухының ниндәй ҙә булһа берәй яғын һынландыра; укыусыларҙы, Һөнәрсе кеүек үк, ижад менән янып йәшәргә саҡыра; якшылыктың хатта диңгеҙгә ырғытылғанының да батмауын һәм юғалмауын данлай.

«Партизан малай» хикәйәһендәге Ирекtең эш-хәрәкәттәре, бөгөнгө күҙлектән карағанда, бәлки, бигерәк ололарса булып күренә торғандыр. Ләкин бит заманы шундай ине: Тыуған илдең азатлығы өсөн үлемесле көрәш алып барыу карт-

ҡороно, йәшәртә биреп, яңынан сафҡа баҫтырҙы һәм килеһен-сә, бала-сағаны ваҡытынан алда бәлиғ итте. Ирректең Алексей Толстой әйткән нәфрәт ғилеменә эйә булыуы — халыҡҡа хеҙ-мәт итә белеүҙең мөһим бер сағылышы ине. Үҙе һәләк булған-дан һуң да, Павлоның хәрби псевдоним рәүешендә Ирректең күңелендә йәшәүе үлемһеҙлек темаһына тағы бер нескәлек өҫ-тәй. «Башаҡ» исемле хикәйәлә, «Партизан малай»ҙан айырмалы рәүештә, мажаралы ваҡиғалар ҙа, бормалы юлдар ҙа юҡ. Лә-кин диңгеҙҙең тамсынан йыйылғаны кеүек үк, халыҡ тормошон-дағы муллыҡтың да иген башаҡтарынан башланыуын аңлай алыуҙары менән кескәй геройҙар дөрөҫ юлдан атлаясаҡтарын күрһәтәләр. «Ярҙамсы» хикәйәһендә З. Биишева кешелекле һәм кеселекле булыуҙы зарарлы ғөрөф-ғәҙәттәргә ҡаршы көрәш менән бергә оҫта бәйләп һүрәтләй. «Йәшел юғән» әҫәре ижад һәм талант мәсьәләләренең тағы бер нескәлеген аса. «Һәләт» тигәнде беҙ, ни өсөндөр, йырлай-бейей белеүгә, музыкаль ҡо-ралда уйнау кеүәһенә, рәсем төшөрөү оҫталығына ғына ҡайта-рып ҡалдырабыҙ. Ә бит ысынында, хикәйәлә дөрөҫ раҫланы-уынса, кешеләргә хеҙмәт итә белеүҙән дә ҙурыраҡ талантның булыуы мөмкин түгел.

З. Биишева, белеүебеҙсә, уҡытыу-тәрбиә эштәре менән байтаҡ ваҡыттар буйына шөғөлләнгән әҙибә. Бәлки шуғалыр ҙа, үрҙә аталған хикәйәләрҙең ҡайһы берҙәрендә, яҙыусыға ҡара-ғанда, уҡытыусы рухы еңеп киткеләй. Ваҡыты-ваҡыты ме-нән хатта заман һынауын үткән «Дуҫ булайыҡ» повесендә лә дидактизм саткылары сағылып ҡала. Шулай булыуға ҡарамаҫ-тан, фиҙакәрлек һәм ҡаһарманлыҡ мотивтәрен төрләндереүе һәм байытыуы яғынан уларҙың әһәмиәте бик ҙур.

* *
*

Иғтибарлабыраҡ ҡараһаҡ, шул күренә: башҡорт әҙәбиә-тендәге иң күренекле әҫәрҙәрҙең күпселегендә төп герой — ҡатын-ҡыҙ. Һәм был бик тә тәбиғи: ислам дине һәм патриар-халь көнкүреш тарафынан ҡыйырһытылған ҡатын-ҡыҙҙарҙы йәмғиәттең хужалары дәрәжәһенә күтәреү — совет ҡоролошо ҡаҙанған тарихи еңеүҙәрҙең береһе. Үҙенең яҙмышы менән дә, әҙәби ижады менән дә Зәйнәп Биишева — ана шул еңеү күген-дәге сағыу йондоҙҙарҙың береһе ул. Балҡырға ла уға балҡыр-ға.

Ким Әхмәтйәнов.

27422

БИБЛИОТЕКА
объединенного профкома
Учалинского ГОК



# ШИҒЫРҘАР

# ЙӘШӘҮ—ХЕҘМӘТ

## ЙЫЛДАР, ЙЫЛДАР...

Йылдар, йылдар,
Даулы, шаулы йылдар,
Ҡайнап, урғып уҙған дан йылдар.
Йыр йырлайым тағы һеҙҙең хаҡта.
Тыңлап ҡалһын ҡырҙар, сағылдар.
Йөрәктәргә бәреп инһен йырым,
Дорфа булһа ғәйеп итмәгеҙ:
Ғүмер юлын шылып үтмәнек беҙ.
Телде сарлап, шыма итмәнек.
Йыр йырлайым, көндәрҙең иң ябай,
Йыр булмаҫтай бере хаҡында.
Алда яҙғы байрам балҡып тора,
Эйе, йырым уның хаҡында.
Йылдар тауын уйҙар байҡап сыға...
Хәтерләнем йәп-йәш бер ҡыҙҙы.
Күкрәгендә нурлы «КИМ» балҡыған —
Ҡалҡып килгән кескәй йондоҙҙо.
Трибунанан башы саҡ күренә,
Телмәр һөйләй осҡон сәсрәтеп:
«...Быҫҡып яныу, һыктау ят ул беҙгә.
Беҙ атлайбыҙ ерҙе йәшәртеп.
Беҙ төҙөйбөҙ тормош — ысын кеше
Ысын бәхет менән йәшәр, тип...»
Телмәр бөттө...
Күпме йылдар үтте,
Ул заманға һаман табынам.
Юнгштурм кейгән, сәс ҡырҡтырған
Ошо ҡыҙҙы үлеп һағынам.
Йылдар, йылдар,

Даулы, шаулы йылдар,
Ниңә шулай бик тиҙ үттегеҙ?!.
Ниңә шулай шоморт сәсле ҡыҙҙы
Сал бөркөттәй яһап киттегеҙ?!.
Эйе, ғүмер —
Шаулап аҡҡан йылға.
Һис ни туҡтата алмай юлынан.
Бәхет шунда — гөл-сәскәләр үҫһә
Ҡойона-көлә йылға һыуынан.
Йылдар тауын мең ҡат аҡтарһам да,
Таба алмам инде ул ҡыҙҙы.
«ҠИМ» йөрәкле, ярһыу, сая сағым,
Аһ, тиҙ уҙҙы ҡалай, тиҙ уҙҙы...
Беҙ —«ҠИМ» таҡҡан ҡыйыу ленинселәр —
Нindәй кәртә аша үтмәнек,
Нindәй ерҙән, нindәй йоҡма сирҙән
Йөрәкте саф һаҡлап үтмәнек?!.
Еңеп барҙыҡ. Яҙғы ташҡын булып
Ерҙән сүп-сарҙарҙы йыуҙыҡ беҙ.
Дуҫлыҡ, туғанлыҡтан, ғәҙеллектән
Ер түшенә һәйкәл ҡойҙоҡ беҙ.
Ил ҡалыҡты, нурлы ҡояш булып.
Йыһан аша балҡый түбәһе.
Бөтә ерҙә бәхет эҙләүселәр
Беҙгә баға һөйөп, төбәлеп.
Йылдар, йылдар...
Тағы Һигеҙенсе март!
Был көн миңә һәр саҡ йыр кеүек,
Йәшлегемә илткән юл кеүек,
Изге әсә — тыуған ер кеүек...
Мин бит юлды унан башланым.
Оло юлға унан атланым.
Унда биргән тәүге антымды —
Ғүмерем буйы изге һаҡланым.
Шуға был көн һәр саҡ йыр кеүек,
«ҠИМ» йөрәкле сая ҡыҙ кеүек.

*1964*

## ЙӘШӘҮ БӘХЕТЕ

Йәшәү бәхете — өмөт, хеҙмәттә.
Йәшәү бәхете — дуҫлыҡ, хаҡлыҡта.
Йәшәү бәхете — илең, халҡың өсөн
Көрәш аша тыуған шатлыҡта.

## ЙЫРЛАЙЫМ

Илап тыуһам да мин, йырлап үҫтем,
Йырлап йәшәйем әле бөгөн дә.
Сәстәремә ҡырау сәселһә лә,
Ҡырау ҡунмаҫ минең күңелгә.
Йырлап йәшәйем.
Халҡым, илем ғүмере
Әкиәттәрҙән гүзәл йыр булғас.
Тыуған ерем — бөйөк Совет иле,
Ер йөрәге типкән ер булғас.
Йырлап йәшәйем. Халҡым үҙе һөйөп,
«Йырла!— тиеп бирҙе ҡәләмде. —
Данла!— тине,— һине кеше иткән,
Йырсы иткән бөйөк иләнде».
Һәм йырлайым. Дошман сыр-сыуҙары
Тауышымды быуып тора алмаҫ.
Барған юлым тоғро — Ленин юлы,
Бер кем унан ситкә бора алмаҫ.
Илап тыуһам да мин, йырлап үҫтем,
Йырлап йәшәйем һаман, бөгөн дә.
Йырламайса күңелем түҙә алмай
Йырҙарға тиң бөйөк илемдә.

*1958*

## ЙӘШӘҮ — ХЕҘМӘТ

Әсеһен дә күрҙем, сөсөһөн дә.
Үкенесем ерҙә ҡалманы.
Тик шулай ҙа донъя, гүзәл донъя,
Һине һөйөп танһыҡ ҡанманы.
Дөрөҫ, шәхесем өсөн был донъяға
Ҡомһоҙланып йәбешеп торманым.
Аҙыраҡ биреп, күберәк алайым тип,
Татлы һүҙҙән тоҙаҡ ҡорманым.
Ҡырыҫ булды минең барыр юлдар.
Наҙлы сөсөлөктәр тойманым.
Шуға, ахыры, донъя, һине күреп,
Һине һөйөп һис тә туйманым.
Йәшәр инем тағы ярты быуат.
Эшләр инем тағы бер дулап.
Йөкләр инем тау-таш ауырлығын,
Күтәргәнсә йөрәк, көс-ҡеүәт.
Йәшәү — хеҙмәт, көрәш, үҫеш бит ул.
Унан башҡа тормош юҡ миңә.
Ҡул ҡаушырып түрҙә ултырырға
Килмәнем бит, донъя, мин һиңә.

*1958*

## БӘХЕТ ӨЛӘШӘМ...

Әсәм әйтә ине: «Фәрештәләр
Таң алдында бәхет өләшә.
Егәрлеләр генә үҙ өлөшөн
Алыр өсөн тороп өлгәшә.

Йоҡосоға өлөш бирмәй улар.
Өлөшһөҙҙө һөймәй алла ла...
Таңда йоҡлап ятһа, яҙын иртә
Сәскә атмаç ине алма ла».

«Әсә һүҙе — тәңре һүҙе» тиҙәр.
Күңелемдә тере һаҡланым.
Эштә үтте көнөм. Көс-тир түгеп
Ҡаршы алдым төндөң һәр таңын.

Урман ҡырҡтым. Әглә утындарҙы
Йөк-йөк тейәп һәр көн оҙаттым.
Ҡешеләрҙең өйө йылынһын тип,
Үҙ өйөмдө бик йыш оноттом.

Ғүмер уҙҙы. Әммә фәрештәләр
Алып килмәнеләр бәхетте.
Әсәм, мәрхүм, баҡһаң, әйткән икән
Ошо эштең үҙен — бәхет тип.

Шулай икән — таңды эш өҫтөндә
Ҡаршылауҙа икән ҙур бәхет.
Шул эшеңдән күҙҙәр нурланыуы,
Кеше ҡыуаныуы — ҙур бәхет.

Әле тоям: фәрештәләр түгел,
Мин үҙем бит бәхет өләшәм.
Йөрәгемдең ярһыу йылыһынан
Егәрлеләр ҡалмай өлөшһөҙ.

Шулай барһын — килер таңдарым да
Хеҙмәт бәхете татып атһындар.
Эш тирҙәрем ошо бәхет өсөн
Алтын тәхет булып ятһындар.

*1968*

## БЫНА, БЕҘҘЕКЕЛӘР!

Байрам.
Ә ерҙә ҡар.
Иртә килде көҙҙөң һалҡыны.
Йөрәктә яҙ.
Һаман, һаман да яҙ.
Сәскә яра әле ал ҡына!
Байрам.
Майҙандарҙа халыҡ
Диңгеҙ кеүек ҡайнай, тулҡына.
Мин дә шунда.
Ал байраҡтың осо
Биттәремдән һөйә һаҡ ҡына.
Нисә йылдар һәр көҙ, Октябрҙә
Урамдарҙы иңләп уҙам мин.
Һәр уҙғанда йөрәгемә көстәр,
Дәрттәр өҫтәлгәнен тоям мин.
Хәтеремдә, ҡыҙыл галстуктан,
Барабандар ҡағып үткәнем.
Юнгштурм кейеп,
Ҡайыш быуып,
Был урамдан мин аҙ үтмәнем.
Байрамдарым сикһеҙ көләс булды.
Ҡыйыу булды уйым, теләгем.
Тик быйылғы Октябрем кеүек
Ҡыуаныслыһын мин белмәнем.
Әллә сәсем салға әйләнһә лә,
Йәш ҡалғанға талмаҫ йөрәгем.
Әллә улдар йыһан яулағанға,
Ленин рухлы фәнде өйрәнеп.

Әллә ҡалабыҙҙа бейек-бейек,
Матур-матур йорттар артҡанға.
Әллә илдең күрке, даны, йәме
Ҡаяларҙан ашып ҡалҡҡанға.
Был байрамым тиңһеҙ шат минең.
Байрам.
Ҡарайым да ағылып үтеп торған
Колонналарға мин шатланам.
Бала кеүек:
— Бына, беҙҙекеләр
Ҡалай йәшәйҙәр!— тип маҡтанам.
Күңелемдән рәхмәт урғып сыға
Бөйөк партияма үҙемдең.
Ысын бәхет, ысын шатлыҡ менән
Гөрләгәнгә халҡы илемдең.
Һәм тоям мин килер байрамдарым
Тағы ла шат, йәмле булырын.
Коммунизм ҡояшының нуры
Һәр бер өйгә инеп тулырын.

*1964*

## ЙЫРЛАМА ҺИН, ТИҘӘР...

(Боронғо килен ауыҙынан)

I

— Йырлама һин, тиҙәр,
килен кеше!
Йырлау уҙамандар эше!
Яҙык була, тыйыл!
Ярамай!—
Ә мин йырлай бирәм,
(Йәнем йыр бит!)
Ярамайға һис тә ҡарамай.

— Йырлама һин, тиҙәр,
килен кеше!
Йырлау азаматтар эше!
Шәриғәтте боҙма!
Ярамай!—
Йөрәгемдә һөйөү, һағыш ҡайнай,
Ярамайға һис тә ҡарамай.

— Йырлама һин, тиҙәр,
килен кеше!
Йырлау ир-егеттәр эше!
Ғөрөф-ғәҙәт ҡушмай!
Ярамай!—
Күкрәгемде нәфрәт, хәсрәт ашай,
Ярамайға һис тә ҡарамай.
—Йырлама һин, тиҙәр,
килен кеше!
Йырлау баһадирҙәр эше!
Һин зәғиф йән, көсһөҙ!

Ярамай!—
Күңелемдә йыр урғыла, таша,
Ярамайға һис тә ҡарамай.

II

Йырламай шул булмай.
Йөрәгемде,
Йырға юлдаш ҙур йәнемде,
Һандуғастар төйәк иткән бит.
Тыныу белмәй йырлап йәшәһен тип,
Аҫыл йырҙар бүләк иткән бит.
Йырламаһам, улар бойоғорҙар,
Тереләй етем булырҙар,
Йырламаһам, улар үлерҙәр.
Йырламаһам, яҙҙар килмәҫ ергә,
Йырламаһам, гөлдәр һулырҙар.

Йырламайсы булмай.
Мөмкин түгел.
«Ярамай», һин юғал, төңөл!
Йырым һиңә түгел.
Йәремә.
Саф йөрәктән сыҡҡан
изге йырҙы
Сарсап көткән ғәзиз еремә.

*1967*

## ТЕЛӘК

Ерҙе уҡка услап,
Ҡеҫәләргә
Йондоҙ тиреп йыйған йәш быуын,
Атом тигән енде ауыҙлыҡлап
Ете ҡат күк ашҡан шат быуын,
Мин ҡотлайым һине саф күңелдән,
Мин ғорурмын һинең уңышҡа.
Ҡәрәк икән, һинең бәхетеңде
Яҡлар өсөн әҙер һуғышҡа.
Тиң бер теләгем бар:
Йыһанда ла
Ерсә ябай, яҡты булып ҡал.
Бала зары — һинең зарың булһын.
Оло алдында ерсә бүрек һал.
Аңла, йыһан, атом үлсәүенә
Кеше һыймай. Кеше юғары.
Уның рухы менән тиңләшерлек
Сер һаҡлаған атом юҡ әле.
Кеше — алла!
Ҡояш бит ул кеше!
Кеше — бөтә ғаләм — бейеклек.
Кеше үҙе айҙы, ерҙе, күкте
Ижад иткән тиңһеҙ бөйөклөк.

*1967*

## КӘҢӘШ

Оло йөрәк йәшәй йәшнәп-күкрәп.
Бүш йөрәктәр йәшәй ҡалтырап.
Осҡон ғүмерендәй дан өсөн ул
Була хаин, була олтораҡ.

Оло йөрәк туҙалыр иртәрәк.
Туйҙа түгел — яуҙа, ярышта.
Ғәҙеллек һәм хаҡлыҡ өсөн барған
Мәңгелек, ҙур, ауыр алышта.

Оло йөрәкле бул. Батырҙарҙы
Шөһрәт үҙе таба донъяла.
Осҡон һүнгән урынды көл ала.
Ҡояш уҙған юлда нур ҡала.

*1963*

27422

БИБЛИОТЕКА
объединенного профкома
Учалинского ГОК

2 Заказ 536

## АШҠЫНМА ЛА, ДИҢГЕҘ...

Ашҡынма ла, диңгеҙ, һай, тулҡынма,
Ҡаяларҙан ашма, ташмасы.
Көс-ҡеүәтең, дәрт-дарманың менән
Ярһытырмын, тимә, ташласы.

Айҡалма ла, диңгеҙ, һай, сайпылма,
Аҡ күбектәр сәсеп шашмасы.
Тулҡын — зәңгәр дуға, еҙ ҡыңғырау!
Елдәр менән ярышып сапмасы.

Тын ғына тор әҙерәк.
Мин арыным.
Ҡыҙыра-ҡыҙыра текә ярыңды.
Һин шашаһың?!
Күрәһең бит мине,
Мәрмәр һындай һалҡын — барымһыҙ.

Ә бит мин дә шаулы диңгеҙ инем...
Шашҡын хистәр миңә сит түгел.
Мәғрур тулҡындарҙың ҡанатында
Йыһан гиҙеп үткән был күңел.

Эйе, эйе, мин — тынғыһыҙ диңгеҙ.
Тик әҙ генә тындым, туҡталдым.
Хәл йыяйым, көс-ҡеүәтем ҡайтһын.
Ярышып тулҡынырбыҙ, туҡтәле!..

Йә, һин дә тын әҙерәк.
Икәү бергә
Ял итәйек гүзәл ярыңда.

Күрәһең бит, талған күҙҙәремде
Төбәп көтәм һаман янында.

Тын инде, тын!..
Юҡ, юҡ, тынғы белмә!
Урғыл, шаула, ярһы, ел, диңгеҙ.
Мин үлемһеҙ — һинең ярһыуыңда.
Диңгеҙ түгел һин дә, бел, минһеҙ!..

*1960*

## НИНДӘЙ ӨН БЫЛ?!

Төн уртаһы. Мин йоҡоһоҙ.
Яңғыҙ.
Тирә-яғым тып-тын.
Дөм һуҡыр.
Бәлки, донъяла тик уйым йәшәй?
Бәлки, донъяла һис мин юҡтыр?!
Ҡуптән үлгәнмендер.
Рухым ғына
Ер ҡыҙырып, зарығып йөрөйҙөр.
Ажғыр ҡар-бурандар ҡәберемдә
Туй уҙғара, шашына, бейейҙер?
Юҡ, юҡ!..
Туҡта, ниндәй сихри бер өн
Сыңлап үтте ҡолаҡ төбөмдән?!
Төн шаршауын йыртып ырғытты ул.
Тартып алды мине үлемдән.
Балҡып китте донъя.
Ҡояш ҡалҡты.
Шыҡһыҙ уйҙар бөттө, ҡастылар.
Тынлыҡ, ҡараңғылыҡ юҡҡа сыҡты.
Аяҡтарым ергә баҫтылар.
Уйҙар түгел, юҡ, юҡ, уйҙар түгел,
Мин йәшәйем — көс, хәл беләктә!..
Мин йәшәйем. Бәһлеүәндәр ҡаны,
Бөркөт ҡаны таша йөрәктә.
Ниндәй өн был?
Ләйсән яуҙымы әллә?
Яҙ елдәре елпеп уҙҙымы?
Әллә һығылма бил аҡ ҡайындың

Бөрөләре асылып туҙҙымы?
Әллә ғишыҡ гөлө — умырзая
Сәскә аттымы был минутта?
Әллә яңы бер йән:
— Тыу-ҙы-ы-ым!..— тиеп
Һөрән һалдымы был тынлыҡҡа?!
Ниндәй өн был?
Ниндәй сихри өн был?
Сыңлап үтте ҡолаҡ төбөмдән.
Сеү!..
Был бит йыр!..
Тыуҙы өр-яңы йыр!..
Ҡөслө ул йыр төндән, үлемдән.

*1960*

## ХАЛЫҠ КҮҢЕЛЕ

Яҡшымын, тип күкрәк киреп сыҡма.
Халыҡ үҙе күрер, баһалар.
Тере саҡта күҙҙе буяусыға
Ҡаты була үлгәс язалар.
Нәфрәтләнеп исемеңде телгә
Алыуҙары бар бит бер заман.
Тере саҡта булһа — әле бер хәл,
Үлгәс хурлаһалар — бик яман.
Халыҡ күңеле — көмөш шишмә бит ул.
Үлемһеҙ ул һаҡлай сафлыҡты.
Ҡисермәй ул хатта алланы ла
Ситләп үтмәк булһа хаҡлыҡты.
Яҡшымын, тип күкрәк киреп сыҡма.
Ҡылған эшең үҙе һөйләһен.
Һүҙең түгел, майлы күҙең түгел,
Йән-йөрәгең шуны көйләһен.
Яҡшылыҡ бит — моң, зар, йыр кеүек ул,
Йөрәктәрҙән күсә йөрәккә.
Күҙҙәрҙә нур, күңелдәрҙә ҡояш,
Ҡеүәт булып күкрәй беләктә.
Ниңә буш һүҙ? Бул һин фәҡәт һәйбәт.
Ябай, яҡты, изге күңелле.
Әйтсе, көмөш һыуҙың бер тамсыһы
Тынсыу күлдән артыҡ түгелме?!.

*1968*

## ЙЫРҘАРЫМ

Эшһеҙлектең еме булып, йылтырап
Тыуманы был йөрәк ҡаны — йырҙарым.
Эш өҫтөндә ҡайнап үтте йылдарым.
Юл ыңғайы тыуып-үҫте йырҙарым.

Иркәлектең өнө булып әлһерәп
Тыуманы был йөрәк ҡаны — йырҙарым.
Ҡөнө алтын. Өнө ялҡын — йырҙарым.
Эш өҫтөндә тыуып-үҫте йырҙарым.

Бәлки шуға татлы һуттай түгелдер.
Бәлки шуға наҙлы гөлдәй түгелдер.
Эштә ҡайнап, урғып тыуҙы йырҙарым.
Йырҙар булып түгелеп барҙы йылдарым.

Ваҡыт етер. Мин дә бер саҡ арырмын.
Диңгеҙ йыуған ҡая һымаҡ ауырмын.
Тулҡын булып, таралып ҡалыр йырҙарым.
Ҡайта-ҡайта ҡағып күңел ярҙарын.

*1960*

## ҺЫҘЛАНМА, КҮҢЕЛ

Маҡтауға ымһынма, күңел,
Ул һиңә юлдаш түгел.
Хурлауға һыҙланма, күңел,
Ул һиңә хас эш түгел.
Маҡтауҙар ҙур итә алмаҫ,
Хеҙмәтең ҙур булмаһа,
Хурлауҙар хур итә алмаҫ,
Халҡың һөйөп ҙурлаһа.
Бул һин тик халҡыңа тоғро,
Ит хеҙмәт, арыу белмәй.
Маҡтау, хурлау ғүмерһеҙ ул,
Тик хеҙмәт ҡала үлмәй.

*1957*

## ОНОТОЛМАҪ ЙӘШЛЕК

Эй, ҡайҙа ҡалды
Көләс, шаян йәшлек —
Ғүмеремдең алһыу яҙ таңы.
Һис юғында тиҡ бер көнгә генә
Ҡайтһа ине кире ул тағы.

Ҡайҙа ҡалды донъялағы бар эш
Ҡулдан килер кеүек тойған саҡ.
Ҡүҙҙә осҡон, беләктә бөтмәҫ көс,
Йөрәк ялҡын менән тулған саҡ.

Ҡайҙа ҡалды күңел ҡанатланған
Тәүге һөйөү,
Тәүге тулҡыныу.
Эстән әкрен генә йырлай-моңрай,
Уны һағыныу, уны юҡһыныу.

Әй, ул көндәр ниңә шулай бик тиҙ,
Бик алыҫта тороп ҡалдылар.
Әле ҡасан ғына йөрәгемдә
Һүрелмәҫ ут булып яндылар.

Инде барыһы үтте.
Таң алдында
Күренеп ҡалған матур төш кеүек.
Инде, йөрәк, мәңге ашҡынмаҫһың,
Талпынмаҫһың осор ҡош кеүек.

Юҡ, юҡ!..
Йәшлек әле минең менән!
Һаман эштәремдә биҙәкләй.
Һаман юлдарымда балҡып ята,
Йәйғор һипкән серле биҙәктәй.

Кем һуң онота алыр комсомолда
Шаулап үткән дәртле йәш сағын.
Ғүмеренең тәүге япраҡ ярған,
Һандуғаслы, йәмле яҙ таңын?!.

*1951*

## БЕҘҘЕҢ ЙӘШЛЕК

Эй йырлағы килә, күкрәк киреп,
Мәңге һүнмәҫ йәшлек хаҡында.
Эй комсомол, ҡыйыу, көләс йәшлек,
Һин үлемһеҙ бөйөк халҡымда.
Беҙҙең йәшлек шаулы майҙандарҙа,
Көрәштәрҙә тыуып сыныҡты.
Типһә тимер өҙөр был дан йәшлек,
Әйтегеҙсе, ҡайҙа һынатты?!.
Беҙҙең йәшлек Магнит далаһында
Домна булып күккә үрелде.
Колхоз булды.
Днепрогэстан мең-мең
Йондоҙ булып ергә түгелде.
Беҙҙең йәшлек, тау бөркөтө булып,
Фашист түбәһендә ҡағынды.
Өмөт булып, бәхет, шатлыҡ булып,
Һүрелмәҫкә дөрләп ҡабынды.
Беҙҙең йәшлек, алтын башаҡ булып,
Алтай далаһында тулҡына.
Миллион ботло бойҙай — байлыҡ булып,
Бәхет булып ҡайта халҡыма.
Эй йырлағы килә, күкрәк киреп,
Мәңге үлмәҫ йәшлек хаҡында.
Эй комсомол, ҡанат биргән йәшлек,
Йырым һиңә, һинең хаҡыңда!

*1955*

## ҺАҠЛА ЭСЕНДӘ...

Сәскәле һүҙ — буш йөрәктәр эше.
Теләгем юҡ уны сәсергә.
Яңғырауыҡ, ялтырауыҡ һүҙҙән
Күҙ буярлыҡ дан һын төҙөргә.
Күҙ буяу ул — бағыусылар эше.
Бағыу уҙа, буяу юйыла.
Юйылмаҫтай хәҡиҡәтте һаҡлап
Йәшәй кеше оло донъяла.
Йәшәй кеше — ғорур, батыр кеше,
Йәшәү өсөн һатмай, һатылмай.
Донъяла юҡ бүтән үлемһеҙ йән —
Хаҡлыҡ өсөн үлгән батырҙай.
Мин табынам шундай ғали йәнгә.
Мин ғашиҡмен шундай батырға.
Донъя белгән барлыҡ маҡтау һүҙе
Уның өсөн йәшәй хәтерҙә.
Тик әйтмәйем, һөйләмәйем, ҡурҡам —
Сәсеп бөтһәм йәнем буш ҡалыр.
Йәнем генә түгел, бөтә донъя,
Бөтә ғаләм һүнер, бушаныр.
Аңла, йәнем, һөйһәң, янһаң, көйһәң,
Һөйләмә һин, һаҡла эсеңдә.
Янар тауҙар ҙа бит көслө була,
Лавалары янһа эсендә.

*1968*

## ҺЫҘЛАНМА, ДУҪ!

Һыҙланма, дуҫ, ғәйбәт оҙон телле.
Әммә ҡыҫҡа уның ғүмере.
Күрмәйһеңме, ғәйбәт ҡапсығының
Йөҙө ҡара, биле көмөрө.
Ҡулдәгенә йөрәк кере һеңгән.
Йән биҙҙергес фәхеш йөрөшө.
Ғәйбәт менән ярап, еңел йәшәү —
Өлөшөнә төшкән көмөшө.
Бәхетһеҙ ул — иблес кеүек ул да
Хаҡлыҡ донъяһынан һөрөлгән.
Сәбәләнеп йәшәй — күкрәгендә
Быҫҡып ятҡан зәһәр һөрөмдән.

*1968*

## ЕҢЕЛ ТҮГЕЛ

Еҫел түгел — дебет тетеү.
Еҫел түгел — донъя көтөү.
Еҫел түгел тоғро булып
Урау юлды тура үтеү.

*1968*

## МАҠТАНЫРҒА ЯРАТҠАН ДУҪҠА

Маҡтауҙың да сиге була.
Маҡтаныуҙың — күптән бар.
Был турала, дуҫ күргәнгә
Бик йыш ҡына әйткән бар.
Маҡтанаһың:
— Мин, мин, мин шәп.
Мин әүлиә, мин батыр!..
Ә һеҙ нимә?
Бөтәгеҙ ҙә
Йә бешмәгән, йә бахыр!..
Йә, ҡайһығыҙ өшөп торған
Турғайҙы тотоп һөйгән?
Ҡайһығыҙ көйөшһөҙ ҡалған
Ҡәҙәне йәлләп көйгән?!
Йә әйтегеҙ, минең кеүек...
— Туҡта, дуҫ, етәр, аңла:
Һин үҙеңә ал-гөл дә бит,
Халыҡ ни әйтер алда?!
Әйтмәҫме:
Ҡәҙәне һөйҙө...
Тик кешене онотто.
Уның арҡаһында күптәр
«Ҡом ашаны, ут йотто!..»
Үҙе өсөн ут-һыу үтер
Батыр булды, тимәҫме?
Кешегә тиһәң — буш ҡыуыҡ,
Бахыр булды, тимәҫме?..

*1960*

## ҺАНДУҒАС

Тал төбөнә бер һандуғас
Ояһын үрҙе.
Инә һандуғас был ерҙе
Яратты үҙе.
Ултыра кинәнеп хәҙер
Йәтеш ояла.
Ата һандуғас йыр йырлай,
Үрҙә, һауала.
Йыр ағыла,
Йыр һыҙыла,
Өҙөлмәй, һүнмәй.
Үрелә һаман бейеккә,
Йыр күктә үлмәй.
Бөҙрә тал төбөнән уны
Һөйгәне тыңлай:
«Донъяла бүтән юҡ!— ти ул,—
Гүзәл йыр бындай!..»
Ата һандуғас бейектә
Һайрай-талпына.
Арыу белмәй, талыу белмәй
Дуҫы хаҡына.
Йыр түгелә,
Йыр үрелә,
Өҙөлмәй, тынмай.
Йән һөйгәне бит ояла
Был йырҙы тыңлай.

*1963*

## ЫШАНМАЙЫМ КӨҘГӘ...

Ғүмер яҙын күптән уҙҙы, тиҙәр.
Ҡыраулы көҙ ҡағына түбәндә.
Ял итергә ваҡыт. Нәүбәт етте...
Эштәреңде ташла, теүәллә!..
Ышанмайым көҙгә.
Яҙҙар даулап,
Илем үрелә йыһан түренә.
Алда яңы һырттар, бейеклектәр,
Тантаналы шаңдаҡ күренә.
Ышанмайым көҙгә.
Ил йөрәген
Тойған күңел тынмаҫ, һыуынмаҫ,
Йырлай-көлә яҙҙан яҙға барыр.
Юҡ, көҙ булмаҫ унда, көҙ булмаҫ.

*1961*

## ТАҒЫ ЛА ЯҘ...

Тағы ла яҙ. Йән ҡыуана, ярһый,
Яңы ҡанат үҫкән ҡош кеүек.
Ҡартлыҡ, кәрһеҙлектәр, сир-сырхауҙар
Туҙға яҙған буш һүҙ — төш кеүек.

Тағы ла яҙ. Аллы-гөл сәскәле
Дала кеүек иркен күңелем.
Яҙ нурына ҡушылып, үрелеп үҫә
Яҙҙай яҡты, керһеҙ ғүмерем.

*1968*

## ЙӘШӘР ИНЕМ...

Ҡар, бурандар, ҡарт убырҙай,
Өйөрөлә, дулай.
Әсе елдәр мөрйә үтә
Зыулай ҙа зыулай.
Тыңлай торғас төшөндөм мин
Йырына елдең:
«Был бит һинең, был бит һинең
Бала саҡ ине...»
Тишек итек, йыртыҡ күлдәк,
Ҡалын сәс үтә,
Ҡөҙгө елдәр йәш йөрәкте
Тетә лә тетә...
«Иçеңдәме?»— ти. Йырына
Төшөнәм елдең:
«Был бит һинең, был бит һинең
Йәшлек саҡ ине...»
«Теләйһеңме,— ти,— ҡайтырға
Шул саҡҡа ҡабат?
Бала саҡ бит, йәшлек саҡ бит,
Аһ, һәйбәт, һәйбәт!..
Теләһәң, әйт»,— ти. Төшөнәм,
Йырына елдең:
«Әйҙә ҡайт та өр-яңынан
Йәшә һин, ерҙә».
«Юҡ, юҡ!..— тим мин,— теләмәйем,
Күргәндәр еткән.
Ҡартлығымды бына бер аҙ
Оҙайтһаң икән.

Йәшәр инем һис екһенмәй
Йәнә бер илле.
Беләһең бит, хәҙер миңә
Ҙур бәхет килде».

*1957*

## КЕШЕСӘ

Әйтмәйем, иркә булдым, тип.
Йәшәнем, тип, вайымһыҙ.
Ватанымдың мөхәббәте
Булды, тиеп, талымһыҙ.

Әйтмәйем, нәк һөт өҫтөндә
Ҡаймаҡ булдым һәр саҡ, тип.
Һөҙлөктәй йымылдап өҫтә
Йөҙөп үтте йәш саҡ, тип.

Маҡтанмайым, илем һәр саҡ
Һыйпаны, тип, арҡамдан,
Алдымда гел ҡояш булды,
Ай торҙо, тип, артымдан.

Ҡәрәгенсә һөйҙө илем,
Ҡәрәгенсә өйрәтте.
Хатта ҡайсаҡ ғәҙелһеҙлек,
Тигеҙһеҙлек йөҙәтте.

Булды сатлама һыуыҡтар,
Ҡояшлы яҙҙар булды.
Күңел ҡайсаҡ шатлыҡ менән,
Ҡайсаҡ зар менән тулды.

Ҡайсаҡ нәфрәттән буҙарып
Ал ҡаным урғып аҡты,
Ҡайсаҡ йөрәгем һөйөүҙән
Янар тау булып ҡаҡты.

Ҡешегә хас булды барыһы,
Кешесә янды йөрәк.
Ҡешесә әрнеп, ҡыуанып,
Хеҙмәттә талды беләк.

Ҡешесә ашҡынып осто
Йыһанға тынмаҫ йәнем.
Ауырҙа ергә таянып,
Йәшәүҙең тойҙо йәмен.

Кешегә хас ғорур, ҡыйыу,
Саф булды минең йөрәк.
Ят булды ярап йәшәүҙе,
Еңелде һөйгән теләк.

Ҡешесә бәхетле булдым.
Яндым, көйҙөм кешесә.
Тыуған илде, ғәзиз ерҙе
Ярһып һөйҙөм кешесә.

Ҡешесә булды бөтәһе.
Кешесә булды фәҡәт.
Ҡәнәғәт, сабырлы килһен
Илаһи һуңғы сәғәт.

*1967*

# ЙӨРӘК ҺҮҘЕ

## ҺИҢӘ ҺӨЙӨҮ, ЫШАНЫС ЙӨРӘКТӘ

Россияны бөркәп, ҡаплап торған
Төн пәрҙәһен йыртып ырғытып,
Моңһоу ҡалаларға, далаларға
Терелткес нур бөркөп, йылытып,
Мәңге һүнмәҫ ҡояш булып ҡалҡтың,
Бөйөк коммунистик партия.

Ленин сәскән тәүге осҡондарҙан
Ялҡын булып дөрләп ҡабынып,
Ҡүп һыҡтаған тыуған ер өҫтөнә
Бәхет йондоҙҙары ҡабыҙып,
Азатлыҡ һәм шатлыҡ булып ҡалҡтың,
Бөйөк коммунистик партия.

Ҡөс еткеһеҙ ауыр көрәш юлын
Данлы еңеү менән үттең һин,
Үҙ юлыңдан күпме кәртәләрҙе,
Емереп, ватып ситкә түктең һин,
Батырлыҡ һәм ижад сығанағы —
Бөйөк коммунистик партия.

Эй партиям, күп һыналған изге
Юлың менән алға етәклә.
Ҡоммунистик ғәҙел тормош йортон
Ҡаҡшамаҫ көс булып терәклә,
Һиңә һөйөү, ышаныс йөрәктә,
Бөйөк коммунистик партия.

*1953*

## ЯҘҒА ОҠШАТАМ МИН...

Яҙға оҡшатам мин бөгөнөмдө.
Үткәндәрем ҡара көҙ ине.
Әйләнәмдә һаҙлыҡ, батҡаҡ ҡына...
Ҡөнөм айһыҙ, нурһыҙ төн ине.

Бына килде бөйөк, шаулы йылдар:
Һуғыш, аслыҡ, набат саңдары,
Ерҙе ҡосаҡланы Октябрҙең
Терелткес нур сәскән шаңдағы.

Шул саҡ тороп баҫтым, бил турайтып.
Атлап киттем төбәп ҡояшҡа.
Яңы йөрәк, яңы мейе үҫте,
Ҡанат үҫте утлы көрәштә.

Шул тороуҙан барам:
Алда ҡояш.
Ян-яғымда үҫә ҡалалар.
Башаҡтарҙың шаулы йырын тыңлап,
Йәшәрәләр ҡартлас далалар.

Йыһан гиҙә һауа караптары,
Атом асты серле һандығын.
Тарих сүплегенә йөҙ юнәлтә
Капиталист — әҙәм ҡалдығы.

Яҙға оҡшатам мин бөгөнөмдө.
Терелткес яҙ минең илемдә.
Бәхет таңы байымаҫҡа ҡалҡты,
Күп һыҡтаған изге еремдә.

*1957*

## БАШҠОРТОСТАН

Элек заман һин бер үкһеҙ бала инең.
Бар байлығың — ҡырыҫ, йәнһеҙ дала ине.
Шул далаңда һин, имгәкләп ауа-түнә,
Тома һуҡыр юлсы булып бара инең.
Хәҙер көслө ир-арыҫлан, баһадир һин.
Алғы сафта бәхет даулап бараһың һин.
Юлың яҡты, күңелең көләс, теләгең саф,
Бөйөк илдең ҡәҙерле бер балаһы һин.
Һәр йылыңда унар йыллыҡ юлды үттең.
Коммунизм таңдарына килеп еттең.
Ленин һыҙған яҡты юлдан тайшанмайса,
Меҫкенлекте һелкеп ташлап, тапап үттең.
Ырыҫлы ер — Башҡортостан, Гөлбостан һин.
Бәхет, шатлыҡ, нур түйәге Гөлбостан һин,
Оло ҡояш — СССР-ҙың күкрәгендә
Йондоҙ кеүек балҡып торған Нурстан һин.

*1959*

## БАЙРАМ БӨГӨН

(Дүрт йөҙ йыллыкҡа)

Ҡояш балҡып күтәрелде,
Ҡүмеп нурға бөтә ерҙе,
Һөйөп, наҙлап иң беренсе
Беҙҙең көләс, матур илде:
Байрам бөгөн, байрам бөгөн!

Аҫыл гөлдәр сәскә атты,
Буҙ турғайҙар күккә ашты,
Һандуғастар йырҙан ярһып,
Тал тибрәтеп ҡанат ҡаҡты:
Байрам бөгөн, байрам бөгөн!

Ал байраҡтар тулҡыналар,
Тигеҙ баҫа колонналар,
Бер йөрәкле, күмәк телле,
Ярһыу йырҙар ағылалар:
Байрам бөгөн, байрам бөгөн!

Беҙ — рус, башҡорт — дуҫ, бер яҡлы
Юлдарыбыҙ иркен, яҡты,
Бомба башлы сәрҙар, лордтар
Тарҡата алмаҫ беҙҙең сафты,
Байрам бөгөн, байрам бөгөн!

Дүрт йөҙ йыллыҡ дан көнөбөҙ,
Шаулап тора ер, күгебеҙ,
Ҡүбәләктәр, ысын дуҫлыҡ
Байраҡтарын, кил, үбегеҙ!
Байрам бөгөн, байрам бөгөн!

*1957*

## КОММУНИСТӘР ПАРТИЯҺЫ

Коммунистәр партияһы —
партиям минең!
Мин ябай һалдаттарыңдың
береһе һинең.
Шуға ла йөрәгем ҡайнар,
вулкандай көслө.
Һинең үлмәҫ эштәреңдән
алғанға көстө,
Коммунистәр партияһы —
бөйөк партия.
Уйың гәҙел. Теләгеңде
бар халыҡ һөйә.
Ғәҙеллекте яҡлағанға
яҡынһың йәнгә.
Дан йырлай йөрәгем.— Фәҡәт
бирелгән һиңә.
Эй, партиям, тоғро юлдан
алға етәклә.
Һиңә рәхмәт һәм мөхәббәт
ҡайнар йөрәктә.

*1956*

## ДАН ҺИҢӘ, ТЫУҒАН ИЛЕМ

Эй матур, иркен, ҡеүәтле,
Шат тыуған илем!
Дан йырлай һиңә күңелем,
Эй тыуған ерем!
Тын алырға, ҡыуанырға
Иркен булғанға,
Эшләргә, гөрләп йәшәргә
Иркен булғанға;
Далаларың байлыҡ менән
Ташып тулғанға,
Ҡалаларың ҡояш кеүек
Балҡып торғанға;
Барыр юлың берҙән-бер хаҡ,
Пак булған өсөн,
Кеше бәхетен һаҡлауҙа
Һаҡ булған өсөн;
Шаулы океан уртаһында
Алтын ҡаялай
Торғанға мөһабәт, тыныс,
Дауға ҡарамай;
Дан һиңә, дан, тыуған ерем,
Эй гүзәл илем.
Һиңә булһын саф йөрәкле
Йырҙарым минең.

*1955*

## АЛДЫМДА ЛЕНИН

Ҡот осҡос ҡырыҫ, ҡараңғы,
Айһыҙ төн ине.
Һыҡтаулы, зарлы тауыштар
Солғаны мине.
Тонсоҡтом, шаштым, һаташтым
Шомло тынлыҡтан.
Кем мине быңдай ҡараңғы
Төнгә ырғытҡан?!.
Аһ, үләм!..
Юҡ. Сеү, ниндәй нур
Юл ярып үтте?
Ниндәй ғәжәп көс был ҡара
Төндө юҡ итте?!.
Был — Ленин — тылсымлы ҡояш
Ҡабынды күктә.
Терелде, турайып баҫты.
Йығылған күптәр.
Был — Ленин — үлмәҫ, гүзәл йыр
Йөрәккә һеңде.
Ҡырыҫ ҡышты, ҡара төндө
Емерҙе, еңде.
Яҙылды күкрәк, киңәйҙе:
Алдымда — Ленин.
Уның йөрәге йылыта
Ҡанымды минең.
Беләктә икһеҙ-сикһеҙ көс,
Дәрт-дарман тоям.
Сөнки мин:
— Ленин!— тип ятам,

— Ленин!— тип торам.
Шуға ерем, күгем яҡты,
Шат, көләс, аяҙ.
Ҡыш менән көҙгә урын юҡ.
Унда мәңге яҙ.

*1955*

## МӘСКӘҮ — БАШҠАЛА

Бына ниндәй матур икәнһең һин,
Ер үҙәге — Мәскәү — башҡала!
Йөрәгемдең иң ҡәҙерле йыры
Һиңә булһын — түгел башҡаға.

Алыҫ юлдарымды яҡын итеп,
Килеп еттем һине күрергә.
Ҡайнар сәләм, рәхмәт тапшырырға,
Изге таштарыңды үбергә.

Урамдарың ҡалай шаулы һинең,
Йорттарыңда ҡояш яҡтыһы.
Кешеләрең йомарт, көләс һинең,
Йөҙҙәреңдә бәхет саҡтыһы.

Баҡсаларың иркен, һарайҙарың
Әкиәт кеүек гүзәл, бай икән.
Ерҙең аҫтында ла балҡып торған
Һин тыуҙырған ҡояш, ай икән.

Ҡеүәтеңә, данлы ғүмереңә
Тиңләшерҙәй ҡала табылмаҫ,
Дошман инә алмаҫ. Дуҫ алдында
Ҡапҡаларың һис тәябылмаҫ.

Ер йөҙөнә һүнмәҫ нурҙар бөркөп
Балҡып ята Мәскәү — башҡала.
Йырҙарымдың иң ҡәҙерле моңо
Һиңә булһын — түгел башҡаға.

*1955*

## ҠЫҘЫЛ МАЙҘАНДА

Ҡышҡы бер төн. Кремль куранты тап
Төнгө ун икене белдерә.
Әйтерһең дә Ҡыҙыл майҙанда,
Тулған ай ҙа, тик бер мин генә.

Тирә-яҡ тын. Бөйөк майҙанды
Япраҡ-ҡарҙар һөйөп ябалар.
Ҡар түгел, юҡ. Был бит көмөш айҙан
Ап-аҡ күбәләктәр яуалар.

Ә мин өнһөҙ. Һаман Кремлгә
Ҡарап торам шунда һоҡланып.
Ахыры, йондоҙҙар ҙа был тәңгәлдә
Һәр төн үтә шулай туҡталып.

Ҡарап торам: — Башҡорт еренән мин
Һиңә оло сәләм килтерҙем.
Үҙ халҡымдың йөрәк йылыһын
Түкмәй-сәсмәй һиңә еткерҙем.

Һәр кирбесең, ташың изге һинең,
Мең ғүмергә тороп йәшеңдәй.
Бөйөк Лениндең дә данлы ғүмере
Күкрәп ҡалды һиндә йәшендәй.

Тәрән хөрмәт менән башым эйеп,
Баҫып торам Ҡыҙыл майҙанда.
Ә уйҙарым икһеҙ-сикһеҙ дарья
Һәм яҡтылар тулған айҙан да.

*1955*

## ОКТЯБРЬ КИЛДЕ

Алтын япраҡтарға төрөнөп,
тағы көҙ етте.
Ал байраҡтар түбәләрҙән
тағы нур һипте.
Октябрь килде: өйөмдә
байрам, ҙур байрам.
Ҡыуаныс таша күңелдә
хайран, ҙур хайран!
Эй Октябрь, һәр йыл шулай
шауың менән кил.
Рух байлығынан нур алып,
йәшәрһен бар ил.

## ҠУШ ҠАРАҒАЙ

(Рус дәүләтенә ҡушылыуға 400 йыл)

Тау өҫтөндә ҡуш ҡарағай үҫә,
Ҡуҡҡа терәп йәшел түбәһен.
Ҡөслө тамырҙары таштар ярып,
Тишеп үткән ерҙең үҙәген.
Күпте күргән: һанһыҙ болоттарҙың
Шаулы ямғырында ҡойонған.
Ҡүпме ысыҡ уның ылыҫына
Ынйы булып һәр йәй ҡойолған.
Ниндәй ел-дауылдар ҡаҡмағандар,
Ниндәй ҡар-бурандар баҫмаған,
Ниндәй ҡаты ҡылау селләләрҙә
Ылыҫтары туңып ҡатмаған!
Ә шулай ҙа һаман гүзәл, зифа,
Мәңге йәшел, йәп-йәш тора ул.
Быуын-быуын булып һаман үргә,
Юғарыға үрелеп бара ул.
Бирешмәй ул: тамырҙары тәрән
Ер күкрәген терәк иткәнгә.
Олондары, болоттарҙы ашып,
Ҡояш шаңдағына еткәнгә.
Ҡуш ҡарағай, һиңә оҡшатам мин,
Бөйөк рус һәм башҡорт дуҫлығын.
Йөҙ-йөҙ йылдар буйы күп һыналған
Был дуҫлыҡтың ҡорос ныҡлығын.

*1957*

## БЕҘҘЕҢ МЕНӘН...

Һай, йөрәккә һүрелмәҫ ут,
Ялҡын һеңгән йылдар.
Ҡеше рухын ҡанатлы итеп
Ҡағындырған йырҙар!
Беҙҙең менән, беҙҙең менән шанлы Октябрь.

Ярты быуат. Беҙ барабыҙ
Үргә, ҡояшҡа!
Йөрәк — ҡыҙыу.
Күңел көләс.
Йөҙҙәр ҡояштай.
Беҙҙең менән, беҙҙең менән данлы Октябрь.

Һай, нурлы юл! Алға, алға!
Алда киң йыһан!
Кеше батыр, кеше матур,
Илем — Гөлйыһан!
Беҙҙең менән, беҙҙең менән Бөйөк Октябрь.

Ал, ҡыҙыл нур, ерҙе япҡан
Байрам, тантана!
Оло бәхет еңде илдә —
Ер, күк шатлана!
Беҙҙең менән, беҙҙең менән мәңге Октябрь.

*1964*

## БАШҠОРТ ТЕЛЕ

Моң шишмәһе һандуғастай йырсы ла һин,
Һығылма бил тал сыбыҡтай нәфис тә һин,
Аллы-гөллө гөл-сәскәләй наҙлы ла һин,
Әй илһамлы, әй хөрмәтле башҡорт теле.

Күгәреп ятҡан, Уралыңдай бай, йомарт һин,
Серле ҡамыш ҡурайындай ҡарт, олпат һин,
Күпте күргән сәсәнеңдәй, йор, зирәк һин,
Әй һөйөклө, әй ҡәҙерле башҡорт теле.

Океандарға тиңләмәйем — тәрәнһең һин,
Айға-көнгә тиңләмәйем — гүзәлһең һин,
Ҡаяларға тиңләмәйем — ғорурһың һин,
Әй хикмәтле, мәрхәмәтле башҡорт теле.

Күп быуаттар һин йырланың ҡурай моңон,
Күп быуаттар һин йырланың көрәш юлын,
Инде азат. Шат. Йырлайһың еңеү йырын,
Әй бәхетле, әй ҡәҙерле башҡорт теле.

Иң тәү миңә һин өйрәттең Ленин һүҙен,
Иң тәү миңә һин күрһәттең дуҫлыҡ юлын,
Минең өсөн һин бит йәшәү — бәхет үҙең,
Мәңге йәшә, әй һөйөклө башҡорт теле,
Атам теле, әсәм теле — минең телем.

*1960*

## РУС ТЕЛЕНӘ

Өр-яңынан тыуҙым, һине белгәс.
Күҙ күремем сикһеҙ киңәйҙе.
Донъя гүйә йөҙ ҡат иркенәйҙе,
Дуҫтар һаны меңгә күбәйҙе.

Ленин һулышын тойҙом һинең аша.
Һинән белдем даһи Пушкинде.
Шуға йөрәгемә серҙәш иттем
Һине — бөйөк, гүзәл дуҫ телде.

*1960*

## ҺАҒЫНЫУ

Иртә әле.
Мин теренкур[1] буйлап
Әкрен генә тауға үрләйем.
Туҡта, тимен, ҡаяларға баҫып
Ҡавказ матурлығын күрәйем.
Көн иҫ киткес тымыҡ.
Япраҡтарҙа
Аҡ күбектәй өрпәк ҡар ята.
Ҡырау төшкән бөгөн тау битенә.
Тәүге ҡырау быйыл был яҡта.
Бына ҡояш сыҡты. Ер йылынды.
Уяндылар йәнһеҙ ҡаялар.
Ә ағастар шунда япраҡтарын
Тамсы итеп ергә ҡоялар.
Ҡисә генә йәп-йәш, йәшел булып
Көләп торған саған, ҡайындар,
Һә тигәнсе йәй күлдәген һалып,
Шыр яланғас булып ҡалдылар.
Япраҡтары осмай, елберҙәмәй,
Тып-тып! тамып ерҙе күмделәр.
Бер ҡырауға түҙмәй, ҡарыулашмай,
Данһыҙ үлем менән үлделәр.
Ошо ваҡыт өҙөләп һағындым мин
Ҡар, буранлы Урал тауҙарын,
Күргем килде, ел-дауылда шаулап,

---

[1] Ауырыуҙар өсөн махсус юл.

Алтын япраҡтарҙың тузғаныи.
Әй Уралым, ғорур, дан Уралым,
Ерҙең күрке, йәме һин икән.
Бөйөк шағир, тиңһеҙ батырҙарға
Төйәк булыр ер ул һин икән!

*Ҡисловодск, 1955*

## ДУҪТАРҒА

Ауыр юлды бергә-бергә үттек.
Еңеүгә лә килдек күмәкләп.
Һәр аҙымда тойҙом йәнәшәмдән
Дуҫтар атлағанын тәрәкләп.
Рәхмәт һеҙгә, дуҫтар. Алыҫтан да
Яҡын булып йылы һирптегеҙ.
Беләккә көс, йөрәккә дәрт өҫтәп,
Һаман алға бергә илттегеҙ.
Илгәҙәклек минән күрмәнегеҙ,
Ҡайсаҡ хатта ауыр һулаттым.
Ә шулай ҙа, дуҫтар, ысын дуҫтар,
Мин һеҙҙе бит бик-бик яраттым.

*1958*

# ЙЫРҘАР

## ЛЕНИН, ЛЕНИН!

Бәхет таңым һинән ҡалҡты.
Ғүмер яҙын һинән таптым.
Һин азатлыҡ, һиндә шатлыҡ.
Һинән килә ергә яҡты.
Ленин, Ленин! Ленин, Ленин!

Юлдарыма булдың маяҡ.
Уйҙарыма булдың ҡанат.
Яҡтылыҡҡа, яҡшылыҡҡа
Юлды табам һиңә ҡарап.
Ленин, Ленин! Ленин, Ленин!

Һин — аҡылдың ҡаҙанышы.
Һин — хаҡлыҡтың таянысы.
Һинең исемең булған ерҙә
Булмаҫ кеше аянысы.
Ленин, Ленин! Ленин, Ленин!

Миллион йылдар шаулап үтер.
Ергә йыһан хеҙмәт итер.
Ер улдары йөрәгендә
Даның йондоҙҙарға етер.
Ленин, Ленин! Ленин, Ленин!

*1965*

## МАҠТАУ ЙЫРЛА, ШАҒИР!

Буйы талдай, йөҙө айҙай, ер һылыуы.
Йөрәккә ут ҡабындыра көләүе.
Күҙҙәренән, йөҙҙәренән балҡып тора уның
Күңелендә яҡты уйҙар йөрөүе.
Маҡтап йырла. Данға лайыҡ.
Әйҙә, шағир, маҡтау йырла һин
Эшсән ҡатынға.
Изге әсә лә ул, гүзәл эшсе лә ул,
Йән биреүсе, йәм биреүсе Ватанға.
Ауырлыҡты, ҡыйынлыҡты ул күп күрҙе.
Тау аҡтарҙы, таш күтәрҙе, ер һөрҙө.
Иленә яу, еренә дау килгән саҡта ла
Бирешмәне, бирелмәне ул, еңде.
Маҡтап йырла. Данға лайыҡ.
Әйҙә, шағир, маҡтау йырла һин
Эшсән ҡатынға.
Изге әсә лә ул, гүзәл эшсе лә ул,
Йән биреүсе, йәм биреүсе Ватанға.
Бәхетлеләр илебеҙҙең бар ҡыҙҙары,
Яҙғы ҡояш кеүек көләс йөҙҙәре.
Азат хеҙмәт, дан һәм хөрмәт юлдаш булғас уға,
Ҡыуаныслы уҙа уның көндәре.
Маҡтап йырла. Данға лайыҡ.
Әйҙә, шағир, маҡтау йырла һин
Эшсән ҡатынға.
Изге әсә лә ул, гүзәл эшсе лә ул,
Йән биреүсе, йәм биреүсе Ватанға.

*1963*

## ДАНЫ ҠАЙТТЫ

Төн ҡараһы ерҙе япты инде.
Татлы йоҡом тамам ҡасты инде.
Һөйгән йәрем китте һуғышҡа.
Юлбаҫарҙар килеп баҫты илде.

Егетем быуҙы дошман юлдарын.
Арыҫландай ярһып, ажғырып.
Ут-һөрөмдәр аша алға үтте,
Яраһынан ал эҙ ҡалдырып.

Һуңғы һулыш, һуңғы тамсы ҡанын
Бүләк итте Тыуған иленә.
Ал сәскәләр булып, ал нур бөркөп,
Даны ҡайтты һөйгән еренә.

Һәр яҙ уға арнап сәскә ата
Өй алдымда һары көнбағыш.
Көнбағыштай көнгә баға-баға,
Йөрәгемдә йәшәй был һағыш.

*1965*

## ҠАРА АЛТЫН

Был далала буран дулаған.
Был далала бүре олоған.
Был далала моң-зар таратып,
Ҡырлы ҡурай япғыҙ илаған.
Ҡара алтын ятҡан девонда.
Бәхет ятҡан ерҙең төбөндә.
Ҡәрһеҙ булған ата-бабалар,
Хәлһеҙ булған бала-сағалар,
Бәхет көтөп күктән, алланан,
Мәлһеҙ үлгән йәп-йәш аналар.
Ҡара алтын ятҡан девонда.
Бәхет ятҡан ерҙең төбөндә.
Коммунистәр килде далаға,
Ҡала һалды. Хөрмәт — девонға.
Йөрәк серен асты эсә-ер
Ҡыйыу, эшсән данлы быуынға.
Ҡара алтын атыла девондан.
Бәхет ағыла ерҙең төбөнән.
Был далала бүре оломай,
Был далала ҡурай иламай,
Был ҡалала йәйен-ҡышын да,
Бер ҡасан да ҡояш байымай.
Ҡара алтын атыла девондан.
Бәхет атыла ерҙең төбөнән.

*1957*

## ЙЫРЛАП АЛАЙЫМ ӘЛЕ

Бөгөн ҡояш та бик көләс,
Ҡар ҙа елбәҙәк кенә.
Күк тә зәңгәр. Ҡыш тимәҫһең,
Ел дә тик еләҫ кенә.
Күңелемдә йыр урғыла,
Йырлап алайым әле.
Дуҫтарымдың күҙе йондоҙ,
Биттәрендә көн уйнай.
Тыуған ерҙең йәмлелеген
Ҡарай-ҡарай күҙ туймай.
Күңелемдә йыр урғыла,
Йырлап алайым әле.
Яңы бәхет, шатлыҡ килә
Яңы йыл менән бергә.
Айға менгән, йыһан гиҙгән
Мөҡәддәс, бөйөк ергә.
Күңелемдә йыр урғыла,
Йырлап алайым әле.
Эш башҡарғас, ҡыуаныстан,
Йырлай торған йола бар.
Мин йәм табам халҡым һөйгән
Ошо матур йоланан.
Күңелемдә йыр урғыла,
Йырлап алайым әле.

*1959*

# ЙӘШЛЕК ДӘФТӘРЕНӘН

## ҺӨЙӘМ, ТИҺЕҢ

«Һөйәм,— тиһең,— янам, көйәм»,— тиһең.
Был һүҙ туҡый көн-төн ҡолаҡты.
Күрмәйһеңме,
Күңелем ҡапҡаһында
Эленеп торған алтын йоҙаҡты.
Тау бөркөтө уны биләп алып,
Ҡаяларға осоп киткән бит.
Бөтә һөйөүемде,
Көйөүемде
Үҙе менән алып киткән бит.
Күңелем бикле минең
Уны бер кем,
Бер ҡасан да ҡабат аса алмаҫ.
Йөрәгемдә ташҡан ут-ялҡынды
Унан башҡа бер кем баҫа алмаҫ.
«Һөйәм,— тиһең,— янам, көйәм»,— тиһең...
Ҡалдыр.
Онот.
Аңла: йөҙәтте.
Еңеп буламы ни
Тау бөркөтөн
Тиңдәш иткән ғорур йөрәкте?!

## ҠАЙҘА УЛ?

Ҡайҙа һин, ҡәҙерлем,
Ҡайҙа һин был көндө?
Белмәйем нисек ул
Уҙғара был төндө?
Тик беләм, ҡайҙалыр,
Мин һөйгән кеше бар.
Ҡайта алмай, килә алмай,
Данлы, ҙур эше бар.
Тау түшен бырауылап,
Ҡара алтын эҙләй ул.
Илемде, еремде
Матурлай, биҙәй ул.
Алыҫ ул. Тик күңелем
Янында гел генә.
Беләмен уның да
Уйында мин генә.
Һөйөшмәй ҡауышып
Йәшәүҙән ҡалтырап
Һөйөп тә ҡауышмау
Ғазабы татлыраҡ.

## ҮКЕНМӘЙЕМ

Күңелем минең тып-тын диңгеҙ ине.
Айҡап инден яҙғы дауылдай.
Әйтсе, йәнем, янған йөрәгемде
Алырһыңмы, һөйөп, дарыулай?
Күңелем минең ғорур һәм шат ине.
Азат ине борсоу уйҙарҙан,
Һин килдең дә ендең.
Алып киттең,
Ҡая таулы, борма юлдарҙан.
Аһ, юҡ, үкенмәйем, тау бөркөтөм,
Бәхетле мин һине һөйгәнгә.
Йөрәгемдең асыл сәскәләре
Һинең өсөн янып көйгәнгә.

## ГҮЗӘЛ ЙЫР КЕҮЕК

Һинһеҙ үткән һәр бер сәғәтем,
Зарлы, моңло, ауыр йыл кеүек.
Бергә булған сағым — йырлап бөтмәй
Өҙөлөп ҡалған гүзәл йыр кеүек.

Һинһеҙ үткән һәр бер минутым,
Баҫып алған ауыр йөк кеүек.
Бергә булған сағым —
Таң алдында
Күренеп ҡалған татлы төш кеүек.

## КИЛМӘ ИНДЕ

Өҙөлөп һөйҙөм, ҡәҙерен белмәнең.
Һағынып көттөм — һаман килмәнең.
Инде килмә, яҡын юлама,
Ҡулың һалма йөрәк ярама.

Теләмәймен төнгө ҡараҡ кеүек,
Ҡурҡып, өркөп, урлап һөйөүҙе.
Унан көндәр буйы япа-яңғыҙ,
Һине уйлап, янып көйөүҙе.

Һөйөр булһаң, һөй һин, йәшермәй,
Атылып кил, яҙғы йәшендәй.
Ҡурҡаҡ булһаң — миңә тиң түгел
Ундайҙарҙы һөймәй был күңел.

## НИҢӘ?

Ниңә күрҙем, ниңә яраттым мин
Ниңә күңелемде яуланың?
Ниңә һинең серле күҙҙәреңдән
Күҙҙәремде ала алманым?

Ниңә килмәнең һин иртәрәк,
Ниңә һине күптән күрмәнем.
Ғүмеремдең наҙлы йылдарын
Ниңә һинең менән булмәнем?

Күпме тыям бәйһеҙ йөрәкте,
Ярамай, ҡуй, уны һөймә, тип.
Алыҫтағы ҡояш йылыта алмай
Уның өсөн янма, көймә, тип.

Тик ҡайҙа һуң!..
Һөйгән йөрәктәрҙе
Айыра торған кәртә ерҙә юҡ.
Һөйөү менән йәшәү икеһе лә
Үлемһеҙ һәм азат берҙәй үк.

## БУЛМАҺА

Йәнһеҙ булыр ине был ғүмер,
Һөйөү менән йөрәк тулмаһа.
Айырылышыу,
Өҙөлөп, һағынып көтөү,
Ҡөлөп ҡаршы алыу булмаһа.

## ХӘТЕРЕМДӘ

Хәтеремдә, ул көн сыуаҡ ине.
Күкрәп үҫкәйнеләр сәскәләр.
Шаян ҡараштарың йөрәгемә
Мөхәббәттән гөлдәр сәстеләр.

Гөлдәр мәңгелеккә тамыр йәйҙе.
Көлә, йырлай, ярһып үҫтеләр.
Тик ниңә һуң ул бәхетле көндәр
Ниңә былай бик тиҙ үттеләр?!

## БОШОНМА

Ни булды һиңә, бөркөтөм,
Күҙҙәрең талған бөгөн.
Айырылыу һағышы ҡаплап
Алдымы күңел күгең?
Бошонма, һөйөклөм, шат бул,
Яҙғы көндәй көлөп кил.
Төндәр буйы йоҡламамын,
Һин ҡайтҡанды көтөп мин.

# БАҒЫШЛАУҘАР

## ҒҮМЕР

*РСФСР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы*
*Хәлимә апай Ҡорбанаеваға*

Ғүмер — югәнһеҙ ат.
Иллене лә,
Алтмышты ла ҡыуып уҙа ул.
Ҡыш та, көҙ ҙә, яҙ ҙа тотҡар түгел,
Упҡындар ҙа уға — түтә юл.
Ҡем туҡтатыр уны?
Елһен әйҙә,
Йәмләп Тыуған илдең ер, күген.
Һуңғы сәғәтте лә юл өҫтөндә
Ҡаршылаһын, елеп, тир түгеп.

*1960*

## Ҡыш

*Ғәзизгә*

Нисә тапҡыр япраҡ-ҡарҙар яуа.
Нисә тапҡыр томһа ҡыш килә.
Нисә тапҡыр ҡояш, ситкә ҡасып,
Тау артынан ҡырыҫ һирпелә.

Ә мин һаман дуҫмын ошо ҡышҡа.
Һаман ул тип өҙөләм, йән атам.
Ул ни хәтле томһа, ҡырыҫ булһа,
Мин шул хәтле өҙөләм, йән атам.

Сөнки тоям һалҡын ҡыш күкрәге
Вулкандарҙан ҡыҙыу икәнен.
Сөнки тоям был күкрәктә изге,
Саф теләкле йөрәк типкәнен.

*1960*

# ИЖАД — БӘХЕТ

*Ғ. Туҡайға*

*Аҡ кәрәк тип, пак кәрәк тип,*
*Күпме күҙ йәш түкмәнем.*
*Көрләнеп бөттөм үҙем,*
*Донъяны паклай алманым.*

*Ғ. Туҡай.*

Һин бәхетле булдың: томһа күкте
Ярып үткән метеор шикелле,
Балҡып үҙҙың.
Бөтә ергә һинән
Яҡты нурҙар, гөлдәр һибелде.
Һаман сәскә ата ошо гөлдәр
Һаман балҡый ошо саф нурҙар.
Һаман яңғырай моңло сазың өнө —
Берсә уйсан, берсә шат йырҙар.
Улар тынмаç. Һаман яҡтылыҡҡа,
Яҡшылыҡҡа өндәп барырҙар.
Һәр замандың замандашы булып,
Көрәштәше булып ҡалырҙар.
Юлың ауыр булды.
Мещандарҙың
Һимеҙ бәхетен һин үҙ итмәнең.
Ялағайлыҡ, шымабайлыҡ менән
Таҡыр юлдан шыуып үтмәнең.
Ауыр булды юлың.
Ләкин керһеҙ.
Һин бәхетле булдың, бәхетле —
Һин татының изге ижад биргән,
Тоғро хеҙмәт биргән бәхетте!

*1961*

## ЯҘҒЫ ЙЫР

*Ш. Бабичкә*

*Йырҙар яҙам тауҙың күкрәгендә,*
*Тау күкрәге серем белһен тип...*

*Ш. Бабич*

Яҙғы йырҙай ярһып тыуҙың ергә,
Яҙғы йырҙай ярһып йәшәнең.
Ҡабатланмаҫ яҙғы гүзәл бер йыр,
Моңло бер йыр булды йәшәүең.

Йырҙар яҙҙың тауҙың күкрәгендә,
Яҙ елдәре иҫмәй тындылар.
Йыр юлына айҙан, шишмәләрҙән
Саф көмөштәй сыңдар тамдылар.

Йырҙар яҙҙың тауҙың күкрәгендә,
Яҙ ҡоштары ҡушылып йырланы.
Гөлдәр, хайран ҡалып, һығыла-бөгөлә,
Илай-көлә йырҙы тыңланы.

Йырҙар яҙҙың тауҙың күкрәгендә,
Тауҙы моңдаш, серҙәш иттең һин.
Тау күкрәген тиңһеҙ матурлыҡҡа,
Йырға, моңға күмеп киттең һин.

Йырҙар яҙҙың тауҙың күкрәгендә,
Яҙ елдәре отоп алдылар.
Шул йырҙар бит һандуғастар моңо,
Гөлдәр йәме булып ҡалдылар.

Яҙғы йырҙай ярһып тыуҙың ергә,
Яҙғы йырҙай ярһып йәшәнең.
Ҡабатланмаҫ яҙғы гүзәл бер йыр,
Моңло бер йыр булды йәшәүең.

*1960*

## ХАЛҠЫҢ ЯНЬА — ЯНДЫҢ БЕРГӘ

*М. Ғафури иҫтәлегенә*

Майлы күҙҙәр, татлы һүҙҙәр,
Баллы йөҙҙәр күҙләмәнең.
Үҙең өсөн йылы оя,
Айырым бәхет эҙләмәнең.
Халҡың янһа — яндың бергә,
Халҡың көйһә — көйҙөң бергә,
Халҡың менән йәшәүгә лә,
Үлемгә лә барҙың бергә.
Ул асыҡһа — асыҡтың һин,
Ул ҡағылһа — ҡағылдың һин,
Уның менән бергә-бергә
Ауырлыҡтан арындың һин.
Ҡыҙыл байраҡ тотоп ҡулға,
Янып-балҡып ҡыҙыл нурҙа
Йырың бара һаман алда:
— Әйҙә, эшсе, алға, алға!..

*1960*

## ЯҢЫ ЙЫЛ ҠОТЛАУЫ

*Дуҫҡа*

Йылдар ҡыуанысҡа йомарт булмай.
Уңыштар ҙа ятмай һибелеп.
Тик шуныһы һәйбәт: өмөт бик бай.
Өмөт йәшәй янып, кирелеп.
Һәм шуныһы һәйбәт: күңелдәр киң.
Дуҫтар йомарт изге теләккә.
Һәм шул йылы бирә йөрәккә,
Шунан ҡеүәт инә беләккә.
Шуға мин дә ысын йөрәктән:
— Ҡотло булһын,— тимен,— Яңы йыл!
Бәхет былбылының иң гүзәле
Һеҙҙең йортҡа ҡунһын ошо йыл.
Миҙгелдәргә һис тә баш бирмәгән
Оло бәхет килһен ошо йыл!

*1963*

## УЛЫМА

Ун алты йәш тулды улыма.
Паспорт алды бөгөн ҡулына.
Ҙур ышаныс менән аяҡ баҫты
Ғүмеренең оло юлына.
Ҙурайҙы инде улым, ҙурайҙы,
Икеләтә бейек үҙемдән.
Бәхете лә, аҡылы ла шулай
Булһын ине, тим мин күңелдән.
Егет кешеләргә етмеш төрлө
Һөнәр ҙә аҙ, тиҙәр борондан.
Бул һин, улым, ысын егет кеше,
Бөтә эш тә килһен ҡулыңдан!
Бул һин, улым, батыр, кыйыу, ғәҙел.
Яҡла яҡшылыҡты, сафлыҡты.
Күңелеңдән һис кем, һис ҡасан да
Юя алмаһын изге хаҡлыҡты.
Аңла, йәшәү һәйбәт, тормошоңдо
Тотош бирһәң илгә, халыҡҡа.
«Батыр үҙе үлһә лә, исеме ҡала!»—
Тип йырлайҙар, улым, халыҡта.

*1953*

## МОҢ ДАРЬЯҺЫ

*З. Исмәғилевкә*

Ғүмер ҡыҫҡа, тип һис көйөнмәйек.
Оҙайтайыҡ изге эш менән.
Иле, халҡы өсөн янған ғүмер
Иҫәпләнмәй үткән йәш менән.

Моң дарьяһы иркен күкрәгендә,
Халҡыңа хас дарман ташҡыны.
Һин йырлайһың, Урал былбылындай,
Талыу белмәй, ярһып, ашҡынып.

Һөйгән халҡың ғорурлығы булып,
Ижад дарьяң ҡайнай, урғыла.
Һәр һулышта, ил моңона үрелеп,
Ғорур, сая, гүзәл йыр тыуа.

Йырлап йәшә мәңге, янып йәшә.
Яңғырат Урал, Иҙел буйҙарын.
Тының иркен һинең, моңоң иркен,
Шишмәләй саф, көләс уйҙарың.

*1967*

## УРАП ҮТҺЕН

*Фатима Хәмит ҡыҙы Мостафинаға*

*Кем халыҡҡа иң күп хеҙмәт*
*итә—шул иң һәйбәт кеше.*
*Алишер Науаи*

Әле ҡасан ғына трибунала
Комсомолка сағың күргәйнем.
Һүрелмәҫ дәрт, һүнмәҫ осҡон менән
Балҡып яна ине күҙҙәрең.
Әле илле?!.
Һис ышанғы килмәй.
Ышанмайыҡ, дуҫҡай, Фатима.
Кеше ҡартайырмы, бөтә ғүмере
Хеҙмәт булғас тыуған халҡына.
Йәшлек дауам итә хеҙмәттә.
Йылдар менән сикләү — иҫәрлек.
Һин бәхетле: эшең-хеҙмәтең
Биш ғүмергә торош итерлек.
Һиңә илле!..
Ә һин һаман да йәш.
Дәрт-дарманың тау-таш күтәрер.
Күрәһең, иң һәйбәт кешеләрҙе
Ҡартлыҡ шулай урап үтәлер.
Урап үтһен.
Ике-өс илле етһен.
Һин һаман да сафта бар, әйҙә.
Бөйөк илдең ғорур, гүзәл ҡыҙы,
Байраҡсыбыҙ булып ҡал, әйҙә.

*1964*

4 Заказ 536

# ТӨРТМӘ ҺҮҘ ҺӘМ МӘҪӘЛДӘР

## КӨНСӨ ДУҪКА

Донъя киңәйһә лә, тар күңелең
Ҡатып ҡалды һаман бөрөшөп.
Сүпте сүмәләләп, тырнаҡ керен
Соҡоп йөрөү һаман бар эшең.
Бик ҡыйындыр һиңә, ҡуралмағас
Ҡыуанысын яҡты донъяның.
Тоя алмағас әрһеҙ әпкәләйҙәр,
Ялағайҙар ваҡыты уҙғанын.
Нур тиҙлеге менән кеше үҫә,
Баш әйләнгес киңлек, яҡтылыҡ.
Шундай саҡта һис тә ғәжәп түгел,
Ҡай берәүҙәр ҡалһа ҡаҡлығып.
Ғәжәп түгел. Һәр кем оса алмай,—
Ҡанатһыҙҙар йәшәй, бар әле.
Ҡайһы берәүҙәрҙең күҙ күреме,
Мейес мөрйәһендәй, тар әле.
Һиңә тарһынырға?!
Оса алмаһаң,
Ҡыуана бел кеше осҡанға.
Ҡем ғәйепле һәр бер боролошта
Һин, тайпылып, ситкә баҫҡанға?!

*1961*

## ТҮРӘ

Ике битен айҙай күҙлек ҡаплаған.
Ҡорһаҡ әле тауҙай булып ҡалҡмаған.
Шулай ҙа тоя ул үҙен мөһабәт,
Булһа ла буйға тап баш бармаҡ һымаҡ.

Сөнки ул бит инде шәп ир — ҙур түрә.
Бар аҡылын бүлеп кешегә бирә.
Өйрәтә намыҫлы, тоғро булырға,
Самалы булһа ла был яҡ үҙендә.

Ни әйтһәң дә, һүҙгә оҫта был түрә.
Тик был һүҙҙән артель зарар күп күрә:
Итекселәр инде итек текмәйҙәр,
Был түрәне йөпләйҙәр ҙә йөпләйҙәр.

*1957*

## БУШ ҠЫУЫҠ

Дан тигәнең була, ти, ҡайсаҡ ҡыуыҡ.
Тышы ялтыр, эсе, ти, сәпсим һыуыҡ.
Йылы тындан ғына имеш, йылына.
Йылы тын һорап шуға, ти, ялына.

Өрмәһәң, һауаға үрләп осмай, ти.
Түбәндә йәшәүҙе һөймәй бушлай, ти.
Әйтә, имеш, ти, мин түгел селәүсен.
Селәүсендәр генә ерҙе биләүсән.

Дан тигәнең була, ти, ҡайсаҡ ҡыуыҡ,
Тышы ялтыр, эсе, ти, сеп-сей, һыуыҡ.
Ҡәрәк, имеш, ти, йылы тын өрөргә.
Өйрәнгән, ти, йылы тында йөрөргә.

Өрһәң, ти, ул сама белмәй ҡабара.
Өҫтәп-өҫтәп йылы һорай, ялбара.
Үргә менгәс, эс кәпәйтеп ебәрә.
«Мин күктә! — ти. — Аҫта бөтә селбәрә!

Һай, йәшәү! — ти. — Үрҙә еңел йөҙөүе,
Селбәрәнең түбәһендә йөрөүе.
Өрөгөҙсө, тағы бейек менәйем.
Селбәрәләр менән серҙе өҙәйем».

Әй, өрәләр. Ҡонһоҙ ҡыуыҡ ҡабара.
Һыя алмай, ти, үҙенә тиң самаға.
Ахыр шартлай — өрмөш һауа түгелә.
Буш ҡыуыҡтан ҡалмай осҡон, көлө лә.

*1967*

## ӨЙЛӘНЕҮ ТҮГЕЛ — ҺӨЙЛӘНЕҮ

(Туҡайға эйәреп)

— Күҙем төштө бер матурға,
Ҡашы ураҡ, бите ай.
Ғишыҡ тотоу ауыр икән.
Йөрәгем яна, ай-һай!..
Гөлбаҙыян, баҙырайып,
Килеп баҫты ҡаршыма.
Быҕаса күргән-белгәндең
Бәреп йыҡты барыһын да.
Баҙыянды бисәлеккә
Алмаҡсы булдым әле.
Кеше кеүек, донъя көтөп
Тормаҡсы булдым әле.

— Улай икән. Өйлән, дуҫҡай,
Өйләнер сағың ғына.
Йәшең ҡырҡта, эшең ходта,
Аҡылың сабыр ғына.

— Гөлбаҙыян... Ҡалас кеүек
Ҡабарып тора үҙе,
Тулған айҙай, мыймылдашып,
Нур сәсеп тора йөҙө.
Ул йөрөшө, ул торошо —
Бөтәһе лә килешле.
Өйләнәйемсе, ҡаҙалғыр!..
Булайымсы кәләшле.

— Өйлән, дуҫҡай. Кәләш алыу
Борон-борондан ҡалған.

Ата-бабаң етмештә лә
Ҡайсаҡ йәш кәләш алған...

— Уныһы хаҡ. Ни әйтһәң дә,
Үҙ бисәң булһа — яҡшы.
Эштән ҡайтыуыңа тәмләп
Бешереп ҡуйһа ашты.
Табаҡ-һауыт, иҙән-миҙән
Йыуылған булһа һәр саҡ.
Ирекәйем, тип, йәнкәйем, тип,
Һөйөп тә ҡуйһа ҡайсаҡ...
Ингән-сыҡҡанда, өҫтөңдә
Ҡейҙереп-һалып торһа.
Йоҡо алдынан аяғыңды
Йылы һыу менән йыуһа!..
Ҡалай ҙур бәхет!.. Өйләнәм.
Бисәле булыу һәйбәт.
Бисәһеҙ йәшәү шәп, тиҙәр.
Буш һүҙ был! Төптө ғәйбәт!

— Дөрөҫ, дуҫҡай, өйлән әле.
Туй яһайыҡ шәп итеп;
Балы бөтһә, даны мәңге
Иҫтә ҡалырлыҡ итеп.

— Туй тиһеңме?!.
Баҙыяндың
Эш хаҡы нисек икән?
Туй расходын үҙ өҫтөнә
Күтәрә алырмы икән?!
Өйләнеүе өйләнеү ҙә...
Бөлдөрөп ташламаҫмы?
Шоколад, туфли-муфли, тип
Йөҙәтә башламаҫмы?
Ысынлап та, һорап тормай
Бала ла табып ҡуйһа?!.
Тып-тыныс, рәхәт өйөңә
Мәшәҡәт, сыр-сыу тулһа?
Берәү-икәү, өсәү-дүртәү,
Бишәү булһа балалар.

Өйөндөң үрен дә түрен
Улар биләп алһалар?!
Ашарға, тип, кейергә, тип,
Һауһалар бар аҡсаңды.
Төшөңдә лә инмәй башлар
Ҡаҙы-яллы аштарың!..
Бисә лә кеше бит, тиҙәр.
Арый башланым, тиһә.
Ике кәмә һөйрәп булмай.
Эште ташлайым, тиһә?!
Мин нишләрмен?..

— Өйләнмә һис.
Тып-тыныс ҡалһын өйөң.
Йәшә, йән йылыһын тоймай,
Ҡөҙәндәй һалҡын көйө.

— Нимә тиһең?
— Өйләнмә,— тим.
Тороп ҡалһын Баҙыян.
Белмәҫһең дә. Яңғыҙ башҡа
Мул да тейер ҡаҙы-ял.
Өйләнмә һис. Баҙыян да
Күп бәләнән ҡотолор.
Юҡһа «ир» тип, аҡса тоғон
Ҡосаҡлап ул отолор.
— Нимә тиһең?!
— Өйләнмә,— тим.
— Дөрөҫ әйттең,— кәрәкмәй.
Яңғыҙ тормош — һыйлы тормош.
Күптәргә ул эләкмәй.
Шулай бит, ә?!
— Ха-ха-ха!..

*1948*

## ЯҢҒЫҘ СЫЙЫРСЫҠ ЯҘ КИЛТЕРМӘЙ

*Әкиәт-мәҫәл*

Ҡояш көлә. Еләҫ елдәр
Үтә, гөл сәсен тарап.
Ә мин тирәккә һөйәлеп,
Торам ҡоштарға ҡарап.
Уҡа селтәргә төрөнгән
Муйыл да шымып тыңлай.
Ботағында бер сыйырсыҡ
Эй, йырлай, һөйләй, тынмай.
Башҡа ҡоштар һүҙһеҙ ҡалып
Ҡарап торалар уға.
Ә сыйырсыҡ шундай ғорур,
Маҡтана, күкрәк һуға:
— Мин,— ти,— ерҙә иң һылыу ҡош,
Иң оҫта, зирәк йырсы.
Миңә тиңләшерҙәй бүтән
Был ерҙә һис ҡош юҡсы.
Ҡеше оя яһап мине
Үҙе янында тота.
Йә, кемегеҙ минең хәтле
Тауыштарҙы тиҙ ота?
Миңә бер ни тормай бынау
Һандуғас булып һайрау.
Төрлөсә ҡыланып йырлап,
Ҡешене арбап ярау.
— Хаҡ һүҙ! — тине ҡарға, тороп, —
Һин бөйөк ҡош донъяла.
Һинең алдыңда һайрарға
Һандуғас та ояла.
— Шулай, шулай,— тине сәүкә,—
Һиңә тиң ҡош ерҙә юҡ.

Буйың, һының, күҙең, ҡашың,
Өнөң матур бирҙәй үк.
— Баҡ, баҡ! Шәп!.. Шәп йырсы!— тип
Һаҙҙан ҡарай әрмәнде.
— Тиң юҡ! Юҡ!— тип тумыртҡа ла,
Ҡайыры суҡып, һәрмәнде.
— Һеҙ!.. Һеҙ!..— ти серәкәйҙәр,—
Һеҙ генә шәп, гүзәл ҡош!
Һандуғас шәп йырсы, тиҙәр,
Был бит ялған!
Был бит буш!..
— Шыҡырыҡ!.. Шыҡырыҡ!..— ти
һайыҫҡан, —
Фу, һандуғас нимә ул?!
Сыйырсыҡ ул меҫкенкәйҙе,
Бер һыҙғырһа, еңә ул...
Ошо ваҡыт, эсе бошоп,
Беснәк һайрап ебәрҙе.
Сыйырсыҡты түгел, яҙҙы
Маҡтап әйтте хәбәрҙе.
Быны ишетеп, сыйырсыҡ
Асыуланды беснәккә.
Һәм ҡысҡырҙы: — Эй, ул йолҡош!
Нисек ҡыя, нисек, йә?!
Белмәйме ни, бында мин бар!
Мин бит яҙҙың батшаһы!
Меҫкен беснәккә ташланды
Һандуғастан башҡаһы.
— Йырламаһын!
Уға бында
Бысҡылдарға ни ҡалған?!
Рөхсәт алғанмы йырларға
Сыйырсыҡтан ул алдан?!
Бахыр беснәк, башын баҫып,
Бойоғоп, тынып ҡалды.
Әйтерһең, телен сыйырсыҡ
Семтеп, өҙөп алды.
Ошонда теге суҡ муйыл
Әсенеп телгә килде:
— Ниңә тыяһығыҙ уны?
Йырлаһын ул да,— тине,—

Беснәк яҙға дан йырларға
Сыйырсыҡтан хаҡлыраҡ.
Ул бит бында ҡыш уҙғарҙы,
Өшөп, туңып, ҡалтырап.
Сеjjә һыуығында үлеп,
Ауған дуҫын күрҙе ул.
Ҡар баҫҡан, туң ер өҫтөндә
Ас интегеп йөрөнө ул.
Минең тамырымды ҡорттан
Ул иң башлап таҙартты.
Шуға иркенләп бына мин
Энйе сәскәләр аттым.
Күпте кисергәс тамағы,
Дөрөҫ, бер аҙ ҡарлыҡҡан.
Шулай ҙа дан өсөн түгел,
Йырлай ысын шатлыҡтан.
— Дөрөҫ,— тип күтәреп алды
Муйыл һүҙен һандуғас.—
Әйҙә, беснәк дуҫ, йырлайыҡ,
Йыр көслө, бергә булғас.
Бер сыйырсыҡ һайрау менән
Яҙ йәмле буламы ни?
Ысын йырсының күңеле
Шулай тар буламы ни?
Һәм һандуғас йыр башланы,
Уға ҡушылды беснәк.
Туғай уянды, шауланы,
Бөтә ҡош ҡушылып киткәс.
Йырланы улар бергәләп,
Күмәкләшеп яҙға дан.
Сыйырсыҡ ҡалды ботаҡта
Япа-яңғыҙ яңынан.
Кинәнә суҡ муйыл, көлә:
— Сыйырсыҡ,— ти,— уйлана!..
Күмәк йырға тиң булырҙай
Йыр бармы ни донъяла!?

*1956*

# ПОЭМАЛАР



# Гөльямал

Шиғри повесть

## I

### ТЫШТА БУРАН ШАША...

... Бала сағын, моңһоу йәшлек көнөн
Иҫкә алырға ул яратмай.
Ләкин ҡайсаҡ уға, ҡарышҡандай,
Шул көндәрҙе хәтер ҡабатлай.
Ауыр иҫтәлекле был үткәндәр
Бер-бер артлы килә теҙелеп,
Гүйә өр-яңынан кисергәндәй,
Йөрәк һыҙлап китә, өҙөлөп.
Ҡайсаҡ күҙ алдына килеп баҫа
Иҫтә ҡалған иҫке бер ауыл.
Кеше күргән ауыр ғазаптарҙың
Ҙур шаһите булып тора ул.
Бында рәхәт йәшәй тик Һарун бай.
Иркен ҡырҙар барыһы байҙыҡы.
Көтөү-көтөү малдар, яҡшы йорттар,
Ак тирмәләр — барыһы уныҡы.
«Ҡарун», тиҙәр уны. Был тирәлә
Ҡомһоҙлоҡта даны таралған.
Шул бит Йомағолдоң ҡаҡ тәненә
Талпан булып күптән ҡаҙалған.
Шуға Йомағолдоң, тырышһа ла,
Тырышмаһа ла, эше уңманы.
Өйөр йылҡы көттө. Тик үҙенең
Менеп сабыр аты булманы.
Бар байлығы уның — ике ҡулы,
Уны ла ул һатты был байға,
Көнөн-төнөн тырышып эшләне ул,
Килмәҫме, тип тормош бер яйға.
Тик Һарун бай һаман байый барҙы,

Йомағолдан йөктө тарттырып.
«Елкә менән ерҙәр һеперһәң дә,
Булмай икән бәхет арттырып...»
Төнгө дауыл олой. Йомағолдоң
Ҡескәй өйө ергә һығыла,
Ҡыйыҡ һаламынан ҡурай яһап,
Ғинуар еле сеңләй, һыҙғыра.
Һуҡыр лампа елбер-елбер итә:
«Инде мин дә тиҙҙән һүнәм»,— тип,
Һөрөм баҫҡан өйҙө бөтөнләйгә
Ҡараңғыға хәҙер күмәм, тип.
Ҡендек әбейе, усаҡ яндырам, тип
Сей утынға өф-өф өрөнә.
Төҫө ҡасҡан, һылыу йәп-йәш әсә
Һөйөнәһе сакта — көйөнә:
— Йә хоҙайым,— ти ул,— тағы бер ҡыҙ!
Исмаһам, бер ул да бирмәнең!
Ниңә инде ҡартлыҡ көнөбөҙҙә
Бер ярҙамсы булһын тимәнең?..
Тышта буран шаша. Әсе елдәр
Ҡайғы йырлай, өйҙө әйләнеп,
Бәпес илай, гүйә үҙен шулай
Көйөп ҡаршылауға ғәрләнеп.

### КҮҘ ТЕЙМӘҺЕН ҺЫЛЫУҒА

Гөльямалҡай тыуған был көндән һуң
Инде байтаҡ һыуҙар аҡтылар,
Ҡара ерҙең өҫтөн ап-аҡ ҡарҙар
Ун алтынсы тапҡыр яптылар.
Инде ул ҙур.
Һыуҙар ташый хәҙер
Һәр таң һайын алыҫ шишмәнән.
Уның етеҙлеген, матурлығын
Күреп кемдең иҫе китмәгән!
Бешеп еткән тау сейәһеме ни,
Биттәрендә алһыу нур яна,
Ҡара күҙе ҡыйғас ҡаш аҫтынан
Өмөт менән ҡарай донъяға.
Оҙон ҡара ебәк толомдарын

Елберҙәтеп талғын ел тарай.
Ғәйфи тигән егет күҙен алмай,
Үткән-һүткән һайын гел ҡарай?
Ә ул һыуҙар ташый.
Югергәндә,
Ҡертләп, уйылып ята аҡ ҡарҙар.
Нисек югермәһен,
Ярҙам кәрәк,
Ата-әсәһе ярлы һәм ҡарттар.
Уйнай-көлә һәр таң һыуҙар ташый,
Толомдарын һөйөп ел тарай,
Әсә йырлай: «...бәхетең булмағас,
Байға хеҙмәт итеп кем ярай?..»
Гөльямал шул әле моң-зар белмәй,
Ул шат: ул бит инде ҙур үҫте.
Әсәһенең ҡарт ҡулынан алды
Үҙ көсөнән килгән бар эште.
Тышта һалҡын. Итек үксәһенә
Суҡмарланып ялтыр боҙ ҡата.
Йыртыҡ бишмәт үтә нәфис тәнде
Әсе елдәр ҡаға, ҡаҡшата.
Ә Гөльямал, әйтерһең дә, туймай,
Тағы китә алыҫ шишмәгә.
Йөрәгендә уның яҙ йылыһы,
Боҙ ҡатһа ла тишек үксәгә.

## КӨТ, ҺЫЛЫУЫМ...

Ғәйфи ҡыйыу егет. Үҙе эшсән.
Ауыр эштәр ҡулын талдырмай,
Бер уралтып ҡурай уйнап ҡуйһа,
Ҡемдәрҙе һуң хайран ҡалдырмай.
Ауылдағы бик күп һылыу ҡыҙҙар
Уның өсөн яна, ярата.
Ә Ғәйфи тик һөйә Гөльямалды,
Уның өсөн генә йән ата.
Һарун байға эшләп,
Тireҫ түгеп,
Бесән ташып үтә көндәре.
Һөйөү ялҡынында ғазапланып,
Янып-көйөп үтә төндәре.

Ҡолонсаҡтай уйнаҡ, зифа буйлы
Гөльямалы уҙған сағында,
Уның моңһоу ҡара күҙҙәрендә
Һағыш ҡатнаш һөйөү сағыла.
Күҙен мөлдөрәтеп, Гөльямалдың
Баҫҡан юлдарына ҡарай ҙа,
Уға йөрәгенең йәшерен серен
Сисер көнөн айлап һанай ҙа:
«Көт, һылыуым,— ти ул,—
Ҡыш та үтер,
Иҙел һыуы боҙҙан әрселер,
Күкһел томан баҫҡан күк таллыҡта
Һандуғастар һайрар, яҙ көлөр.
Ошо саҡта мин дә йөрәгемдең
Йәшерен серен һиңә асырмын,
Һөйөр булһаң, һине ятҡа бирмәм,
Бик булмаһа, алып ҡасырмын...»
Тик кем белһен ярлы йөрәгендә
Ниндәй ярһыу хистәр барлығын,
Нисек уға ялсы яҙмышының
Зиндан һымаҡ томһа, тарлығын.
Ул өҙөлөп һөйә. Тик был хисен
Йәшергән ул йөрәк түренә.
Ә Гөльямал йәш шул.
Бер ни белмәй,
Әллә юрый моңһоҙ күренә.
Яҙ ҙа етте.
Ләкин Ғәйфи уға
Аса алмай һаман йөрәген,
Бына тигән егет тиһәләр ҙә,
Ҡыйыулығы етмәй, күрәһең.
Үҙе һаман шул турала уйлай,
— Әйтәмен,— ти,— бөгөн кис еткәс,
Тик ниңә һуң бөтә һөйләр һүҙе
Тарала ла китә, ул килгәс?..
Ошо хаҡта зарығып уйлай-уйлай,
Ситән урә ине Ғәйфулла,
Гөльямалы югереп килеп сыҡты:
— Өйҙә икәнһең дә, уф, алла!
Ғәйфи ағай,
Утын ярып бирсе,

Һарун байҙар ҡунаҡ саҡыра.
Әсәйемә аш-һыу бешерергә
Мин дә булышайым саҡ ҡына.
— Ҡемдәр килә икән?
— Белмәйемсе...
Туй була, тип әбей һөйләнә...
— Ниндәй туй, ти?!
Әллә Хәсәншаһы
Берәй ҡыҙға микән өйләнә?
— Ҡитсе, булмаҫ, уға кем барһын, ти?
— Улай тимә, һылыу, ышанма!..
— Ҡуйсы, Ғәйфи ағай, бушты уйлап,
Эскәйеңде юҡҡа бошорма!
Беләһеңме, бөгөн аулаҡ ашҡа
Йәштәр йыйыла. Әйҙә, барайыҡ.
Ҡурай уйнап, шул тилене бейетеп,
Ҡәмит яһап көлөп алайыҡ.
Ғәйфи ағай, ниңә бөгөн һинең
Күҙҙәреңдә ҡайғы сағыла?
Миңә көләс күҙҙәр оҡшай ине,
Элек,
Бәләкәйерәк сағымда...
— Гөльямалым, һылыуым, күбәләгем,
Ниңә ҡайғы булһын күҙемдә?
Һин барында тирә-яғым сәскә,
Ҡояш балҡый күңел күгемдә...
— Ғәйфи ағай, тиҙ яр утындарҙы,
Әсәйемә һүҙ-ни теймәһен.
Күрәһеңме, ҡарун сығып килә,
Эшләмәйҙәр былар тимәһен...—
Утындарҙы йәһәт күтәрә лә
Ул югерә аш-һыу өйөнә,
Ғәйфи, ҡарап уның юлдарына,
Бер һөйөнә, берсә көйөнә.
«Их, был тормош,
Их, был ярлы тормош,
Юлдарыма булды тотҡарлыҡ.
Ҡеше тупһаһынан, һылыу, һине
Ала алһам ине ҡотҡарып.
Ләкин нисек?
Ҡайҙа ундай юлдар?

Ярлы ҡулынан һуң ни килә?
Байлыҡ менән алдыҡ ҡаршыһында
Аҙмы ғорур баштар эйелә...»

Ошо ваҡыт, мыҫҡыл иткән кеүек,
Яңғырап китте бер йыр ҡолаҡта.
«Боронғолар, минән көлгән һымаҡ,
Йыр сығарған икән был хаҡта:
— Ай-һай, һай-һай,
Атаһына атың юҡ,
Әсәһенә туның юҡ,
Бер һалмалыҡ он тапмағас,
Ҡәләш алыр хәлең юҡ!..»

### «ИҪӘР БУЛҺА НИ ҺУҢ?..»

Ғәйфи батрак менән Гөльямалдың
Һөйләшеүен күргәс, Һарун бай
Көнләшеүҙән ҡалтыранып китте,
Аҫау айғыр — ҡара бурылдай.
«Был хәйерселәргә, хоҙай, ниңә
Матурлыҡты бирҙең мул итеп?
Ниңә минең яңғыҙ улымды ла
Ошо тиклем әҙәм хуры иттең?
Улар был арала йыш осраша,
Күрәм, Ғәйфи ғашиҡ булған ул.
Туҡта, ҡустым!
Һарун бай барында
Бәхет һеҙҙән ҡаса торған ул...»
Өй алдында аяҡ килеп баҫып,
Ул маһайып шулай уйланды:
«Иҫәр булһа ни һуң,
Байлығы бар!
Етәр, бығаса күп һайландым...
Шайтан алмаштырған, алйот, тиҙәр,
Һарун байҙың берҙән-бер улы,
Ҡамыт аяҡ, иләк битле булған,
Был, моғайын, гонаһ шомлоғо?!
Яуызлығы өсөн Һарун байға
Хоҙай был ғәрипте биргәндер,
Тиҙәр. Туҡта, һеҙгә күрһәтәйем!..»

Тип Һарун бай әсе тиргәнде.
Һәм саҡырып шунда Ғәйфиҙе:
— Ат ек!— тине,— бурыл айғырҙы.
Хәсәншама бөгөн кәләш алам,
Тиҙ алып кил мулла ағайҙы.—
Ғәйфи баҫҡан урын, әйтерһең дә,
Төшөп китте ҡапыл убылып,
Гүйә ҡара упҡын йотоп алды,
Иге-сиге бөттө уйының.
«Ниндәй кәләш?
Ҡемде был иҫәргә
Риза булып бирер кешеләр?..
Хәйер,
Аҡса менән алдыҡ барҙа,
Ниҙәр ҡылмай уның ишеләр...
Ах Гөльямал, әллә был ҡоҙғондон
Яуыз күҙе һиңә төштөмө?
Ни уйлайым, нимә ишетәм мин,
Өнөммө был, әллә төшөммө?
Юҡ, юҡ, булмаҫ...»
Ғәйфи ҡуҙғала алмай,
Ҡатып ҡалды баҫҡан урында.
Ә Һарун бай зәһәр көлөп ҡуйҙы:
«Тоҙ һиптемме яра урынға?!»

Ғәйфи киткәс, Һарун Йомағолдо
Саҡырып алды үҙе янына.
Һәм белдерҙе: килен итәмен, тип
Гөльямалды мин үҙ улыма...

Был көтмәгән хәбәр Йомағолға
Ағыулы уҡ кеүек сәнселде.
Ҡыҙын ҡоҙғондарға ырғытҡандай,
Йөрәк өҙгөләнде, әсенде.
Башын баҫып, хәлһеҙ аяҡтарын
Көскә һөйрәп, урам буйынан
Ҡайтып китте, гүйә ер һығылды
Йомағолдоң ауыр уйынан.
Әсә менән ата илаштылар.
Юл юҡ ине йырып үтерлек.
«Алма кеүек ҡыҙыбыҙҙы ошо
Алйот өсөнмө ни үҫтерҙек?..»

## УНЫ КӨТТӨ, УНЫ ЭҘЛӘНЕ...

Ғәйфи уйлағанса, Гөльямалы
Уйнап-көлә алманы яҙ көндө.
Умырзая кеүек һулып төштө
Ошо йылда яҙғы бер төндө.
Өлгөрмәне, яҡты күҙен асып,
Бер күрергә донъя киңлеген,
Тик аңланы уны көткән тормош
Үлем ғазабына тиңлеген.
Күҙ йәштәре уның, ҡар һыуына
Ҡушылып, күк диңгеҙгә аҡтылар,
Уны бөгөн, көсләп, Һарун байҙың
Иҫәр малайына һаттылар.
— Яҙмыш шулай, һинең күрәсәгең
Маңлайыңа яҙып ҡуйылған,
Иргә олтораҡ бул, ҡәйнәңә — ҡол,
Һиңә бүтән нәмә тыйылған!..—
Тинеләр ҙә, ауыр шәлгә урап,
Ир янына илтеп һалдылар,
Һуштан яҙған һылыу, йәп-йәш ҡыҙҙы
Һөмһөҙ ҡулдар ҡыҫып алдылар...
Әйтерһең дә, ҡояш тоноҡланды,
Аҫыл гөлдәр елгә һындылар,
Күк таллыҡта йырсы һандуғастар,
Ҡайғырышып, йырҙан тындылар.
Иҙел һыу ҙа киртләс яры буйлап,
Ағып китте алыҫ диңгеҙгә,
Һатылған ҡыҙ көйөн көйләй-көйләй,
Илап һөйләй-һөйләй бар ергә:
«Умырзая ниңә үҫә икән,
Яҙҙан көҙгә тиклем тормаҒас,
Ҡыҙ балаҡай ниңә үҫә икән,
Бәхетле лә булып тыумаҒас...»
Ошо төндө Ғәйфи ғәйеп булды,
Һыуға батҡан кеүек юғалды,
Иҙел буйында тик ул йырлаған,
Ул уйнаған моңло көй ҡалды:
«Иртәнсәкәй тороп, әй ҡараһам,
Күҙем төштө умырзаяға.
Бер ҡараным байға, бер фәҡиргә,

Фәҡир ғүмере уҙа заяға.
Анау ғына тауҙың, һай, башында
Бешә микән Бохар алмаһы?
Бәхетле лә кеше бик бәхетле,
Бүтән микән әллә аллаһы?..»

Ул юғалды, уның ҡайҙалығын
Һис бер кеше юнләп белмәне,
Тик Гөльямал һәр кис,
Һәр таң һайын
Уны көттө, уны эҙләне.

### АННА ИВАНОВНА

«Т» ауылы ҙур ул. Волосле ауыл.
Башҡорт, татар ҙа бар, рустар ҙа,
Яҡшы кешеләр күп, яман да бар,
Дошман да бар бында, дуҫтар ҙа.
Ә Гөльямал шунда үҙен хәҙер
Япа-яңғыҙ тоя, көйөнә,
Ауыр хәсрәтенән йөрәгенә
Ҡара ҡандар һауып төйөлә.
Моңһоу күҙҙәренә йәш тултырып,
Тирә-яҡтарына ҡарай ҙа:
— Нисек бында элек йәм тапҡанмын,—
Ти ул,— ҡайҙа бәхет, йәм ҡайҙа?..
Бына яҙ ҙа етте. Үрге күлдә
Сәскә атты һары томбойоҡ.
Йөрәгемдә минең ҡыш һыуығы.
Күңелкәйем минең гел бойоҡ...

Ул һаман да шулай һыуҙар ташый,
Тиреҫ түгә, бесән килтерә.
Ләкин инде баҫҡан юлдарынан
Осҡон осмай, ҡайғы һирпелә.
Көнөн-төнөн бер уй борсой уны:
«Ниңә кешеләр һис тиң түгел?
Берәү эшләй, икенселәр йәшәй,
Ниңә көләс түгел бар күңел?
Ниңә ҡыҙ баланы, малдай итеп,
Һатып йөрөтәләр аҡсаға?

Ниңә һуң ул, онотоп кешелеген,
Хеҙмәт итә икән башҡаға?..
Нисек был тормоштан ҡотолорға,
Нindәй саралар һуң табырға?
Әллә уны бүтән күрмәҫ өсөн,
Күҙҙәремде мәңге ябырға?..»

Шулай нисек кенә уйланһа ла,
Күңел күге уның ҡараңғы.
Әллә үткәрә ул төн уртаһын,
Әллә етеп килә таң алды.

Таң һыҙылған ғына. Ә ул инде
Ҡерҙәр сайҡай Иҙел буйында.
Ҡулы эштә, ә йөрәге ситтә,
Ғәйфи генә йәшәй уйында.
«Айҡап-сайҡап һаман керҙәр йыуам,
Талды инде минең беләгем,
Яңғыҙымды ташлап ситкә киттең,
Янманымы һинең йөрәгең?..»
Ошо ваҡыт кемдер йомшаҡ ҡына
Уның яурынына ҡағылды:
— Ниңә, Гөльямал, һин моңаяһың,
Кемде былай өҙөлөп һағындың?—
Ул рус ҡыҙы — Анна Ивановна.
Кеше һөйләй: бик ҙур уҡыған.
Хатта күп белгәнгә бер нисә йыл
Таш төрмәлә зарығып ултырған...
Ошо ауылда, байҙар мәктәбендә,
Рус теленән уҡытып килә ул.
Һәйбәт кеше, ярлы хәлен аңлай,
Башҡортса ла һөйләй белә ул.
Үҙе шундай матур! Ап-аҡ йөҙлө,
Зәңгәр күҙле, алтын толомло.
Күҙе, берсә һөйөп, көлөп ҡарай,
Берсә шундай уйсан, йә моңло...

Уҡытыусы ебәк ал яулығын
Яурынына алып һалды ла,
Гөльямалдың йәшле күҙҙәренә
Тағы бер ҡат ҡарап алды ла:

— Беләм,— тине,— туған, ауыр һиңә,
Байҙар егә һине ат кеүек.
Ғәйфи эштәрен дә йөкләттеләр,
Көн-төн эшләйһең һин, көс түгеп.
Ә кем өсөн?
— Билдәле инде, апай...
— Эйе, шулай, һаман байҙарға...
Ғәйфи ҡалала бит... Эшсе, тиҙәр...
Ҡил, һөйләрмен, йөрөй ҡайҙарҙа...
«Ул Ғәйфиҙе белә!.. Ғәйфи тере!..»
Гөльямалдың йөҙө йәнләнде.
Һәм йөрәге шунда был ят ҡыҙға
Дуҫлыҡ ебе менән бәйләнде.

**КИЛЕРМЕ УЛ?**

Анна өс көн көттө.
Тик Гөльямал
Һаман күренмәне, килмәне.
— Әллә Ғәйфиен ул оноттомо?
Әллә иҫәр ирен еңмәне...
Ә Ғәйфие...
Анна күҙ алдынан
Тағы бер ҡат уны кисерҙе.
...Ул көн яҙҙың ташҡын, Гөльямалдың
Ятҡа ҡушылып һүнгән сағы ине.
Ике егет, Ғәйфиҙе ҡултыҡлап,
Анналарға алып инделәр.
— Егетебеҙ аҡылын юғалтты.
Уҡытыусы ярҙам ит,— тиҙәр.
Ғәйфи күм-күк, дер ҡалтырай үҙе...
«Уға нисек ярҙам итергә?!»
— Һин беҙҙә ҡал, әҙерәк һөйләшербеҙ.
Һиңә кәрәк бынан китергә...
Ғәйфи ҡарыулаша: ҡалмайым, ти.
Ниңә тағы һеҙҙе борсорға?!
Миңә кәрәк хәҙер йә үлергә,
Йә Һарундың тамырын ҡоротоорға!..
Һеҙ әйтегеҙ миңә, өйрәтегеҙ,
Нисек унан үсте алайым?
Һөйгәненде биргәс бер иҫәргә,

Был донъяла нисек ҡалайым?..
— Аңла,— тине Анна,— ер йөҙөндә
Һарун байҙар түгел бер генә.
Һәм уларҙан ыҙа күреүселәр
Түгел был донъяла һин генә...—
Шулай Анна уға һөйләп бирҙе,
Ирек, көрәш, Ленин хаҡында.
— Ленин — барлыҡ хеҙмәтсәндең дуҫы,
Ярата ул башҡорт халҡын да...
Аҙаҡ адрес бирҙе:— Бар ҡалаға,
Унда минең эшсе ағайым.
Уның менән бергә ҡаҡшатығыҙ,
Емерегеҙ батша һарайын...—
Бына шулай китте Ғәйфи унда.
Хәҙер, бәлки, күҙен асҡандыр.
Бәлки, ысын, аңлы көрәш өсөн
Эшсе менән йәнәш баҫҡандыр?
Герман һуғышы бара. Ғәйфи, бәлки,
Окоптарҙа ята торғандыр.
Бәлки, инде Һарун кеүектәргә
Атыр өсөн мылтыҡ ҡорғандыр?..
Бәлки...
Туҡта, кемдер югереп үтте
Урам тәҙрәһе яғынан.
Ишек асты. Һүҙһеҙ өйгә керҙе...
Ҡара шәлен бөркәп ябынған!..
— Был, Гөльямал, һинме?
Бына рәхмәт!..
Анна һөйөнөп уға ҡул һуҙҙы:
— Һаумы, һылыу?
Һаумы...
— И шаян ҡыҙ!
Һөйләшкәнгә нисә көн уҙҙы?

**АЙЛЫ ТӨН СЕРЕ**

Ҡышҡы салт аяҙ төн.
Зәңгәр күктә
Көмөш табаҡ хәтле ай йөҙә.
Айҙан ҡағылып, стенала сағылып,
Күгелйем нур һибелә аҡ йөҙгә.
Әйтерһең дә, Анна бер ни toймай

Һәйкәлме ни таштан ҡойолған.
Аҡ ҡулдары, нәфис терәк булып,
Аҡһыу яңағына ҡуйылған.
Өйҙә тып-тын.
Айҙың яҡтыһында
Ульяна әбей иләй киндер еп.
Үҙе уйлай: «Ҡасан ҡайғы бөтөр?
Шатлыҡ ҡасан беҙгә килер?» тип.
Ә Гөльямал уйлай:
«Ниңә Анна
Яңғыҙ ғына тора йәп-йәшләй?
Ниңә ауылдағы иң бәләкәс,
Иң ярлы бер өйҙә ул йәшәй?
Нисек былай?
Кем был ғәжәп кеше?
Ниндәй елдәр уны ташлаған?
Ниңә икән беҙҙең был төпкөлгә
Килеп уҡытырға башлаған?..»
Уның уйын бүлеп, ауыр итеп:
— Уф!— тип ҡуйҙы өйҙөң хужаһы.
— Ниңә көрһөнәһең, Ульяна инәй?
— Ауыр, ҡыҙым, донъя нужаһы...
Бына,— тине ул, еп иләүен ташлап,—
Иҫкә төшөп китте меҫкен ҡарт.
Ҡайта алмаҫ, ахыры, күрешмәбеҙ
Был донъяла инде беҙ ҡабат...
Минең Ильям харап һәйбәт ине.
Ҡатын тип һис һуғып-ҡаҡманы.
Тиҡ башҡайы, ҡыйыу һүҙе өсөн,
Себер юлдарынан ҡайтманы.
Ғүмер буйы Мортаза купецтең
Күн заводында ул эшләне.
Шунда батша, байға һүҙ әйтә, тип
Себер ебәрҙеләр. Нишләһен!
Хаҡлыҡ юҡ та, ҡыҙым, был донъяла,
Ниңә ыҙа сигә меҫкен ҡарт?..
Ҡартайҙыҡ та инде, күрешмәбеҙ
Был донъяла, ахыры, беҙ ҡабат...

Ошо ваҡыт Анна һөйләп китте
Ҡалалағы бер ҡыҙ хаҡында:

— Унығ егете бына төптә ҡайтмаç.
Һылыуы яныр мәңге ялҡында.
Улар бергә үçкән. Уҡығандар.
Егете эшкә ингән заводҡа.
Ә ҡыҙ булған уҡытыусы шунда,
Хеҙмәт иткән эшсе халыҡҡа.
Улар яратышҡан. Ысын һөйөү
Бөтмәç көстәр биргән йөрәккә,
Шул көстәрҙе улар халыҡ өсөн,
Эшсе өсөн биргән көрәшкә.
Бына бер саҡ мең-мең эшсе бергә
Баш күтәреп сыҡҡан урамға.
Улар теләгәндәр, бергәләшеп,
Батша, байҙы илдән ҡыуырға.
Шул көрәштә егет һәләк булған.
Ташлағандар уны палачҡа.
Һөйгән ҡыҙын һөрөп ебәргәндәр
Ҡаланан бик ситкә, алысҡа...
Ул ҡыҙ әле һаман йәшәй, тиҙәр,
Һаман эшләй, тырыша — уҡыта.
Ә йөрәге, һөйгән егетен һағынып,
Һаман һыҡтай, һаман ут йота...
Бына тиҙҙән был ҡараңғы төндәр
Ҡояшлы көн булып әйләнер,
Ҡара көстәр әле айырып торған
Саф йөрәктәр бергә бәйләнер.
Тик ул ҡыҙҙың ғына егете ҡайтмаç...
Ә шулай ҙа ул ҡыҙ бәхетле.
Сөнки ул да байтаҡ көсөн һалды
Ҡаҡшатырға ҡара тәхетте...
Ульяна әбей ҡапыл тирә-яҡҡа
Күҙ югертте, ҡаты шикләнеп.
Гөльямал да асыҡ аңлап алды,
Ул ҡыҙ — Анна үҙе икәнен.
Хәҙер инде ауыл осондағы
Аҡ балсыҡлы, кескәй ошо өй,
Ашау, яҙыу өсөн хеҙмәт иткән
Өçтәл. Пальто элгән оҙон сөй —
Бөтәһе лә уға сикһеҙ яҡын,
Хатта изге булып тойолдо.

Ул Аннаны ҡосаҡлап уҡ үпте,
Ә илауҙан көскә тыйылды...

Бер аҙҙан һуң лампа яндырҙылар.
Анна алды китап ҡулына.
Гөльямал бик тырышып хәреф яҙҙы,
Ҡәләмен ныҡ баҫып юлына.
— Ай-һай, Анна, ҡәләм ауыр икән,
Ҡөрәк, һәнәк унан еңелдер.
Бәлки, ҡәләм, ҡағыҙ минең кеүек
Эш кешеһе өсөн түгелдер?
— Юҡ,— ти Анна,— һинең был ҡулдарың
Бик тыңлаусан, йылғыр күренә.
Бына Ғәйфи, ҡайтҡас, ғәжәпләнер,
Ышанмай ҙа торор күҙенә...
— Ҡуйсы, ҡайтмаҫ та ул, Анна дуҫҡай.
— Ҡайтыр.
Әйҙә, уҡы, әҙерлән.
Һеҙҙең алда бик күп эштәр тора,
Күҙеңде ас, тиҙерәк бел, өйрән...—
Тырышлыҡ ул ерҙә ятып ҡалмай —
Гөльямал да уҡып өйрәнде.
Анна менән һәр бер осрашыуҙан
Шатлыҡ солғап алды йөрәген.

**КЕМ УЛ?..**

Шулай ул бер кисте, ҡаса-боҫа,
Анналарға тағы югерҙе:
— Ауылда бер яңы хәбәр йөрөй,
Ысынмы был, әллә түгелме?
Быны Анна Ивановна ғына
Асыҡ итеп һөйләп бирәсәк.
Ысын булһа, батша төшөрөлгән,
Большевиктәр бында киләсәк!..
Большевиктәр кем ул? Ғәйфиҙәрме?!
Төшөнмәйем,
Ни әйтәйем аңһыҙ башыма!
Туҡта, тиҙерәк барып ҡайтайымсы
Уҡытыусым — Анна дуҫыма.
Бөгөн Анна уға бөтөнләйгә

Бүтән кеше кеүек күренде,
Күҙҙәрендә шаян, шат ут яна,
Үҙе шундай һүҙсән, күңелле.
Уҡыусыһын күргәс, ул, йылмайып,
Ҡосаҡлап уҡ алды биленән.
Күренеп тора: сикһеҙ шатлығы бар,
Уртаҡлашһын һуң ул кем менән?..
— Большевиктәр, Ленин, партия...— тип
Анна уға оҙаҡ һөйләне.
Бөгөн тәүге тапҡыр Гөльямалға
Асып һалды бөтә йөрәген.

**ШУНДАЙ АЛЫҪ, ШУНДАЙ ЯҠЫН ДА...**

Гөльямалға хәҙер көндәр, төндәр,
Тағы ла оҙон, ауыр тойола.
Ҡайһы саҡта моңһоу күҙҙәренән
Мөлдөрәшеп йәштәр ҡойола:
«Ҡыш та үтте, бына яҙ ҙа етте,
Бындай яҙҙан миңә ни файҙа?
Батша төшөрөлдө, ирек килде,
Ул һаман юҡ, Ғәйфи, һин ҡайҙа?
Әллә тынғы белмәҫ ғәзиз башың
Ер ҡуйынҡайына һалдыңмы?
Әллә мине онотоп, сит ерҙәрҙә
Ҡайтмаҫ өсөн тороп ҡалдыңмы?!.
Дошмандарҙы еңеп, Ғәйфи, тиҙерәк
Уралыңа ҡайтып килһәңсе.
Гөльямалым, һылыуым, минең менән
Әйҙә ер сигенә тиһәңсе...»

Уйҙар югерә, башта төрлө уйҙар...
Ә Гөльямал бара яй ғына.
Ҡайҙа бара?
Эйе, Анналарға...
Ышанысы уның ул ғына.
Бына майҙан.
Был ни?
Ниндәй шау-шыу?!
Ниңә бик күп халыҡ йыйылған?..

Атлылар ҙа, йәйәүлеләр ҙә бар,
Ҡораллылар ҙа бар... ни булған?
Иғтибарлап бер аҙ ҡарап торғас,
Ул ашығып алға ташланды.
— Большевиктәр, моғайын, большевиктәр!..
Йөрәге осар ҡоштай талпынды.
— Большевиктәр!.. Был һүҙ уға бөгөн:
— Ғәйфи ҡайтты!— булып яңраны.
Ни өсөндөр был ике һүҙҙе ул
Бер үк мәғәнә менән аңланы.
Майҙан ташты. Майҙан төрлө тауыш,
Оран, набат һуғып геүләне.
Ә Гөльямал, Ғәйфуллаһын эҙләп,
Югереп йөрөнө, йәне түҙмәне.
Күңеле алдаманы. Ғәйфуллаһын
Халыҡ уртаһында күрҙе ул.
«Йәнем!» тиеп уның эргәһенә
Югермәйсә көскә түҙҙе ул.
«Ҡалай олпатланған! Һоро шинель
Кәүҙәһенә ҡалай килешә!..
Ҡара, Анна менән ҡалай татыу!
Көлә-көлә ниҙер һөйләшә...»
Ул бер ситтә ҡаушап туҡтап ҡалды.
Өндәшергә бер һүҙ тапманы.
Ғәйфуллаһы, уны күрмәйенсә,
Майҙан уртаһына атланы...
Трибунаға, үргә, менеп баҫты.
Уға табан халыҡ уҡталды.
Ул һөйләгән хаҡлыҡ һүҙен тыңлап,
Барыһы тынды, барыһы туҡталды.
— Иптәштәр!..

. . . . . . . . . . . . . . . . . . .

Ғәйфи һөйләп бөттө. Һуңғы һүҙе
Майҙан ярып алыҫ яңраны:
— Ҡуҙғал, уян, ләғнәт ителгән,
Ҡолдар һәм астар донъяһы!..—
«Большевичка Анна трибунала!»
Ә Гөльямал күҙен ала алмай.
Әйтерһең дә, тәүләп күрә дуҫын,
Әйтерһең дә, тәүгә уны аңлай.
«Большевичка,— тип ҡабатлай ул да,—

Ят, серле һүҙ?! Яңғырай ғорурлыҡ.
Туҡта, һуң мин нимә эшләй алам
Анна дусҡа тиң-тош булырлыҡ?!»
Ҡапыл ырғытты ла ауыр шәлен,
Югереп барҙы Анна янына.
— Мин дә һеҙҙең менән, Анна йәнем,
Ҡара төн ҡайтмаһын яңынан!..
— Дөрөҫ,— тине Анна, ҡолас йәйеп,—
Әйҙә, тиҙерәк беҙҙең сафҡа баҫ!
Күҙ йәш, аһ-зар аша азатлыҡҡа
Килгән кеше яуҙа ҡаҡшамаҫ!..

Ә Ғәйфулла аптырап уҡ ҡалды,
Һөйгән йәрен күргәс янында.
«Ысынмы был?
Улмы?!
Нисек былай?..
Шундай алыҫ...: Шундай яҡын да!..»
Улар, йотолоп бер-береһенә текләп,
Һүҙ таба алмай ҡатып ҡалдылар.
Ә күҙҙәрҙән бәхет, хәсрәт аша
Әсе, ҡайнар йәштәр тамдылар.

### ИҘЕЛ ҺЫУЫ АҒА ШЫМ ҒЫНА...

Ауыл тынған. Ярҙарына тулышып
Иҙел һыуы аға шым ғына.
Уның серле, яҡты киңлегендә
Тулған ай тирбәлә тын ғына.
Киртләс ярҙар буйлап күкрәп үҫкән
Һары талдар һыуға эйелгән,
Ҡарт тирәктәр тынып ял итергә
Төнгө еләҫ елән кейенгән.
Нисек килә алдың?
— Йоҡлай бит ул,
Ашау, йоҡлау — уға шул еткән.
Бер ҡаҙан аш, бер ултырһа, бөтә,
Ғүмер туя алмай интеккән.
Иртән уяна ла:
— Ашарға!— ти,
Нимә барын тотош һыпыра.

Бер һарыкты бер ашай ҙа куя,
Унан ғырлап йоклай һыкыра!..
Тукта, сытыр һынды... Аяк тауышы!
Әллә алйот бөгөн уяумы?!
Әй хоҙайым, унан котолоуым
Ысын түгел — бер күҙ буяумы?!
Әкрен генә елдәр иҫеп китә,
Талдар кыштырҙаша эргәлә,
Тал төбөндә торған ике шәүлә
Һыу эсендә сағылып тирбәлә.
Кемдәр улар?
Төн тынлығын һаклап,
Әкрен генә ниҙер һөйләшә.
Улар бәхетлеләр.
Ике йөрәк
Берҙәм тибә, һөйөп серләшә:
— Гөльямалым, куркма, онот уны.
Тыныс булһын, йәнем, йөрәгең.
Һине котолдороу, бергә булыу,
Бәхетле итеү бөтә теләгем.
Әле һин йәш, һылыу, һиңә бары
Быйыл йәйҙә тула егерме.
Һинең әле яңы һөйөп, һөйөлөп
Йәшәр сағың етте түгелме?
Гөльямалым, беләһең, һине һөйәм,
Аңла теләгемдең сафлығын.
Аңла йөрәгемде ярып сыккан
Һүҙҙәремдең керһеҙ, хаклығын.
— Беләм, ышанам, Ғәйфи, һинең һүҙең
Изге анттай ғәзиз тойола.
Һинең менән үрелеп, күккә аша
Йөрәгемдә яңы тойғолар.
Әй, был донъя, яңы, якын донъя!..
Нисек ярһыта бит күңелде!..
— Ул тағы ла матур булһын өсөн,
Бирәйек, һылыу, бөтә ғүмерҙе.
— Шулай булһын!..
Улар, кул кыҫышып,
Оҙак-оҙак һүҙһеҙ торҙолар.
Был ант һүҙе ике саф йөрәккә
Юйылмаҫка яҙылып калдылар.

## ҮС

Төн уртаһы.
Ғәйфи яңғыҙ ғына.
Ары-бире йөрөй иҙәндә.
Йоҡлай алмай, йөрәген иҫке яра
Яңы ғазап менән иҙгәнгә.
Ул ауылында.
Ҡулда ҡылыс, мылтыҡ.
Изге үсте алыр көн килде.
— Эй Һарун бай,
Ҡемде илатманың
Мыҫҡыл итмәнең һуң һин кемде?
Ғәйфи бөгөн уның яҡшы аттарын
Отряд өсөн алды ҡаратып.
Ҡеләтенән йөк-йөк игендәрен
Ярлыларға бирҙе таратып.
Ләкин үс ҡанманы.
Был дошманды
Теләне ул атып йығырға.
Ер битенән тағы бер сүп өҙөп,
Ҡара кәҫ аҫтына тығырға.
Тик уйланы:
«Халыҡ нисек ҡарар?
Ябай үс алыусы, тимәҫме?
Гөльямалы өсөн үс алырға
Мылтыҡ-ҡылыс таҡҡан, тимәҫме?..
Юҡ, юҡ!..
Синфи көрәш намыҫына
Былдай таптар һис тә төшмәһен.
Миңә:
— Шәхси үстән йөрөйһөң, тип
Бер кем бармаҡ менән төртмәһен...

Төн йоҡоһоҙ үтте.
Ғәйфи таңда
Отряд менән алға атланы.
Их Ғәйфулла, ниңә шул яуызды
Ошо төндә тотоп атманың?!

## «ГӨЛЬЯМАЛ ДА ҺАЛДАТ БУЛҒАН, ТИ...»

Гөльямал да китһән. Бынан ары
Уны бер кем өйҙә күрмәгән.
Ул, һалдаты булып Октябрҙең,
Яҡты көнгә табан үрләгән.
Донда булған. Деникингә ҡаршы
Ябай һалдат булып һуғышҡан.
Ғәйфи, Анна бергә Петроградта
Юденичтең яуын ҡырышҡан.
Ошонда ул йән дуҫ юғалтыуҙың
Йөрәк өҙгөс һағышын татыған:
Халҡы өсөн бөтә ғүмерен биреп,
Анна мәңгелеккә атлаған...

Ә ауылда шундай хәбәр йөрөгән:
«Гөльямал да һалдат булған, ти.
Сәс ҡырҡтырған, билгә ҡайыш быуған,
Арҡаһына мылтыҡ аҫҡан, ти.

Үлемесле һуғыш менән ҡайнап,
Тағы айҙар, йылдар үттеләр.
Совет ғәскәрҙәре Антантаның
Ялсыларын ҡырып түктеләр.
Һуғыш бөттө. Улар — еңеүселәр —
Үҙ ауылдарына ҡайттылар.
Суҡ тирәктәр, батырҙарға һөйөнөп,
Тәңкә керпектәрен ҡаҡтылар.

## ҒӘЙФИ ҠАЙҘА?!

Төн уртаһы. Тышта көҙгө елдәр
Һыҙғыралар, һалам аҡтарып.
Ҡарлы ямғыр ҡоя бер өҙлөкһөҙ.
Ел шаҡара ҡыйыҡ таҡтаһын.
Ниңә көҙгө елдәр бөгөн шулай
Тәҙрәләргә һырығып илайҙар?
Әллә Гөльямал да элеккеләй
Зарығыр, моңайыр, тип уйлайҙар?
Юҡ, ул үткән ауыр, моңһоу кистәр
Алыҫтарҙа тороп ҡалды инде.

Улар урынын хәҙер яңы уйҙар,
Яңы хистәр биләп алды инде.

Бер тиҫтә йыл үтте
Улар ситтән,
Һуғыш ҡырҙарынан, ҡайтҡанға.
Октябрҙең йомарт ҡулы менән
Көткән бәхеттәрен тапҡанға.
Ләкин көрәш, ауыр көрәш бара.
Кәрәк һаман һаҡта торорға.
Кулактарҙы, иҫкелекте еңеп,
Өр-яңыса тормош ҡорорға.
Был ҡырыҫ көҙ, уҫал ҡыш та үтер,
Тәүге колхоз яҙы башланыр.
Ярлы, батрак яҙғы сәсеү эшен
Быйыл бергәләшеп башҡарыр...
Ә ул саҡта...
Туҡта, был Ғәйфулла
Ниңә ҡайтмай,
Эше бөтмәйме?
Белмәйме ни минең төн йоҡламай,
Хафаланып, өҙөлөп көткәнде?!
Өйҙә йылы. Рәхәт, тыныс йоҡлай
Улы Сәхи, ҡыҙы Гөлсәсәк.
Улар бәхетлеләр. Ил уларға
Әҙерләне яҡты киләсәк.
Гөльямал тын ғына балаларға
Ҡарап тора, кинәнеп, шатланып.
Ә күңеле йыш-йыш елеп китә,
Бәхет аҡбуҙына атланып:
«Һәйбәт заман килде, балалар,— ти.—
Яҡты булыр һеҙҙең киләсәк...
Эсәң кисергәнде күрмәҫһең һин,
Бәхетле һин, ҡыҙым Гөлсәсәк!..

. . . . . . . . . . . . . . . .
. . . . . . . . . . . . . . . .

... Эй, шулай ҙа ниңә, балалар, тип
Йыйылыштан ҡалдым бөгөн кис?
Йөрәгемә урын таба алмайым.
Күңелкәйем тыныс түгел һис...»
Тышта ямғыр. Ә ул яңғыҙ.

Төнө айһыҙ, шомло, ҡараңғы.
Гөльямалдың ҡулы эшкә бармай,
Зиһендәре тамам таралды.
«Ғәйфи һаман ҡайтмай. Һаман да юҡ.
Ниңә йыйылыш оҙаҡ һуҙылды?
Ахыры, бик һуң, офоҡ битләүендә
Алһыуланып таң да һыҙылды...»
Шулай көҙгө төн дә уҙып китте.
Ә Ғәйфулла һаман ҡайтманы.
Ҡерпек ҡаҡмай көткән Гөльямалы
Таңдан сельсоветҡа атланы.
«Көҙгө елдәр, ғәмһеҙ төнгө елдәр,
Һеҙ бит Ғәйфулламды күрҙегеҙ!..
Шуға бит һеҙ төндәр буйы минең
Тәҙрәмде ҡағып йөрөнөгөҙ?!»
... Гөльямал зар илай, күҙ йәш түгә,
Ғәйфуллаһы уның табылған...
Тик йөрәге уның тынған инде.
Яҡты, шат күҙҙәре ябылған...

### АСЫУ ТАША

Майҙан тулы халыҡ. Ҡайғырыша.
Асыу таша дошман эшенә.
Бөгөн Ғәйфи тағы яҡынайҙы
Һәр бер саф йөрәкле кешегә.
Нәфрәт тулы ярһыу һүҙҙәр яуа
Үлтереүсе Һарун байҙарға.
Йәшен тыйып, ғорур, тура баҫып,
Гөльямал да килде майҙанға.
Халыҡ шаулай. Ҡай берәүҙәр илай,
Ҡай берәүҙә ҡаушау күренә.
Етлекмәгән йәндәр ҡотҡо һөйләй,
Ҡурҡыныс сер биреп һүҙенә.
— Инде колхозсылар таралышыр,
Кем уларға юлды башлаһын?
Был колхоз тип, тағы, Ғәйфи кеүек,
Кем һуң йәп-йәш көйө баш һалһын!
— Урал аръяғында бер ауылда
Колхоз башын шулай иткәндәр.

5*

Ошонан һуң бөтә колхозсылар
Боронғоса йәшәп киткәндәр...

Был зәһәрле һүҙҙәр Гөльямалдың
Йөрәгенә тағы үрт һалды.
Әсе нәфрәт, ҡаты асыу менән,
Әйтерһең дә, тыны туҡталды.
Һәм ул туҙған сәсен һыйпап ҡуйҙы.
Сығып баҫты халыҡ алдына:
— Колхозсылар икеләнмәҫ,— тине,—
Ленин юлы улар алдында!
Ярҙай боҙҙар, ярға йәбешеп ятып,
Туҡтата алмай Иҙел ташҡынын.
Кем һуң уның юлын быуа алыр —
Яңы тормош килә ашҡынып!..
Һуңғы һулышын алған Һарун байҙар
Беҙҙең изге юлды быуырмы?
Берҙәмлекте бер татыған халыҡ
Кире яңғыҙлыҡҡа барырмы?
Юҡ, һис тә юҡ. Дошман кинәнмәһен,
Ҡыуанмаһын, үсте алдыҡ, тип.
Төҙөлөп кенә ятҡан йәш колхоздың
Етәксеһен тартып алдыҡ, тип.
Колхоз йәшәр!
Партиябыҙ уны
Һаман алға илтер, юл башлап.
Колхоз үҫер!
Уны сигендерер көстәр юҡ ул
Һәм ул булмаҫ та!
Халыҡ ҡалҡынышты. Йөрәктәргә
Шиктәр һалған уйҙар юғалды.
Оҙон сәсен елгә елберҙәтеп,
Яңы башлыҡ баҫты юғары.
— Дөрөҫ!— тине халыҡ.— Йә, Гөльямал,
Етәксе бул, әйҙә, алға баҫ!
Гүйә Анна ҡабатланы шунда:
«Аһ-зар аша килгән ҡаҡшамаҫ!..»

Был көнгә лә ун йыл уҙып китте,
Иҫкелекте ҡырып, туҙҙырып,
Яңы ҡала, завод, фабрикалар,

Ҡолхоз ауылдары тыуҙырып.
Ә Гөльямал һаман алмашсыһыҙ
Председатель ошо колхозда.
Һәр һайлауҙа тауыш уға бирелә,
Һөйөү ҡаҙанғанға халҡында...

II

**БЕР МИНУТТА...**

Иҙел буйы әрәмәлек, аҡлан.
Ал, ҡыҙыл, күк сәскә түшәлгән.
Ҡүбәләктәр, татлы һуттар татып,
Гөлдән гөлгә осоп төшәләр.
Ҡүбәләктәр һылыу, сәскә йәмле,
Уларҙан да ҡыҙҙар матурҙар.
Егеттәре, ә һуң егеттәре,
Ай-һай, шаян, ай-һай, батырҙар.
Йыйын күрке булып, ғорур йөрөй
Аҡ һаҡаллы олпат ҡарттары.
Ә һуң әбейҙәре ниндәй көләс,
Ниндәй татыу, тап бал ҡорттары.
Ниңә бөгөн йәмле Иҙел буйы,
Айырата шат, шаулы тойола?
Ҡыҙҙар тауышын тыңлар өсөн гүйә,
Ҡоштар һайрашыуҙан тыйылған.
«Таң» колхозы сәсеү бөткән бөгөн.
Бында һабантуйы үткәрә.
Ҡыҙыу эш артынан уйнап алһаң,
Йәйҙәр күңеллерәк үтә лә.
Туй бара, туй. Сәмле көрәшселәр
Бер-береһен ергә´йығалар.
Йәш егеттәр, ҡайыш ҡамсы тотоп,
Атта ярышырға сығалар.
Малайҙары баҡан буйлап менә,
Ҡыҙҙар йыр, бейеүҙә алыша,
Олпат ҡарттар, хуплап маҡтай-маҡтай,
Еңеүсегә бүләк өләшә.
Уйын ҡыҙа. Йөрәк ярһыулана.
— Күңелле лә һуң был һабантуй!
Яҙғы байрам, йәмле, шаулы байрам,
Йәнең теләгәнсә уйнап туй.

Бер Гөльямал ғына борсоуыраҡ,
Улы Сәхи ҡайтып етмәне.
Кисә генә колхоз йомошо менән
Район үҙәгенә киткәйне.
— Туҡта, кем был?
Оло юлдан берәү
Йән-фарманға саба түгелме?
Ҡуҙҙаренә ҡулын ҡуйып, әсә
Кешеләрҙән аша үрелде.
— Аһа, был ни, Сәхи түгелме һуң?
Ниңә, улым, улай сабаһың?!
Атты яндырырһың!..
— Әйҙә, әйҙә,
Сәхи, туйға һуңға ҡалаһың!..

Аттан төшмәй, Сәхи әсәһенә
Ашығып-ашығып нимер һөйләне.
Әсә ҡойолоп төштө:
«Ҡәһәр һуҡһын!
Бәхетебеҙҙе дошман көнләне...»
— Һуғыш!
— Һуғыш!
— Һуғыш!
Бер минутта...
Айҡап сыҡты был һүҙ аҡланды.
Көләс йөҙҙө һөрөмләндерҙе ул,
Шат йөрәкте телде, аҡтарҙы.
Балалар ҙа хатта шып-шым булды,
Уйын тынды, һүнде, таралды.
Гөльямалдың ҡапыл биле талды,
Йөрәк майын ҡара ҡан алды.
Теләне ул индәйҙер бер йылы,
Йыуатыусы һүҙҙәр табырға,
Шомло хәбәр һалған ауыр әҙҙе
Ҡалдырмайса йыуып алырға.
Ләкин табалманы ундай һүҙҙәр,
«Һуғыш инде!..
Нимә һөйләргә?!
Кемдең теле барыр был минутта
Артыҡ борсолмауҙы теләргә?!»
Һөйләмәне шуға бер нәмә лә.

Тик әйтте ул:
— Ҡайттыҡ, туғандар...
Ҡурәһегеҙ, дошман ни ҡылана,
Бында беҙ яҙ уйыны ҡорғанда!..
Һәм ул тағы бер ҡат тос йөҙрөгөн
Һелтәп ҡуйҙы башы осонда:
— Әйҙә, дуҫтар, тиҙерәк, йылдамыраҡ!..
Һәр кем булһын үҙенең посында.
Халыҡ таралышты.
Машинаға
Бала-саға, ҡарттар тейәлде.
Йәш-елкенсәк, төркөм-төркөм булып,
Һүҙһеҙ генә арттан эйәрҙе.
«Һуғыш!.. Һуғыш!..
Ай-һай, ҡалай ауыр!..
Ҡалай аңғартмаҫтан башланы!..»
Ауыр баҫып, Гөльямал да шунда
Ауыл яғына табан атланы.

### ҺИН СЫҘАМҺЫҢ, МОҒАЙЫН, СЫҘАРҺЫҢ!

Һуғыш бара. Күп егеттәр инде
Ил һаҡларға китеп бөттөләр.
Ә баҫыуҙа тыныс яҙҙа сәскән
Диңгеҙ кеүек ашлыҡ өлгөрә.
«Эшсе ҡулы етмәй. Сабынлыҡта
Йылдағынан күберәк кәбән һал.
Ямғыр ҡойор, ә һин игендәрҙе,
Түкмәй-сәсмәй, тиҙерәк йыйып ал.
Имен саҡта, донъя теүәл саҡта
Алдын булыу нимә, гәжәпме?
Бына хәҙер эште ойоштор һин,
Күрһәт хәҙер бына һәләтлек!..» —
Ти Гөльямал үҙ-үҙенә ҡат-ҡат,
Унан һорай:
— Һин бит сыҙамһың?!
Һуғыш тип бит эште аҡһатмаҫһың,
Ауырлыҡты еңеп сығырһың?!

Һуғыш бара. Бына иң алдынғы
Шәриф бригадир ҙә алынған.

Сытаймай ҙа, гүйә һуғыш түгел,
Ҡаты һынау түгел алдында.
— Апай,— ти ул, һаман көләсләнеп, —
Урыныма кеше билдәлә.
Һуғышырға китәм. Повестка алдым.
Нәүбәт етте, апай, беҙгә лә!..

«Китәм, китәм!..»
Ҡандай ябай һүҙ был!..
Ә эсенә ниҙәр йәшергән!..
Шәриф белә микән уға нисек
Яҡын булыуын кескәй йәшенән...
Әллә Ғәйфи өсөн бер йөрәктән
Ҡайғырыусы итеп күргәнгә,
Әллә колхоз өсөн нисә йылдар
Бергә янып, бергә көйгәнгә,
Шәриф яҡын ине уға һәр саҡ,
Ғәйфиҙән һуң, бөтә кешенән.
Әсә кеүек һөйөнә ине бит ул
Уның үҫеүенә, эшенә.
Элек, Ғәйфи барҙа, Шәриф алдын
Комсомолы ине ауылдың.
Ә коммунист булғас, хужалыкта
Йөкләп барҙы эштең ауырын.
Инде:
— Китәм,— ти ул, ҡымшанмай ҙа,
Бороп тора ҡара мыйыкты.
Ауыр, тос ҡулдары, әйтерһең дә,
Һуғыш өсөн генә лайыҡлы!..

Шәрифтән һуң улы — Сәхи инде.
Ул да: — Фронтҡа мин китәм,— ти. —
Шундай саҡта нисек өйҙә ятам?
Нисек саҡырғанды көтәм? — ти.
Йөрәк өҙөлөп китте.
Гөльямал һис
Һүҙ тапманы ни тип әйтергә.
«Яңғыҙ ул бит, һуғыш аяуһыҙ бит,
Ә ул теләй бөгөн китергә?!
Тынысланғас, әйтте:
— Дөрөҫ,— тине,—

Ҡитерһең шул, улым, китерһең...
Мин ышанам:
Ата-бабаң кеүек,
Батыр, тоғро хеҙмәт итерһең!..
Унан һүҙһеҙ, йәшһеҙ, тағы бер аҙ
Ҡарап торҙо яңғыҙ улына:
«Ғәйфулланың тап үҙе бит хәҙер...
Төҫө-башы, хатта буйы ла...
Бөтә яҡтан уға оҡшап тора.
Ғәҙәте лә үҙенә талапсан.
Йөрәге лә, Ғәйфиҙеке кеүек,
Булһын инде тотош халыҡсан...»
Әсәһенең уйын аңлағандай,
Ҡарап алды Сәхи, һирпелеп.
Был ҡараш та күпме ҡыйыулыҡ бар,
Күпме вәғәҙә, күпме иркәлек!..

**УЛ БРИГАДИР БУЛДЫ...**

Малай саҡта бәйһеҙ шаянлыҡтан
Терһәгенән ҡулын өҙҙөрҙө.
Ауылдаштар «Сулаҡ Татлыбай» тип
Исем бирергә лә өлгөрҙө.
Нисек ғәрләнде ул быының өсөн!
Эстән генә күпме көйөндө,
Ә бөгөн ул ғүмерендә тәүләп
Сулаҡлығы өсөн һөйөндө.
«Шәриф китә,— ти ул, — ә мин ҡалам,
Бригадирлек күсә үҙемә!
Шәриф менән иҫәбем бар минең,
Ә ул һиҙмәгәндәй күренә...»
Күптән үткән эштәр.
Шулай ҙа бит
Күңел тәрән. Улар һаҡлана.
Ә кешеләр:— Татлыбай ул көләс,
Яҡты йөҙ,— тип маҡтай, һоҡлана.
Белмәй улар күңелдә ҙур шештең
Нисек һыҙлап, нисек тулғанын.
Эстән янып, тыштан көлөү өсөн,
Ниндәй көстәр кәрәк булғанын!
Татлыбайҙан һора: ул ни теләй?

Бәлки, быға яуап бирә алмаç.
Тик һиҙә ул йөрәгендә йәшәй
Көнсө уйҙар, асыу һис ҡанмаç.
Эсе боша уның Гөльямалды
Халыҡ шулай хуплап торғанға.
Көнләшә ул хатта бынау йәштәр
Вузда уҡып кеше булғанға.
Йәне көйә, Алмаҡайҙы маҡтап,
Өлкә газетаға яҙһалар.
Алдын колхозсылар Мәскәүҙәге
Күргәҙмәгә йыйылып барһалар.
Татлыбайҙың татлы хәбәрҙәрен
Ҡолағына улар элмәйҙәр.
«Һәйбәт»,— тиҙәр, ә үҙҙәре һис тә
«Председатель бул һин!» — тимәйҙәр.
Яҙыу-һыҙыуҙа ла, һөйләүҙә лә
Ул бит Гөльямалдан уҙҙыра.
Етәкселек эшен уның хәтле
Алмаймы ни инде булдыра?!
(Шулай уйлана ул, ғәжәпләнеп,
Була инде ҡайсаҡ шундайҙар.
Бер нөктәлә ҡатҡан,
Ә ҙур эшкә
Һәләтлемен мин, тип уйлайҙар.)
Ә кешеләр уны һәйбәт, тиҙәр,
Йөҙө яҡты, һүҙе күңелле.
Әрләһәң дә, көлөп, уйнап тора,
Һоҡланырлыҡ сабыр, түҙемле.
Шәп кейенә, атлағанда, ҡыҙыҡ,
Йомшаҡ ҡына баçып юрғалай.
Уңға, һулға сәләм биреп үтә,
Уттан, һыуҙан сыға юғалмай...
Күптән үткән эштәр.
Күңел тәрән.
Һаман өйкәй, һура йөрәкте.
Нисек онотһон ул, Шәриф уны
Ул саҡтарҙа ҡалай йөҙәтте!..

Эйе, ул саҡ Шәриф, Татлыбай ҙа
Әле йәп-йәш, һылыу егеттәр.
Ә Алмаҡай алма кеүек бешкән,

Зифа талдай үҫеп, буй еткән.
Ғашиҡ булды уға Татлыбай.
Янып, көйөп, һөйөп йөрөнө.
Алмаҡай ҙа башта уны һөйә,
Яраталыр кеүек күренде.
Ләкин «ҡара ғәрәп» ошо Шәриф
Ҡилеп керҙе ике араға.
Алмаҡайҙың башын әйләндерҙе.
Белмәйем, ул ҡайһы арала!
Дөрөҫ, хәбәр йөрөнө:
— Алмабикә
Яратмай, тип, ирен — Шәрифте.
Ләкин ғәйбәт дауа буламы һуң
Терелтергә һүнгән өмөттө?
Бынан һуң Татлыбай күпме йылдар
Өйләнә алмай йөрөнө, интегеп,
Әллә ҡыҙҙар уны яратманы,
Әллә күңеле ҡалды кителеп.
Ахыр, ирҙән ҡалған Сәхибәгә
Өйгә инде барып, күҙ йомоп.
«Бәхет баҡсаһына кем инә алған,
Әсе яҙмышынан, һуң, уҙып?»

Еүеш ерҙә үҫкән бәшмәк һымаҡ,
Төптән йыуан, ауыр кәүҙәле
Сәхибәнең тупаҫ, ҡалын тауышы
Һәр сак үҙ өйөндә геүләне.
Эш яратманы ул:
— Эшләр булғас,
Ни өсөн мин ирга барҙым,— ти.—
Аҫырамаһа был Татлыбай, әйҙә,
Ташлаһын да китеп барһын,— ти.
Һәм ултыра, сүпкә батып һәр саҡ,
Бөтәһе лә уны беләләр.
Ялҡау ҡатындарға был ауылда
«Сәхибә» тип ҡушамат бирәләр.

Ҡатын шундай булды.
Ә атаһын
Ҡулак итеп ситкә һөрҙөләр.

Гөльямал һәм Шәриф, Алмаҡайҙар
Тап шул йылда колхоз ҡорҙолар.

Ата өсөн бала яуап бирмәй.
Колхоз Татлыбайҙы ҡаҡманы.
Тик ул үҙе һис бер эште юнләп
Яратманы, тәмен тапманы.
Иҫәпселәр курсын тамамланы,
Иҫәп эшен һәр саҡ бутаны.
Кладовщик итһәң, онотоусан,
Келәһендә йоҙаҡ тотманы.
Ниндәй генә эште ҡушһалар ҙа,
Кинәнес түгел, көйөнөс күрһәтте.
Әле килеп, бөгөн «яҙмыш» уны
Бригадир итте лә үрләтте!..
«Шәриф урынына!..
Инде Алма
Эре генә яндан уҙа алмаҫ!
Эй хоҙайым, ҡыҙыҡ булһын, әйҙә,
Гөльямалға мине ит алмаш!..»
Шундай уйҙар менән хыялланып,
Шашып йөрөй хәҙер Татлыбай.
Ил яҙмышы — халыҡ яҙмышы өсөн
Яныу бәхетен тоймай, татымай.

### ОҘАТЫУ

*...Илен, һыуын һаҡлап ҡорбан булған,*
*Шунда ята батырҙар һөйәге...*

*Башҡорт халыҡ йыры*

Һөйгән ирҙән, йәндәй уландарҙан
Айырылалар бик күп ҡатындар.
Ауыр, ауыр!..
Ләкин йола шундай:
Ил һаҡларға тейеш батырҙар.
Арыҫландай уландарын бөгөн
«Таң» колхозы яуға оҙата.
Ләкин һәр кем эсе хәсрәт хисен
Бикләп тота ҡаты йоҙаҡта.
Оҙатыу йәшһеҙ булды.

Һәр кем ябай,
Ғәҙәттәге һүҙҙе һөйләне.
Гөльямал да, йомшарыуҙан ҡурҡып,
Улын хатта ҡосоп һөймәне.
Сәхи уйнап-көлөп, һаубуллашып
Менеп урынлашты арбаға.
Шәриф, һуңғы тапҡыр киң йылмайып,
Ҡарап алды ҡатыны Алмаға.
Ат ҡуҙғалды.
Һуңғы хушлашыуҙар,
Ҡул болғауҙар
Өнһөҙ-тауышһыҙ.
Ниндәй көстәр кәрәк йәш түкмәҫкә,
Ҡосағында ауыр һағыштың.
Был түҙемдә, беләм, тыуған илгә
Икһеҙ-сикһеҙ бөйөк һөйөү бар.
Был түҙемдә йөрәктәргә һынмаҫ
Көс биреүсе илдең үҙе бар.
Тик Татлыбай быны һаман әле
Үҙ бизмәне аша аңланы:
«Ысынлап та, Шәрифте бик һөймәй,
Өҙәләнмәй икән Алмаһы!..
Ярай, Гөльямал, ти, иламаһын,
Ул етәксе, ә һуң Алмаҡай?..
Үҙе туптай йоморо, йәшәр сағы,
Әллә быны ул һис аңламай?!
Юҡ, юҡ, ул яратмай!..»
Татлыбайҙың
Янып китте йәшел күҙҙәре.
Һәр кем үҙ уйында.
Уның йәнһеҙ
Был шатлығын бер кем күрмәне.

## ГӨЛСӘСӘК ТӘ КИТТЕ...

Быҫҡаҡ ямғыр яуа.
Сиҙәм ергә
Шәре булып һыуҙар түшәлә.
Ерҙә балсыҡ, ә шәмәргән күктә
Тау-тау болот күсә, ишелә.
Күңелһеҙ көҙ. Ләкин йөрәктәрҙе

Был күҙмө ни шулай һыҡтата?
Ил ҡайғыһы унда:
«Дошмандарҙы
Уландар һуң ҡасан ҡыйрата?!»
Мәкер йылан шыуыша башҡалаға,
Бата-сума кеше ҡанына.
Һәр бер ҡала менән йөрәк ите
Гүйә өҙөп-йолҡоп алына.

Сәхи китеп күп тә тормайынса,
Ҡағыҙ килде һорап кешеләр:
«Заводтарға өҫтәлмә көс бирең!
Яуға китте бик күп кешеләр».
Гөльямалдың эсе өҙөлһә лә,
Яҙып ҡуйҙы башта үҙ ҡыҙын.
Шулай кәрәк. Йөктөң иң ауырын
Күтәрергә тейеш беҙ, ҡыҙым!
Һин ҙур инде. Унды тамамланың.
Һуғыш бөткәс, вузға китерһең.
Ә хәҙергә, балам, эшсе булып
Тырышып эшләп хеҙмәт итерһең.
Гөлсәсәк шат булды.
Уға нимә?
— Күрәмен,— ти,— Өфө ҡалаһын,
Тик, әсәй, һин быны бөтөнләйгә
Япа-яңғыҙ тороп ҡалаһың!..
— Һуғыш сағы, ҡыҙым, ул турала
Уйлап тороу хәҙер килешмәй,
Алмаҡайҙың бына улы ла китә...
Ваҡ балалар менән ул ни эшләй?
— Улай булғас, ебәрмә һуң уны.
Сабир ҡалһын өйҙә, колхозда.
— Ҡал,— тинем дә, ул бит кәңәшемде
Теләмәне төптө алырға.
«Гөлсәсәкте һин, ти, ебәрһең.
Мин кемдән кәм өйҙә ҡалырға?»
Гөлсәсәктең йөҙө янып китте,
Ал нурынан балҡып һөйөүҙең:
«Их, ул Сабир менән бергә булһа,
Белмәҫ ине янып-көйөүҙе!..»
Был хис әле йәшерен, тәрән сер ул,

Хатта дуҫ ҡыҙҙар ҙа белмәйҙәр.
Ә Сабирҙең инде ике ятып
Бер төшөнә, бәлки, кермәйҙер.
Булһын.
Барыбер Гөлсәсәккә рәхәт
Уның менән бергә булыуы,
Уйсан күҙле, томһа шул егеттең
Йәнәшәһендә атлап барыуы...
Их һин, йәшлек,
Тау шишмәһе генә
Сафлығыңа тиңдәш булырлыҡ.
Бармы ни көс, нужа, ҡайғы, михнәт
Шатлығыңды һинең быуырлыҡ!

Йәштәр китте. Алма, Гөльямалдар
Юл сатында оҙатып ҡалдылар:
Ҡасан улар балаларын тағы
Ошо ерҙә ҡаршы алырҙар?!»

## ИЛАУҒА ҺУҢ УЛ БИК ҺАРАН ИНЕ...

Эштән арынып ҡайтып ингән саҡта,
Дөм-ҡараңғы, айһыҙ төн ине.
Өйө һалҡын. Үҙе тик бер яңғыҙ.
Йөрәк өҙгөс ауыр, тын ине.
Эйе, яңғыҙ...
Бөгөн оҙатты ул
Гөлсәсәген — һуңғы балаһын.
Гүйә ҡыҙы тағы ҡабатланы:
«Әсәкәйем, яңғыҙ ҡалаһың!..»
Ауыр уйға ирек бирмәҫ өсөн,
Йөрөп ҡараны ул иҙәндә.
Тик аяғы бигерәк ҡаты баҫты,
Әйтерһең, ҙур итек кейгән дә!..
Йыр башланы, ләкин хәҙер уға
Үҙ тауышы ете ят булды.
Ул туҡтаны.
Сөнки йырлап булмай,
Тын тарыҡты, күҙгә йәш тулды.
Өҫтәленән алып, Гөлсәсәктең
Дәреслеген асып ҡараны.

«Ни эшләйһең, уҡыуы ла, бәлки,
Ҡалыр инде хәҙер баланың...»
Велосипед, элеккеләй әҙер,
Стенала тора һөйәлеп.
Әйтерһең дә, Сәхи әле генә
Елеп килгән, урам әйләнеп...
Бөтәһе лә уға булып үткән
Бәхет тураһында һөйләне.
Ә кем белә, ул бәхеттәр бер саҡ
Был ояға кире килерме?

Өҫтөн сисенмәҫтән, ул гөрһөлдәп,
Барып ауҙы һалҡын түшәккә.
Йөрәк итен ниҙер телеп үтте,
Һыҙланыуы үтеп үҙәккә.
Күҙҙәренән уның тәүге тапҡыр
Ағып сыҡты ҡайғы йәштәре.
Илауға һуң ул бит һаран ине,
Ҡаты ине кесе йәштән үк!..

Ул тыйманы, күҙҙән йәштәр, йәштәр...
Бер өҙлөкһөҙ һығылып аҡтылар.
Ахыры, Гөльямал да бөгөн таңды
Ҡайнар күҙ йәш менән аттыра?!

### III

### АЛМАҠАЙ

— Алмабикә, Алма, Алмаҡай, — тип,
Ҡәйефенә ҡарап, әсәһе
Атай ине уны, һәм быларҙың
Өсөһө лә бергә йәшәне.
Яратһалар, Алмаҡай, тинеләр,
Ололаһа — Алмабикә, тип,
Асыуҙары килһә:
— Ошо Алма
Теңкәгә гел тейеп бөтә, тип.
Алмаҡайҙың ғүмере сәскәләнде
Бөйөк, данлы боролош йылында.
Ирекле, саф һөйөү,

Азат тормош
Балҡып ятты уның юлында.
Ул Шәрифте һөйҙө,
Шәриф — уны,
Өр-яңыса тормош ҡорҙолар.
Хеҙмәттә һәм ғаиләлә улар
Һәр саҡ өлгө булып торҙолар.
Кем уйлаған, был ғаиләгә лә
Ҡайғы-хәсрәт көнө тыуыр, тип.
Көтөлмәгән яҙмыш Шәрифйәнде
Ил сигенә, яуға ҡыуыр, тип.
Фермала Алмаҡай күптән инде
Иң алдынғы һыйыр һауыусы.
Республика белә: ул һыйырҙан
Һөттө иң күп һауып алыусы.
Хәҙер, ирҙәр киткәс, ферма эше
Ҡарап ҡалды уға бөтөнләй,
Шәриф яҙа: «Алмам, тырыш, эшлә!
Тынысланма эшең бөтөрмәй».
Тәүге хаты Мәскәү эргәһенән,
Ут эсенән килде — фронттан.
«Яраланмай, тере сыҡтым, тигән,
Кисә булған ҡаты һуғыштан.
Беҙ ҙә, тигән, хәҙер был дошмандың
Нәҙек ерен белә башланыҡ.
Нисек ынтылһа ла, кисә үҙен
Артҡа табан алып ташланыҡ.
Фашист үтә алмаҫ, артта Мәскәү,
Хафаланма, йәнем, Алмаҡай,
Балаларҙы ҡара, иламаһын
Минең кескәй ҡыҙым, Һылыуҡай!»

Был хатты ул фермалағы бөтә
Дуҫтарына барып уҡыны.
Ошо хаттан уның йөрәгенә
Барып инде өмөт тулҡыны.
Ире киткән саҡта, бөтөнләйгә
Оҙаталыр кеүек тойғайны,
Ошо арҡала ул, һүҙ әйтә алмай,
Ағас кеүек ҡатып торғайны.
Әле уйлай: «Һуғыш үлем түгел,

Тормош дауам итә унда ла!
Шәриф тере, Шәриф хаттар яҙа,
Ҡаты һуғыштарҙа булһа ла...»

Бөгөн Алма, көндәгесә, таңдан
Малын-тыуарын, өйөн ҡараны.
Оҙон ҡара сәсен һылап-һыйпап,
Һөйәк тараҡ менән тараны.
Унан уятты ул кесе улын:
— Хәбир, тор, тор, эшкә барырға!
Ун ике йәш. Үҙең ир затынан,
Ҡәрәк ҙур ҙа, ныҡ та булырға.
Хәбир торғас, өтәләнеп китте:
Өҫ-башына ашығып кейенде.
— Әсәй,— тине етди, эре генә,—
Йә, ашарға тиҙерәк бир инде!
Алмабикә, яғымлы йылмайып,
Яуап бирҙе, улын ололап:
— Ашау әҙер, улым,
Гөлзифа, һин
Ағайыңды ҡарап тиҙ оҙат!
Үҙе өйҙән югереп сығып китте.
Фермаларҙа эштең күп сағы.
Йылы торлаҡ, аҙыҡ әҙерләргә,
Унан башҡа аҙмы эш тағы?!

Унда иртәнге эште тамамлағас,
Идараға китте югереп.
Ат алырға кәрәк. Фермаларға
Бесән ташыу эше өҙөлөр.

Ул ингәндә, Татлыбай яңғыҙы
Ни нәмәлер ихлас яҙына.
Башын әле уңға, һулға һала,
Ҡайһы саҡта теле һалына.
Алмабикә ингәс, ул, исмаһам,
Күтәрелеп тә бер ҡарамай.
Ултырышы әйтә:— Эшем ҡаты,
Мине бүлдерергә ярамай!
Ни эшләргә?
Алмабикәнең дә

Ваҡыттары тар саҡ бит әле.
Һәм ул ҡыймай ғына һорап ҡуйҙы:
— Гөльямал ҡайҙа?— тип.—
Әйт әле.
— Эм-те-эста,— ти Татлыбай, һуҙып.
Күҙен алмай яҙыу эшенән.
«Койолдороҡ!— тип уйланы Алма.—
Түрә булғас, бына нишләгән?»
Мейес буйлап алға әҙерәк атлап,
Ул һонолоп уға ҡараны.
Һәм ошонда уның ҡағыҙҙы буш
Сыймаҡлағанын ул аңланы.
Ҡай еренә әтәс яһап ҡуйған,
Ҡайҙа һыҙған кәзә һаҡалы...
«Был Татлыбай,— тип уйланы Алма,—
Барамы әллә әҙерәк һаташып?»
Һәм ул сыҙаманы:
— Миңә,— тине,—
Бөгөн бирәһеңдер атты һин?
Ферма бесәндәрен аҙбарҙарға
Ташый алмайым бит юҡһа мин.
Ул өндәшмәй.
Алмабикә ҡыҙа:
— Ҡисә лә бит аттар бирмәнең,
Аңлайһыңдыр, бөгөн дә мин бында
Һине күрер өсөн килмәнем...
— Бе-ләм!..— ти Татлыбай, тағы һуҙып,
Ҡағыҙҙарын ситкә этәрә.—
Минең эшем һинең ферма малын
Уйлау ғына түгел бит әле.
Һин шулай ҙа иртәгә килеп сыҡ.
Бәлки, берәй яйын табырмын.
— Һиңә ялынғансы,— тине Алма,—
Йөкмәп-һөйрәп ташып алырмын.

Һәм ул өҙә баҫып, сығып китте:
«Бына һиңә көләс Татлыбай!
Шулай йөҙөн ҡапыл үҙгәртергә
Нисек әҙ генә лә тартынмай?»
Ошо көндән Алмабикә тәүләп
Һыйырҙарҙы екте арбаға.

Ҡәрәк ине, нисек булғанда ла,
Бесәндәрҙе ташып алырға!
Һыйыр һауыусылар хафаланды:
— Һөтө бөтөр ҙәһә һыйырҙың.
Ҡайһылары көлдө:
— Һыйыр егеп,
Ҡупме инде эште ҡырырһың!..—
Ләкин Алмабикә үҙ һүҙендә,
Әллә асыуынан,
Нык торҙо.
Һыйыр егеп, эшкә тотондо ла
Бесән менән кәртә тултырҙы.
Тешен ҡыҫты шунда Татлыбай:
«Ялындырып тағы булманы.
Ялынырһың, Алма, ялынырһың,
Ялынаһы көнөң алда әле!..»

## ӨЙҘӨҢ ЙӘМЕ

Ҡыҙы киткәс, Гөльямалдың һис тә
Өй яғына күңеле тартманы.
Көнөн-төнөн эштә, ә өйөнә
Төн уртаһыҙ һис тә ҡайтманы.
Бер көн ҡарап үтте Ғәлимә әбей,
Тағы бер нисә көн күҙәтте.
Унан әйтте:
— Былай булмай, балам,
Бында кәрәк хужа, күҙәтсе.
Был ни эш, ти, өйө етемләнде,
Мал-тыуарын да ул ташланы.
Был Гөльямал, ахыры, колхоз тиеп,
Үҙен төптө онота башланы...—
Бер көн йыйынды ла күсеп килде
Гөльямалдың буп-буш өйөнә:
«Эш кешеһен былай килешәме
Ташлап ҡуйыу яңғыҙ көйөнә?»

Гөльямал ҡайтыуға, өй йыйылған,
Ут яғылған, һыйыр һауылған.
Өҫтәлендә йылы аш боҫорай,

Самауырға күмер һалынған.
Ғәлимә әбей үҙе, аяҡ бөкләп,
Йөн сиратып, түрҙә ултыра.
Бар торошо өйҙө һәм йөрәкте
Сикһеҙ йылы менән тултыра.
— Инәкәйем, бәғерем, һинме шулай
Минең өсөн эшләп интектең?
Белһәң ине, инәй, был көндәрҙә
Яңғыҙлыҡтан бигерәк интектем.
Эштә онотолам. Ҡайтып инһәм,
Ауыр була яңғыҙ үҙемә.
Яңғыҙлыҡта еңел нәмәләр ҙә
Әллә нисек ауыр күренә.
— Беләм инде, ҡыҙым, шуға килдем.
Туҡта, мәйтәм, барып ҡарайым.
Ҡыҙым Гөльямалдың ҡайтыуына
Сәй ҡайнатып, картуф ҡурайым.
— Рәхмәт, инәй!..—
Ул, әбейҙе ҡосоп,
Үбеп алды сырыш битенән.
— Миндә генә йәшә, инәй, йәнем,
Ысын күңелемдән үтенәм!..
Биш ул әсәһе ул — Ғәлимә әбей.
Әммә бишеһе лә фронтта.
Ейәндәре үҫкән. Килендәре
Бирешмәҫтәр, унһыҙ тороп та.
Шулай уйланы ла күсеп килде.
Гөльямал шат: янда әбей бар.
Ҡәҙерен белһәң, өйҙөң йәме бит ул
Ғәлимәләй теремек әбейҙәр.

### ҠАСАҠТАР

—Һуғыш дауам итә.
Күп ҡалалар
Тороп ҡала дошман яғында.
Тик кешеләр китә — совет кешеһе
Йәшәй алмай дошман янында.
Улар күсеп килә. Ҡаршылайыҡ.
Ярҙам ҡулыбыҙҙы һуҙайыҡ.
Йортһоҙға — йорт, аҙыҡһыҙға — аҙыҡ

Биргән яҡын дуҫтар булайыҡ.
Беҙҙең ошо оло, ысын дуҫлыҡ
Октябрҙә еңеү килтерҙе.
Ошо дуҫлыҡ был ҙур һуғышта ла
Беҙҙе еңеүҙәргә еткерер...—
Шулай тине Гөльямал халҡына.
Һәм бер нисә атты ектерҙе.
Күп тә үтмәй, улар станциянан
Ҡасаҡтарҙы тейәп килтерҙе.
Урам тулы халыҡ. Беҙҙә инде
Һәр саҡ асыҡ дуҫҡа йөрәге.
Һәр береһе өйөн бүлешергә,
Ҡунаҡ ҡаршыларға теләне.
Ғәлимә әбей әйтә:— Әйҙә, улар
Минең өйөмдә лә торһондар.
Алмабикә әйтә:— Бер бүлмәмдә
Теләгәнсә тормош ҡорһондар.
Аҡһаҡалдар — Әхмәт, Фәйзуллалар,
Хәсән, Әксәндәр ҙә саҡыра:
— Әйҙә, рәхим итегеҙ, ситһенмәгеҙ,
Уңайһыҙланмағыҙ саҡ ҡына.
Татлыбай ҙа ихлас. Югереп йөрөп
Кеше өгөтләне, димләне.
Тик ул:
— Өйөм иркен, балам да юҡ,
Миңә барығыҙсы,— тимәне.
Ахыр барыһы ла урынлашты.
Тик бер ҡыҙсыҡ ҡалды урамда.
Ниңә әсә кеше сығып алмай?..
Оноттомо бала турында?!
Кескәй генә бер ҡыҙ.
Ун ике йә ун өс йәш булыр.
Зәңгәр күҙҙәрендә йым-йым иткән
Ынйы бөртөгөндәй йәш тулы.
Аяғында сандалиҙәр генә,
Өҫтөндә лә йәйге кейемдәр.
Улар бөтәһе лә шулай инде
Йәйге кейем менән киткәндәр.
Халыҡ солғап алды. Ҡыҙ баланың
Күҙкәйҙәре ҡурҡып югерә.
Ҡылған сәсен, йоҡа күлдәккәйен

Өҙөп-йолҡоп, күҙгә ел өрә.
Гөльямалдың эсе өҙөлөп китте.
— Ниңә, ҡыҙым, өшөп торaһың?
Әсәң ҡайҙа, юғалттыңмы әллә,
Ниңә сығып алмай тора һуң?
Бала өндәшмәне, әсә һүҙен
Ишеткәс, ул сеңләп иланы.
— Ысынлап та, әллә берәй әсә
Ташлап ҡалдырҙымы баланы?
Ошо ваҡыт Алмабикәләрҙән
Югереп сыҡты арыҡ бер ҡатын.
— Әйҙә, Роза, беҙҙең менән бергә.
Өшөйһөң бит, тышта бик һалҡын.
Роза ҡуҙғалманы, күҙҙәренән
Ҡаты һағыш, ҡурҡыу китмәне.
—Юл буйына ҡарап алып килдем,
Һаман миңә ылығып етмәне...
— Ҡыҙың түгелме ни?
Улай булғас,
Үҙ әсәһе ҡайҙа баланың?..
—Ҡыҙым түгел. Улар менән беҙ тик
Кешеһе инек бер үк ҡаланың...
Атаһы уның хәрби. Ә әсәһе...
Һәләк булды... юлда...
Дошман самолеты ҡотороноп
Ут асҡайны беҙгә... унда...
Юлда ҡарап килдем. Әле лә мин
Әҙер уны үҙем ҡарарға.
Мин ышанам: эшләп,
Үҙ балама,
Һәм уға ла аҙыҡ табырға,
Роза, быны раҫлап, башын ҡаҡты:
«Улар менән үтте ҡыйынды...»
Ә Гөльямал ҡыҙҙы етәкләне:
— Үҙемә һин бар ҙа ҡуй инде.
Оҡшаттың да, бугай, мине үҙең...
Унан әйтте арыҡ ҡатынға:
— Рәхмәт һеҙгә, шундай ауыр саҡта
Онотмағас кеше хаҡында.
Улар таныштылар: арыҡ ҡатын
Фамилияһын, исемен атаны.

— Лиза Семенова, агрономмын.—
— Һәйбәт. Һәйбәт!
Тоям эш кешеһе артҡанын...

Өйгә ҡайтҡас, Гөльямал Розаны
Туйындырҙы, мунса индерҙе.
Гөлсәсәктең кескәй сағындағы
Ҡейемдәрен табып кейҙерҙе.
— Рауза!— тип өндәште уға һөйөп,
Исемең дә һәйбәт, беҙҙеңсә.
Рауза, ҡыҙым, ҡыйыныраҡ булыр,
Беҙҙең телде әҙерәк белгәнсе...
Ә кескәй ҡыҙ һаман ғәжәпләнгән,
Шикләнгән дә һымаҡ ҡаранды.
Әйтерһең дә, эҙләй кемделер ул,
Таба алмай, яны ҡараңғы...
Гөльямал да ҡыҙҙы иркәләне.
Ҡағып-ҡағып һөйҙө арҡаһын.
— Һуғыш бөткәс, килеп алып ҡайтыр
Ҡыҙыҡайымды үҙенең атаһы...

**БАЛА ЙОҠЛАЙ...**

Төнгө тынлыҡ.
Бына бала йоҡлай
Ҡарауатта,
Йылы ябынып.
Ләкин, уға ҡарап, йөрәк һыҙлай,
Асыу китә дөрләп ҡабынып.
Бала йоҡлай
Тыныс йылы өйҙә.
Тыныс түгел ләкин йоҡоһо.
Төштәрендә үлем, һуғыш күрә,
Әсәкәйен һағына юҡһынып.
Бала йоҡлай.
Бына фашист ҡоҙғон
Тағы үтә ярып төшөнән,
Ут яуҙыра,
Үлем, үлем, үлем!..
Айыра балаларҙы әсәнән!..
— Әсәй, йәнем, ҡурҡам!..

Роза ҡапыл
Уянып китә ауыр йоҡонан.
Үҙ янында Гөльямалды күргәс,
Тағы тала ауыр йоҡоға.
Шулай һәр төн.
Бала һаман әле
Ҡот осорғос ҡурҡыу кисерә.
Был кисереш Гөльямалға тағы
Төҙәлмәҫлек әрнеү килтерә.
Бала йоҡлай,
Ниндәй, рәхәт, тыныс...
Кем ҡыйыр һуң уны боҙорға?
Ә ул килгән, ҡара йөрәк дошман,
Йоҡоһонда уны быуырға!
Бала йоҡлай,
Үҙе йоҡола ла:
— Әсәй, әсәйем,— тип һөйләнә.
Әсәйҙән дә йылы,
Унан матур
Һүҙ бармы ни уға һөйләргә.
Ә ул килгән
Илде баҫып, талап,
Әсәләрҙе һуйып бөтөргә.
Ер йөҙөнөң бөтә балаларын
Шыпа үкһеҙ, етем итергә!
Әйтегеҙсе, быңдай яуыз йәнде
Ниндәй әсә ергә яратҡан?
Ниндәй әсә ниндәй ағыу менән
Уның йөрәген шулай ҡаралтҡан?
Мең-мең ләғнәт төшһөн,
Уны үҫтергән
Таш йөрәкле яуыз йәндәргә,
Кеше исеме төптө лайыҡ түгел,
Фашист тигән ҡанһыҙ бәндәгә.
Роза йоҡлай.
Ә Гөльямал һаман
Сәсен һыйпап, һөйөп ултыра.
Һәм йөрәген һуғыш менән бәйле
Ауыр, һағышлы уй тултыра.

## ТУҘ ҺИН, ЙӨРӘК!..

Роза инде уйнап-көлөп йөрөй,
Урамға ла сыға башланы.
Төндә ҡурҡыу, көндөҙ кешеләрҙе
Ятһыныуын тамам ташланы.
Ғәлимә әбей менән улар бик дуҫ.
Татыу итеп, һәйбәт йәшәйҙәр.
Өй эсендә һәр бер кескәй эште
Икәүләшеп бергә эшләйҙәр.
Ғәлимә инәй сәй ҡуйырға булһа,
Роза хәҙер һыуға югерә.
Уның телен аңлай башлағанға
Ҡыуана ул сикһеҙ үҙе лә.
Ғәлимә инәй әйтә:— Ҡыҙым, Рауза,
Энәмә еп һаплап бирһәңсе.
Бына рәхмәт, ҡалай сос әле һин!..
— Күҙлек кенә, инәй, кейһәңсе.
— Нимәгә ул, ҡыҙым, ошо күреү
Еткән инде минең күҙемә.
— Инәй, һуғыш бөткәс, көмөш ситле
Күҙлек алып бирәм үҙеңә.
— Көмөш ситле?
— Эйе.
— Ярай, ҡыҙым,
Һуғыш бөткәс, уны алырбыҙ.
Әле күҙлекһеҙ ҙә беҙ фронтҡа
Бүләктәрҙе бәйләп һалырбыҙ.
Һин дә бәйләшерһең...
Улар шулай
Көн үткәнен тоймай ҡалалар.
Гөльямалды һәр төн икәү бергә
Ҡыуанышып ҡаршы алалар.
Гөльямал да улар эргәһендә
Яңғыҙлығын тоймай, онота,
Розаны ул үҙ балаһы кеүек
Яҡын күрә, өҙөлөп ярата.
Уның сағыу тауышы,
Көләс йөҙө
Хәтерләтә алыҫ үткәнде:
Гөлсәсәк тә шундай ғына ине,

Хәҙер балам ҡалай үҫкәндер...»
Роза белә: Гөльямал һәр ваҡыт
Газеталар уҡый, ҡайтҡас та.
— Инде ашамаҫ!— тип Ғәлимә инәй
Һуҡранып ҡуя ҡайсаҡта.
Роза, киреһенсә, ашыға-ашыға
Газетаны уға тоттора:
— Уҡы, апай,
Беҙҙекеләр ҡасан
Илде фашистәрҙән ҡотҡара?
Ә бөгөн ул айырата шат ине:
Хат бар ине ситтән-фронттан.
«Сәхиҙәндер...
Апай был арала
Бошоноп йөрөй ине хат юҡтан...»
Кисен Гөльямалға, ҡайтыу менән,
Роза һөйөнөп хатты тапшырҙы.
Гөльямалдың йөҙө ҡыуаныстан
Яҙғы ҡояш кеүек яҡтырҙы.

— Хат, тине, хат!..
Розалар ҙа тынып,
Ҡыуанышып, көтөп ҡалдылар.
Ләкин Гөльямалдың төҫө ҡасты...
Быуындары ҡапыл талдылар.
Йығылып китә яҙҙы. Яҡты күҙе
Томанланып китте, йәшләнде:
«Әй, был һуғыш!..
Әй, был ҡанлы һуғыш
Һәләк итте күпме йәштәрҙе!..»

Хат фронттан ине.
Сәхиҙең бер
Дуҫы яҙған уның хаҡында.
«...Һәләк булды, күп ҡорбандар алған
Ҡаты һуғыш барған сағында...
Ул ерҙән беҙ әҙерәк артҡа сиктек.
Күмә алманыҡ үлгән дуҫтарҙы.
Мин үҙем дә ауыр яраландым,
Тик врачтар ғына ҡотҡарҙы.

Юкһа һеҙгә был ҡайғылы хатты
Булмаç ине, бәлки, яҙыусы.
Ә беҙ һүҙ ҡуйыштыҡ, әсәйҙәргә
Белдерһен, тип тере ҡалыусы...»
«Ниндәй ҡайғы!
Көс етмәçлек ҡайғы!..
Ҡескәй генә ҡағыҙ төргәктә.
Их һин, йөрәк, түҙ һин,
Ҡан һауһаң да,
Ут янһаң да үтеп үҙәккә!..»
Өйҙә ауыр, шомло тынлыҡ баçты.
Роза йәнә һүнде, һүрелде.
Ғәлимәнең сырыш бите буйлап
Бер өҙлөкһөҙ йәштәр түгелде.
Ә Гөльямал, башын түбән эйеп,
Уйға сумып оҙаҡ ултырҙы.
Гүйә күңелен, яраларҙан әрсеп,
Йәшерен көстәр менән тултырҙы.
Унан ҡырҡыу итеп бер һүҙ әйтте:
— Уйламайым, Сәхи үле, тип.
Иламайыҡ, инәй,
Бошма, Роза,
Ышанайыҡ, ҡайтып килер, тип.

## УЛАР ҮÇӘ

Ауыл уртаһында иң матур йорт,
Ул йорт — балаларҙың баҡсаһы.
Ғүмер буйы бергә барһа ине
Шат көләслек бала саҡтағы.
Тәҙрәләрҙән ҡояш күҙен ҡыçа,
Көҙ ҡояшы ҡырыç, күңелһеҙ.
Күңелһеҙлек белмәç бала саҡтар
Иçтән һис сығасаҡ түгел һеҙ!
Бына береһе, ағас атҡа менеп,
Сабып йөрөй урам буйында,
Икенсеһе ҡурсаҡ бәпескәйен
Бәү-бәү итә йылы ҡуйында.
Берәү бейей «Ҡарабай» көйөнә,
Ҡайһылары югерә, ҡыуыша,
Ә бер малай шыма аҡ ҡағыҙға

Ат һүрәте яһап булаша.
Ҡайнап тора шулай шаулы баҡса,
— Әй, бәхетле, ғәмһеҙ бала саҡ!
Уның йылы хисе йөрәктәрҙә
Ғүмер буйы һыҙылып барасаҡ.
Бөгөн иртән иртүк, ваҡыт бүлеп,
Гөльямал да килде ошонда.
Һәм балалар уны урап алды.
Гүйә йыуаттылар:— Бошонма!
— Ниңә, инәй, беҙҙең янызыбыҙға
Һирәгерәк килә башланың?
— Мин ҙур үҫтем, инәй,
Ҡасан инде
Мин мәктәпкә йөрөй башлармын?
— Атайым беҙгә, инәй, хат ебәргән,
Ҡаты һуғыштарҙа булдым, тип,
Фашистәрҙе һис тә аяп тормай,
Автоматтан атып ҡырҙым, тип,
— Ҡасан, инәй, һуғыш бөтөр икән?
Атайым ҡайтһын ине тиҙерәк...
— Әсәйем миңә сатин күлдәк текте,
Минең әсәйем һәйбәт бигерәк...
— Инәй, бына шырпы ҡаптарынан
Ике ҡатлы өйҙәр яһаным.
Мин, ҙурайғас, бөтә ауылыбыҙға
Ошондай ҙур өйҙәр һаламын...
. . . . . . . . . . . . . . . .
Улар шулай, берен-бере бүлеп,
Һөйләнеләр оло әсәгә.
Һаман йыуаттылар, саҡырҙылар
Улар өсөн эшкә, йәшәүгә.
Ә ул балаларҙы иркәләне,
Биттәренән һөйҙө, һөйләтте,
Күңеле бөтөп оҙаҡ ҡарап торҙо
Бер ҡыҙ эшләп ҡуйған һүрәтте.
Унан белеште ул: балаларға
Нимә яҡшы, нимә етешмәй?
Татлыбайға бик нык асыуланды:
Ыҙалаған утын килтертмәй.
Повар ҡыҙҙың аш-һыу бешереүен
Ҡарап, кухняла ул туҡтаны.

— Балаларға бынан һуң да шулай
Тәмле итеп бешер бутҡаны.—
Ул урамда. Бына мәктәп яны
Шау-гөр килә уйын-көлкөнән.
Пионерҙәр ағас ултырталар,
Өйкөм-өйкөм итеп, төп менән.
— Инәй, алмағастар үҫтерәбеҙ,—
Тиҙәр улар һөйөнөп, шатланып.
— Бер саҡ улар ап-аҡ сәскә атыр,
— Бер саҡ алма бешер, һутланып...
— Эйе.
Унда һеҙ ҙур булырһығыҙ,
Уҡып йөрөрһөгөҙ ҡалала,
Йә данлыҡлы комбайнер булып,
Ашлыҡ йыйырһығыҙ далала.

Алмаларҙы ашап, был баҡсала
Яңы уҡыусылар йөрөрҙәр.
Быны үҫтереүсе ағайҙарға,
Апайҙарға рәхмәт тиерҙәр.—

Бынан һуң ул тағы ары китте,
Яландағы ырҙын яғына.
Һабан һөрөп ашлыҡ сәсеп йөрөгән
Тырыш комсомолдар янына.
Һәм күңелендә уның бер-бер артлы,
Йыуандырғыс уйҙар тоҡанды.
Һуғыш нужаһы ла бөгә алмаған
Йәштәрҙе ул уйлап һоҡланды:
«Дошман, — тине ул, — нисек ҡоторонол
Ташланмаһын илдең өҫтөнә,
Улар үҫә.
Кем һуң туҡтата алыр
Ҡояш нурын ҡара көс менән.
Алмашсылар килә. Коммунизм
Кешеләре — йәштәр үҫәләр.
Минең ғүмеремдең минуттары
Улар өсөн эшләп үтәләр.
Был ҙур бәхет.
Ауыр булыр ине,
Үҙ турамда ғына уйлаһам,

Бөйөк бәхет йортон төҙөүсе был
Ташсыларҙың береһе булмаһам...»

**ГӨЛСӘСӘК НИ ЯҘА?**

Ҡайғыға, ти, ҡайғы эйәреп йөрөй,
Шатлыҡ, тиҙәр, шатлыҡ эйәртә.
Гөльямалға килде тағы бер хат:
Ул да ҡайғы һала йөрәккә.
Гөлсәсәге яҙа:
«Әсәй, ауыр,
Эй ауыр ҙа бында тороуы.
Барак һыуыҡ, белһәң ине әсәй,
Ҡулдарымдың нисек туңыуын!..
Завод эше бигерәк ауыр икән,
Мазутланды бөтә кейемем.
Оноттом да инде, ҡасан һуң мин
Таҙа кейемдәрҙе кейендем?
Әсәй, ҡайтар мине,
Колхозда ла,
Өйөндә лә тырышып эшләрмен.
Әсәй, минһеҙ унда япа-яңғыҙ
Һин һуң нисек кенә йәшәрһең?..»
Бөгөн көн буйына Гөльямал гел
Ҡыҙы тураһында уйланы.
Бала бит ул, эсең өҙөлмәй ҙә
Ҡыҙғанмай ҙа уны буламы?
Насармы ни берҙән-бер баландың
Үҙ янында һыйынып тороуы,
Исмаһам, бер балаң йөрәгеңде
Йылытыуын көн дә тойоуы?..
Кисен улар эштән, бергәләшеп
Алмабикәләргә ҡайттылар.
Уның өйөндә лә ошондай уҡ
Көтөлмәгән бер хат таптылар.
Сабир яҙа: «Әсәй, тик фронтҡа
Китеү генә минең теләгем.
Әгәр ебәрһәләр, атайымдың
Булыр инем унда терәге.
Уның часенә мин һорар инем...
Ҡолаҡ һалыусы юҡ теләккә.

Бына ғәжәп, ебәрмәйҙәр һаман,
Үҙем һорап, үҙем теләп тә!..»
Ике әсә, бергә кис ултырып,
Балаларға хаттар яҙҙылар.
Ике әсә берҙәй янып-көйгән
Йөрәктәрен хатҡа һалдылар.

Алмабикә яҙҙы: «Ебәрмәгәс,
Заводта һин, улым, кәрәктер.
Һин заводта эшлә атайыңа
Дошман ҡыйратырҙай терәкте!..»
«Ҡыйын, тиһең һин, тип,
Асыуланып,
Яҙҙы Гөльямал был хатында.—
Яңылышаһың, еңелдер тип уйлап,
Хәҙер колхоз эше хаҡында.
Ә фронтта нисек?
Ҡеше булһаң,
Еңел эште, ҡыҙым, эҙләмә!
Яҡшы эшлә, һин тырышһаң унда,
Арыу булыр бында беҙгә лә».

## ФРОНТ ӨСӨН!..

Тышта буран ҡотора.
Ҡыш та етте,
Ҡаты һуғышлы ҡыш һалҡыны.
Тәнде — һалҡын, ә йөрәкте семетә
Ауыр юғалтыуҙар ялҡыны...
Хат юҡ инде,
Нисек өҙөлөп-өҙөлөп,
Һағынып көтһә лә ул көн һайын.
Һин дә минең һымаҡ тигән кеүек,
Өй артында яңғыҙ аҡ ҡайын.
«Улым инде, бәлки, ысынлап та,
Ятып ҡалғандыр шул урманда...
Гөлсәсәгем яҙһасы, исмаһам,
Эштән бушабыраҡ торғанда.
Ҡайтыр булма, тип яҙғанға миңә
Хәтерҙәре, бәлки, ҡалғандыр.
Еңел эш эҙләйһең тигән һүҙҙе

Ҡүңеленә ауыр алғандыр...»
Әсә йөрәге бит, уға ауыр,
Ҡыҙын уйлай, өҙөлөп һағына.
Халыҡ йыйылғансы, оҙон итеп,
Хаттар яҙҙы уға тағы ла.
Ҡлуб балҡып тора. Берәм-һәрәм,
Ҡилеп тулды бисә-сәсәләр.
Уландарын сикһеҙ яратыусы,
Саф йөрәкле изге әсәләр.
Тәүге һүҙҙе алды Гөльямал.
Ғәҙәтенсә ярһып һөйләне.
— Фронт өсөн!
Бөтәһе лә фронт өсөн!..
Еңеү өсөн!— булды һүҙҙәре.
Ул һәр ваҡыт шулай ярһып һөйләй.
Ирҙәрсә ҡул һелтәп алыҫҡа.
Гүйә ошо ваҡыт геүләп китә
Туп тауышы ҡырҙа, алыҫта.
Ул картаға төртә:
— Дошман бына ҡайҙа!..
Бында ята: Мәскәү — башҡала!..
Беҙҙең ғәскәр уны бирерме ни,
Ҡалдырырмы уны башҡаға?!
Юҡ, ҡалдырмаҫ.
Башын һалһа һалыр,
Ил намыҫын улдар тапатмаҫ.
Изге ерҙең изге икмәк-тоҙон
Илбаҫарға улар ашатмаҫ.
Ләкин, дуҫтар, беҙ беләбеҙ, еңеү
Ҡүп ҡорбандар аша киләсәк.
Беҙҙең барыбыҙҙың тырышлыҡтан,
Берҙәмлектән тора киләсәк!..
Ҡыш аяуһыҙ килә. Ҡөндәр һыуыҡ.
Бийма, тундар кәрәк улдарға.
Йәгеҙ, кемдәр нимә бирә ала
Ебәрергә хәҙер уларға?

Ҡитте бүләк биреү.
Иң тәү башлап
Һалды Гөльямал бер йылы тун.
— Туны булғас, бийма̊һы ла булһын!..

— Бейәләй ҙә кәрәк була ул!..
Шулай һалыштылар.
Сәхнә тулды.
Бүләкһеҙ ҡалманы бер кеше.
Тик Татлыбай менән Хәбирйәндең
Күренмәне бында өлөшө.
Сәхибәһе әйтте:— Беләһегеҙ,
Быйыл бик аҙ кәзә-һарығым.
Хәбир әйтте:— Бисәм ҡартайған,
Бәйләүсе юҡ, нимә һалырым?
— Мәйелегеҙ,— тине, эсе бошто
Гөльямалдың бындай ҡылыҡҡа.
— Ил төкөрһә, күл була, ти халыҡ.
Ниңә ҡалышырға халыҡтан?!
Әгәр тамсығыҙҙы дөйөм күлгә
Тамыҙыуҙан улай ҡурҡһағыҙ,
Ҡала бирһен.
Барыбер ярҙам ағылыр,
Фронттарға беҙҙән туҡтауһыҙ!..—
Зал тулҡынып ҡуйҙы.
Бөтәһе лә,
Татлыбайға ҡараны боролоп.
Ошо ваҡыт арттан, мыш-мыш итеп,
Ғәлимә әбей торҙо ҡаранып,
Унан Хәбирйәнгә асыу менән
Әйтте:— Әй, һин, һаран, һаҡалтай!..
Балалар, мә, минән бүләк булһын,
Ошо йылы ун пар башалтай.
Бүләктәрен биргәс, ул дөп баҫып,
Тағы үтте артҡы урынға.
Тағы ҡоро ғына әйтеп ҡуйҙы
Сәхибәгә төбәп тураға.
— Йә, ҡуй, килен, улай һаранланма,—
Ун һарығың көйшәй арала,
Ирең — бригадир. Килешәме?
Йә, йә, миңә яман ҡаранма!..—
Гөльямал бик риза:
«Иллә-мәгәр
Кәрәк ерҙән генә ҡаптырҙы...»
Унан әйтте:
— Бына Ғәлимә инәй

Ҡай бер йәштәрҙән дә арттырҙы.
Ап-аҡ, йомшаҡ, ябай башалтайҙар,
Ҡуңыстары матур, сигеүле;
Сигеү генә түгел, тап нәғешләп
Һалдаттарҙың исеме тегеүле!
Бына Хәмит, Рәшит, Нәғимемә...
Сәхигә тигән дә нәғеш бар!
Гөльямалға был һүҙ: «Улың тере
Тигән һымаҡ булды — өмөт бар!»
Ул һөйөнөп Ғәлимәгә баҡты:
— Инәм төн йоҡоһон белмәне.
Быны улар Роза ҡыҙым менән
Төн ултырып икәү бәйләне.

## СИР ОНОТОЛДО...

Әхмәт ағай бауыр сире менән
Быға саҡлы бик нык этләнде.
Ҡара һары булып, төҫө бөтөп,
Бөгөлөп ятты бик күп кистәрҙе.
Һары ауырыуына һабышты ул.
Һауығыуҙан өмөт төңөлдө.
Һуғыш сыҡҡас, уландары киткәс,
Ятып түҙмәй торҙо, «терелде».
Йөрөй башланы ул әкрен-әкрен.
Урамға ла сығып әйләнде.
Мал-тыуарҙы ҡарап,
Ситән-митән
Ҡаҙыҡтарын тотоп бәйләне.
Әбейе көлә:— Бына ғәжәп, бабай,
Күҙҙәреңә һары ҡойолмай!..
Килене Сәрби көлә:
Ҡайным итте
Ашай ине элек тыйылмай.
Хәҙер улай теймәй...
— Дөрөҫ, килен,—
Ти Әхмәт ҡарт, тере йылмайып, —
Врач ҡушмаһа ла, ит ашауҙан
Мин үҙемде һис тә тыйманым.
Бер кис сығып китте:
— Туҡта әле,— ти,—

Гөльямалдың үҙен күрәйем.
Эш һорайым. Бынауындай саҡта
Эшләмәйсә нисек түҙәйем?..
Идарала уны осратмағас,
Барып инде тура уларға.
Ә, баҡтиһәң, конюх Хәсән менән
Ҡәлимулла ҡарт та уларҙа.
Ҡөтөп ултыралар.
Гөльямал юҡ.
— Хәҙер ҡайтыр, уҙ,— ти Ғәлимә.
— Әйҙүк,— тиҙәр ҡарттар.—
Ултыр. Һөйлә:
Ниңә күренмәйһең һин бер ҙә?
Әхмәт уҙҙы. Ғәлимә әбей баҫты,
Аҡ мейескә терәп арҡаһын.
Гөльямалдың исемен өҫтәй-өҫтәй
Асып һалды һүҙҙәр тартмаһын:
— Беҙҙең,— ти ул, — Гөльямал әйтә бит,
Бер саҡ һуғыш төптө бөтөр, — тип.
Беҙҙең балаларҙың балалары
Тыныс ҡына ғүмер итер, тип.
Хәсән бабай башын сайҡап ҡуйҙы:
— Ай-һай, белмәйем шул, еңгәкәй.
Бөтә ерҙә байҙар бөтмәйенсә,
Ҡотолоп булмаҫ һуғыш-имгәктән.
— Дөрөҫ шул,— ти Ҡәли,—
Бына мине ал.
Япон һуғышында ҡатнаштым.
Ярман һуғышында беҙ ни тиклем
Немецтәрҙең яуын ҡаҡшаттыҡ!
Ә ул йәнә бына килеп еткән...
— Бынығы булыр уның аҙағы,—
Ти Ғәлимә уның һүҙен бүлеп,—
Ҡора алмаҫ бүтән тоҙағын.
— Гөльямал әйтә бит, беҙҙекеләр
Ошо арала алға киткәндәр.
Мәскәүгә ынтылған сусҡаларҙың
Томшоҡтарын емерә типкәндәр.
Гөльямал әйтә бит: кешеләр гел
Байҙар өсөн яуға бармаҫтар,
Ошо юлы емерһәк тештәрен,

Ҡабат килергә, ти, баҙмаҫтар,
— Уныһы шулай, еңгә,— тип, көрһөнөп,
Әхмәт ҡарт та һүҙгә ҡушылды,—
Хәҙергеһе бына ауырыраҡ,
Эсте тырнап тора, бошороп.
Минең улым Әхәт яҙған әле:
— Уларҙа, ти, ҡорал күберәк.
Самолет та, танк, автоматтар...
Беҙҙә әле улар әҙерәк.
Беҙгә, тигән, һис тә кисектермәй
Кәрәк ҡоралдарҙы күбәйтеү.
Фронттарға ярҙам тигән эште
Кәрәк унда, тылда көсәйтеү!..

Улар, шулай берен-бере бүлеп,
Һөйләнеләр тормош ағышын.
Унан тикшерҙеләр бригадала,
Фермаларҙа эштең барышын.
Ул арала өй хужаһы ҡайтты.
Өҫтәлгә сәй, шәкәр ҡуйылды.
Сәй янында һүҙҙәр тағы һуғыш,
Эш хаҡында барҙы, ҡуйырҙы.
Кәли әйтте:— Ошо ауыр саҡта
Өйҙә ятып булмай, ҡартмын, тип,
Шуға килдем әле бына һиңә.
Килен миңә лә эш тапһын, тип.
Әхмәт көлдө:
Тағы тап булыштыҡ.
Икебеҙҙең йомош бер икән.
Ай-һай, ҡорҙаш, тик колхозда беҙҙең
Көс етерҙәй эштәр бар микән?
— Булмаймы һуң?!— Алмаш-тилмәш ҡарап
Һөйөнөп-уйлап алды Гөльямал:
«Шундай халыҡ барҙа еңеп сыҡмаҫ
Эш булырмы ошо донъяла?!»
Унан әйтте:— Әхмәт ағай, һин шул
Бригадирлек эшен алырһың.
Фронттағы улың Әхәт эшен
Аҡһатмайса алып барырһың.
Кәли ағай, беләм, етмеш йәштә.
Ләкин әле етеҙ, егеттәй,

Ваҡ мал фермаһында беҙгә тап шул
Тәжрибәле ҡарттар етешмәй.
Ҡарттар риза булды, тик Хәсән ҡарт
Ни өсөндөр бөгөн күңелһеҙ.
Һаҡал осон семеткеләп ала,
Күҙе югергеләй түҙемһеҙ.
— Хәсән бабай,— ти Гөльямал, көлөп.—
Беләм, Татлыбайҙы яратмай...
Уны күрһә, үрһәләнеп тора
Шәриф менеп йөрөгән күк аттай.—
Хәсән бабай, ҡапыл ҡыҙып китте:
— Шул да булған икән бригадир!..
Гөльямал, һин минә уның менән
Осрашмаҫлыҡ бүтән бер эш бир.
Аттарҙы ул теге баҙарсыға —
Хәбирйәнгә биреп йонсота.
Ә уныһы сауҙа, баҙар булһа,
Колхозсылығын да онота.
Элекке көн шулай көрән атты
Алып ҡайтты тамам арытып.
Татлыбайға әйткәс:— Һин, олатай,
Ҡыҫылма,— ти,— зинһар, ары тор!
Ҡыҫылмағас, ниндәй конюх, ти, мин?
Аттарға бит мин дә яуаплы.
Ә ул әйтә: —Ярар, ҡартлас, ярар,
Быныһы булыр һуңы, аҙаҡҡы.
Шуға бөгөн, ҡаты асыуланып,
Һиңә һөйләйем тип килгәйнем.
— Ниңә уны күптән белдермәнең?
— Эрәтләнер, бәлки, тигәйнем.
Әммә...
Аҡ самауыр шаулай. Улар һаман
Кәңәшләшеп, тәмләп сәй эсә.
Сәй янында күңел дә көрәйә,
Сәй янында һүҙ ҙә килешә.

### ЯҘҘЫ ТОЙМАЙ УЛАР...

Сәсеү бара.
Көн-төн тракторҙар
Ҡәҫ аҡтара, геүләй туҡтамай.

Гөльямал тап шуға ышанып әйтә:
Сәсеү тамамлайбыҙ һуңламай!
Әхмәт ҡарттың баҫыу бригадаһы
Уның эсен бөгөн бошормай.
Эште ҡартың бик ныҡ юлға һалды,
Эс сире лә бик үк борсомай.
Тик Татлыбай эше һис тә генә
Уның күңеленә ятманы.
«Шул ялҡауҙы һайлап былдай эшкә,
Ахыры, яңылыш аҙым атланым!..»
Ти ул хәҙер. Дөрөҫ, был Татлыбай
Ҡыш бик һәйбәт эшләй башланы.
Әйтеү, өйрәтеүҙе көтөп тормай,
Күп кенә эш эшләп ташланы.
Сәсеүгә лә әҙерлеге уның
Ул тиклем үк насар булманы.
Шуға Гөльямал был бригадаға
Бүтән кеше һайлап ҡуйманы.
Ләкин ҡыр эшенә төшөү менән,
Бригадала китте тарҡаулыҡ,
Кешеләре эшкә берҙәм сыҡмай,
Моронланы шыҡһыҙ ялҡаулыҡ.
Бер ҡараһаң, һөрөүсеһе эштән
Ваҡытынан алда туҡтаған.
Йә сәскескә орлоҡ ташыусыһы
Көн элгәре ятып йоҡлаған.
Ә Татлыбай үҙе өйҙә сыуала.
Йәки идарала ултыра.
Ҡырға килһә лә ул эш урынына
Буш һүҙ менән ваҡыт тултыра.
Әхмәт ҡарттың бригадаһы алдан
Сәсеү бөтөп килде ярҙамға.
Юҡһа бының менән буламы һуң,
Эштә уңыш, еңеш яуларға?
Оҫта етәкселек талап иткән
Эште эшләй белмәй, күрәһең.
Шулай булғас, бөтә ваҡытыңды
Ошо бригадаға бүләһең...
Гөльямалдың күңеле күптән һиҙҙе.
Татлыбайҙы йәне тартманы.
Был кешегә ҡарата ниндәйҙер ят,

Һалҡын ҡараш йөрәге һаҡланы.
Ул уйланы: «Бәлки, был һалҡынлыҡ
Элеккенән тороп ҡалғандыр.
Минең йөрәгемә уның тоҡомо
Төҙәлмәҫтәй яра һалғандар.
Шуға, бәлки, Татлыбайҙың эшен
Сараһыҙҙан, насар күрәмдер?
Уның ғәйебе юҡтыр.
Бәлки, үҙем
Оҙаҡ асыу һаҡлай беләмдер...»

---

Бөгөн бөтә ерҙә бригадалар
Фронт гектарҙары сәстеләр.
— Бөтәһе лә фронт өсөн!— тиеп
Һуңғы көстө эшкә ектеләр.
Татлыбайҙың бригадаһына ул
Һуңлабыраҡ килде был көндө.
Ләкин уның эшен күреү менән,
Күҙҙәренән асыу бөркөлдө.
— Был ни эш?— тип ҡысҡырҙы ул ҡапыл,
Тыныслығын, түҙемен юғалтып.
Ә Татлыбай тешен йылтыратып,
Көлөп тора, күҙен уйнатып.
— Сәскестәрҙе, апай, ҡайтарҙым,— ти,—
Ял итһендәр бөгөн тигәйнем.
Был аҙ ерҙе ҡулдан сәскәндә лә
Насар булмаҫ, тип мин белгәйнем...
— Кем өйрәтте һине фронт өсөн
Арлы-бирле сәсеү ярай, тип?
Етмәһә, күр, нисек һирәк һипкән,
Был ҙур эшкә көлөп ҡарау бит!..
— Нишләйем һуң, апай?
— Ҡайтанан сәс!
Орлоҡ булыр һинең иҫәптән.
Әгәр, егет, бойҙай һирәк шытһа,
Үпкәләмә! Алдан иҫкәртәм...
Һәм Татлыбай, тешен ҡайрай-ҡайрай,
Биш гектарҙы сәсте ҡабаттан.
Был эш уның күңел төбөндәге
Асыуҙарын тағы ҡабартты.

— Көн күрһәтмәй, тын алырға бирмәй,
Уҫал бисә,— тип ул зарланды.
Ә сәсеүсе Хәбирйән ҡарт көлгәс,
Ул тағы ла яман ғәрләнде.
— Тотолдоҡ бит, ҡәһәр, эт ашағыр!..
Һәйбәт кенә план ҡорғайныҡ,—
Ти Хәбирйән, көлөп,— орлоҡлоҡто
Бүлешеп кенә алмаҡ булғайныҡ.
Хәҙер бына үҙ иҫәбеңдән
Сәсеп ҡара инде, булмаһа.
Эйе, егет, насар булыр беҙгә,
Әгәр был гектарҙар уңмаһа...
— Уңыр,— ти Татлыбай, ҡәһәрләнеп,
Ләкин үсен барыбер алырмын.
Һин күрерһең, Хәбир, бына бер саҡ
Уның урынына ҡалырмын.
— Ул ваҡытта йәшәр инек тә беҙ...
Юл асылыр ине баҙарға.
Йөкләп көнбағыш һат. Унан тауар
Тейәп ҡайт та
Алмаш бал-майға...
Йәшәр инек. Ә хәҙер һин өркөп
Әллә ниҙә бер ат бирәһең.
— Унда ла йән сыға, нисек ҡарап,
Тикшереп бит тора, күрәһең...

Хәбирйән ҡарт менән Татлыбайҙың
Электән үк фекер килешә.
Әҙерәк эшләп, күберәк ашау булһа,
Улар теләгенә ирешә.

Яҙ үҙенсә бара. Буҙ турғайҙар
Күтәрелә күккә сырылдап.
Һалҡын йылға баҫыу араһынан
Ағып төшә түбән шылтырап.
Тирә-яҡта йәштәр, йырлай-йырлай,
Ер тырмата, һабан һөрәләр.
Ҡайһы саҡта, ауырлыҡты онотоп,
Яҙғы шатлыҡ менән көләләр.
Ә тегендә, һуғыш майҙанында,
Ыңғыраша туптан боландар.

— Ватаным һәм халҡым өсөн!— тиеп,
Яуға инә батыр уландар.
Тик был икәү ер өҫтөндә ултыра,
Күҙгә серек түңгәк шикелле.
Яҙҙы түгел, һуғышты ла тоймай,
Тере көйө үлек икеһе.
Кәңәшәләр: ҡалай Гөльямалды
Төшөрөргә халыҡ күҙенән:
— Һуғыш сағы,— тиҙәр,— ауырлыҡ күп,
Быны күрһен халыҡ үҙенән...
— Гөльямал уйламай колхозсыны.
Бар белгәне: «Фронт, ил өсөн!..»
Үҙен күрһәтергә тырыша ул,
Быҙа ауыр беҙгә ни өсөн?..
Ҡарт-ҡороно, бала-сағаларҙы
Эшкә егә һис тә аямай.
Таңғы биштән төнгө унға тиклем
Һәр көн эшлә. Улай ярамай!—
Тигән һүҙҙе таратырға кәрәк,—
Ти Татлыбай,— халыҡ аңлаһын.
Һәм киләһе һайлауҙарҙа улар
Мине — ир кешене һайлаһын.
Ир кешенең инде алымы ла,
Ҡарашы ла була башҡаса...
— Ҡуй,— ти ҡапыл Хәбирйән, ҡул һелтәп,—
Әкиәт һөйләүеңде ташласы!..
Халыҡ бит ул беҙгә төкөрмәй ҙә,
Улар Гөльямалды беләләр.
... Ат аҙғыны, тиҙәр, ябағаһын
Һала алмаған тайға эйәрә...
Шуның кеүек, мин дә һинең арттан
Бәйҙән сығып бара һымаҡмын.
Етәр, ҡустым, бигерәк буш икәнһең,
Шулай итеп серҙе һынатмам!..—
Тине лә ул, ҡулын кире һелтәп,
Китте Татлыбайҙың янынан.
— Беләһеңме, ҡустым, был турала
Һөйләр булма миңә яңынан!..

Ҡойолоп төштө башта Татлыбай.
Бер аҙ үҙ эсенә бикләнде.

Тирә-яҡҡа һаҡ ҡаранып алды,
Нимәнәндер ҡапыл һиҫкәнде.
Уның башы ауыр эйелеп төштө,
Һалмаҡланды атлап барыуы.
«Әй, ауыр шул, ауыр хәҙер үҙеңә
Фекерҙәштәр эҙләп табыуы!..
Ошо ялҡау Хәбирйән дә һиңә
Шундай һүҙҙе ҡыйып әйтһенсе!
Һинең бөтә яҡшылыҡты онотоп,
Төкөрһөн дә тороп китһенсе!..»
Икеләнеп, әүеш-тәүеш баҫып,
Бер аҙ ҡарап торҙо тапанып.
Унан үкереп ҡуйҙы:
— Туҡта, Хәбир!..
Балҡып китте күҙе, тоҡанып.
Хәбир тертләп китте. Һәм боролоп,
Ғәжәпләнеп уға ҡараны.
Шул саҡ көләс түгел, ә бик уҫал
Татлыбайҙы күрҙе, аңланы.
— Ни бар?— тине, ҡапыл йыуашланып.—
Ҡәрәк булмамдыр, тип уйлайым?..
— Иҫеңдәме, үткән көҙ һин ферма
Һарыҡтарын урлап һуйғайның?!
— Әҙерәк хәтерләйем.
Һимеҙ ине...
Икәү ашағайныҡ шикелле...
— Шуны әйтәсәкмен... Гөльямалға...
Әйтәм: Хәбир урлап килтерҙе!..
Миңә нимә — яңғыҙ башым.
Һиңә,
Балаң күмәк, ауыр буласаҡ!
— Ҡуй, Татлыбай ҡустым, харап итмә,
Йә, йомошоң низән торасаҡ?..

**ЙЫР КӨЙӨНӘ БАҪҠАС...**

Ошо бригада ала әле
Гөльямалдың иң күп ваҡытын.
Татлыбайҙы башһынып та етмәй,
Уҫалланды хәҙер ҡыҙ-ҡырҡын.
Әле һәйбәт кенә эшләп йөрөгән

Ике килен эшкә сыҡмаған.
Хәбирйәне, баҙарҙарҙа йөрөп,
Бер кәбән дә бесән сапмаған.
Бының өсөн колхоз идараһы
Татлыбайға бик ныҡ иҫкәртте.
Хәбирйәнгә атты биргән өсөн,
Хеҙмәт көнөн унан түләтте.
Ә ул борғоланды, бөтә яҡлап
Аҡланырға башта тырышты.
Аҙаҡ вәғәҙә бирҙе:— Бынан ары
Ҡабатламамын,— тип,— был эште.
Икенсе көн тағы ике килен
Күренмәне, эшкә килмәне.
Ә Татлыбай һаман һорашманы,
Быныҡ сәбәптәрен белмәне.
— Үҙем беләйем,— тип Гөльямал
Ҡитеп барҙы, ашығып, ауылға.
Ә был ваҡыт картуф, ашлыҡтарҙы
Утау бара ине баҫыуҙа.
Гөльямал был килендәрҙе өйҙә,
Сәй янында тапты, осратты:
— Аһа,— тине асыуланмай,— ниңә,—
Эште онотторҙоҡ был саҡлы?
— Сәхибә бит сыҡмай,— ти килендәр.—
Өйөндә тик ята һимереп.
Ире — Татлыбай ҙа һәр саҡ өйҙә,
Ҡалыр балаһы юҡ тилмереп.
— Насар,— тине Гөльямал әсенеп,—
Оят Сәхибәгә эйәреү.
Ирҙәрегеҙ әгәр быны белһә,
Бошоналыр, моғайын, көйәлер.
Әйтәләрҙер:— Бында, беҙ фронтта
Ҡолхоз өсөн яуға инәбеҙ.
Ә кәләштәр беҙгә ярҙам итмәй,
Инәй кеше йөрөй инәлеп...—
Килендәрҙең бите алһыуланды.
Оялышҡан һымаҡ иттеләр.
Һәм шунда уҡ, тәпкеләрен алып,
Картуф утарға тип киттеләр.
Сәхибәне был юлы ул өйҙә,
Һокот һалған сакта, осратты,

Шуға, ахыры, тегеһе ҡарыша алманы,
Таңдан тороп, эшкә лә сыҡты.
Теге килендәргә Гөльямал
Ҡушты:
— Алығыҙ уны уртаға!..
Ҡурәҙәлек менән еңел йәшәне.
Ярышып ҡараһын әле утауҙа.
Алды булеп биргәс, йыбаһаң да,
Тороп булмай билде һыйпаҡлап.
Етмәһә, был ике килен яндан
Уҙып бара эшләп, уйнаҡлап.
— Әйҙә,— тиҙәр,— еңгә, таҙа ута,
Беҙҙән һис тә артҡа ҡалышма!
Беҙҙең бригадабыҙ алдын сыҡһын,
Исмаһам, утауҙа ярышта!..
Үҙ алдарын бөткәс, ике килен
Сәхибәгә килә ярҙамға:
— Эй, һин, еңгә,— тиҙәр,— дәрт булһа ла,
Ярлы икәнһең шул дарманға!..—

Шулай ойошторғас, был бригада
Алдан бөттө быйыл утауҙы.
Әхмәт бригадаһы баҫыуында
Әле ярты көнлөк эш ҡалды.
— Эй, бисәләр,— тине Гөльямал.—
Йә, уларға ярҙам итәйек.
Яҙғы сәсеүҙе бит беҙ уларҙың
Ярҙамында ғына бөткәйнек...—

Ҡатындар шым булды.
Һәр кемдең дә
Килә инде өйгә ҡайтҡыһы.
Һалҡын аласыҡта, рәхәтләнеп,
Ҡатыҡ менән икмәк ҡапҡыһы.
Сәхибә түҙмәне, ҡарыулашты:
— Юҡ, кәрәкмәй, унда бармайбыҙ!
Эшләһендәр, улар өсөн йәнә
Ярты көнгә эштә ҡалмайбыҙ!..—
— Ярай, һин ҡал,— тине Гөльямал.—
Инәлмәйбеҙ, кәрәк түгелһең.
Тәпкеңде бир миңә, үҙем барам,

Һинең өсөн утап йөрөрмөн...—
Һәм тәпкене алды:
— Киттек!..— тине,
Алға атланы, артҡа ҡарамай.
«Киләләрме?..
Боролоп ҡарарғамы?
Юҡ, юҡ, ҡарамайым, ярамай!..»

Башта берәм-һәрәм, ә аҙаҡтан
Бөтәһе лә китте эйәреп.
Бер Сәхибә, серек бәшмәк һымаҡ,
Тороп ҡалды яңғыҙ һерәйеп.

## ҺӘЙБӘТ ХАТ

Гөльямалдың йөҙө көләс бөгөн.
Гөлсәсәктән һәйбәт хат килгән.
«Әсәй, мин өйрәндем, эш ҡыҙыҡлы,
Тормошом да инде шәп,— тигән.—
Беҙҙең завод һуғыш яҡтарынан
Күсерелеп бында килгәйне.
Шуға башта эштәр ауыр булды.
Һаман шулай булыр, тигәйнек.
Белһәң ине, әсәй, хәҙер ниндәй
Көслө ҡоралдар беҙ эшләйбеҙ!..
Беҙ һәр көндә, һәр минутта, әсәй,
Фронт һәм ил өсөн йәшәйбеҙ.
Сабир менән мин дә ударниктәр:
Ике-өс норма эшләп ташлайбыҙ.
Әсәй, беләһеңме, ошо көҙҙө
Кисен уҡырға ла башлайбыҙ...
Иҫеңдәме, әсәй, бала саҡта
Булғым килә ине инженер.
Бынан ул теләккә юлдар яҡын,
Еңеп кенә сыҡһын Тыуған ил...»

Хат эсенә Сабир менән төшкән
Карточкаһын һалып ебәргән.
«Әллә Гөлсәсәгем, үҫеп етеп,
Егет һөйөргә лә өлгөргән?»
«Күрәһеңме, әсәй, элеккенән

Беҙ әҙерәк хәҙер ябыктык.
Ләкин белһәң ине, нисек үҫтек,
Нисек һалдат кеүек сыныктык!
Сабир бөтөнләй ҙур...»
«Һаман Сабир...
Бушка яҙмайҙыр ул был хакта.
Шулай инде: күңелең ни уйлаһа,
Телең шуны һөйләй йәш сакта».

Ошо ерҙә Гөльямалдың күңелен
Ярып үтте яңы бер тойғо.
Әллә инде кыҙын бөтөнләйгә
Оҙатканын шунда ул тойҙо.
Шулай булһа ла хат һәйбәт ине:
Кыҙы эйәләште заводка.
Кыйын булыр ине, былтырғылай,
Ауыл яғын уйлап зарыкһа.
Сабире лә шундай хаттар яҙа:
«Яратам,— ти,— токарь булыуҙы.
Ә Гөлсәсәк теләй, һуғыш бөткәс,
Тағы бер аҙ укып алыуҙы.
Әммә улай бик тиҙ мөмкин булмаҫ
Беҙгә был теләккә етеүгә.
Хәҙер бурыс — туған Армияны
Корал менән тәьмин итеүҙә!»
Әкрен генә атлап барған сакта,
Ирек биреп ошо уйҙарға,
Килеп сыкты райком машинаһы
— Йә, Гөльямал, етәр, уйларға!..
Ултыр машинаға, баҫыуында
Эштәр нисек бара, карайык.
Кайҙа өҙөклөк бар, эштәр бармай,
Шул урынға башлап барайык,—
Ти Ғәҙелшин, талған ҙур күҙҙәрен
Төбәп Гөльямалға, яй ғына.
— Ултыр, һөйлә, ниңә ташыу һүлпән?
Арыттырамы әллә аҙ ғына...—
Өндәшмәй Гөльямал, карап тора.
Ярата ул ошо кешене.
Хәҙер яуаплы эш алып барған,
Элекке бер ябай эшсене.

Улар бөтә ерҙә туҡтай-туҡтай,
Баҫыуҙарҙы ҡарап сыҡтылар.
Колхозсылар, көндәгесә, тырышып,
Ырҙындарҙа иген һуҡтылар.
Киткән саҡта райком секретаре
Тағы ҡабатланы:— Һәләтлә!..
Юҡһа, «Большевик» бит уҙып бара.
Уның игене күптән килә...
Беләһең бит, уларҙа эш көсө
Һеҙгә ҡарағанда кәмерәк.
Ә шулай ҙа хәҙер эштәр унда
Һеҙҙәгенән бара шәберәк!..—

«Таң» колхозы менән «Большевик» ул
Ғүмер буйы шулай ярыша.
Күп ваҡытта «Таң»дыҡылар уҙа
Иген өсөн булған ярышта.
Ә шулай ҙа бөгөн «уҙа!» һүҙе
Һис кенә лә иҫтән китмәне:
«Тағы өҫтәп аттар егер инек,
Кеше тигәне бит етмәне.
Нимә эшләргә?
Алмабикә бөгөн
Теләмәҫме кеше бирергә?..»
Ошондай уй менән Гөльямал тиҙ
Һыйыр фермаһына югерә.
Ә фермала бара йыйылыш,
Һауынсылар йыйылып алғандар.
Баҡһаң, улар быйыл һарыҡсылыҡ
Фермаһынан артта ҡалғандар.
Алмабикә һөйләй:
— Ҡәли бабай тырыша.
Сәрби күпме бәрәс үҫтерә?!.
Бөҙрә йөнлө һарыҡтарҙы улар
Быйыл инде меңгә еткерә.
Беҙҙә, нимә, нимә?!—

Мәрәкәләп булде Гөльямал:
— Һеҙҙә лә...
Комсомолка Гөлсөм быҙауҙарҙы
Еткерәсәк быйыл йөҙгә лә!

— Ярай әле, килеп ҡотолдорҙоң,
Алма бөгә,— тиҙәр көлөшөп.
— Һәйбәт, һәйбәт,— ти Гөльямал көлөп.—
Ҡәрәк алырға ла орошоп.

Алмабикә йыйылышты ябып,
Ҡатындарҙы эшкә тараткас:
— Беләһеңме,— тине Гөльямал,— һин,
Йәсе миңә әҙерәк ярҙамлаш!..
— Ниндәй эштә?
— Иген тапшырыуҙа,
Беләһең бит, беҙҙә өҙөклөк.
Аттар өҫтәп екһәк, әйтер инек:
«Беҙҙә һөйрәлеү юҡ. Бөтөрҙөк!..»
Әллә бирәһеңме берәй кеше?
— Ниңә кеше? Үҙем ташырмын.
Һин китә тор, мин кейенеп киләм,
Хәҙер барып тейәп алырмын.
— Унда мин булмайым,
Район саҡыра.
Һин ярҙамлаш бөгөн, тырыштыр.
Татлыбай ул әйтер:— Көн ямғыр бит,
Өйҙә генә бөгөн тороп тор...—
Улар көлөштөләр.
Ҡөҙгө һауа
Яңғырап китте ферма буйлатып,
Лапаҫ түбәһенә ҡунаҡлаған
Турғай көтөүҙәрен уятып.

**НИ ЭШЛӘРГӘ?..**

Тәгәрмәскә балсыҡ уралып ята.
— Әй, йәмһеҙ ҙә һуң был көҙгө көн!
Күк тә, ер ҙә бер төҫ — һоро шинель.
Яҡынлаша инде көҙгө төн.
Был Татлыбай әллә юрый уға
Иң ҡарт, насар атты ектергән.
Алмаҡайҙың аты эйәрә алмай,
Тороп ҡалды бүтән йөктәрҙән.
Бара торғас, арба, шытыр итеп,
Бер яҡ ҡабырғаға ауышты.

«Нимә булды? Ниңә үҙем екмәй,
Ҡешегә һуң былай һалыштым?»
Ул һикереп төштө.
Ярай әле
Бәхете икән, күсәр һынмаған.
Арт тәгәрмәс һурылған да сыҡҡан.
«Ҡәһәр төшкөр, бына уңмаған!
Хәсән бабай һәр бер еккән саҡта
Тикшермәйсә ҡалмай арбаны.
Мин ышандым уға.
Был ыңғайҙа, ахыры, алданы?»
Йөктө күтәрергә, тәгәрмәсте
Ҡейҙерергә кәрәк күсәргә!
Ҡайҙа инде былдай ауыр йөклө
Арбаға һуң көсө етергә?
Ни эшләргә?..
Етеҙ генә һикереп,
Еүеш ергә
Түшәп ҡуйҙы сисеп плащын.
«Көс етерме?»— тигән һымаҡ тоҡҡа
Ташлап торҙо бер аҙ ҡарашын.
«Ҡуҙ ҡурҡаҡ ул, ә ҡул батыр»,— тиҙәр,
Ысынлап та был бик дөрөҫ һүҙ.
Һә тигәнсе ауыр тоҡтар өйөлөп,
Ерҙә ята инде, бына күр!

Буш арбаға хәҙер тәгәрмәсте
Ҡейҙерeүe ауыр булманы.
Тик тоҡтарҙы инде ерҙән алыу
Ай-һай ауыр, билде ҡуйманы.
Көс тә бөттө, елкә, арҡа буйлап
Ҡара тирҙәр аға шыбаҡшып.
«Иң ауыр тоҡ әле ерҙә ята.
Һис тә күтәрә алмаҫ һымаҡмын...»
Туҡта, кемдер артта, бик яҡында,
Йырлай-моңрай килә түгелме?
«Ярҙамлашыр»,— тигән йылы өмөт
Солғап алды Алма күңелен.
«Туҡта, ана,— һыбайлы бер кеше
Түбәләскә килеп менде лә!
Күк айғыр бит!

Уны Шәриф үҙе
Өйрәткәйне, былтыр, менгегә.
Күк айғыр шул...
Йә бит кем уйлаған,
Татлыбайҙы йөкләп йөрөр, тип
Шәриф урынында минең күҙем
Һөмһөҙ ошо йәнде күрер, тип?..»
Алма ашығып плащҡа эйелде:
Унан алда бынан китәйем.
Төн дә яҡынлаша, станцияға
Йәһәтерәк барып етәйем».
Ә Татлыбай шунда уҡ, елеп-сабып,
Килеп етте арба янына!
«Күрәһеңме, хәлдәр мәсьәләне
Ауҙаралар уның яғына».
Уның теләүенсә, ҡартлас ат та
Башҡаларҙан бер аҙ ҡалышҡан.
Арбаһы ла бигерәк йәтеш ерҙә,
Гүйә, юрый ҡырын ауышҡан!..
Инде аулаҡ. Алмабикә менән
Һөйләшеп тә булыр иркенләп...
Һәм ул Алмаҡайҙың арҡаһынан
Һөйөп ҡуйҙы, һыйпап, иркәләп.
Йөк ауҙымы?
Туҡта, имгәнерһең!
Үҙем булышайым әҙерәк...—
Алмабикә уның эргәһенән
Ситкә шылды йәһәт, тиҙерәк.
— Хафаланма!— тине һәм эйелеп,
Тоҡто алып йөккә ырғытты.
Талып хәлһеҙләнгән беләгендә
Ҡайҙан был ҡәҙәре көс сыҡты?
— Ай-һай,— тине Татлыбай, хихылдап,
Ҡулын һуҙҙы уға тағы ла.
Алмабикә әйтте:
— Тик кенә тор,
Яҡын килмә миңә, ҡағылма!
— Хи-хи,— ти Татлыбай юхаланып.—
Уҙаман да бисә икәнһең!
Ошо тиклем ҡыҙыу йөрәк менән
Яңғыҙ нисек ғүмер итәһең!—

Алмабикә ҡабат өндәшмәне,
Йөккә менеп, лыпын ултырҙы.
Татлыбайҙың ҡыланышы уның
Йөрәген асыу менән тултырҙы.
Ә Татлыбай, атын һалмаҡлатып,
Яндан барҙы ҡушлап бик оҙаҡ.
Мәҙәк һөйләп, йырлап та ҡараны,
Үҙенсә ул ҡорҙо бер тоҙаҡ.
— Ниңә өндәшмәйһең, Алмабикә?
Һөйләшеүе әллә яҙыҡмы?
Һөйләп, көлөп, уйнаштырып алһаң,
Йәшәү була, тиҙәр, ҡыҙыҡлы.—
Йырлап алды:
Йәшәүҙән ни ҡыҙыҡ,
Аҡ шоңҡарҙай елеп үтмәгәс.
Һөйгәнеңде ҡыҫып ҡуйыныңа
Бер тапҡыр ҙа һурып үпмәгәс...
Ләкин Алмабикә бер әйләнеп
Күҙ һалманы уға, көлмәне.
Ул ғүмергә ошо Татлыбайҙы
Яратманы, йәне һөймәне.
Дөрөҫ, бик йәш саҡта ул бер тиклем
Татлы һүҙен уның тыңланы.
Ләкин тиҙ үк татлы һүҙ артында
Буш йөрәктең ҡағыуын аңланы.
Бөгөн асыуҙары Татлыбайға
Тағы артты, үҫеп ҡабарҙы.
«Ниңә үҙ юлына китеп бармай,
Ҡайҙан осраны был, ҡаҙалғыр!
Ҡайҙа бара шундай эш сағында.
Унда Гөльямал да өйҙә юҡ,—
Тип уйланы Алма, нәфрәт менән,—
Бынан колхозға һис файҙа юҡ!..»
Тағы өмөт өҙөлә. Һәм Татлыбай
Сабып китә, бысраҡ сәсрәтеп.
«Булмай икән,— ти ул,— һөйөү менән,
Бәйләнмәгәс сәскә сәстәрең...»

Элеватор яны. Йөктәр тулы.
Иген ағыла унда яландан.
«Тик ниңә һуң, беҙҙең «Таң»дыҡылар

Тапшырмаған әле һаман да?»
Алмабикә, улар эргәһенә
Атын бороп, яҡын туҡтаны.
— Йәгеҙ, тапшырайыҡ, ниңә былай,
Һаҡлап торaһығыҙ тоҡтарҙы?..
— Приемщик алмай.
— Дымлыраҡ,— ти...
— Дөрөҫ булған минең иҫкәртеү,—
Тине Алма,— тейәгәндә әйттем:
Дымлыраҡ бит, кәрәк елләтеү!
Ә Татлыбай әйтте:
— Алмабикә,
Күп һөйләнмә, йәһәт китә бир!
Ашлыҡ ташыу, һыйыр һауыу түгел,
Имеш, ауырыраҡ, нишләйбеҙ?
Шуға гәрләнде лә Алмабикә
Өндәшмәне унда бүтән һүҙ.
Бына шул арҡала хәҙер инде
Күмәкләшеп бында ыҙа күр.

### ХАТТАР АҒЫЛА...

Хаттар, хаттар, хаттар ағыла
Фронтҡа һәм тылға көн һайын.
Берҙәй яныу-көйөү, һағыныу, һөйөү,
Нисә йәй, ҡыш, нисә көҙ һайын!..
Хаттар ағыла,
Был тиклем күп, матур
Яҙылмаған улар бер ҡасан.
Был хаттарҙа тормош,
Йән аҙығы,
Был хаттарҙа үҙе ул Ватан!
Гөльямалдың улы — Сәхи ҙә бит,
Юлдан, фронттан да яҙғайны.
Ләкин аҙаҡ хаттар хәбәр итте
Униң яуҙа ауып ҡалғанын.
Инде бер йыл. Ләкин әсә һаман
Улы тереләккә ышана.
Һәм ултырып сәләм хаттар яҙа,
Эштәренән әҙерәк бушаһа,
Тик хаттарҙы ебәрмәй ул хәҙер,

Һалып бара өҫтәл өҫтөнә.
Һәр аҙнала, ҡайсаҡ һәр көн һайын,
Был хаттарға хаттар өҫтәлә.
Хаттар яҙа, улы булмаһа ла,
Күңел теләй ошо аҙыҡты.
Ошо хаттар йөрәккә көс бирә,
Ҡәметәләр ауыр аҙапты...
Бөгөн районда ул һуңлап ҡайтты.
Күңелһеҙлек көткән эшендә.
Иген ташыусылар ҡайтмағандар...
Татлыбай юҡ. Белмәй бер кемдә.
Ниңә һуңлағандар?
Алма ла юҡ...
Ат үлдеме, күсәр һындымы?
Ни әйтһәң дә, ҡатын-ҡыҙ бит инде,
Төн ҡайтыуҙы ауырһындымы?
Төн уртаһы. Гөльямал бик оҙаҡ
Китап, газеталар аҡтарҙы.
Ул ярата ошондай тын төндө,
Уҡыу башҡа ингән саҡтарҙы.
Ләкин бөгөн уҡыу йәбешмәне.
Ҡәләм алды, ахыры, ҡулына.
Һәм тағы ла сәләм хаттар яҙҙы
Үлеп ҡалған ғәзиз улына!
«Улым, ниңә бер ҙә хат яҙмайһың?
Оноттоңмо әллә әсәңде?..
Мин ышанам, улым, элеккеләй,
Һин һаман да тере. Йәшәйһең?!
Колхозда эш бара, туҡтаған юҡ
Маҡсаттарға етмәй, ирешмәй.
Халыҡ эшләй — йән-йөрәген бирә.
Нисек түҙә, нисек бирешмәй.
Тик быйыл көҙ беҙгә, ҡарышҡандай,
Бигерәк иртә килеп ташланы.
Август уртаһынан быҫҡаҡ ямғыр
Бер өҙлөкһөҙ ҡоя башланы.
Шулай булғас, ашлыҡ йыйыуҙа ла
Өҙөклөктәр булып алғылай.
Кеше етмәй, йәки ат, сбруй
Етешмәгән саҡтар булғылай.
Ләкин, улым, быйыл да ашлыҡты

Түкмәй-сәсмәй йыйып алдыҡ беҙ.
Хөкүмәткә тейеш игендәрҙе
Иң алдынғы булып һалдыҡ беҙ.
Өсөнсө көн район секретаре
Тағы ҡарап китте эшемде.
Ул һәр килеп, ҡарап киткән һайын,
Шатлыҡ солғап ала эсемде.
Харап һәйбәт кеше, кәрәк сакта
Әҙер тора бөтә ярҙамға.
Ҡайһы сакта ҡыуанып, рәхмәт әйтә;
Беҙҙә эштәр арыу барғанға.
Ҡайғыһы ҙур тиҙәр. Ләкин әйтмәй:
Ике улы үлгән һуғышта.
Өсөнсөһө батыр летчик тиҙәр,
Тиңе юҡ ти күктә алышта...
Улым, бөгөн станцияға беҙҙән
Иген китте һуңғы йөктәрҙә.
Һуңғы йөктәр. Инде планды беҙ
Йөҙ ун процентка еткерҙек.
Тик әҙерәк эсем бошоп тора:
Ашлыҡ ташыусылар ҡайтманы.
Ямғыр ҡоя, төнө — дөм ҡараңғы,
Исмаһам, был ай ҙа ҡалҡманы...

. . . . . . . . . . . . . . . .

Эй-й-й...
Ултырам тағы тоҡ-томалға,
Зарланмаҫтай эшкә зарланып.
Фронт хәле менән сағыштырһаң,
Һөйләп торор ере бармы уның?..
Улым, бәгерем, ваҡыт тапҡан булып,
Һирәк-мирәк хаттар яҙһаңсы,
Иҫәнлегең яҙып, әсәйеңдең
Йөрәгенә шатлыҡ һалһаңсы!..
Мин ышанам, улым, һау йөрөрһөң,
Беҙҙең тоҡом яуҙа юғалмаҫ.
Арыҫландай батыр башҡорт улын
Дошмандарҙың уты йыға алмаҫ!»

. . . . . . . . . . . . . . .

Хатты яҙып, конвертка һалды ла,
Уйға талды тағы Гөльямал:

«...Улым, бәлки, терелер, кем белә?!
Эй-й... Иген ташыусылар юҡ һаман...»

Ямғыр ҡоя, төн уртаһы ауған,
Ә Гөльямал һаман ятмаған.
Тышта һалҡын. Ә ул бүлмәһенең
Асыҡ тәҙрәһен дә япмаған.

### ГРАЖДАНИН, ТУҠТА!..

Алмабикә, аҙыҡ алырға тип,
Сығып китте, кисен, урамға.
Магазиндәр бик һуң эшләй икән,
Әллә байрам алды булғанға.
Аҙыҡ магазине. Халыҡ тулы.
Нәүбәт менән кәнфит бирәләр.
Алмабикә ситтән ҡарап тора:
— Шаулашалар ниңә бисәләр?
Һәм ул күреп ҡалды: эре генә
Алға үтте шунда Татлыбай.
Сулаҡ ҡулын һуҙған.
Аяҡ һылтыҡ.
Ҡай бисәләр уны тартҡылай:
— Гражданин, туҡта!
Нәүбәтте һин
Ниңә былай, һөмһөҙ, боҙаһың?
— Очередкә баҫмай, килеү менән,
Ҡулыңды конфеткә һуҙаһың!..
Ҡайһылары яҡлай:
— Һуҡырмы һеҙ?
Күрәһегеҙ, ул бит инвалид.
Патриотка булһаң, бар урында
Инвалидкә һәр саҡ хөрмәт ит!
Күрәһегеҙ, ул бит беҙҙең өсөн
Һыңар ҡулын яуҙа ҡалдырған.
Нимә була уға нәүбәттән тыш
Берәр кило конфет алдырһаң?!
Ҡатындар шым булды.
Ә Татлыбай
Алып китте шунда кәнфитте.
Алмабикә ҡатып ҡарап ҡалды,
Өндәшә алмай, гүйә тел кипте:
«Бына ниңә, был алабай хәҙер,

Ҡостюм, галстугын ташлаған!
Бына ниңә фронтовиктарса
Ҡейенеп йөрөргә ул башлаған?!
Өҫтә шинель, башта пилотка бит!..
Ҡулда командирҙәр сумкаһы.
Бөтөнләйгә һалдат булып алған,
Әй, ҡороғор, ырҙын сусҡаһы!..»

## УЛ ЮҠ ИНДЕ...

«Улым!
Ҡайғы. Тағы ҡайғы»,— тиеп
Яҙып ҡуйҙы бөгөн Гөльямал.
«Сәхиемә» тигән адрес менән
Хаттар яҙа ине ул һаман.
Хаттар уға, бәлки, ҡондәлектең
Үҙенә бер төрө булғандыр.
«Көндәлек» тип яҙып барыу юлын,
Бәлки, ул белмәй ҙә торғандыр.
Бәлки, хат рәүешен һайлағандыр,
Күңеленә яҡын булғанға.
Үҙ улыңа һөйләүгә ни етә,
Эсең бошоп, күңелең тулғанда.
— Был көндәрҙә халыҡ бик шат ине,—
Тип яҙҙы ул,— яҡты көн ине,
— Сталинград!
— Еңеү, еңеү, еңеү!
Бөтә телдә ошо һүҙ ине.
Был шатлыҡтан беҙҙең колхозсылар,
Күтәрелеп шау-гөр килделәр.
Оло еңеү хөрмәтенә күпләп
Пландан тыш ит, май бирҙеләр.
Шулай һәр кем ул көн ҡанатланып,
Шаулағанда сикһеҙ шатланып:
— Шәриф үлгән! — тигән ауыр хәбәр
Бәреп инде ауыл ҡапҡаһын...
Был ҡайғылы хатты Алмабикә
Эштән ҡайтҡас ҡына уҡыған.
Улы Хәбир, ҡыҙы Зифа йүгереп
Миңә килде. Улар ҡурҡынған:
— Әсәйем!..— тип тик торалар баҫып,

Әйтә алмай әйтер һүҙҙәрен.
Әсе йәш тамсыһы томалаған
Сабыйҙарҙың яҡты күҙҙәрен.
Аптырандым, ҡапыл хәлем бөттө,
Күҙ алдымды томан ҡапланы.
Ни эшләйем, ауа-түнә баҫып,
Балалар артынан атланым...
Белһәң ине, улым, ауырлығын
Үлем хәбәрҙәре алыуҙың!..
Ҡайһы саҡта ғәжәп һымаҡ була
Был ҡайғынан тере ҡалыуың...
Шәриф, Шәриф!..
Уны үлер тип беҙ
Әллә ниңә һис тә көтмәнек.
Алмабикә бер ҙә яфаланып:
— Хат юҡ,— тип тә зарығып көтмәне.
Ҡилеп торҙо уның хаты һәр саҡ,
Ҡыҫҡа ғына, һаулыҡ билгеһе.
Улар һөйләнеләр батырлыҡ һәм
Илгә бирелгәнлек өлгөһөн.
Мәскәү янында ла, Орловта ла,
Волгала ла ул бит һуғышты.
Шулай уҡ ул мәңге тындымы ни?
Алдымы ни һуңғы һулышты?
Шәһит булған. Сталинград аша,
Үлемһеҙлеккә ул атлаған.
Тоғро улын Ватан Советтәр Союзы
Геройы тип ҙурлап атаған.

**ВАТАН ӨСӨН!..**

Ҡолхозсылар йөҙ мең аҡса йыйып,
Хат яҙҙылар бөгөн ЦҠ-ға:
«Таң» колхозы тигән исем бирең,
Беҙ төҙөгән ауыр танкыға».
Йыйылыш йәнле үтте.
Был бурыс та
Тейешенсә һәйбәт үтәлде.
Тик Гөльямал әле юл ыңғайы
Уйлап бошона ине бүтәнде.
Шул Татлыбай һаман борғоланып,

Баҫып торҙо күҙе алдында:
«Бар, һин, аңла, был кешегә төшөн!
Ниндәй уйҙар уның аңында?»
Докладтан һуң тәүге һүҙҙе алып,
Ярты сәғәт хәбәр һөйләне.
Йәшел күҙен кирҙе, ҡулын йәйҙе,
Йылмайып та алды, көйләне.
— Ватан өсөн! — тип ҡысҡырҙы янып
Үңәстәре оҙон һуҙылды.
Ә аҙаҡтан танк фонды өсөн
Бары ун тәңкәгә яҙылды.
«Әллә бындай татлы теллеләрҙә
Булмай микән кеше теләге?
Әллә татлы һүҙен сәсеп бөткәс,
Бушап ҡала микән йөрәге?»
Райком секретаре Ғәҙелшин дә
Әле юлда йәнәш килә ине.
Ул да һүҙһеҙ.
Гөльямалдың бөгөн
Ҡәйефе ҡырылғанын белә ине.
Ахыр, Гөльямал да уйын еңеп,
Секретарға ҡарап өндәште:
— Төн уртаһы. Буран. Бындай саҡта
Юлға сыҡмаҫһығыҙ, иптәштәр!..
Таңға тиклем беҙҙә ҡалығыҙ,
Әҙерәк ял итеп тә алығыҙ...
— Шулай булһын,— ти Ғәҙелшин уға,
Үҙегеҙгә алып барығыҙ.
Улар йәнәш китте, көрттө ярып.
Ҡар ҡаплаған тымыҡ урамдан.
Берләм юл да бөткән, ике-өс көн
Бер өҙлөкһөҙ өргән бурандан.
Өйгә ҡайтҡас, райком секретаре
Һорап ҡуйҙы:— Теге кем булды?
Оҫта телле...
Шул саҡ Гөльямалдың
Оялыштан йөҙө көл булды:
— Татлыбай шул,— тине.
— Бригадирме?
Бүтән кеше, тимәк, тапманың?

— Ҡүрәһең,— ти, Гөльямал бошоноп,—
Ошо була инде тапҡаным...
— Белеп етмәйбеҙ беҙ кешеләрҙе,—
Тип көрһөнөп ҡуйҙы Ғәҙелшин.—
Ана, теге ҡатын...
Алмаҡаймы?
Шуны ғына алып ҡара һин!
Теге ҡарттар: Әхмәт, Ҡәли, Хәсән...
Ҡомсомолка Гөлсөм, Сәрбиҙәр!
Бына ҡайҙа таяныр кешеләр!
Бына кемдәр еңеү яулайҙар!..
Ә был ни бер аңлашылмау ғына!
Тороп ҡалған сүп-сар баҫыуҙа.
Өйрәнергә ваҡыт беҙгә хәҙер
Кешеләрҙе яҡшы таныуға...—
Ҡунаҡ килгәс, Ғәлимә әбей бик шат.
Самауыр ҙа һайрап ебәрҙе.
Ә ул ҡорот, еләк, ҡаҡ тултырған
Төйөнсөктәр һайлап югерҙе.
Роза ла шат, өҫтәл әҙерләште,
Ҡарай-ҡарай яңы ҡунаҡҡа.
— Ҡыҙыңмы? — тип һораны Ғәҙелшин.—
Оҡшамаған үҙе был яҡҡа!
— Ҡыҙым,— ти, йылмайып, Гөльямал.—
Һуғыш бирҙе ситтән килтереп.
Һуғыш бөтһә, атаһы табылһа,
Ҡайтып китер ләкин, елкенеп...

Унан һөйләне ул Розаһының
Ҡыҫҡа ғына тормош тарихен.
Уны яратыуын, үҙ итеүен,
Уҡыуының нисек барышын.
— Күрше ауылға йөрөп уҡый әле.
Рус мәктәбе беҙҙә булмағас,
Йөрөп уҡыу ауыр, ләкин риза,
Уҡыуынан артта ҡалмағас...
Өйҙә йылы. Ғәҙелшин тын ғына
Журнал, газеталар аҡтара.
Шул саҡ күҙе төшә төргәк-төргәк
«Сәхиемә» тигән хаттарға.
«Ниңә ебәрмәйһең?»,— өнһөҙ һорау.

Гөльямал һуң ни тип өндәшһен?
Күңел яралары — әсе хәсрәт,
Һүҙ бармы ни уға тиңләшер?
Ғәҙелшин аңланы: Тағы ҡайғы,
Бында ла шул ауыр юғалтыу...
Әммә ғорур әсә мохтажмы һуң,
Кәрәкме һуң йәлләү, йыуатыу?
— Сәй эсәбеҙ! — Гөльямал шат көлөп
Уның уйын бүлде уртаға.
— Сәйҙә — көс, ҡеүәт! — ти секретарь ҙә
Хөрмәт менән ҡарап хужаға.

## ҺУҢЛАҒАН ҮКЕНЕҮ

Ошо төндә тәүге тапҡыр, бәлки,
Татлыбай ҙа ятты йоҡламай:
— Әллә һөйләп ҡуйҙым артығыраҡ,—
Ти ул, — нисек улай һаҡланмай! —
Йыйылышҡа бит ул әҙерләнде,
Тик халыҡса түгел, үҙенсә.
Хәбирйәнде, Сәхибәне лә ул
Әҙерләне үҙе теленсә:
«Гөльямалдар танк өсөн, — тине ул, —
Бөгөн тағы аҡса йыясаҡ.
Былай булһа халыҡты бит улар
Тамам аяғынан йығасаҡ.
Шуны аңлатығыҙ бисәләргә.
Гөльямалдан улар биҙһендәр.
Ауырлыҡтың күбен унан ғына
Килгәнлеген асыҡ белһендәр.
Хәбирйәнгә әйтте: сығыш яһа,
Асыҡ һөйләү миңә килешмәй.
Сәхибә, һин ундай саҡта элек
Әйтә инең бер ҙә бирешмәй...»
Шулай әҙерләнде.
Һәм тәү һүҙҙе
Үҙе алып, тырышып һайраны.
Һәм уйланы: «Хәбир өҫтәп ҡуйһа,
Эштәр арыуланыр, яйланыр».
Шулай булды — эштәр арыуланды,
Тик ул теләгәнсә булманы,

Халыҡ үҙ нужаһын артҡа ташлап,
Ватан тураһында уйланы.
— Фронт өсөн, Тыуған илем өсөн!
Бер нәмә лә түгел йәл, — тиҙәр.
— Ил һау булһа, мал табылыр әле,
Аҡтығымды бирәм, ал! — тиҙәр.
Бынау етем Алмаҡайға хәтле
Биш мең һумды биреп яҙылды.
Иртәгеһен уйлай белмәй улар,
Ай, боҙолдо, халыҡ боҙолдо...
Ул ғынамы тиген Хәбирйәне
Ҡилмәне лә:— Эшкә китәм,— тип,
Ә Сәхибә сығып:
— Мин дә бөгөн
Бер ҙур һарыҡ бүләк итәм,— ти.
— Ни өсөн тиң?
Имеш, утауҙа ла
Ситтә ҡалып бер саҡ үкенгән.
— Ҡеше эшләгәнде эшләмәҫкә,
Әйт әле,— ти,— мин һуң кәм кемдән?

Ошоларҙы уйлап, Татлыбай ҙа
Әйтте:— Эштәр барып сыҡманы.
Минең һүҙем — мине туҡманы ул...
Гөльямалға һис тә йоҡманы.
Һәм ул «асылына» кире ҡайтты.
«Һәйбәт Татлыбай» ул был таңдан!
Унға-һулға сәләм биреп, көлөп,
Борғоланып йөрөй ялтаңлап.
Ләкин хәҙер уның был көлөүе
Бер кемде лә инде алдамаҫ,
Серек түңгәк һаман сүгә барыр,
Урынына үҫә йәш алмаш.
Ә бер аҙҙан шаулы йыйылыш булды.
Иҫәп бирҙе эштән Татлыбай.
Теге-был эш бик шәп эшләнде, тип,
Ҡабарынды һис тә тартынмай.
Алдынғыларҙы ул телгә алманы.
Гүйә улар бер ни тормайҙар.
Баҡһаң: «Хәбирйәндәр, Сәхибәләр
Тырышып эшләй, һис тә тынмайҙар...»

Һөйләне ул бригадирлек уға
Нисек һәйбәт, нисек килешә.
Грамота, буй-һын — барыһы килгән,
Һүҙ һөйләүҙә кемгә бирешә?!
Отчеттан һуң колхозсылар уны
Элеп алып, һелкеп һалдылар.
— Етер, ҡустым, сүп-сарға һөрләгөп,
Ҡолар саҡтар артта ҡалдылар.
Борғоланма, изге юлды быума,
Бөгә алмаҫһың ҡорос аҙымды.
Һин түгел, күр, ана, фашистәр ҙә,
Беҙгә ҡағылып, үҙе абынды,—
Тинеләр ҙә шунда Татлыбайҙы
Ырғыттылар алып эшенән.
Алмабикә бригадирша булды,
Танылғанға һәйбәт эш менән.

---

Был ҡарарға иң ҡыуанған кеше
Ат ҡараусы Хәсән ҡарт булды.
— Елғыуарға хеҙмәт итеүҙән,— ти,—
Атҡайҙарым инде ҡотолдо.
Елкәһенән әсе тир сығарып,
Ашамаған кеше икмәкте
Ҡәҙерен беләме ни колхоздың ул!..
Йөрөттөләр шунда имгәкте!

### ГӨЛЬЯМАЛДЫҢ ХАТТАРЫ

I

Ул улына хат яҙыуын һаман
Дауам итте гел буш сағында.
Өҫтәлендә «Сәхиемә» тигән
Конверт арта барҙы һаман да.
— Улым,— тип яҙҙы ул бөгөн уға,—
Яҙам әле Алмабикәне.
Элеккегә ҡарағанда, уның
Хәҙер нисек алға киткәнен.
Уңған бригадир ул.
Уға мин шат.

Еңеп сыкты ауыр ҡайғыны.
Ябыҡһа ла, сәсе ағарһа ла,
Һис бер эштә артта ҡалманы.
Өйөндә лә, колхоз эшендә лә
Элеккесә етеҙ, егәрле.
Тик тағы ла аҙ һүҙлерәк инде,
Ҡайғы һарыған бит йөрәген.
Бер көн шулай икәү йыйылыштан
Ҡайтҡан саҡта уға мин әйтәм:
— Партияға ҡасан инәһең һин?
Минеңсә, тим, ваҡыт бик еткән!
Шунда уның һағышлы күҙендә
Ҡыуаныс балҡып китте, утланып.
Гүйә йөрәгендә быҫҡып ятҡан
Осҡондары китте тоҡанып.
— Мин,— ти,— был турала һуңғы көндә
Үҙем дә,— ти,— бик йыш уйлайым.
Ошо уйҙың минең йөрәгемә
Ҡөс биргәнен яҡшы аңлайым.
Тоямын,— ти,— йөрәгемдең фәҡәт
Ҡоммунисса янып типкәнен.
Ғүмеремде ошо партияға
Мәңге бәйләр саҡтың еткәнен.
— Дөрөҫ,— тим мин уға,— һин былай ҙа
Партиялы эште эшләйһең.
— Тырышабыҙ ҡулдан килгәнсә,— ти,—
Ирҙәр өйҙә юҡ бит, нишләйһең? —
Бына шулай: ҡайғы йыға алманы,
Ағартһа ла ҡара сәстәрен,
Ватан күкрәгенә нык таянып,
Ғорур баҫып торған әсәне.

II

Лиза Семенова, улым, беҙгә
Һуғыш сыҡҡан йылды килгәйне.
Шундай арыҡ ине,
Мин уны бик
Оло ҡатындыр тип белгәйнем.
Ул, бахтиһәң, һуғыш башланғас та
Бигерәк ауыр ҡайғы кисергән.

Фашист бомбалары, өйгә төшөп,
Ата-әсәһен, ҡыҙын үлтергән.
Үҙе ике улын көскә алып,
Янған өйҙән сығып ҡотолған.
Бына ниндәй ҡанһыҙлыҡтар эшләй
Фашист тигән яуыз, ҡоторған!
Лиза килгәс, иренән дә оҙаҡ
Хат ала алмай ҡайғы кисерҙе.
Ахыр почта уға күптән көткән,
Теләп көткән шатлыҡ килтерҙе.
Ире фронтта икән — тере, иҫән.
Лиза тыуҙы төптө яңынан.
Йәшәрҙе лә ҡуйҙы — шулай һылыу!
Килмәгән бер эш юҡ ҡулынан.
Бер саҡ шулай миңә югереп ингән:
— Гөльямал,— ти,— һиңә йомош бар!
— Йә,— мин әйтәм.
Ә ул:— Беләһеңме,
Алма тигән тәмле емеш бар?
— Беләм,— тим мин,— һеҙҙә, Украинала,
Уны үҫтерәләр шикелле...
Ә ул әйтә:
Һеҙҙең ерҙәрегеҙ
Алма өсөн бигерәк һөйкөмлө!
— Нисек?— тим мин.
Ә ул әйтә:
— Бынау
Йылға буйы ята файҙаһыҙ!
Егерме га уяҙ, тигеҙ урын.
— Файҙаланһаң яҡшы, ҡайҙа һуң?
Әммә беҙҙә ундай дегәнәклек
Түгел, ята хатта сиҙәм ер.
Ер күп беҙҙә...
Лиза сыҙаманы:
— Һин әлегә ошо ерҙе бир!
Агрономмын,— ти ул,— ошо ерҙе
Әйләндергем килә баҡсаға.
— Мин әйтәм, дуҫ, кеше етешмәй бит,
Ундай эшкә түгел, башҡаға.
Лиза әйтә: — Ҡусеп килгәндәрҙән
Мин звено төҙөп алырмын.

Аңлайһыңмы колхоз был баҡсанан
Ниндәй һәйбәт доход алырын?
Тик бөгөндән ерҙе һөрөү кәрәк.
Комсомолдар һөрөп бирәсәк.
Алмаҡайҙың улы Хәбир унда
Бөгөн кис үк эшкә киләсәк...
— Улай булһа, мин әйтәм, бик һәйбәт,
Дегәнәклек йәлме, эшләгеҙ!
Үҙ ереңдә һымаҡ, әйҙә шунда,
Баҡсағыҙҙа әүерәп йәшәгеҙ.

Лиза сығып китте, ул арала
Килеп инде ярһып Татлыбай.
Асыуынан арлы-бирле йөрөй,
Бер өҙләкһеҙ һөйләй, татылдай:
— Тапҡандар эш, һуғыш ваҡытында
Ниндәй,— ти ул,— емеш баҡсаһы!
Кешеләргә былай ҙа һуң эштең
Еткәйне бит инде башҡаһы!
Унан бит был Украина түгел,
Бында ҡырау,
Беҙ бит Уралда!
Емеш үҫер ерме ни был, апай?
Төшөндөрөү кәрәк уларға!
Тыңлап бөткәс уны тыныс ҡына,
Әйттем:— Был эшкә мин ризамын.
Беҙҙең ҡыҙҙарҙы ла был һөнәргә
Өйрәтеүен теләйем Лизаның.

Дөрөҫ, ул йылда мин үҙем дә бик
Ышанманым бында уңышҡа.
Ләкин нисек ҡаршы килмәк кәрәк
Ошондай бер ҡыҙыҡ, яңы эшкә.

Бөгөн әле Лиза менән икәү
Йөрөп сыҡтыҡ бөтә баҡсаны.
Бында үҫә, улым, ышанмаҫһың,
Йөҙөм емешенән башҡаһы!
Алмағастар, сейәләр үҫәләр,
Ҡарағаттар емеш бирәләр.
Емешселек эшен өйрәнергә

Күршеләр ҙә беҙгә киләләр.
Һалҡын йылға хәҙер, баҡса эсләп,
Ҡанау буйлап йөрөй әйләнеп.
Ҡәҙә-һарыҡ йөрөгән деғәнәклек,
Бына шулай китте йәмләнеп.
Лиза әйтә:— Был баҡса,— ти,— беҙҙән,
Ҡилгәндәрҙән, бүләк булыр,— ти.
Ауыр йылды еңеләйткән дуҫлыҡ,
Туғанлыҡтан үрнәк ҡалыр,— ти.

III

...Улым,
Дүртенсе йыл һуғыш бара.
Сигенеү түгел, еңеү һуғышы.
Ҡыҙыл ғәскәр ҡыҫып алғас, хәҙер
Дошман ала һуңғы һулышын.
Беҙ ҙә тырышабыҙ: Армиябыҙ
Бер ниндәй ҙә юҡлыҡ күрмәһен,
Һәр сәғәттә, һәр бер минутта ул
Еңеү юлы менән үрләһен!
Әле ошо яҙҙы Алмабикә
Барып ҡайтты бер саҡ ҡалаға.
Күстәнәстәр илтте заводтағы
Үҙебеҙҙең ике балаға.
Беләһеңме, ул шаяндар хәҙер
Семья ҡоророға ла өлгөргән.
Ҡаланың тап урта бер еренән
Айырым квартир ҙә бирелгән.
Иртә торалар ҙа икеһе лә
Заводҡа тип ашығып югерә.
Икеһе лә хәҙер бригадир, ти,
Бөтәһенә улар өлгөрә!
Ярышалар, машинаға эйәреп,
Күҙ эйәрмәй улар эшенә.
— Ҡарап торһаң, иҫ китә,— ти Алма,—
Шундай йылғырлыҡҡа кешелә.
Ә улдарын — кескәй Маратты, ти,
Яслелә бик һәйбәт ҡарайҙар.
Әсәләре эштән ҡайтҡансы, ти,
Бында йәшәй бик күп малайҙар...

## IV

...Улым, ниндәй шатлыҡ!
Һәр үткән көн
Яңы еңеү, уңыш килтерә
Беҙҙең ғәскәр инде ул йыртҡысты
Ояһына ҡыуып еткерә!
Әхмәт ағай улын Әхәтте әйтәм,
Етеп бара инде Берлингә.
Ҡасандан ул ут эсендә йәшәй,
Яраланды бары бер генә.
Әхәт яҙа:
— Фашисте беҙ хәҙер
Висла, Одерҙә, ти, туҡмайбыҙ.
Тиҙҙән инде уның Шпреehендә
Эшен бөтөрөргә уйлайбыҙ.
Беҙ уларҙы әсә-Волгала ла,
Дон, Днепрҙә лә туҡманыҡ,
Беҙ уларҙы Карпат тауынан һәм
Варшаванан ҡыуҙыҡ, ҡуйманыҡ.
Дошман инде еңеү менән түгел,
Оҫта ҡасыу менән маҡтана.
Ҡасып ҡотола алһа, хәҙер ул шат,
Ояһына инеп һаҡлана.
Ләкин инде ояла ла хәҙер
Тынғы юҡ, ти, бындай йыртҡысҡа.
Һәр бер ҡыуаҡ, ағас, таш, ерәнеп,
Уны ҡыуып тышҡа ырғыта!..
Беҙ Берлингә еткәс, һуғыш туҡтар.
Автоматты мин дә ташлармын.
Һеҙҙең янға ҡайтып, элеккесә,
Һөйгән эшемде мин башлармын.
Һағындым, ти, комбайында шаулап,
Уңыш йыйған рәхәт саҡтарҙы,
Ҡышы ысын һалҡын, йәйе эҫе
Үҙебеҙҙең матур яҡтарҙы...
Ил сигенән алып Карпатҡаса
Күпме ерҙе иңләп атланым.
Үҙ еребеҙ кеүек йәмле ерҙе
Һис бер ҡайҙан, ти, мин тапманым.
Кеше ере беҙгә кәрәк түгел.

Үҙ еребеҙ алтын, киң беҙҙең.
Матурлыкта, иркенлектә һис тә
Тиңе юк бит беҙҙең илебеҙҙең».

Уҡыйбыҙ ҙа Әхәттең хаттарын,
Ғорур күтәрәбеҙ баштарҙы:
— Совет халҡы был ҙур һынауҙа ла
Үҙ бурысын һәйбәт башҡарҙы.

V

— Улым, шатлыҡ!
Радио хәбәр итте:
— Еңеү көнө килеп етте! — тип.
Беҙҙең ғәскәр фашист бандаларын
Бөтөнләйгә тар-мар итте, — тип.
— Еңеү!
Иң бәхетле көн был.
Мин белмәйем,
Былдай оло шатлыҡ булғаның.
Миллион халыҡ бер йән, бер тән булып,
Урамдарға сығып тулғанын.
Бөтә ерҙә халыҡ.
Ҡайһы бейей,
Ҡайһы йырлай,
Ҡайһы һөйләшә.
Ҡайһы, шатлыҡ йәшен һөртә-һөртә,
Берен-бере үбә, көлөшә!
— Еңеү!
Күптән бирле беҙ һағынып көткән,
Ышанып көткән данлы көн тыуҙы!
Берлин түбәһенә совет улы
Элеп ҡуйҙы нурлы ал туҙы.
— Еңеү!
Был хәбәрҙә күпме ҡыуаныс бар,
Күпме ысын, хаҡлы ғорурлыҡ!
— Еңеү!
Был хәбәрҙә дан бар,
Донъя белгән
Бар дандарҙан өҫтөн торорлоҡ.
— Еңеү!

Был хәбәрҙә күпме батырҙарҙың
Подвиге бар,
Түккән ҡаны бар.
Был һүҙ беҙҙең телдә яңғыраһын, тип,
Башын һалды күпме уландар!..
Һәм ул бөйөк еңеү бына килде,
Сикһеҙ шатлыҡ бөркөп йөрәккә.
Ҡарыулашыр бүтән көс бармы ни
Коммунизм тигән теләккә!

## VI

Бына яуҙан ҡайтып төшә батырҙар.
Эй, был донъя бигерәк матур ҙа!
Бөгөн, улым, минең шатлығымдың
Иге-сиге юҡтыр шикелле.
Һәр бер боец миңә шундай яҡын,
Улым, һинең кеүек, һөйкөмлө.
Әйҙүк, тим мин,
Улдар, һағындырып,
Бик бәҡытлы ҡайтып еттегеҙ.
Инде «Таң» колхозын, күмәкләшеп,
Яңы еңеүҙәргә илтегеҙ!
Ирҙәр ҡайтҡас, эштәр алға китер,
Тағы етеҙерәк, башҡаса.
Колхозыбыҙ тағы күтәрелер,
Күрелмәгән яңы баҫҡысҡа!
Илем инде тыныс хеҙмәт менән
Яңы еңеүҙәргә юл алыр,
Дошман һалған яра хужалыҡта
Һәм тәндәрҙә тағы уңалыр.
Әммә һинең ҡайғың йөрәгемдә,
Улым, бер ҡасан да уңалмаҫ.
Ниндәй генә шатлыҡ ҙур булһа ла,
Был ҡайғымды минең юя алмаҫ.
Онота алмам, улым, хәтеремдә
Мәңге тере булып ҡалырһың.
Ни эшләһәм,
Ҡайҙа йөрөһәм дә мин,
Йөрәгемдә бергә барырһың!

## ШАТЛЫҠ КИЛДЕ!

Ҡайғыға, ти, ҡайғы эйәреп йөрөй,
Шатлыҡ, тиҙәр, шатлыҡ эйәртә.
Гөльямалдың бөгөн һөйөнөсө
Артып китте хатта өсләтә.
Еңеү килде. Гөлсәсәге менән
Сабир ҡайтты бөгөн ҡунаҡҡа.
Алмабикә менән Гөльямалдар
Ҡарап туя алмай Маратҡа.
Ниндәй үҫкән, һөйләшеп тә йөрөй.
Ҡарасы инде үткән ғүмерҙе!
Ошо балаларға ҡарап ҡына,
Хәтерләйһең ҡартлыҡ килеүҙе.
Алмабикә әйтә:
— Һәр бер өйҙә
Хәҙер шатлыҡ, ирҙәр ҡайталар.
Минең Шәрифемдең һөйәктәре
Волга буйҙарында яталыр...
Тоя инем ошо саҡта миңә
Бигерәк тә ауыр булырын,
Ярай әле хәсрәтемде баҫты
Ейәнкәйем, йөрәк бауырым!..
Шулай ти ҙә тупылдатып һөйә
Сабиренең улын — Маратты.
Ейәне лә шаян, өләсәһен бит
Тәүге күреүҙә үк яратты.
— Өләсәйем, һине яратам,— ти —
Һинең янда ғына ҡалам,— ти.
Йәки һине үҙем менән бергә
Ҡалабыҙға алып барам,— ти.
Хәҙер күп кешенең яҡындары
Йә атаһы килә, табыла,
Нисә йылдар ҡайғы кисергәндәр
Шатланалар хәҙер тағы ла.
Лизаны ла балалары менән
Ире күптән килеп алды инде.
Емеш баҡсалары хәҙер унан
Иҫтәлеккә генә ҡалды инде.
Тик Розаның атаһы юҡ һаман.
Һөҙөмтәһеҙ ҡалды эҙләтеү.

Шуға Гөльямал да өҙгөләнә,
Шуға бөтмәй һаман йән әсеү.
Быны күреп Гөлсәсәккә әҙерәк
Көнсөлөклө уйҙар килһә лә
Белдермәне:
— Ярай әле,— тине, —
Әсәй, бер ҡыҙың бар эргәлә!
— Эйе,— тине Роза, Гөльямалды
Ҡосаҡланы, үпте:
— Әсәм!— тип.
Ә Гөльямал йәшен күрһәтмәҫкә
Югереп китте: — Туҡта, эшем!— тип.

### КЕМ ИКӘН УЛ?!

Ошо ваҡыт Хәбир килеп инде:
— Инәй, тиҙ бул! Район саҡыра!
Һине эҙләп югереп йөрөй торғас,
Йығылманым бөгөн саҡ ҡына!
Кем икән һуң?
— Иптәш Ғәҙелшиндер...
— Улай булһа, киттем, югерҙем.
Ярай әле ҡамырымды баҫып,
Икмәгемде һалып өлгөрҙөм...
Ул ҡулдарын телефонға һуҙҙы,
Үтеү менән асыҡ ишекте.
Һәм шунда уҡ иптәш Ғәҙелшинден
Ягымлы, көр тауышын ишетте.
— Йә, туғанҡай,— тине ул, ҡысҡырып,—
Бер һөйөнсө әйтһәм, нишләрһең?
Гөльямал ниҙәлер ҡойолоп төштө:
— Белмәйем шул, нимә эшләрмен?
— Ныҡ булырға һүҙ бир!
Ҡыуанысты ла,
Көйөнөс кеүек, түҙем ҡаршыла! —
Гөльямал сабырһыҙ.
— Әйтегеҙ!..— ти.
Һеҙ ҡушҡанса булыр барыһы ла!
— Юҡ, юҡ!..— ти Ғәҙелшин,— әйтмәй торам.
Хәҙер һеҙгә барып етербеҙ.
Шунда инде бер бик шәп кешене

Бергәләшеп ҡунаҡ итербеҙ...
Аптыранды тамам Гөльямал.
Ауа-югерә ҡайтты өйөнә.
— Ҡем булыр был? Ҡем һуң? —
Ниндәй ҡунаҡ?!
Бер аптырай, берсә һөйөнә.
Өмөт тигән нәмә балҡып китә:
«Әллә улым, Сәхи тереме?!
Ни уйлайым?.. Аҡыл бармы миндә?!
Әллә әҙерәк бөгөн тилеме?!
Өмөтләндерергә яраймы ни
Унһыҙ өҙөлөп бөткән йөрәкте?..»
— Эй, туҡтасы, өҫтәл әҙерләйек!..—
Аһа, ҡалай был уй йөҙәтте!..
Өйҙә йәштәр: һуғыш батыры — Әхәт,
Колхоз батыры — Гөлсөм, Хәбирҙәр.
Роза, Гөлсәсәктәр югереп йөрөй,
Ҡунаҡтарға өҫтәл әҙерләп.
Бына бер саҡ, көслө гудок биреп,
«Газик» килеп инде ҡапҡанан.
Шул саҡ Гөльямалдың һушы китте.
Күҙен ҡаплап алды күк томан.
Йәштәр кемуҙарҙан тышҡа сыҡты.
Береһе лә уны күрмәне.
Йәш булғанға, шатлыҡ ҙур булғанға,
Ҡарт кешенең хәлен белмәне.
Ул иҫенә килеп күҙ асҡанда,
Улы Сәхи янда ултыра.
Ә Ғәҙелшин иптәш стаканға
Һалҡын шишмә һыуы тултыра.
— Мә, эс, — ти ул, яғымлы йылмайып, —
Әйтмәнемме түҙем булырға?
Быңдай нервы менән улһыҙ түгел,
Мөмкин әсәһеҙ ҙә ҡалырға.
— Ғәфү итегеҙ,— ти Гөльямал,
Тиңһеҙ бәхет менән йылмайып.—
Ғүмеремдә тәүге һәм ахырғы
Йомшаҡлығымдыр, тип уйлайым!..
Һәм ул, тороп, иптәш Ғәҙелшинде
Һәм Сәхиҙе үбеп күреште.
— Мин көткәйнем...

Ә шулай ҙа бөгөн
Көтмәгән бәхеткә ирештем!..—

Сәхи танымаçлык дан ир-егет!
Киң каштары тағы куйырған.
Киң маңлайын кап уртаға ярып,
Ике тәрән һыҙык уйылған.
Күҙ карашы хәҙер текә түгел,
Акыл менән һөйөп карайҙар.
Күкрәгендә өс-дүрт орден яна,
Алды икән быны кайҙарҙа?
Әсәһенә Сәхи кыçка ғына,
Һөйләп бирҙе тормош тарихен.
Был йылдарҙа ул кисергәндәрҙең
Һөйләп буламы һуң барыһын!..
Яраланып, ятып калғас, уны
Колхозсылар алып йәшергән.
Ә аҙактан унан дошман курккан,
Шайтан курккан кеүек йәшендән.
Дошман курккан. Ә Тыуған ил һәр сак
Бойроктарҙа уны котлаған.
«С» отряде фашистәрҙән тағы
Тотош бер районды коткарған!..»
«С» отряде фашист йырткыстарҙың
Етмеш эшелонын ауҙарған.
Дошман инде куркып, урап үтә
Отряд йөрөгән урман, тауҙарҙан...»
Тигән данлы һүҙҙәр килеп торған
Тыуған якка, ғәзиз ерҙәргә.
Тик әсәгә генә бөгөн тәүләп
Насип булды быны белергә.
— Белоруссияның урман, һаҙын
Беләм,— ти ул,— Иҙел буйындай.
Сөнки уны гиҙҙем аркыры-буй
Нисә тапкыр һуғыш буйына.
Һуңғы һуғыштарҙа фашистәрҙе
Тылдан кыйратканда, бик каты
Яраланып, госпиталгә индем,
Шунда үтте айҙар биш-алты.
— Эйе, эйе...— тип Ғәҙелшин бүлде,—
Шундай ауыр хәлдә һин яттың.

Тап шул саҡта бөтә ергә яҙып,
Бөтә ерҙән эҙләп мин таптым.
Шуға, Гөльямал, мин элегерәк
Әйтә алманым, улың тере, тип.
Ике тапҡыр үлем хәбәре алыу
Һиңә бигерәк ауыр булыр, тип.
Инде бына Сәхи һау-сәләмәт,
Ҡайтып төштө хәҙер янына.
Йә, улыңды, ҡунаҡтарҙы һыйла,
Ни көтәһең, туған, тағы ла?
— Эйе шул!— ти әсә.— Өҫтәл әҙер!
Бөгөн беҙгә бәхет ҡунаҡта!
Еңеү хөрмәтенә күтәрергә
Ҡымыҙҙар ҙа әҙер туҫтаҡта!
— Тәү туҫтаҡты,— тине Ғәҙелшин,—
Бағышлайыҡ бөйөк Ватанға.
Үлемесле яуҙан еңеп сыҡтыҡ,
Көстәр алып әсә-Ватандан.
Күтәрәйек, дуҫтар, туҫтаҡты беҙ
Һаулығына совет халҡының.
Был еңеүҙә иң ҙур хөрмәттәргә,
Иң ҙур маҡтауҙарға хаҡлы ул!
— Шулай булһын! — тип шаулашып, йәштәр
Аяғүрә баҫып торҙолар.
Һәм шатланып бөтә йөрәк менән,
Туҫтаҡтарға ҡулды һуҙҙылар.
Һый башланды, Ғәҙелшин һәм Сәхи
Ултырҙылар өҫтәл башына.
Ошо саҡта Сәхи күреп ҡалды
Бер һылыу ҡыҙ:
— Кем ул, ҡаршыла?!—
Тәүге тапҡыр күңелде татлы хис
Ярып үтте, ҡапыл, ярһытып.
Һәм ул башын баҫты, ҡарай алмай
Керпектәрен ҡабат ҡалҡытып...
Уның да йәш күңеле тәүге тапҡыр
Күрә ине шундай егетте.
Оҙон керпек япҡан ҡара күҙҙәр
Йөрәгенә гүйә ут һипте...
Һыйлау дауам итте.
Ә был икәү,

Йәшерен генә һаман ҡараштьт.
Йәш йөрәктәр һүҙһеҙ яҡынайҙы,
Йәш йөрәктәр һүҙһеҙ аңлашты...

## ЭПИЛОГ

Залда йыйылыш бара. Трибунаға
Сығып баҫты өлкән, дәү ҡатын.
Уның йөҙө тыныс, күҙе яҡты,
Әйткән һәр бер һүҙе мең алтын.
Көмөшләнгән ҡалын толомдарын
Өҫтән үреп, артҡа ҡайырып,
Йылдар бөгә алмаған тура һынын
Ҡескәй трибунанан айырып,
Баҫып тора һылыу ҡарағастай
Киңлегендә үҫкән Уралдың.
Ул йәш саҡта матурлыҡта булһа,
Хеҙмәт менән хәҙер дан алды.
Зал туп-тулы. Хатта ҡай берәүҙәр
Баҫып тыңлай урын тулғанға.
Ул депутат, тормош юлын һөйләй,
Халыҡ хеҙмәтсеһе булғанға.
Уның йыйырсыҡлы ҡарт йөҙөндә
Тотош бер ҙур ғүмер сағыла.
Ә күҙҙәре йәп-йәш. Унда тормош
Бөгөн көслө балҡый тағы ла.
Зал тып-тыныс.
Халыҡ йотолоп тыңлай,
Гөльямалдың һүҙен үҙ итеп,
Йөрәгенең тибеүендә уның
Үҙ йөрәге тибешен ишетеп.
Улар күрә уның үткәнендә
Үҙ башынан кискән ҡытлыҡты,
Уның бөгөнгөһө яҡтыһында
Күрә үҙенә килгән шатлыҡты.
Шулай Гөльямал гел яҡтылыҡҡа,
Яҡшылыҡҡа һаман үрләне.
Халыҡ уны Верховный Советтең
Депутаты итеп ҙурланы.

*1949 — 1951*

# ГӨЛБӘҘӘР

(Драматик поэма)

**ҠАТНАШАЛАР:**

Х а р р а с  бай — 45 йәштә. Олпат кәүҙәле, ҡаты, тәкәббер холоҡло.
А л м а ҡ а й — 40 йәштә. Умарта кеүек йыуан кәүҙәле. Харрас байҙың өлкән ҡатыны.
Һ ы л ы у ҡ а й — 30 йәштә. Нәҙек оҙон буйлы, һылыу ҡатын. Балаһыҙ. Харрас байҙың йәш ҡатыны.
И ш б а й — 25 йәштә. Харрас байҙың улы.
С ә л м ә н  б а й — 50 йәштә. Йыуан, тәбәнәк.
Т и м е р б у л а т — 40 йәштә. Харрас байҙа ялсылыҡта тора.
Г ө л ш а т — 35 йәштә. Уның ҡатыны.
Г ө л б ә ҙ ә р — 17 йәштә. Уларҙың ҡыҙҙары.
З ә й н и — забойщик. Батша төшөрөлгәс ҡайтҡан һалдат.

С а ф ы й
И р ғ ә л е — фронттан ҡайтҡан һалдаттар.
Ә х м ә т

А һ ы л б а й — ялағай.
А ҡ  о ф и ц е р.
А ҡ  һ а л д а т.

Ваҡиға граждандар һуғышы осоронда, ауылда бара.

## БЕРЕНСЕ ШАРШАУ

### 1-се күренеш

Урал тауҙары араһы. Ҡайҙалыр, яҡында, кыҙҙар йырлаша-көлөшә муйыл йыялар. Бында, тау битләүендәге кескәй аҡланда, ҙур ҡарт имән төбөндә З ә й н и, С а ф ы й, И р ғ ә-л е, Ә х м ә т һөйләшеп ултыралар. Етди, йәшерен әңгәмә: аҡтарҙы тылдан ҡыйратыу өсөн көрәшкә тотоноу мәсьәләһе.

З ә й н и

Бына, дуҫтар, беҙ, батшаны төшөрөп,
Азатлыҡ тип ҡайттыҡ.
Ә унан һуң килеп тыуҙы күпме һатлыҡ?
Аҡгвардеецтәр, интервенттәр, чехословактар
Батшаны кире ҡайтарып
Ҡуймаҡсылар.
Ҡояш кеүек балҡып тыуған азатлыкты
Ҡанлы ҡулдар менән ҡабат
Быумаҡсылар.

С а ф ы й

Эйе туған, донъя хәҙер
Күҙгә болот кеүек болара.
Һәр кем теләй елде үҙ теләге,
Үҙ кәрәге өсөн борорға.

З ә й н и

Ҡурәһегеҙ,
Аҡтар тотондолар мобилизацияға,
Тирә-яҡтан бөтә йәштәрҙе йыйырға.
Теләй улар, шул йәштәргә ҡорал биреп,
Ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышҡа ҡыуырға.

С а ф ы й

Теләй улар Совет власен быуырға.

Ирғәле

Харрас байҙар ярҙам итәләр уларға.

Зәйни

Эйе.
Ошоғамы, беҙ юл ҡуйып ята алабыҙ?
Ни өсөн беҙ һалдаттар, тип аталабыҙ?

Сафый

Нимә эшләргә?
        Ниҙән башларға һуң?..

Ирғәле

Тик ятырға иҫәп юҡ улай.

Әхмәт

Зәйни, һеҙҙә — рудниктә һуң хәҙер
Эшсе халыҡ ни ти, ни уйлай?

Зәйни

Улар әйтә: мобилизацияны өҙөргә.
Аҡтарға ҡаршы аяуһыҙ көрәшергә.
Аңһыҙлыҡтан аҡтар ҡулына эләккән
Һалдаттарҙы уятырға, тарҡатырға.

Сафый

Дөрөҫ фекер.

Ирғәле

Тик, эшләүе еңел булмаҫ.

Әхмәт

Көрәш буламы ни ул, дуҫ, еңел булғас?

Зәйни

Эйе, эйе,
Нисек тә дошманды эстән тарҡатырға.
Һалдаттарға дөрөҫлөктө аңлатырға.
Улар тейеш, аҡтарҙың ҡоралын алып,
Ҡисекмәҫтән эшсе отрядҡа ҡасырға!

Сафый

Ҡыйыу план.

Зәйни

Йә, ҡайһығыҙ был бурысты өҫтөнә ала?
Ҡемегеҙҙә мөҡәддәс үс дөрләп яна?

Ирғәле

*(кеҫәһенән ҡағыҙ алып)*

Зәйни туған, беҙҙә лә бит повестка бар.
Беҙҙе лә улар һалдатҡа алмаҡсылар.

Әхмәт

Беҙ әле ни эшләргә белмәй тора инек,
Ҡәңәшергә һине көтөп тора инек.

Зәйни

Улай булғас, бик уңайлы, һеҙ барығыҙ.
Эстән тороп, дошман көсөн тарҡатығыҙ.

Сафый

Дөрөҫ кәңәш.

Ирғәле

Ярай, йәнем тартмаһа ла, мин барайым.
Һалдаттарҙы көрәшкә өндәп ҡарайым.

Әхмәт

Мин дә барам. Беҙ икәүләп башҡарырбыҙ.
Ҡәрәк булһа, изге юлда баш һалырбыҙ.

Зәйни

Рәхмәт, дуҫтар,
Уңышлы эш теләйем һеҙгә.

Сафый

Ә миңә Зәйни,
Ни эшләргә?

Зәйни

Сафый туған,
Элеккесә һин Сәлмәнгә күсер булып бар.
Дошмандың бар серен белеп, күреп йөрөр-
һөң.
Ваҡытында беҙгә хәбәр биреп торорһоң.
Сәлмән, Харрастар, беләһең,
Яуыз дошмандар.
Күпме ғәйепһеҙҙең улар
Ҡанын эскәндәр!
Шуның өсөн һин уларҙы
Ныҡ тот иҫәптә.
Һәр бер аҙымдарын күҙәт,
Яҡшы иҫәплә.
Көнө килер... Туҡта, дуҫтар,
Миндә яңы листовкалар бар.
Тыңлағыҙ, беҙҙекеләр бына
Нимә яҙалар?

*(Ҡеҫәһенән ҡағыҙ сығарып уҡый.)*

«... Эшсе, ярлы, батрак, ҡуҙғал!
Көрәшкә тотон!
Батша власе ҡайтмаһын,
Ғүмергә бөтән.
Аҡтарға, байҙарға, бөтә
Контрға үлем!
Туҡма, ҡыр уларҙы, әгәр
Ярат һаң илең!..»
Был бит, дуҫтар, Ленин һүҙе.
Ленин шулай ти.
Ленин ҙур көрәшкә өндәй.
Ҡуҙғал, уян!— ти.

Сафый

*(һағайып)*
Ҡемдер килә, буғай.

Ирғәле

Ҡыҙҙар яҡынлаша.

Зәйни

Әйҙә, киттек ҡыҙҙар янына.
Инде була
Уйнап, көлөп, бейеп алырға!

Шаулашып, көлөшөп сығып китәләр. Аҡлан бер аҙ буш тора. Бошонop И ш б а й килеп сыға. Тирәк төбөнә, үлән өҫтөнә килеп ауа. Уфтана.

Ишбай

Нимә булды миңә?
Ни эшләнем, мин?
Аңламайым хәҙер үҙемде.
Әллә ниндәй сихри ептәр менән
Солғап алдың күңел күгемде.
Барыһы бөттө,
Онотолдо хәҙер,
Тып-тын, тыныс ғүмер юлдарым.

Уның менән, тик бер уның менән
Үрелеп үҫә бөтә уйҙарым.
Ятһам, торһам, йөрөһәм,
Ни эшләһәм дә,
Күңелем унда. Ябыҡ бүтәнгә.
Теләр инем бөтә ғүмер юлын
Уның менән атлап үтергә.
Тик был мөмкин түгел.
Яратмай ул.
Яратмаҫ та, ахыры, мәңге лә...
Ул гел ҡаса...
Ситтә тороп ҡалам,
Ауыр уйҙар менән мин генә.

Йомшаҡ баҫып, ярамһаҡланып А һ ы л б а й килеп сыға.

А һ ы л б а й

Ишбай ҡустым, нихәл, нимә бар?
Ниңә былай япа-яңғыҙың?
Күҙең талған, йонсоғанһың, ҡустым.
Кемде көтөп шулай ҡаңғырҙың?

И ш б а й

Беләһең бит. Ярар. Әйттеңме һуң
Уға минең уйҙы, сәләмде?

А һ ы л б а й

Әйткәйнем дә... Әрләй, асыулана.
Хи-хи... Осора һуға яҙҙы сәлләмде.
Ҡарт шайтан, ти, йөрөмә, ти, арала.
Ишбай түгел, ҡыл да үтә алмаҫ, ти,
Зәйни менән минең аранан.

И ш б а й

Бына нисек?!. Әйттеңме һуң уға,
Ишбай һине һөйә, тип.
Әгәр барһаң, малы, даны —
Бөтәһе лә һиңә, тип?

Аһылбай

Әйттем дә ни... Йөрөмәһен, ти,
Ҡойошҡанға ҡыҫылған ... ни һымаҡ, ти.

Ишбай

Шулай тиме?
Йә, кит, күҙҙән юғал.
Ни һөйләгәнеңде бел, ахмаҡ.
Ә, ни, ағай, туҡта, ишетәһеңме, күҙәт.
Күләгәһе бул һин уларҙың.
Арттарынан бер иле лә ҡалма,
Урап сыҡһалар ҙа Уралды!

Аһылбай

Баш өҫтө, бай, киттем. *(Сыға.)*

Ишбай

Мин көтөрмөн.
Күреү менән хәбәр итерһең!
Туҡта, йолҡош Зәйни, бер тотонғас
Башыңа мин бик тиҙ етермен!..

Ағас араһынан һаҡлыҡ менән генә Сафый килеп сыға.

Сафый

Бәй, бәй, Ишбай, ни эшләп ята?
Ниңә көйһөҙ?

Ишбай

Миндә эшең булмаһын, кит,
Бар, бынан һыҙ!

Сафый

Һыҙырмын да, хафаланма,
Йомошом һиндә түгел.
Ә шулай ҙа мин ҡайғыңды беләм.
Ишбай, һин унан төңөл!

Ишбай

Юлыңда бул, Сафый, кит, тим, бынан,
Аңғыра башың иҫән-һау саҡта.
Беләһеңдер, мине, Ишбай, тиҙәр.
Бик бай, тиҙәр, уйла шул хаҡта!..

Сафый

Шапырынма, Ишбай, уйлап һөйләш.
Бында урман... Беҙ икебеҙ генә...
Ә ҡулдар бит, ҡара, һалдат ҡулы!..
Татығыһы килһен уны кемдең генә?!.

Ишбай

Ярар инде, Сафый, боҙолошмайыҡ.
Бар, китеп тор, йә, мин үтенәм.

Сафый

Ҡитһәм китермен дә. Елкәмде мин
Мәңге күрмәһәм дә үкенмәм.
Тик, туғанҡай, аңла,
Гөлбәҙәрҙе
Һин бит бушҡа ғына көтәһең...

Ишбай

Нисек бушҡа?
Уны көткәнемде кем һөйләне?
Ҡайҙан беләһең?!.

Сафый

Беләм инде. Ођон ҡолаҡ бит мин.
Тик улар бит Зәйни менән бергә...
Эйе...
Дөйәтауђа муйыл тирәләр!

Ишбай

Дөйәтауђа?!.
Улар бергә?
Нисек улар бађнат итәләр?!.

Шашып, югереп сығып китә.

Сафый

Ха-ха! Нисек өтәләнде!..
Гөлбәђәр тип, йән ата.
Ә Гөлбәђәр батыр һалдат
Зәйнуллаһын ярата...

Йыр ишетелә. Ҡыђђар һәм егеттәр инә. Ишбай, эре генә тамаҡ ҡырып, таҡмаҡҡа бейей-бейей килә.

Хор

Һай, һай, һай ғына ла,
Егете бик бай ғына.
Егете бик бай ғына ла,
Баҫыуы тик яй ғына.

Ай, һай, һай ғына ла,
Һалдатҡа ярай ғына.
Һалдатҡа ярай ғына ла,
Тик үђе бармай ғына.

Сафый

Ай, һай, һай икән дә,
Исеме Ишбай икән.

Исеме Ишбай икән дә,
Эше бик бешмәй икән!

Ишбай асыуланып бейеүҙән туктай. Зәйни, ҡурайын Сафыйға биреп, үҙе бейергә төшөп китә. Уға ҡаршы Гөлбәҙәр төшә. Ярһып, дәртләнеп бейейҙәр.

Хор

Һай, һай, һай ғына ла,
Егете матур ғына.
Эшсе егет, эшсе ҡыҙҙың
Йөрәге батыр була.
Һай, һай, һай икән дә,
Һөйгәне гөлдәй икән.
Һөйгәне гөлдәй булғанға
Ҡайберәү көнләй икән.

Ишбай

Һай, һай, һай икән дә,
Һылыу ҡыҙ ала икән,
Һылыу ҡыҙ тип йөрөгәне
Ҡуптәрҙән ҡалған икән.
Ха-ха-ха!..

Гөлбәҙәр

Уф, ҡарасы,
Ҡара йөрәк, нимә һөйләй?!

Илап ҡыҙҙар араһына ташлана.

Ҡыҙҙар

Ниңә шулай һөйләнмәһен,
Гөлбәҙәр уға тәтемәй!..

Зәйни

Һин оятһыҙ, Ишбай, телең барып,
Шундай һүҙҙе нисек әйтәһең?

Һүҙенде ал кире, хәҙер үк, тиҙ!
Юкһа, бел, донъянан китәһең!..

Ишбай

Ни һөйләйем, белеп һөйләйем.
Минән ҡалһа ла бит көймәйһең! Ха- ха!..

Аһылбай

Ха-ха! Көймәйһең шул, эйе, көймәйһең!

Зәйни

Ах, шулаймы, мә, ал!.. *(Йыға һуға.)*

Аһылбай

Үлтерҙеләр!.. Ҡарауыл!.. Үлтерҙеләр!..

Ишбай

Юҡ, үлмәнем әле, үлмәмен мин.
Үҙем алырмын мин уның йолҡош йәнен!..

Асыулы янып сығып китә. Аһылбай эйәрә. Аҡланда Зәйни, Сафый, Ирғәле, Әхмәттәр генә ҡала.

Сафый

Их, Зәйнулла туған, шул яуызға
Ни тип инде ҡулың бысраттың?!.

Зәйни

Шулай кәрәк!

*Шаршау*

## 2-се күренеш

Эңер ваҡыты. Харрас байҙың утары. Бер яҡта йылға, туғайлыҡ, икенсе яҡта ҡуйы урманлы тауҙар. Тау аҫтында, урманға һыйынып, кескәй өй ултыра. Бында Харрас байҙың мал ҡараусыһы Тимербулат үҙ ғаиләһе менән йәшәй. Өйҙөң һул яғында киң кәртә-ҡуралар һуҙылған. Шаршау асылғанда Гөлшат тупһала ямау ямап ултыра. Ерҙә Тимербулат ҡамыт төҙәтә.

Гөлшат

Ҡуйсы, атаһы, ошо арала гел
Уйың ауыр, йөҙөң ҡараңғы.
Аңламайым, нимә борсой һине,
Томаланды ниңә күҙ алдың?

Тимербулат

Эй, был донъя шундай иркен төҫлө...
Ниңә ауыр унда йәшәүе?
Туйҙырҙы инде, ай-һай, бик туйҙырҙы
Ғүмер баҡый байға эшләүе.

Гөлшат

Әйтмә инде, атаһы, булмаҫ инде,
Ярлы өсөн бәхет юҡтыр ул.

Тимербулат

Белмәйем шул. Зәйни әйтә лә бит,
Тиҙҙән беҙҙекеләр килер, тип,
Харрас кеүек ҡара йөрәктәрҙең
Ҡәрәктәрен улар бирер, тип.

Гөлшат

Әй, ҡуйсәле, юҡты, бала кеүек,
Шул Зәйнигә ни тип ышандың?

Т и м е р б у л а т

Ышанмай ни, ул бит күпте күргән,
Һалдат кеше. Үҙе забойщик.
Беләһеңме, Петербурҙа хатта
Ишеткән, ти, Ленин тауышын.
Большевик, тип уны һөйләйҙәр.

Г ө л ш а т

Абау, ниндәй хәтәр!.. Әй, һин уға
Яҡынайма, һаҡлан, эйәрмә!
Бальшәүи-ик тип, атып үлтерерҙәр...
Йәки ебәрерҙәр Себергә.

Т и м е р б у л а т

Йә, шаулама!..
Әсәһе, беләһеңме,
Зәйни Гөлбәҙәрҙе ярата!..

Г ө л ш а т

Ә мин ишетеп ҡалдым: Ишбай ҙа, ти,
Гөлбәҙәр тип, хатта, йән ата!

Т и м е р б у л а т

Ишбай ҙа, ти?

Г ө л ш а т

Эйе, атаһы, ысын!..

Т и м е р б у л а т

Уға бирер минең ҡыҙым юҡ.
Зәйнуллаға тиһәң, үҙ тиңе бит.
Эшсе егет, әйтер һүҙем юҡ.

Г ө л ш а т

Зәйнуллаға барһа, минең кеүек
Ялсылыкта үтер ғүмере...
Ауыр эштән йәше етмәйенсә
Арҡаһына сығыр көмөрө.

Т и м е р б у л а т

Ишбай алһа, бәлки, көмөрәймәҫ.
Ташҡа әйләнер тик күңеле.
Мин уйлайым: арҡа көмөрөһөнән
Яманыраҡ күңел көмөрөһө.

Асыуланып, ярһып, Һ ы л ы у ҡ а й килеп сыға.

Һ ы л ы у ҡ а й

Әй, ни, Гөлшат, Тимербулат, тием!

Т и м е р б у л а т

Ни бар, еңгә?

Г ө л ш а т

Аһа, ни булған?

Һ ы л ы у ҡ а й

Харрасты әйтәм, әллә ҡайҙа йөрөй!
Бында урала, буғай?

Г ө л ш а т

Аһа, юҡсы, килмәне ул бында.
Күренмәне бөгөн.

Т и м е р б у л а т

Бай ни эшләп йөрөһөн бында?
Нимә бар төнөн?

Һ ы л ы у ҡ а й

Һөйләмәгеҙ, ошо арала бында йыш йөрөй.
Гөлбәҙәр тип, уның хәҙер
Ауыҙ һыуы ҡорой.

Г ө л ш а т

Ҡитсе, бушты, ҡыҙ һөйөргә
Ул бер егетме?

Т и м е р б у л а т

*(ирония менән)*

Ни эшләйһең бит, бай кеше ул
Бөтәһенә ирекле.

Һ ы л ы у ҡ а й

Ә, шулаймы, байға бирмәксеһең?!

*(Тимербулаттың танауына йоҙроҡтарын төртөп.)*

Бына һиңә! Бына һиңә!.. Ҡөтөп тор!
Әгәр Гөлбәҙәрең уға барһа...
Нишләтермен икән?.. Ҡарап тор!

Т и м е р б у л а т

Ни эшләтерһең, еңгә?

Һ ы л ы у ҡ а й

Быуып үлтерермен, йәшәтмәм.
Ишетәһеңме,
Харрасыма уны иш итмәм!

Илап, ярһып сығып китә.

Г ө л ш а т

Был ни булды инде, атаһы?
Нимә һөйләп китте албаҫты!..

Т и м е р б у л а т

Бушты һөйләй. Сая, көнсө бисә.
Күренеп тора,
Үҙ башынан уйлап сығарған.
Ҡыҙ һөйөргә Харрас байҙың инде
Башында бит сәсе ағарған.
Етмәһә бит, заманы ул түгел...
Һуғыш, ыҙғыш, тартыш әйләнә.

Г ө л ш а т

Әйтмә лә, әй, ниңә был һылыуҡай
Тоҡ-томалға беҙгә бәйләнә?..

Йортка инеп китәләр. Сыбыҡ-сабыҡ күтәреп Г ө л б ә ҙ ә р инә, усаҡ янына алып барып һала.

Г ө л б ә ҙ ә р

Атай!.. Әсәй!..
Әллә инде йоҡлағандар ҙа!
Йоҡларҙар шул. Ул бахырҙар арығандар ҙа,
Ял итһендәр. Туҡта, һыу ҙа ташып ҡуяйым.
Иртәнсәк торғас, әсәйем күреп ҡыуанһын.

*(Уйланып.)*

Ниңә был Зәйни һаман юҡ?
Килермен тигәйне бит.
Китер саҡта тағы килеп
Күрермен тигәйне бит!..

*(Әкрен генә йырлай-йырлай һыуға китә.)*

Һөйәм һине, өҙөлөп һөйәм, йәнем,
Күңелемде тотош яуланың.

Һинең серле, ҡара күҙҙәреңдән
Күҙҙәремде ала алманым.
Йәш күңелем теләп, һағынып көткән
Тау бөркөтөм, ахыры, һин икән.
Ҡайнар хистәремә тиң булырҙай
Ыласын егет, ахыры, һин икән.

Гөлбәҙәр китеүгә һағайып ҡына Х а р р а с бай инә.

Х а р р а с

Хи-хи-хи, собханалла,
Тағы егет булып алдым.
Ах, шайтан ҡыҙ, күңелемә
Һин вәс-вәсә һалдың.
Шуға бына төн йоҡламай
Бында киләм бит.
Туҡта, сеү, тәүҙә атаһын
Олаҡтырайым...
Тимербулат!.. Тимербулат!..
Ҡайҙа ҡаҙалдың?..

Йоҡоло күҙҙәрен ыуа-ыуа, Т и м е р б у л а т сыға.

Т и м е р б у л а т

Нимә булған, ни бар, хужа?

Х а р р а с

Бар, минең өйҙән туры атты
Егеп алып кил.
Көнө буйы һыбай йөрөп
Ҡалманы бот-бил.
Хәҙер бынан ҡырандаста
Йәйләүгә китәм.
Еңгәндәргә әйт, ҡайтырмын
Иртәгә иртән.

Т и м е р б у л а т

Ярар, киттем, тик һин мине
Көтөрһөң ҡайҙа?

Х а р р а с

Ошо тирәлә булырмын,
Ҡитмәм бер ҡайҙа.

Т и м е р б у л а т китә. Харрас әкрен генә ишек шаҡый.

Гөлшат килен, Гөлшат, тимен,
Ишек ас әле.
Йә, ҡыланма, йәш ҡыҙ кеүек,
Ниңә ҡасаһың?..

Г ө л ш а т

*(ишекте ҡыҫып)*

Ни кәрәк, бай? Төндә лә һис
Тынғы бирмәйһең.

Х а р р а с

Ниңә килгәнемде әле
Һин шул белмәйһең.
Белһәң, улай асыуланып
Һөйләшмәҫ инең.
Ҡыуанып ҡаршылар инең,
Әй, Гөлшат килен.

Г ө л ш а т

Белмәйем шул. Дәрәҫен дә,
Белгем дә килмәй.
Билдәле, бай ялсы янында
Төндә
Яҡшы уй менән йөрөмәй.

Х а р р а с

Яңылышаһың, хи-хи, яңылышаһың...
Матур ҡыҙлы ялсы өйөнә
Бай ҙа йөрөй төндә һөйөнөп.

Хатта тыныс йоҡлай алмай.
Йәш егеттәй көйөнөп. Хи-хи...
Ни, ҡара әле, килен, Гөлбәҙәркәй
Ниңә был арала күренмәй?
Сыҡһын әле. Минең уға ғына
Әйтә торған йәшерен серем бар.

Гөлшат

Ниндәй сер ул? Китсе, йәш балаға
Ҡарт кешенең ниндәй сере булһын?
Нисек инде Гөлбәҙәр оялмай
Һинең менән һөйләшеп торһон?..

Харрас

Беләһеңме, килен, мин бит уға
Яусы булып килдем.
Шуға күрә уның уйын
Белә алдан белгем.

Гөлшат

Юҡ, Гөлбәҙәр, беҙҙән уҙып,
Үҙе һөйләмәҫ.
Яусы икәнһең, һөйлә беҙгә.
Ата-әсәһе менән кәңәшләш.

Харрас

Гөлшат килен, ҡыҙың бигерәк һылыу,
Үҙе уңған, етеҙ, егәрле.
Уны яратып, уфтанып йөрөгән
Егеттәр ҙә, беләм, етерлек.

Гөлшат

Эйе шул, бай, ҡыҙыбыҙ ҙур үҫте.
Егет күҙе төшөр саҡ етте.
Ә шулай ҙа, беләм, ҡыҙымды
Алып китә алмаҫ кем етте.

Х а р р а с

Мин дә шуны әйтәм. Гөлбәҙәрҙе
Бына тигән бай ҙа яратыр...

Г ө л ш а т

Хоҙай ҡушып, байҙың улы алһа,
Барыр ине ҡыҙым, йән атып.

Х а р р а с

Ә бай үҙе алһа, насармы ни?

Г ө л ш а т

Бай алһамы, бармаç ине ҡыҙым.

Х а р р а с

Бына, мәçәлән, мин үҙемә
Яусы булып килдем.
Гөлбәҙәр ҙә, ата-әсәһе лә
Ҡаршы килмәç, тип белдем.

Г ө л ш а т

Үҙеңәме?
Ҡит, һөйләмә, бушты.
Ҡартҡа барырға ул алйотмо?
Ҡитсе, китсе, оло башың менән
Төптө белмәйһең һин, оятты.

Х а р р а с

Туҡта әле, Гөлшат килен!..

Г ө л ш а т

Ҡуй, ҡуй, бушты, ул турала
Һөйләшкем дә килмәй.

Эй хоҙайым, аҙғын бай башына
Ниндәй боҙоҡ уйҙар килмәй!..

*(Ишекте шарт ябып инеп китә.*

Х а р р а с

Хи-хи-хи!.. Ҡара уны, нисек!..
Улыма бирмәксе!..
Ялсы ҡыҙы бай егеткә
Өмөт итһенсе!?.
Туҡта, сеү, әллә ысынлап
Ишбай ҙа киләме бында?
Әллә ошо ҡыҙға, ысын,
Күҙ һаламы ул да?!.
Улай булһа, уның юлын
Бик тиҙ ҡыҫҡартырмын.
Ә хәҙергә ошо ерҙән
Тыңлап та торормон...

Ағас араһына йәшенә. И ш б а й килеп сыға. Әкрен генә һ
ғыра. Уға ҡаршы А һ ы л б а й сыға

И ш б а й

Аһылбай ағай, ат ҡайҙа?
Ҡара уны, яҙлыҡма!

А һ ы л б а й

Ҡайҙа тип ни, шунда инде,
Үҙең ҡуйған һаҙлыҡта.

И ш б а й

Ярай, яҡшы, оҙаҡламай,
Зәйни ҙә килеп етер.

А һ ы л б а й

Был арала ул гел бында!

Ишбай

Бөгөн килмәçкә китер.
Рәхмәт һиңә.

Аһылбай

Һинең өсөн
Тырыштым мин дә.
Беләһең бит, һин тигәндә —
Аяғым ерҙә.

Ишбай

Эйе, эйе, хеҙмәтеңде
Онотмам бер ҙә.
Тай бирермен, рәхәтләнеп
Бер ат егерһең.
Туйымда төп ҡоҙа булып
Бейеп йөрөрһөң...
Йә, ярар, бар, йәшенеп тор,
Мин дә йәшенәм.
Тиҙҙән күк айғырҙы эҙләп
Килер кешеләр.

*(Йәшенәләр.)*

Харрас

*(үҙалдына)*

Был малай ни эшләп йөрөй?!
Сығып туҡмарға микән?..
Туҡта, күҙәтәйем әле,
Нимә эшләрҙәр икән?..

Йәшенә. Бер аҙҙан ат эҙләүселәр килеп сыға.

Сәлмән

*(ҡамсыһы менән Тимербулаттарҙың ишеген ҡағып)*

Тимербулат! Тимербулат, тием!

Гөлшат

*(эстән)*

Өйҙә юҡ ул.

Сәлмән

Күрмәнеме минең айғырҙы?
Күк айғыр юҡ. Таңдан бирле уны
Эҙләй-эҙләй тамам ҡаңғырҙыҡ.
Тимербулат өйҙә юҡ, ти.
Төнө менән ҡайҙа йөрөйҙөр?
Ҡемдер атты ошо урманлыҡта
Күргән, имеш, тип бит һөйләйҙәр.
Йә, эҙләйек!

Халыҡ төркөмө

Ат урланған, ат юғалған!
Сәлмән байҙың күк аты.
Күк айғыр, күк айғыр,
Уйнап торған көр айғыр.
Ҡем урлаған? Һай уңмаған,
Урлатҡан шундай атты!
Тотолмаһаң — дан егет.

Сәлмән

Тотһаҡ, ташларбыҙ иҙеп.

Халыҡ төркөмө

Аяу юҡ ҡараҡҡа!

Сәлмән

Дошман ул халыҡҡа!..

Халыҡ төркөмө

Ҡүк айғыр, ҡүк айғыр,
Һыласын ҡоштай, дан айғыр.

Эҙләнеп, уҙып китәләр. Гөлшат ишекте асып ҡарай ҙа ҡабат яба.

Гөлшат

Бүреләрҙең ауыҙы ашаһа ла,
Ашамаһа ла ҡан тигәндәй.
Ярлы булғас, бер гонаһһыҙ көйө
Һинән шикләнәләр бирәндәр!

Ишбай

Ишеттеңме, әй, Аһылбай ағай,
Ҡүк айғырҙы нисек эҙләйҙәр?

Аһылбай

Ҡешеләрҙә асыу ҡабара!..

Ишбай

Ҡулдарына барып эләкһәң,
Иҫән ҡалмаҫ һис бер ҡабырғаң.

Аһылбай
*(ҡурҡынып)*

Ишбай ҡустым, улар, ҡараҡ тиеп,
Беҙҙе килеп тотоп алһалар?
Ҡүк айғырҙы Зәйни түгел, ә беҙ
Урлағанды белеп ҡалһалар...
Беҙ ни эшләрбеҙ?

Ишбай

Булмаç. Баҙнат итә алмаçтар.

Аһылбай

Уныһы шулай...

Ишбай

Ҡайтып киләләр, буғай!..

Йәшенәләр. Гөлбәҙәр менән Зәйни килеп сыға. Зәйниҙең арҡаһында юл тоҡсайы.

Гөлбәҙәр
*(һыуын ултыртып)*

Бына, һыу ҙа булды...

Зәйни

Мин дә килдем...

Гөлбәҙәр

Бик оҙаҡлап килдең бөгөн кис.

Зәйни

Эш бит, һылыу, шахтер кеше бит мин...
Ваҡытында бушап булмай һис.
Көн буйы эшләйһең, ер соҡойһоң...
Байҙар өсөн алтын табаһың.
Ара ун саҡрым. Ҡыуанаһың,
Һуң булһа ла арынып килә алһаң.

Гөлбәҙәр

Уныһы шулай, йә, һөйләштеңме һуң?
Атайымды кисә күрҙеңме?

Бында хәтәр миңә, аңлайһыңмы?
Ауыр уйҙар борсой күңелде...

Зәйни

Ҡөймә, һылыу, атайыңды күрҙем.
Ул бик риза беҙҙең никахҡа.
Фатир табып, киләһе ял көндө
Алып ҡайтам һине рудниккә.

Гөлбәҙәр

Беҙ ниндәй бәхетле, Зәйни,
Бергә булырбыҙ.
Донъяның әсе-сөсөһөн
Бергә күрербеҙ.

Зәйни

Дөрөҫ, һылыуым, аҡыллым һин минең!
Килсе, һөйәйемсе бер генә.
Тормошом да, бәхетем дә минең,
Шатлығым да һин бит, һин генә...

*(Иркәләп ҡосаклай.)*

Гөлбәҙәр
*(йырлай)*

Тау артынан һыҙылып ал таң ата,
Мин йоҡоһоҙ таңды ҡаршы алам.
Шул саҡ гүйә, таңдай яҡтырып,
Һин баҫаһың килеп ҡаршыма.

Зәйни

Һинһеҙ үткән һәр бер минутым
Моңло, зарлы, ауыр йыл кеүек.
Бергә булған сағым йырлап бөтмәй,
Өҙөлөп ҡалған гүзәл йыр кеүек.

... Гөлшат
*(ишек асып)*
Гөлбәҙәр, ҡайт!

Гөлбәҙәр

Хәҙер, әсәй!.. Зәйни, хуш бул!..
*(Йүгереп өйгә инеп китә.)*

Зәйни

Хуш, хуш, һылыу!..

*(Үҙалдына.)*

Инде ни эшләргә?
Сафый оҙаҡланы... Ниңә килмәй?!.
Ҡәрәк ине тиҙерәк китергә!..

Уйланып, икеләнеп торғанда, Ишбай менән Аһылбай сығып уға ташланалар.

Ишбай

Ҡарауыл!.. Ҡарауыл!.. Ҡараҡ тоттоҡ, ҡараҡ!..

Аһылбай

Ҡараҡ!.. Ҡараҡ!.. Ҡараҡ!..

Сәлмән бай менән халыҡ төркөмө йүгерешеп килеп сыға.

Сәлмән

Ҡайҙа ҡараҡ?

Халыҡ төркөмө

*(Зәйниҙе күреп, аптырап)*
Эштәр харап!..

Ишбай

Сәлмән байҙың күк айғырын
Зәйни урлаған.
Уны ошо беҙҙең һаҙға
Йәшереп ҡуйған!

Аһылбай

Эйе, дөрөҫ!

Зәйни

Нахаҡ! Нахаҡ!..

Ағас араһынан Харрас бай атылып сыға.

Харрас

Хаҡ, тим, хаҡ! Үҙем күрҙем.
Аһылбай, бар, атты апсыҡ,
Халыҡ күрһен!..

Аһылбай

Хәҙер, ағай!.. *(Югереп китә.)*

Ишбай

*(көтөлмәгәндә атаһының ярҙамын күргәс,*
*тағы ла ҡанатланып китә)*
Эй, зимагур, ат ҡарағы!
Бәйләгеҙ уның ҡулын!

Харрас

Ҡәрәген бирегеҙ уның!..

Зәйни

*(Харрасҡа)*

Юха йылан!..

Х а р р а с

Бына ғәжәп, булһа ни булған!..
Ха-ха!..

С ә л м ә н

Ҡайҙа күк ат?! Атты тап, тиҙ!..

З ә й н и

Кем урлаған, шуларҙан һин таптыр!..

Х а л ы ҡ т ө р к ө м ө

Эйе, булмаҫ, Зәйни нахаҡ ҡапты!..

Ишбай Зәйниҙең кеҫәләрен аҡтара. Ошо ваҡыт уның, һөйләшеү буйынса, Сафыйға бирергә тип алып килгән листовкаһын таба.

И ш б а й

*(бер листовканы алып ҡысҡырып уҡый)*
Был нимә был?
«...Эшсе, ярлы, батрак, ҡуҙғал,
Көрәшкә тотон!»
Күрҙегеҙме, бына кем икән ул!

Х а р р а с

Бальшәүник!..

С ә л м ә н

Бальшәүник!.. Бальшәүник!..

З ә й н и

Эйе, большевик!

Халыҡ төркөмө

Ат ҡарағы түгел!..

Сәлмән, Харрас
*(янап)*

Ә, нимә тиһегеҙ?!.

Аһылбай
*(ағас араһынан атты күрһәтеп)*

Ишбай ҡустым, ни эшләтәбеҙ атты?

Ишбай

Сәлмән ағайҙарға алып бар.

Сәлмән

Хәҙер инде, ҡотола алмаҫһың,
Себерҙә серер башың.

Ишбай

Түшәге ер, кейеме кер,
Таш булыр ейгән ашың!..

Харрас

Әйҙә, атла! Әпкитәйек, тиҙ, волоскә!..

Ишбай, Сәлмән

Атла, атла!..

Зәйни

Яуап көнө етер, Ишбай!.. Быны аңла!

Бығаса әсәһенең ҡулынан ысҡынып, ишектән сыға алмай торған Гөлбәҙәр атылып сыға, Тимербулатта ҡайтып инә.

Г ө л б ә ҙ ә р

Был ниндәй эш?

И ш б а й

Шундай эш был...
Зәйниең уғры, имеш! Ха-ха!

Г ө л ш а т

Гөлбәҙәр, тим, ҡатнашма!..

З ә й н и

Гөлбәҙәр, уға ышанма!..

Т и м е р б у л а т

Ниңә былар шашына?!.

Г ө л б ә ҙ ә р

Зәйни, Зәйни!..

З ә й н и

Илама, һылыу, бирешмә!

Х а р р а с

Етер, тием, һөйләшмә!..

З ә й н и

Ҡан эскестәр!

И ш б а й

Үлтер, йәнсе!..

Х а р р а с

Үлтергәнсе, үлтергәнсе!..

Туҡмап, тартҡылап алып сығып китәләр.

Т и м е р б у л а т

Ни эшләттеләр, ни эшләттеләр ниндәй егетте!..
Ҡем башы уйлап сығарған бындай
этлекте?!.

Г ө л б ә ҙ ә р

Атай, әсәй, ҡурҡам!.. Тағы кемдер...
Йөрөй һымаҡ бында, яҡында!..

С а ф ы й
*(һаҡ ҡына килеп сыға)*

Был мин... Зәйни юҡмы бында?..
Осрашмаҡсы инек ошонда...

Т и м е р б у л а т

Зәйниҙе... ни... уны...

Г ө л б ә ҙ ә р

Ишбай яуыз, Харрас байҙар тотоп алдылар!..

Т и м е р б у л а т

Ҡараҡ, тиеп, тағы фетнәсе, тип,
Ҡот осорғос һөрән һалдылар...

Г ө л б ә ҙ ә р

Ҡотҡарығыҙ уны, Сафый ағай!..

Сафый

Харап булды... әйттем... һаҡ булмай!..

*(Йүгереп сығып китә.)*

*Шаршау*

## ИКЕНСЕ ШАРШАУ

### 3-сө күренеш

Иртәнсәк. Харрас байҙың ҡунаҡ өйө. Урындыҡта сәй урыны. Харрас бай сәй эсеп, һөйләшеп, эшен бөтөрөп китергә әҙерләнгән аҡ офицер менән хушлаша.

Офицер

Тимәк, вәғәҙә... Байҙар ярҙам итер?
Егеттәрен бирер. Йәлләмәҫ?
Аттарын да... эйе... Аҙығын да...
Нисек әле...
«Аҙыҡлының аты арымаҫ...»

Харрас

Дөрөҫ, ышан, әфәндем, мин әйткәс,
Бөтәһе лә шулай буласаҡ.
Яҡын-тирәләге бөтә йәштәр,
Аттар... аҙыҡ-түлек
Һеҙҙең ҡулға барып туласаҡ.

Офицер

Рәхмәт, рәхмәт!

Харрас

Тик һеҙ нисек унда?..

Офицер

Һеҙҙең ярҙамда беҙ еңербеҙ.

Харрас

Ҡасан һуң беҙ...
Боронғоса гөрләп йөрөрбөҙ?..

Офицер

Күп ҡалманы...

Харрас

Амин...

Офицер

Йә, бай, хуш бул...
Мин ашығам... Эштәр ашығыс.

Харрас

Хуш, әфәндем, ярҙам тураһында
Тырышырбыҙ... ышан... Бул тыныс.

Танау эсенән мөңгөрҙәп йырлай-йырлай тағы кемделер көтә. Тимербулат инеп ишек төбөндә туҡтала. Харрас, шкафтан хәмер һалып эсеп маташҡанлыҡтан, уны күрмәй.

Тимербулат

Бай ниңә саҡыртты икән?

Харрас

Килеп еттең дәме ни?

Тимербулат

Эйе, хужа, килеп еттем.

Х а р р а с

Мин һине бик оҙаҡ көттөм.
Әйҙә, уҙ, уҙ!.. Һөйләшербеҙ,
Ҡәңәшербеҙ... Эйе,
Килешеп тә ҡуйырбыҙ әле беҙ.
Уҙ, уҙ, ниңә ҡатып ҡалдың?

Т и м е р б у л а т

Аяҡ бысраҡ бит, бай, уҙырға.

Х а р р а с

Булһын әйҙә, келәм йәлкеме ни
Бына тигән яңы ҡайныңа.

Т и м е р б у л а т

Ни тиһең, бай?

Х а р р а с

Ҡайным, тим, дәбаһа!
Ҡатыландымы әллә ҡолағың?
Гөлбәҙәрҙе кәләшлеккә алам.
Шулай булғас, ҡайным булаһың.

Т и м е р б у л а т

Ни һөйләйһең?!

Х а р р а с

Ҡыҙың бәхетле икән, насип булған
Бай нигеҙҙә оя ҡорорға.
Ҡыҙың байҙа булғас, үҙеңә лә
Аҡмаһа ла тамып торор ҙа!.. Хи-хи!..
Эйе...

Т и м е р б у л а т

Туҡта әле, бай!..

Х а р р а с

Унан беләһең бит, һуғыш сағы.
Йәш егеттәр китә һалдатҡа.
Ә беҙ ҡыҙың менән рәхәт кенә
Көн итербеҙ бында, аулаҡта.

Т и м е р б у л а т

Туҡта әле, бай, нисек була инде?
Гөлбәҙәр бит әле йәш кенә.
Әсәһе лә быға риза булмаç.
Юҡ, юҡ, ҡыҙҙы биреп булмаç.

Х а р р а с

Нимә, нимә?

Т и м е р б у л а т

Ҡыҙым бик йәш, тим, бай.

Х а р р а с

Улай булһа, торма утарымда.
Ҡәрәк түгел миңә эшең дә!

Т и м е р б у л а т

Туҡта әле, бай, ҡыҙма, сәпсеп барма,
Ҡыуып барма әле эшеңдән.
Беләһең бит һуғыш, ыҙғыш сағы.
Ҡоролоҡ йыл. Быйыл бик ауыр.
Һиндә егерме йыл эшләп киләм.
Һиндә өҙөлөп бөттө бил-бауыр...

Х а р р а с

Ауырмы ни?

Тимербулат

Ауыр... ауыр...

Харрас

Ауыр булһа, иҫәр баш айнығыр.
Унда, бәлки, юнле уй тыуыр...
Унан шуны онотма: айғырҙы бит
Зәйни яңғыҙмы ни урлаған?
Сәлмән бай бит Зәйни менән бергә
Һине лә тотторорға уйлаған!..
Ярай әле, үҙем яҡлап ҡалдым.
Теймәгеҙ, тип, Тимербулатҡа.
Юҡһа, бөгөн һин дә уның менән
Ятыр инең бикле, йоҙаҡта!

Тимербулат

Ятмаҫ инем. Ҡүңелем керһеҙ булғас,
Ҡем яға алһын ундай ялғанды?

Харрас

Хи-хи... Бахыр, Зәйни йолҡош та бит
Шулай уйлай торған булғандыр.

Тимербулат

Ғәйепһеҙгә ғәйепләнде егет...

Харрас

Нимә тиһең, нимә?

Тимербулат

Бинахаҡтан әрәм булды, тим бит...

Х а р р а с

Шулаймы ни әле
Улай булһа...
Уның менән һин дә китерһең?

Т и м е р б у л а т

Әйҙә инде, беҙҙе ҡырып бөт тә
Тынысланып ғүмер итерһең.
Тик шулай ҙа бик онотма, хужа...
Аҡтар ҡасалар, тип һөйләйҙәр!..

Х а р р а с

Ах, бальшәүник!.. Нимә һөйләйһең һин?

Т и м е р б у л а т

Ишеткәнде... Халыҡ һөйләй...

Х а р р а с

Беләһеңме, был һүҙҙәрең өсөн
Йәнеңде мин хәҙер алырмын!
Бәлки, Гөлбәҙәрҙе бирһәң генә,
Ҡотола алһаң ҡотолоп ҡалырһың.

Т и м е р б у л а т

Шулаймы ни?!.
Юҡ, бай, беҙ баланы
Һиңә бирер өсөн тапманыҡ.
Беләһеңдер, һиңә көстө һаттыҡ.
Тик намыҫты, йәнде һатманыҡ!..

Х а р р а с

Ха-ха!.. Намыҫты, ти, өтөк!..

Тимербулат

Эйе, эйе!.. Намыçты ла, ҡыҙымды ла
Һиңә һатмамын!..

Харрас

Улай икән!..

Тимербулат

Шулай...
Ҡыҙымды мин һиңә биргәнемсә,
Үлтереп ер ҡуйынына ташлармын!..
Иçеңдә тот быны!..

Тимербулат ишекте шарт ябып сығып китә.

Харрас

Нисек уçалланды... Туҡта, ҡустым!..
Харрас бик күптәрҙе бөккән ул.
Бер ни ҡаршыһында туҡталмаған.
Бөтә теләгенә еткән ул...

Ҡәһәрләнеп барып, ҡабат шешәгә тотонғанда, Ишбай килеп инә.

Ишбай

Атай, һаумы, кәйефтәрең нисек?

Харрас

Яҡшы. Был Зәйниҙе тотоп,
Шәп егетлек эшләп ташланың.
Күреп торам, улым, үçкән һайын,
Үҙемә ныҡ оҡшай башланың.

Мин үҙем дә батша хәҙрәтенә
Бик күп хеҙмәт иттем.

Шуға бит мин йәп-йәш көйө
Байлыҡ, шөһрәткә ирештем.

Ишбай

Алма ағасынан алыҫ төшмәй,
Тиҙәр түгелме һуң мәҡәлдә?

Харрас

Хи-хи... Улым, һәйбәт эшең өсөн
Бүләк ала алаһың минән дә.
Ни бирәйем? Һора. Ҡурҡмай һора.
Ҡәйефемдең бөгөн яҡшы сағы.
Ҡәләш алып ебәрәһеңме әллә?
Уның да бар яҡшы яғы.

Ишбай

Был һүҙеңә, атай, мин ризамын.
Гөлбәҙәрҙе әйттер бөгөндән.
Мин, ни, атай, уны күптән бирле
Һөйөп йөрөйөм ысын күңелдән.

Харрас

Ә, шулаймы?
Мин бит, улым, әйттем, уйлай белеп,
Теләй белеп бүләк һора, тип.
Үтәмәҫтәй юҡ-бар нәмә һорап,
Арабыҙҙы боҙоп ҡуйма, тип.
Һин, Гөлбәҙәр, тиһең.
Һөйәм, тиһең.
Юҡ, юҡ, булмай. Һалдат китерһең.
Аҡтар отрядендә бик һәйбәтләп,
Батыр, тоғро хеҙмәт итерһең.
Унан һуң күҙ күрер. Аңлайһыңдыр
Тиңдәштәрең йөрөй һуғышта.

Ишбай

Мин ғәйепһеҙ. Үҙең, малдар биреп,
Алып ҡалдың мине һуғыштан.

Харрас

Хәҙер алып ҡалмам. Иртән иртүк
Тороп китерһең.
Аҡтарға тоғро ҡол булып хеҙмәт итерһең.
Күрһәтерһең был еңеүҙә
Өлөшөң барҙы.
Яуларһың һуғышта шөһрәт,
Дан, байлыҡ, малды.
Ә мин бында һинең өсөн доға ҡылырмын.
Ҡәләште аҙаҡтан, ҡайтҡас
Һайлап алырһың.

Ишбай

Улай булғас, мин ни өсөн
Тырыштым инде.

Харрас

Атаң өсөн. Бар әҙерлән, йөҙәтмә мине!
Беләһең бит:
Аҡтарға беҙ тейеш күпләп
Һалдат бирергә.
Ошо эштә һин тейешһең
Башлап йөрөргә.
Аңлайһыңмы?

Ишбай

Аңлайым да...

Харрас

Аңлағас, бар сыҡ.
Яҙыл барып. Аҡ һалдат бул.
Ҡыҙылдарҙы ҡыр!

Ишбай бойоғоп сығып китә. Харрас та уның артынан китергә әҙерләнә.

Туҡта, волоскә үҙем дә
Барып ҡайтайым.
Малайҙы тиҙерәк алһындар.
Ныҡлап әйтәйем.
Тимербулат хаҡында ла
Әйтергә кәрәк.
Юҡһа, теле оҙонайып
Киткән бигерәк!..

Ашығып сығып барғанда, ян бүлмәнән Һылыуҡай килеп сыға.

Һылыуҡай

Атаһы, тим! Ниңә өндәшмәйһең?
Ниңә улай ҡырын ҡарайһың?
Йә, әйт инде һөйгән һылыуыңды
Шулай әрнетергә яраймы?

Харрас

Кит әле, кит, йөрөмә,
Бар, сыҡ бынан!
Мин ашығам, кит, тим, юлымдан!
Мәсеткә, тим, барам, ишетәһеңме?
Фу, әллә ниндәй
Һаҫыҡ еҫтәр килә ҡулыңдан!

Һылыуҡай

Атаһы, тим, алма, кәләш алма!..
Мин бит һине харап яратам.
Алмабикә янына киткәндә лә,
Керпек ҡаҡмай төндәр оҙатам.

Харрас

Бәйләнмә, кит, ҡалдыр!

Һылыуҡай

Атаһы, тим, алма, кәләш алма.
Ярат элеккеләй үҙемде.
Ҡара миңә, ниңә йәшерәһең,
Күрһәтмәйһең ниңә күҙеңде?

Харрас

Етер, тиҙәр, һиңә, бар сыҡ, йәһәт.
Йә, сыҡмаһаң, әйҙә, ятып ҡал!

*(Төртөп ебәрә лә, сығып китә.)*

Һылыуҡай

Эй, бәхетһеҙ башым, түгелә йәшем...
Ул күрмәй ҙә, ах, ул онотто.
Ә мин һөйәм, һөйәм шул аҙғынды
Ниңә өҙгөләнеп, ут йотоп?!
Ул да мине ҡалай һөйә ине...
Наҙлай ине ҡалай ҡәҙерләп.
Хәҙер бына ташлап, ташлап китте,
Эт балаһы кеүек ҡәһәрләп.
Эй, бәхетһеҙ башым,
Түгелә йәшем...
Ниңә һуң мин һаман үлмәйем?
Үлһәмсе мин... Ах, мин үләйемсе...
Кәләш алған көнөн күрмәйем...

Шашып, югереп Ишбай килеп инә. Иҙәндә аунап илап ятҡан Һылыуҡайға абына.

Ишбай

Атай,атай!..
Ҡайҙа был атайым?
Ах, яуыздар, йоҙаҡ асҡандар!..
Фу, Һылыуҡай бында ни эшләп ята?..

Һылыуҡай

Ниндәй йоҙаҡ? Кемдәр асҡандар?

Ишбай

Теге Зәйнизе лә... Бөгөн төндә
Йозаҡ ватып алып ҡасҡандар!
Сафый, Ирғәле лә, Әхмәт тә юҡ...
Моғайын, шулар йозаҡ ватҡандар.

Һылыуҡай

Ҡасһындар һуң... Ҡотолһондар әйҙә...

Ишбай

Беләһең бит, улар ҡыҙылдар!

Һылыуҡай

Булһындар һуң!..

Ишбай

Эй, һин ни аңлайһың?
Атай, атай!
Нисек быны алдан белмәнек?
Шул Зәйнизе ниңә, тотоп алғас,
Үзебеҙ генә бөтөрөп ҡуйманыҡ.

Һылыуҡай

Ниңә көйөнәһең? Әллә һиңә
Ер өҫтөндә урын етмәйме?
Ниңә былар үҙҙәренән яҡшы
Бөтә кешеләрҙе этләйҙәр?!

Ишбай

Аңла, иҫәр, бына хәҙер улар
Ҡыҙылдарға барып ҡушылыр.
Унан ҙур көс менән килерҙәр ҙә
Беҙҙән үс алырға тотоноп.

Һ ы л ы у ҡ а й

Алһындар һуң, ҡырып һалһындар.
Миңә барыбер.
Хатта үҙем дә йәл түгел.

И ш б а й

Ах, һаташҡан, иҫәр, көйөк.
Был атайым ҡайҙа йөрөй,
Йә, ни эшләйек?

И ш б а й югереп сығып китә. А л м а ҡ а й инә.

А л м а ҡ а й

Атаҡ, атаҡ!.. Был нимә эшләп ята?
Илайһыңмы? Әле иларһың!..
Бына инде һин дә, минең кеүек,
Ҡарт бер бисә булып ҡалырһың.

Һ ы л ы у ҡ а й

Ысынмы был?!

А л м а ҡ а й

Ысын! Төптө ысын!..
Мин ризалыҡ бирҙем бабайға.

Һ ы л ы у ҡ а й

Йә, тын, етәр!
Ҡарҡылдама бында.
Йөрәгемә ауыр былай ҙа!..

А л м а ҡ а й

Ауырмы ни? Мин дә илағайным,
Һин йәш кәләш булып килгәндә.

Күрмәгәйнең минең йөрәк ите
Утлы күмер булып көйгәнде.

Һылыуҡай

Етәр, тием!..

Алмаҡай

Һин дә иҫкерҙең шул. Бына хәҙер
Йәп-йәш, матур, уңған ҡыҙ ала.
Ә уртансы бисә иң кәрәкһеҙ,
Иң ҡәҙерһеҙ була донъяла.
Эйе, мәйтәм, үҙем өлкән бисә — хужа.
Гөлбәҙәркәй һөйгән кәләш була.
Ә һинә, тим, ни ҡала?! Хи-хи!..
Һин кем, тим? Һин кем?..
Шул хаҡта уйлап ҡара!..

Һылыуҡай
*(ни эшләгәнен белмәй һикереп тора)*

Минме, мин кемме? Мин һинең ғазраилең!
Иманыңды уҡы, йәнеңде алам, йәнең!..

Алмаҡай

Абау, абау, бөттө, бөттө!..

Һылыуҡай

Ҡәһәр һуҡҡыр, ер йотҡоро, дөмөккөрө!..

Ҡыуышып сығып китәләр.

*Шаршау*

### 4-се күренеш

**Көҙгө төн.** Ауыл осонда кескәй ситән өй — Тимербулаттың өйө. Ишек алдында, усаҡта, саҡ ҡына ут емелдәй. Усаҡ алдында, түмәр өҫтөндә, моңайып, уйланып Г ө л б ә ҙ ә р ултыра.

Г ө л б ә ҙ ә р

Зәйниҙәрҙең ҡасып китеүенә өс ай үтте.
Йылдай өс ай...
Беҙҙең баштан күпме ҡайғы, хәсрәт кисте...
Зәйниҙән бер хәбәр ҙә юҡ...
Ҡасҡан көндө ҡыуып еттек, үлтерҙек, тип,
Ишбай унда маҡтанғайны...
Дөрөҫ микән ни шулай уҡ?!
Харрас көн дә яусы ебәрә.
Тынғы бирмәй ата-әсәмә.
Гөлбәҙәрҙе миңә бирмәһәң, ти,
Нәҫел-ырыуың ерҙә йәшәмәҫ!..
Ах, ҡурҡыныс икән был донъя!..
Нисек шуны беләлмәй йәшәнем?
Нисек уйнап, көлөп, бейеп йөрөнөм?
Нисек тамағыма ашаным?!
Бер яғымда аслыҡ, яланғаслыҡ,
Ҡайғы, хәсрәт, нужа ажғыра.
Бер яғымда ҡомһоҙ, ҡанһыҙ байлыҡ.
Ҡот осорғос Харрас — аждаһа!

Өйҙән аламаға төрөнгән Г ө л ш а т сыға.

Г ө л ш а т

Атайыңды аҡтар ала яҙҙы.
Ауырыулыҡтан ҡалды.
Әле йөрөй, бахыр, эш эҙләп.
Һылыуҙарыңды әйтәм, йәшәмәҫтәр.
Астан үлеп бөтөр берәмләп...

Г ө л б ә ҙ ә р

Ҡуйсы, әсәй, улай һөйләмәсе,
Эш табылыр әле, эшләрбеҙ.

Гөлшат

Эшһеҙҙәр ҙә, астар ҙа күп хәҙер.
Белмәйем беҙ инде ни эшләрбеҙ?!
Хәҙер инде һылыуҙарың түгел,
Мин үҙем дә күпкә түҙмәмен.

Гөлбәҙәр

Әсәкәйем, ҡуйсы!..

Гөлшат

Бына бөгөн мин дә, атайың да
Бер ҡабым да аҙыҡ еймәнек...
Аңла, ҡыҙым, хәҙер ҡотолорға
Бүтән бер сара ла ҡалманы.

Гөлбәҙәр

Ниндәй сара, әсәй?

Гөлшат

Беләһеңдер... һине аҡтыҡ көнгә...
Аҡтыҡ көскә хәтле һаҡланыҡ...
Ишетәһеңдер, хәҙер һылыуҙарың
Икмәк! Икмәк!— тиеп илайҙар.
Был зарҙарҙы ишетеп һинең дә бит
Әҙ булһа ла йөрәгең һыҙлайҙыр?!

Гөлбәҙәр

Был ни һүҙең, әсәй?

Гөлшат

Һинең арҡаңда бит был аҙаптар.
Һинең өсөн Харрас эштән ҡыуҙы.
Һинең өсөн этләй атаңды.

Һине һаҡлайбыҙ тип йотлоҡ, юҡлыҡ
Елкәбеҙгә менеп атланды.

Гөлбәҙәр

Ҡуй, һөйләмә, әсәй,
Ниңә был һүҙ?
Былай ҙа бит ауыр йөрәккә.

Гөлшат

Һөйләмәҫ тә, иҫкә лә алмаҫ инем.
Аслыҡ, ҡыҙым, аслыҡ һөйләтә.
Бына иртән һылыуҙарың тағы,
Икмәк һорап, үкһеп иларҙар.
Хәл ҡалманы, ҡыҙым, хәл ҡалманы.
Был зарҙарға бүтән сыҙарға.

Гөлбәҙәр

Ни эшләргә һуң?

Гөлшат

Һин ҙур инде, ҡыҙым...
Күптән тейеш аҡылың етергә.
Бер юл инде...

Гөлбәҙәр

Ниндәй юл ул?!

Гөлшат

Харраска бар.
Ризалыҡ бир. Етәр, ҡарышма.

Гөлбәҙәр

Ҡуй, һөйләмә, әсәй,
Үлһәм — үләм.
Бара алмайым яуыз Харраска.

Гөлшат

Улай булһа, ҡыҙым, һин тик һаман
Үҙ-үҙеңде генә уйлайһың.
Туғандарың, әсәң ас интегә,
Һин беҙҙе һис һанға һуҡмайһың.
Йәнһеҙ икәнһең һин, Гөлбәҙәр.
Юкка ғына һине йәлләнем.
Юкка ғына күптән Харрас байға
Ҡатынлыҡҡа һине бирмәнем.

Гөлбәҙәр

Әсәй, тим бит, туҡта!

Гөлшат

Туҡтамайым.

Гөлбәҙәр

Зинһар, туҡта!

Гөлшат

Һуңғы һүҙем булыр, Гөлбәҙәр.
Хәлем бөттө, аҡтыҡ көнөм етте.
Уйла, ҡотҡар, балам Гөлбәҙәр!
*(Тәнтерәкләп инеп китә.)*

Гөлбәҙәр

*(яңғыҙ. Тәрән уйланып)*

Ҡотҡар, балам, ти ул?
Ҡотҡарырға?!
Нисек ҡотҡарайым?!
Шул Харрасҡа нисек барайым?
Юҡ, юҡ, булмай!..
Үлһәм үләм... уға бармайым!..
Үлһәм үләм... Еңел юл ул үлеп ҡотолоу.
Ҡеше булһаң, һин, Гөлбәҙәр, уйла,

Әсәйеңде астан ҡотолдор!
Ҡалай итеп?..
Зәйни тере булһа,
Нисек тә бер юлын табыр ине...
Мине лә был Харрас тырнағынан
Нисек тә ҡотҡарып алыр ине.
Юҡ инде ул. Хәҙер ҡайтмаç бер ҙә...
Бында аҡтар... Тормош иçкесә...
Ерҙе-һыуҙы бер үҙҙәре биләп,
Байҙар йәшәй һаман элеккесә.
Ә беҙгә һуң?! Юҡ, юҡ, бер ни ҙә юҡ!
Әйҙә инде мине һатһындар...
Эй һин, йөрәк, нисек ярылмайһың,
Шундай шомло яҙмыш ҡаршында?!

Хәлһеҙ юткеренеп, артҡы ҡапҡанан Т и м е р б у л а т ҡайтып инә. Г ө л б ә ҙ ә р гәйепле кеше шикелле, уға күренмәç өсөн, югереп өйгә инеп китә.

Т и м е р б у л а т

*(ишек төбөнә барып)*
Әсәһе, тим, әсәһе, сыҡ әле, тиҙ!..

Г ө л ш а т

Нимә булған, тағы нимә бар?

Т и м е р б у л а т

Харрас минең өçтән донос биргән...
Большевик тип яла яғалар.

Г ө л ш а т

Китсе, китсе, ул ниндәй һүҙ тағы?!
Булыр унан!.. Алла һаҡлаһын...

Т и м е р б у л а т

Һаҡлау ҡайҙа, әсәһе, белдем инде...
Аллаһы ла байҙар яҡлы.

Урлаһа ла, хурлаһа ла
Үлтерһә лә байҙар хаҡлы!..

Гөлшат

Тағы яла яға. Тағы бәлә.
Уға инде нимә етмәйҙер.
Нисек шундай ҡара йөрәктәргә
Был ер сыҙай, йотоп бөтмәйҙер.

Тимербулат
*(серле)*

Рудник эшселәре, отряд төҙөп,
Урал төпкөлөндә ята, ти.
Шулар инде был аҡтарҙы төндә
Ҡайҙа күрһә шунда ата, ти.
Әле һаҡсыларын үлтерәләр.
Әле ҡорал тартып алалар.
Бөтә ерҙә, ауыл, рудниктәрҙә
Аҡтарға, ти, ҡурҡыу һалалар.

*(Көләп.)*
Белеп торалар, ти, бөгөн аҡтар
Ҡайҙа бара, нимә эшләрен.
Шунан инде кәрәк саҡта ғына
Емерә һуғалар, ти, тештәрен.

Гөлшат

Ҡара, нисек!..

Тимербулат

Имеш, шунда минең ғәйеп тә бар.
Һәр көн барам, имеш, тауҙарға.
Һөйләп бирәм, имеш, аҡтар серен
Тауҙарҙағы ҡыҙыл яуҙарға...

Гөлшат
*(ҡурҡып)*
Әллә ысынлап та...
Был арала өйҙә тормайһың.

Т и м е р б у л а т

Эш эҙләп бит йөрөйөм... Нисек инде
Ошоғаса шуны белмәйһең?..

Г ө л ш а т

Беләм дә ни...

Т и м е р б у л а т

Белгәс... Бына хәҙер
Ҡитмәй булмаç унда, урманға.
Йәшәп булмаç, көн күрһәтмәç Харрас
Аҡ бандиттәр бында булғанда.

Г ө л ш а т

Беҙ ни эшләрбеҙ бында?..

Т и м е р б у л а т

Ә һин ҡурҡма.
Ҡыҙылдар бит етеп килә, ти.
Өфө яғында ла ҡыҙыл ғәскәр
Дошмандарҙы ҡыра, еңә, ти.
Йә, әсәһе, хуш бул. Мин китәйем.
Юҡһа, килеп тотоп алырҙар.

Г ө л ш а т

Хуш, атаһы, хәйерле юл һиңә...

А ҡ о ф и ц е р менән а ҡ һ а л д а т килеп сыға.

О ф и ц е р

Әһә, Тимербулат!.. Бына ҡайҙа?!
Нисек бөгөн өйҙә торған ул?
Беҙ эҙләйбеҙ уçал разведчикте.

Ә ул бына ниндәй булған ул?!
Әйҙә, атла!

Тимербулат

Ҡайҙа?

Офицер

Ҡиттек әйҙә беҙгә, штабҡа.

Тимербулат

Унда минең ни кәрәгем булған?
Ни бар миңә һеҙҙең штабта?!

Офицер

Күп һөйләнмә, атла, һине унда
Начальниктәр күптән көтәләр.
Ҡыҙылдарға беҙҙең пландарҙы
Еткермәҫ, ти, һинән бүтәндәр.

Тимербулат

Эй аллаҡай, ниндәй план ти ул?
Ҡайҙан беләйем ти планды?

Офицер

Партизандар нисек белеп тора
Беҙҙең ниндәй план ҡорғанды?

Тимербулат

Мин ғәйепһеҙ...

Гөлшат

Ҡуй, теймәгеҙ, уға!..

Офицер

Молчать, тиҙәр!..

Гөлбәҙәр
*(өйҙән атылып сыға)*

Атайым ғәйепһеҙ!..

Тимербулат

Ялынмағыҙ, ташла!..

Һалдат

Атла!.. Атла!..

Офицер

Ҡем ғәйепле, унда күрербеҙ.

Тимербулатты алып китәләр. Гөлбәҙәр менән Гөлшат, ни эшләргә белмәй, телһеҙ ҡатып ҡалалар.

Гөлшат

Гөлбәҙәркәй, ҡыҙым, ни эшләйбеҙ?
Атайыңды улар үлтерер.
Атайһыҙ ҙа ҡалһаҡ, беҙ ни эшләрбеҙ?
Беҙҙең хәлебеҙгә кем керер?

Гөлбәҙәр
*(ҡапыл ниндәйҙер ҡарарға килеп)*

Әсәй, бар, тиҙ Харрас байға югер.
Гөлбәҙәр, тиң, риза, һиңә бара, тиген.

Гөлшат

Юҡ, юҡ, балам, хәҙер теләмәйем...
Барма уға, ундай яуызға.

Г ө л б ә ҙ ә р

Тиҙ бул, әсәй!..

Г ө л ш а т

Уға ышанмайым.
Ҡотҡармаҫ ул, һине алыр ҙа!..

Г ө л б ә ҙ ә р

Бар, тим, әсәй, ярай, күп һөйләнмә!
Ҡушҡан эште эшлә, ҡарышма!..

Г ө л ш а т

Эй балаҡай, игелек күрә алмаҫһың
Ул яуызға хәҙер барып та...

*(Илай-һыҡтай сығып китә.)*

Г ө л б ә ҙ ә р

Бына... Барыһы бөттө... Мин еңелдем...
Мин ризалыҡ бирҙем Харрасҡа!..
Юлдарыма мең-мең тоҙаҡ ҡорҙо.
Көсөм етмәй инде бармаҫҡа!..
Риза булдым... Ә ул атайымды
Ҡотҡарырмы?.. Әгәр алдаһа?!
Мин ни эшләрмен, әгәр ҡотҡармаһа?!.

*Шаршау*

## ӨСӨНСӨ ШАРШАУ

### 5-се күренеш

Сымылдыҡлы, бай йыһазлы өй. Харрас байҙың өйө. Ян бүлмәлә шау-шыу. Туй бара. Ҡ у н а ҡ т а р был бүлмәгә инеп-сығып йөрөйҙәр.

Іеңгә
*(урын йәйә)*

Бына инде бөтәһе лә әҙерләнгән,
Түшәктәрҙең иң ҡәҙерлеһе йәйелгән.
Мамыҡ мендәр, мамыҡ түшәк, ебәк юрған...
Сымылдыҡ та хатта ебәктән тегелгән.
Бөтәһе шәп. Тик йәш ҡыҙҙы
Әрәм итеүе яман.
Ай-һай, боҙолдо заман.

Еңгә сығып китеүгә, Х а р р а с менән С ә л м ә н ян бүлмәнән сыға.

Харрас

Йә, Сәлмән бай, күрәһеңме,
Эштәр нисек барып сыҡты?
Нисегерәк сыҡты бит, әй!..
Хи-хи...

Сәлмән

Шәп инде, шәп!..
Ай-һай уҫал икәнһең, әй!..
Ҡыҙҙы тәки эләктерҙең...
Ай-яй-яй-яй!
Ҡөтмәгәйнем, көтмәгәйнем...
Ошондай бер бола саҡта!..

Алдың-артың уйламаның.
Кешеләр нисек ҡарар тип тә торманың.

Харрас

Нимә уйларға?
Нимәнән ҡурҡырға?
Тормош әле һаман беҙҙең ҡулда.
Алда ла ул шулай булыр...
Әле мин ишеттем аҡтар хәҙер
Өфөнө лә барып алғандар.
Ҡыҙылдар ти, хәҙер бөтә яҡлап
Аҡтар ҡамауында ҡалғандар.

Сәлмән

Шулай тиҙәр ҙә бит... Белен булмай...

Харрас

Ә Гөлбәҙәр алла биргән бүләк. Беләһең!..

Сәлмән

Хи-хи... Алла бирә инде ул,
Харрас хәтле Харрас теләгәс!..

Харрас

Йә, ярар, бар, ҡорҙаш, һыйлан, көлмә!..

Сәлмән

Хи-хи!.. Ҡәләшең ҡасып китмәһен...
Абай бул төндә.

Харрас

Уныһы булмаç. Ҡасан сысҡан
Бесәй тырнағынан ҡотолған?..

Сәлмән

Беләм, беләм!.. Хи-хи!..
*(Сыға.)*

Харрас

*(икенсе ишеккә)*

Еңгә, еңгә!.. Ин әле, ин!

Еңгә

Нимә бар, ҡәйнеш?

Харрас

Гөлбәҙәр, ни, әҙерме әле?

II еңгә

Әҙер, әҙер. Ҡейендерҙек...
Һәйбәт булды.
Тик бына алдауың ғына
Насар булды.
Атайыңды ҡотҡарам тип,
Алдап алдың.
Йә бит инде ҡыҙҙы янған
Утҡа һалдың!..

Харрас

Ҡуй, ҡуй, еңгә ул уйыңды, ташла, төңөл.
Ул беҙгә төҫ була торған кеше түгел.
Ҡыҙым һиңә барғансы астан үлһен, ти.
Ҡеше түгел. Һин кешеләр ашаусы, ти.
Ҡыҙыл бит ул! Ә һин, уны ҡотҡар, тиһең.
Ул бит Зәйниҙәй үк ҡараҡ, белмәйһең һин.

II еңгә

Ярай инде, уныһын, йә үҙең ҡара.
Әсәһе лә туйҙа юҡ бит... Насар ҙабаһа!..

Харрас

Хәҙер килер. Ҡуштым уны алып килергә.

Еңгә сығыуға, Аһылбай Гөлшатты төрткөләп тигәндәй алып инә.

Аһылбай

Бына, ағай, алып килдем. Ҡарыулаша!
Бармайым да, күрмәйем тип, ҡырталаша.

Харрас

Ярар, бар, сыҡ.

А һ ы л б а й

Этеп, төртөп, һөйрәкләп, саҡ алып килдем.

Х а р р а с

Ярай, белдем.

А һ ы л б а й

Әжере, бай?

Х а р р а с

Бар, һуңынан!

А һ ы л б а й

Алмайынса сығып булмай инде, бынан.

Х а р р а с

Һай, һаҫыҡ таҙ! Мә, ал инде.
Оятты ла, әҙәпте лә белмәйһең һин!

*(Аҡса бирә.)*

А һ ы л б а й

Һин ғәйепле. Был ҡылыҡҡа
Һинән, ағай, өйрәндем мин.

*(Ҡыуанып сығып китә.)*

Г ө л ш а т

Нимә бар, бай? Мин нимәгә кәрәк булдым?

Х а р р а с

Уҙ-уҙ, ҡәйнәм, йә, һәйбәтләп һөйләшәйек.
Асыуҙы ҡуй, ташла. Татыу бер йәшәйек.

Гөлшат

Тағы нимә?

Харрас

Мин үҙеңде хәҙер тағы эшкә алырмын.
Элеккесә, утарымда һыйыр һауырһың...
Шулай булғас, һиңә тағы нимә етмәй?
Еткән ҡыҙы кемдең һуң кейәүгә китмәй?

Гөлшат

Әйҙә, кинән. Тимербулат үлер.
Һин яптырған тынсыу төрмәлә.
Ҡотҡарыр тип атаһын, һиңә ышанып,
Гөлбәҙәрем ҡулыңа эләгә.

Харрас

Етәр, етәр, тәтелдәмә, телеңде тый?
Бар, ҡунаҡ бул, һине көтә унда ҙур һый.

Гөлшат

Һый нимәгә, һин иң элек иремде ҡотҡар!
Яла япма, ғәйепһеҙгә үлтертмә, отҡоп.

Харрас

Ирең сығыр... Сығарырҙар, ҡыҙың ҡушылғас.
Хи-хи, сәбәләнһә сәбәләнер аҙаҡ, эш уҙғас...

Гөлшат

Эй оятһыҙ, эй иманһыҙ, йөҙөң ҡара.
Шулай һөйләшергә нисек телең бара?
Эй-й, кем ҡулына эләкте бит бала, бала!..
*(Илап сығып китә.)*

Х а р р а с

Нисек ғорур, бынынһы ла, һай, асыулы.
Нимәгә таянып уның был шашыуы?
Риза түгел. Алдандым, ти, ҡыҙҙы биреп.
Булмаһаң ни, ҡыҙың хәҙер ҡулда минең.
*(Йырлап, бейеп, ҡунаҡтар яғына сыға.)*

Туй бара. Күңелле, шәп туй.
Харрас йәш кәләш ала.
Был донъяла ашап-эсеп,
Уйнап-көлгәнең ҡала.

Ҡыҙҙар, еңгәләр ҡыҙҙы
алып инәләр.

I еңгә

Әйҙүк, әйҙүк, түрҙән уҙ, киленкәй.
Ҡейәүкәйең көтәлер, киленкәй.
Йөҙөң айҙай, күҙең күлдәй
Балҡып торһон, киленкәй.
Әйҙүк, әйҙүк, түрҙән уҙ, киленкәй.
Аҡ сымылдыҡ эсенә, киленкәй.
Ҡейәүең бай, матур, олпат.
Һин бәхетле, киленкәй.

II еңгә

Һүҙсән булма, тыңлаусан бул,
Эшлекле бул, киленсәк.
Күҙсән булма, оялсан бул,
Әҙәпле бул, киленсәк.
Күп йоҡлама, күп ашама,
Егәрле бул, киленсәк.
Иргә олтораҡ, ҡәйнәңә ҡол
Булыу кәрәк, киленсәк.
Булма оҫҡор, һөйләнсәк!

I еңгә

Аяҡ-ҡулың уң булһын,
Уландарың ун булһын.

Ауыҙың тулы бал булһын,
Ҡәртәң тулы мал булһын,
Ирең һөйгән йәр булһын,
Үҙең һөйгән ер булһын,
Әйҙә, түрҙән уҙ, килен.
Ошо төп йортоң һинең.

Г ө л б ә ҙ ә р

Рәхмәт арыу һүҙегеҙгә.
Уҙмаһамсы түрегеҙгә.
Ҡоштай осоп, ирекҡә мин
Юғалһамсы, күҙегеҙҙән.

II е ң г ә

Бушты һөйләмә, килен,
Бай ир алғанға һөйөн.
Улай һауалы булма,
Ошолай йәп-йәш көйө.

I е ң г ә

Йәгеҙ, ҡыҙҙар, уйнап-көлөп,
Килен күңелен асығыҙ.
Таҡмаҡ әйтеп, зыр әйләнеп,
Тыпылдатып баҫығыҙ.

Гөлбәҙәрҙе уртаға алып әйләнәләр.

Ҡ ы ҙ ҙ а р

Эйе, йәгеҙ, бейешәйек.
Нимәгә беҙгә көйөк.
Бәхетлеләр генә бара
Кейәүгә теләп, һөйөп.
Гөлбәҙәркәй, ҡуй, бошонма,
Төш таҡмаҡҡа баҫырға.
Уйнап-көлөп, бейеп алһаң
Янған йөрәк баҫыла.
Йә, Гөлбәҙәр, бейей һал.
Йә, әхирәт, бейеп ал!

Гөлбәҙәр башта һалмаҡ, күңелһеҙ, унан ярһып, сәмләнеп бейеп ала.

Ҡыҙҙар

Беҙгә ҡайтыр саҡ етте.
Хуш, иҫән бул, Гөлбәҙәр.
Янма, көймә, ҡартҡа барған
Бер һин түгел, Гөлбәҙәр!
Ваҡыт етте, ҡайтып киттек,
Яңғыҙ ҡалдың, Гөлбәҙәр.
Сабырлы бул, ата-әсәңә
Ҡайғы булма, Гөлбәҙәр.

Гөлбәҙәр

Хуш, дуҫтарым, һау булығыҙ,
Шат йәшәгеҙ, барығыҙ.
Уйнап-көлөп ултырғанда
Мине иҫкә алығыҙ.

Еңгәләр

Хуш, иҫән бул, киленсәк,
Хәҙер кейәү киләсәк.
Ә беҙ хәл белербеҙ әле
Тағы килеп иртәнсәк.

Гөлбәҙәр

Китеп бөттө барыһы...
Хуш бул, Зәйни...
Ҡомһоҙ Харрас мине алды инде.
Яҙғы гөлдәй көләс бала сағым
Мәңгелеккә тороп ҡалды инде.
Харрас алды мине... Ни һөйләйем?..
Бирелмәмен уға тереләй.
Эй хоҙайым, көс бир, батырлыҡ бир,
Үс алырға унан еңелмәй.

Күкрәгенән хәнйәр алып ҡарай. Илай. Асыу менән атылып, Һылыуҡай инә. Аҙаҡ Гөлбәҙәрҙең илағанын күреп йомшара.

Һ ы л ы у ҡ а й

Ниңә илайһың, һин, Гөлбәҙәр?

Г ө л б ә ҙ ә р

*(һыҫҡәнеп, хәнйәрен күкрәгенә йәшерә)*

Иламайым.

Һ ы л ы у ҡ а й

Илайһың бит... Бында килмәҫ инең,
Аҡылың булһа әгәр.

Г ө л б ә ҙ ә р

Мин ни эшләй алам? Мин ирекһеҙ!

Һ ы л ы у ҡ а й

Ҡас һин бынан, ҡас һин алыҫҡа!..

Г ө л б ә ҙ ә р

Ҡайҙа, нисек!?

Һ ы л ы у ҡ а й

Эйәрле ат тора...
Һеҙ йәшәгән теге утарҙа.
Үҙем уға менеп ҡасмаҡсы инем,
Ошо өйгә бөгөн ут төртөп...
Әле килдем, туҡта, һинең менән
Ҡарайым тип башта һөйләшеп.

Г ө л б ә ҙ ә р

Ысынмы был, апай?!

Һ ы л ы у ҡ а й

Ысын, ысын, бар тиҙ, югер.
Атлан да сап тура көньяҡҡа.

Унда ҡыҙылдар, ти, Зәйни ҙә, ти,
Беләһеңме, тере... Шул яҡта!..

Гөлбәҙәр

Ни ишетәм? Зәйни тере, тере!..
Зәйни тере, ниңә үләйем?!
Апай, йәнем, атҡа менәйем дә,
Зәйни ҡайҙа — шунда еләйем!..

Һылыуҡай

Эйе, бар, бар!..

Гөлбәҙәр

Хуш, апаҡай, рәхмәт!..

Ҡашмау, еләндәрен һыпырып ташлап, югереп сығып китә.

Һылыуҡай

Хәйерле юл!

Харрас

*(ишек артынан)*

Эһем... Эһем... Ваҡыт инергә...

Һылыуҡай

Рәхим ит, ин, өҙөлөп көтәм һине,
Ашығып көтәм һөйөп-үбергә!..

Харрас

*(Гөлбәҙәр урынында Һылыуҡайҙы күреп, аптырап)*

Бәй, мин кемде күрәм?! Ниндәй эш был?!

Һылыуҡай

Ҡартыҡайым, мине күрәһең!..

Х а р р а с

Ҡайҙа ҡуйҙың Гөлбәҙәрҙе, ҡайҙа?..
Әйт, тиҙерәк!.. Юҡһа, үләһең!..

Һ ы л ы у ҡ а й

Гөлбәҙәрме?.. Ҡасты. Алыҫ ҡасты...
Тәләмәне тереләй үлергә!
Һин хурлыҡҡа ҡалған был көндә лә
Насип булған икән күрергә!..

Х а р р а с

Ҡайҙа ҡасты? Ҡайҙа йәшерҙең һин?!
Әйт тиҙерәк!..

Һ ы л ы у ҡ а й

Үлтер, әйтмәйем!..

Х а р р а с, ни эшләгәнен белмәй, уға ташлана. Иҙәнгә һалып быуа башлай.

Әйт, ҡайҙа ул?! Әйт!.. Әйт!..
Һылыуҡай, тим!.. Бына, бына һиңә!..

Быуа, аҙаҡ, иҫенә килеп, ҡурҡып һикереп тора.

Һылыуҡай, тим, ниңә әйтмәйһең?!
Өндәшмәйһең ниңә? Туҡта... Туҡта...
Әллә ысынлап та үлде инде?..
Үлде... үлде... Эй, ни, Алмабикә!..
Сыҡ әле, сыҡ, бында, Алмаҡай!..

А л м а б и к ә йүгереп сыға.

А л м а б и к ә

Нимә булған? Мин нимәгә кәрәк?
Ниңә саҡыраһың, бабаҡай?!

Х а р р а с

Һылыуҡайҙы... ҡара... Аҫылынған...
Бауҙан сисеп алдым... Тик һуңланым...
үлгән.
Үҙен-үҙе үлтергән көнсөлөктән...
*(Шашып, йүгереп сығып китә.)*

Эй, Аһылбай, аттар ҡайҙа, аттар!
Гөлбәҙәрҙе ҡыуып етәйек!

А л м а б и к ә

Эй хоҙайым, бер ни аңламаҫһың...
Был ҡарт шашҡан, тамам ҡоторған!..

*(Һылыуҡайҙы тартҡылап.)*

Эй һин, һыйыр!.. Тор, тим!..
Абау, абау, ысынлап та, бахыр, үлгән бит!..
Тәүбә, тәүбә!.. Бахыр, йә, кем өсөн...
Йә кем өсөн йәнен биргән бит?!
*(Илап, баш осона теҙләнә.)*

*Шаршау*

## ДҮРТЕНСЕ ШАРШАУ

### 6-сы күренеш

5-се күренеш менән был күренеш араһында бер йыл ваҡыт үткән. Ауылда ҡасып барған Колчаҡ ғәскәрҙәре урынлашҡан, Ишбай ҙа улар составында. Харрас байҙың ишек алды. Бында штаб урынлашҡан. Шаршау асылғанда, А л м а б и к ә өйҙән бер сығып, бер инеп йөрөй. И ш б а й шунда, ишек алдына уҡ ҡуйылған өҫтәлдә карта ҡарай. Ул прапорщик кейемендә.

А л м а б и к ә

Ишбай улым, оҙаҡҡа ҡайттыңмы?

И ш б а й

Юҡ, юҡ, әсәй, китеп барабыҙ.

Алмабикә

Ҡайҙа, улым?

Ишбай
*(асыуланып)*

Ер сигенә!..

Алмабикә

Абау, ниңә улай алыҫ, балаҡай?

Ишбай

Ҡасып барабыҙ беҙ!..

Алмабикә

Китмә, улым, бында, өйҙә ҡал.
Һылыуҡай ҙа үлде...
Бер үҙең бит... Донъя һиңә ҡала...
Ҡәләш ал.

Ишбай

Әй әсәкәй, бөттө инде өйҙә тороу.
Ошо инде беҙҙең нәҫел-тоҡом ҡороу...

Алмабикә

Ҡуйсы, улым, улай тимә, өмөт өҙмә!..

Ишбай

Ҡыҙылдар бит, әсәй, бында етеп килә.
Беҙҙекеләр бөтә ерҙә ас эт кеүек,
Ас бет кеүек ҡырыла... үлә...
Чапай ҡыуып килә беҙҙе хәҙер.
Зәйни ҙә, ти, унда командир.
Гөлбәҙәр ҙә һалдат булған, тиҙәр...
*(ҡул һелтәп)*

Йә, ҡуй инде... Хәҙер барыбер...

Алмабикә

Абау, абау!.. Беҙ ни эшләрбеҙ, улым?
Улар беҙгә үсле... Асыулы!..

Ишбай

Бер генә юл:
Бар донъяны ташлап,
Беҙҙең менән бергә ҡасыуы.
Бар, әҙерлән, әсәй, тиҙ бул, йәһәт!..

Алмабикә

Тимербулат та бит беҙҙән яман
«Үс алам!»— тип иткән ҡәһет.

Сыға. Ашығып аҡ офицер инә.

Офицер

Хәлдәр нисек, Ишбай? Разведчиктәр
Ниндәй яңылыҡтар килтерҙе?

Ишбай

Хәл шәп түгел, капитан, беҙ ҡамалдыҡ.
Ҡәһәр һуҡҡыр ошо төпкөлдә!..
*(Ҡартаға күрһәтеп.)*
Күрәһегеҙ, бына, тар ғына юл.
Ҡыҫыҡ, тиҙәр уны был яҡта.
Һулдан — тауҙар, уңдан — ташҡын йылға...
Ҡамап алынған юл ян-яҡтан.

Офицер

М-да... Хәлдәр...

Ишбай

Ҡаяларҙа пулемет... Ҡыҙыл отряд...
Партизандар унан аталар.

Улар күптән беҙҙең отрядтәрҙе
Шул ҡыҫыҡта ҡырып яталар.

Офицер

М-да... Хәлдәр... Алда партизандар...
Арттан Чапай, эшсе полктар...
Ә мин ышанғайным... Һин бындағы...

Ишбай

Бер генә юл. Ул да — ҡыҫыҡтан!

Офицер

Йырып үтеү... йә ҡырылыу... тиһең?..

Ишбай

Берҙән-бер юл.

Офицер

Ярай, ҡарарбыҙ.
Отряд әҙер булһын... Бәлки, таңда
Һиҙҙермәйсә үтә алырбыҙ...

Ишбай

Белмәйем шул.

Офицер

Бар, әҙерлән!.. Һуҙма!

Ишбай

Отряд арыған... Йоҡлай... ялҡты...

Офицер

Дошман тапап килә... Ниндәй ял ул?..
Бар, бар, үтә тиҙерәк бойороҡто!

Ишбай сыға.

Офицер

М-да... Хәлдәр!..
Ҡисә төндә күпме һалдат ҡасты...
Ҡорал талап беҙҙән ҡастылар.
Бөгөн көндөҙ... Көпә-көндөҙ тауҙа
Дозорҙарҙы атып йыҡтылар...
Партизандар шаша... Һиҙенәләр
Ҡыҙылдарҙың етеп килеүен.

ялдат Тимербулатты төрткөләп алып инә.

Һалдат

Ҡапитан әфәнде, бына тотоп алдыҡ,
Теге яуыздарҙың берәүһен!

Офицер

Ҡайҙан тоттоң?

Һалдат

Аттар эргәһендә...
Өҙөп йөрөй ине теҙгендәр...
(*Сыға.*)

Офицер

Тимәк, беҙҙе атһыҙ ҡалдырмаҡсы!..
Аңлашыла ҡорған тоҙағы!..

Тимербулат

Юҡ, әфәндем, хата... Бушты әйтә.
Ҡулым теймәне лә бер атҡа.

Һеҙ айыумы, йәки бүреме әллә
Эләгергә минең тоҙаҡҡа?!

Офицер

Молчать, ҡараҡ!.. Һөйлә, партизандар
Нисек урынлашҡан ҡыҫыкта?
Күпме улар? Ҡасан, нисек унан,
Үтеп була ошо ҡыҫыҡтан?
Юкһа, беләһеңме?..
Ҡых!.. И бөттө!..
*(Үҙенең муйынын ҡул менән ҡырҡып күрһәтә.)*
Ә һөйләһәң, юлды асып бирһәң,
Беләһеңме, бер ат алырһың.
Ат кәрәк бит һиңә...
Ат бирәм, тим...
Ишетәһеңме,
Атлы булып ҡалырһың.

Тимербулат

Мин белмәйем бер ни... Мин ҡарт кеше...
Юнләп күрмәй хәҙер күҙем дә...

Офицер

Белдерермен!.. Йолҡош!..

Һалдат
*(инеп)*

Байҙар килде.

Офицер

Ә, байҙармы?.. Инһен, инһендәр!..

*(Тимербулатҡа.)*
Ә һиңә биш минут. Уйла!..

Байҙар инә.

Х а р р а с

Шәпме, әссәләмәғәләйкүм, капитан!

С ә л м ә н

Һаумы, әфәндем!..

О ф и ц е р

Әйҙүк, байҙар, әйҙүк...

Х а р р а с

Бына һеҙгә әҙерәк аҡса йыйҙыҡ.

С ә л м ә н

Илле-алтмышлап ат та йыйылды.

Х а р р а с

Эйе, әфәндем, беҙҙән — аҡса, аттар...
Һеҙҙән — еңеү бөтә хаинде!..

С ә л м ә н

Ислам дине өсөн.

Х а р р а с

Батша өсөн!..

О ф и ц е р

Рәхмәт, байҙар, рәхмәт, муллалар!..

Х а р р а с

Беҙҙән — аҡса, аттар, һеҙҙән — еңеү.
Тырышығыҙ, тырыш, уландар.

Тимербулат
(*ирония менән*)

Өстәүенә, бай, һин доға ла ҡыл.
Юҡһа, эштәре хөрт уларҙың.

Харрас

(*таныпп*)

Бәй, был Тимербулат!.. Тотолдоңмо?!
Биргәненә шөкөр алланың!

Офицер

Таныйһыңмы әллә уны һин, бай?

Харрас

Танымай ни... Ул бит фетнәсе.
Бер йыл элек төрмәнән ҡасты ул...
Партизандарҙа, ти, етәксе.

Сәлмән

Дөрөҫ, дөрөҫ, бальшәүник ул төптө.
Партизан ул!.. Нисек эләккән?..

Харрас

Хатта уның ҡыҙы Гөлбәҙәр ҙә
Ҡыҙылдарҙа йөрөй хеҙмәттә.

Тимербулат
(*ғорур*)

Эйе, ҡыҙым — батыр ҡыҙыл һалдат.
Һаҡ булығыҙ, тиҙҙән ул килер,
Мин үлһәм дә, хәҙер һеҙҙең менән
Нисек һөйләшергә ул белер.

Офицер

Молчать, тиҙәр!..
*(Байҙарға.)*
Йә, хушығыҙ, байҙар!

Харрас

Һеҙ, әфәндем, уны аҫығыҙ!

Сәлмән

Шулай, шулай!

Харрас

Я - һу, алла, тамуғыңда яндыр кафырҙы.

Сығалар.

Тимербулат

Үҙ башыңа ҡарған, ҡара ҡарға!..

Офицер
*(һалдатҡа)*
Әйҙә, таш һарайға алып киттек,
Унда ирең бик тиҙ һөйләшер.

Һалдат
Әйҙә, атла!..

Офицер

Йәһәт ҡуҙғал!..

Тимербулат

Ҡарарбыҙ, кем кемде һөйләтер!?

Ҡапыл яҡында ғына гөрһөлдәп туп ярыла. Уның артынан бик йыш пулемет таҡылдай башлай. Офицер менән һалдат аптырап, ҡаушап ҡалалар.

Т и м е р б у л а т

Беҙҙекеләр ата!..
Ишетегеҙ, улар киләләр!..

О ф и ц е р

Молчать, һарыҡ!..

Һ а л д а т

Ни эшләтәбеҙ, быны?!

Т и м е р б у л а т

Беҙҙекеләр... киләләр!.. Ҡыҙылдар!

О ф и ц е р
*(ата)*

Бына, уға, әйҙә тығылһын!

Йығыла. Һалдат ҡаса. Офицер, ҡайҙа ҡасырға, нимә эшләргә белмәгәндәй, икеләнеп тора. Шул саҡ, үҙенән ҙур төйөнсөк күтәреп, А л м а б и к ә, кескәйерәк һандыҡ күтәреп, Х а р р а с бай өйҙән йүгереп сыға.

**А л м а б и к ә**

Уй, ғәләмәт! Уй, киәмәт!
*(Артҡа, аҙбар яғына йүгерә.)*

Ишбай, улым, аттар! Аттар!

Х а р р а с
*(һандығын күкрәгенә ҡыҫып)*

Ах, алтындарым! Ҡөмөштәрем!
Байлығым, байлығым, аллам!

Ҡайҙа йүгерергә белмәй.

Офицер
*(аңына килеп)*

Алтындарың?! Көмөштәрең?
Бир, үҙемә бир!

Харрас

Юҡ-юҡ! Ах, аллам!

Тартышалар. Аҡ офицер Харрасты атып йыға.

Офицер

Алтының — минең дә аллам!
*(Һандыҡты ҡосаҡлап ҡаса.)*

Атыш яҡынлаша. Гөлшат менән ҡыҙылармеец кейемендә Гөлбәҙәр килеп сығалар.

Гөлшат

Әйҙә, ҡыҙым, әйҙә, атайың ошонда!

Гөлбәҙәр

Ах, атайым!..

Гөлшат

Үлгән!.. Үлтергәндәр!..

Гөлбәҙәр

Абау, атаҡайым, йәнем!..

Илайҙар. Ошо ваҡыт йүгереп Ишбай ҡайтып инә

Ишбай

Атай, әсәй!.. Тиҙ булығыҙ, әйҙә!
Бер генә юл ҡалды... Арт ҡапҡанан...

Гөлбәҙәр
*(ҡапыл һикереп тора)*

Әһә, Ишбай!.. Туҡта, алдашаһың!..
Һеҙгә инде бер юл ҡалмаған!..

Ишбай

Ҡемде күрәм?! Был һин!..
Гөлбәҙәрме?!

Гөлбәҙәр

Йә, аҡ бандит, күтәр ҡулыңды!..
*(Наган төҙәй.)*

Ишбай

Шаяраһың!..

Гөлбәҙәр

Күтәр, тиҙәр!.. Йәһәт!..

Ишбай

Мә, һиңә бер пуля!..
*(Ата, тейҙерә алмай.)*

Гөлбәҙәр

Татып ҡара минең пулямде!..

*(Ата, Ишбай йығыла.)*

Ишбай

Ах, яуыз... ҡыҙ!..

Ҡыҙыл командир кейемендә Зәйни һәм ҡыҙылармеец кейемендә Сафый, Ирғәле югереп инәләр.

Зәйни

Гөлбәҙәр, Гөлбәҙәркәй, һин ҡайҙа?
*(Атыша-атыша килеп инә.)*

Гөлбәҙәр

Атайымда!
*(Илай.)*

Гөлшат

Тимербулат ағайынды.
*(Илай.)*

Зәйни

*(Улар янына йүгереп бара. Теҙләнә)*

Ҡорбан! Ҡорбан!

Гөлбәҙәр

Ҡилеп етә алманыҡ, ҡотҡара алманыҡ,
Ҡисер, атай, йәнем!

Сафый

*(Сәлмән байҙы елтерәтеп алып инә)*

Зәйни, бына бүре!

Ирғәле

*(Аһылбайҙы төрткөләп алып инә)*

Ә бына был һарыҡ!

Сафый

Ни эшләтәбеҙ, Зәйни?

Зәйни

Алып китегеҙ, халыҡ хөкөм итер.

Сәлмән

Зәйни ҡустым, ғәфү ит...

Аһылбай

*(Зәйниҙең аяғына йығылып)*

Мин ғәйепһеҙ, мин сараһыҙ.

Зәйни

Ах, ерәнгес, ялағай!

Сафый, Ирғәле Сәлмән менән Аһылбайҙы алып сығып китәләр.

Атлағыҙ, әҙәм аҡтыҡтары!

Атыш бара. Ҡояш ҡалҡа, ҡояш фонында Ленин һүрәте төшөрөлгән ҡыҙыл байраҡ елберҙәп ҡалҡа.

Зәйни
*(ярһып)*

Бына, дуҫтар, ҡояш күтәрелде,
Нурға күмде бөтә илде.
Күп һыҡтаған еребеҙгә
Ирек, бәхет, шатлыҡ килде.
Еңеү менән, иптәштәр!

Һалдаттар

Ур-ра!

Зәйни

Беҙ — рус, башҡорт — дуҫ, бер яҡлы,
Ленин юлы — беҙҙең хаҡлыҡ.

Гөлбәҙәр
*(Зәйни янына барып баҫа)*

Батша, байҙар бер ҡасан да
Тарҡата алмаҫ ҡыҙыл сафты.

Зәйни

Алға, һуңғы яуға, иптәштәр!

Һалдаттар

Ур-ра! Алға!

*Шаршау*

27422
БИБЛИОТЕКА
объединенного гр фкома
Учалинского ГОК

## Йөкмәткеһе

Ил йөрәген тойоусы күңел 5

ШИҒЫРҘАР
ЙӘШӘҮ — ХЕҘМӘТ

Йылдар, йылдар . . . . . 21
Йәшәү бәхете . . . . . . 23
Йырлайым . . . . . . . 23
Йәшәү — хеҙмәт . . . . . 25
Бәхет өләшәм . . . . . 26
Бына, беҙҙекеләр! . . . . . 28
Йырлама һин, тиҙәр . . . 30
Теләк . . . . . . . . . . 32
Кәңәш . . . . . . . . . . 33
Ашкынма ла, диңгеҙ... . . . 34
Нындәй өн был?! . . . . . 36
Халык күңеле . . . . . . 38
Йырҙарым . . . . . . . . 39
Һыҙланма, күңел . . . . . 40
Онотолмаҫ йәшлек . . . . 41
Беҙҙең йәшлек . . . . . . 43
Һаклаэсендә... . . . . . . 44
Һыҙланма, дуҫ! . . . . . . 45
Еңел түгел . . . . . . . 46
Мактанырға яраткан дуҫка . . . . . . . . . 47
Һандуғас . . . . . . . . 48
Ышанмайым күҙгә . . . 49
Тағы ла яҙ... . . . . . . 50
Йәшәр инем . . . . . . . 51
Кешесә . . . . . . . . . 53

ЙӨРӘК ҺҮҘЕ

Һина һөйөү, ышаныс йөрәктә . . . . . . . . 55
Яҙға оҡшатам мин... . . . 56
Башҡортостан . . . . . . 57
Байрам бөгөн . . . . . . 58
Коммунистәр партияһы . 60
Дан һиңә, Тыуған илем . 61
Алдымда Ленин . . . . . 62
Мәскәү — башҡала . . . . 64
Ҡыҙыл майҙанда . . . . . 65
Октябрь килде . . . . . . 66
Ҡуш ҡарағай . . . . . . 67
Беҙҙең менән... . . . . . . 68
Башҡорт теле . . . . . . 69
Рус теленә . . . . . . . 70
Һағыныу . . . . . . . . 71
Дуҫтарға . . . . . . . . 73

ЙЫРҘАР

Ленин, Ленин! . . . . . . 74
Маҡтау йырла, шағир! . . 75
Даны ҡайтты . . . . . . 76
Ҡара алтын . . . . . . . 77
Йырлап алайым әле . . . 78

ЙӘШЛЕК ДӘФТӘРЕНӘН

Һөйәм, тиһең . . . . . . 79
Ҡайҙа ул? . . . . . . . . 80
Үкенмәйем . . . . . . . 81
Гүзәл йыр көйөк . . . . 82
Килмә инде . . . . . . . 83
Ниңә? . . . . . . . . . . 84
Булмаһа . . . . . . . . . 85

Хәтеремдә . . . . . . . 86
Бошонма . . . . . . . 87

БАҒЫШЛАУҘАР

Ғүмер . . . . . . . . . 88
Ҡыш . . . . . . . . . 89
Ижад — бәхет . . . . . 90
Яҙғы йыр . . . . . . . 91
Халҡың янһа—яндың бергә . . . . . . . . . 93
Яңы йыл ҡотлауы . . . 94
Улыма . . . . . . . 95
Моң дарьяһы . . . . . 96
Урап үтһен... . . . . . 97

ТӨРТМӘ ҺҮҘ ҺӘМ МӘҪӘЛДӘР

Көнсө дусҡа . . . . . . 98
Түрә . . . . . . . . 99
Буш ҡыуыҡ . . . . . . 100
Өйләнеү түгел — һөйләнеү (Туҡайға эйәреп) . . . . . . . . 101
Яңғыҙ сыйырсыҡ яҙ килтермәй . . . . . . . 104

ПОЭМАЛАР

Гөльямал (шиғри повесть) . . . . . . . . 109
Гөлбәҙәр (драматик поэма) . . . . . . . . . 205

*Биишева Зайнаб Абдулловна*

ИЗБРАННЫЕ ПРОИЗВЕДЕНИЯ

Том I

Стихи, поэмы

*(на башкирском языке)*

Редакторы *Ғ. А. Дәүләтов*
Художник-оформителе *А. А. Астраханцев*
Техник редакторы *А. Я. Горбачева*
Корректоры *Р. М. Закирова*

---

*Наборға бирелде 8/XII 1968 йыл. Баҫырға ҡул ҡуйылды 27/VI 1969 йыл. Ҡағыҙ форматы 84×108 1/32. Физ. баҫма таб. 9,0. Шартлы баҫма таб. 15,12. Учет.-изд. таб. 12,10. Тиражы 5000 экз. П07636. Изд. № 120. Заказ № 536. Хаҡы 1 һум 42 тин.*

*Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы эргәһендәге Матбуғат идаралығының Башҡортостан китап нәшриәте. Өфө-25, Совет урамы, 18.*

---

*Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы эргәһендәге Матбуғат идаралығының Өфө полиграфия комбинаты. Өфө-1, Октябрь проспекте, 2.*